# BASHKIR FOLK ARTS

## BASHKIR ANIMAL FOLK TALES

# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

## СКАЗКИ О ЖИВОТНЫХ

# BASKURT HALK FOLKLORU

## HAYVANLAR HAKINDA BASKURT HALK MASALLARI

Издательство
КИТАП
имени
Зайнаб
Биишевой

УФА - [illegible]

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

## XIII ТОМ

## ХАЙУАНДАР ТУРАҺЫНДА ӘКИӘТТӘР

Зәйнәб Биишева исемендәге "КИТАП" нәшриәте

ӨФӨ • 2009

**УДК 821.512.141-34**
**ББК 84-4 (2 Рос=Баш)**
**Б 28**

Мөхәрририәт:
Ғайса Хөсәйенов (баш мөхәррир), Гөлнур Хөсәйенова (баш мөхәррир урынбаҫары), Фәнүзә Нәҙершина, Розалиә Солтанғәрәева, Фирҙәүес Хисаметдинова, Миңлеғәли Нәҙерғолов, Айбулат Псәнчин, Ринат Йосопов, Әхмәт Сөләймәнов, Зөфәр Тимербулатов

Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә авторы – Гөлнур Хөсәйенова
Аңлатмалар – Лев Бараг, Марат Минһажетдинов, Гөлнур Хөсәйенова
Томдың яуаплы мөхәррире – Фәнүзә Нәҙершина

Күсереп баҫҡанда томға һылтаныу мотлаҡ

Редакционная коллегия:
Гайса Хусаинов (главный редактор), Гульнур Хусаинова (зам. главного редактора), Фануза Надршина, Розалия Султангареева, Фирдаус Хисамитдинова, Минлегали Надергулов, Айбулат Псянчин, Ринат Юсупов, Ахмет Сулейманов, Зуфар Тимербулатов

Составитель, автор вступительной статьи – Гульнур Хусаинова
Комментарии – Лев Бараг, Марат Мингажетдинов, Гульнур Хусаинова
Ответственный редактор тома – Фануза Надршина

**При перепечатке ссылка на том обязательна**

**Башҡорт халыҡ ижады:** 13-сө том. Хайуандар тураһында әкиәттәр.–
Б 28 Өфө: Китап, 2009. – 200 бит.
ISBN 978-5-295-04690-2 (Т. 13)
ISBN 5-295-01393-6

Хайуандар тураһындағы башҡорт халыҡ әкиәттәре күптомлыҡта беренсе мәртәбә үҙ аллы том рәүешендә баҫыла.
Китапҡа халҡыбыҙ репертуарынан яҙып алынған әкиәттәр ингән.

**УДК 821.512.141-34**
ТП - 175/09 **ББК 84-4 (2 Рос=Баш)**

**ISBN 978-5-295-04690-2** (Т. 13)
**ISBN 5-295-01393-6**

© Хөсәйенова Г. Р., төҙөү, 2009

## Мөхәрририәттән

«Башҡорт халыҡ ижады» тупланмаһының сираттағы томы халҡыбыҙҙың хайуандар тураһындағы әкиәттәрен тәшкил иткән репертуарҙы мөмкин тиклем тулыраҡ күҙалларға булышыр тигән ниәттән сығып төҙөлдө.

Башҡорт халыҡ әкиәттәренең был жанры беренсе тапҡыр ҙур күләмдә ун һигеҙ томлыҡ тупланманың 1976 йылда донъя күргән беренсе китабында сағылыш тапты. (Төҙөүселәре Марат Минһажетдинов менән Әхнәф Харисов.) Әлеге йыйынтыҡҡа шул томда баҫылып сыҡҡан хайуандар тураһындағы әкиәттәр барыһы ла, шулай уҡ архивта, юғары уҡыу йорттарының фольклор фондтарында һаҡланған яңы текстар, инде.

Китап шартлы рәүештә ике өлөштән – миф-әкиәттәрҙән һәм хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙән – тора. Томдың аңлатмалар бүлегендә һәр текстың ҡасан, ҡайҙа, кемдән, кем тарафынан яҙып алыныуы күрһәтелде. Шулай уҡ әкиәт сюжеттарының халыҡ-ара күрһәткестәр буйынса ҡайһы әкиәт ниндәй сюжет тибына ҡарауы, ҡайһы халыҡтарҙа уның параллелдәре булыуы, шулай уҡ милли өрлектә яҙып алынған варианттары тураһында мәғлүмәттәр бирелде.

# ХАЙУАНДАР ТУРАҺЫНДА ӘКИӘТТӘР

Донъялағы бүтән халыҡтарҙағы кеүек, башҡорттарҙың да ауыҙ-тел ижадында хайуандар тураһында әкиәттәр әһәмиәтле урын алып тора һәм фольклорҙың боронғо жанрҙарынан һанала. Һан, күләм яғынан улар тылсымлы, тормош-көнкүреш әкиәттәренән күпкә ҡайтыш, шулай ҙа малсылыҡ, һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ менән шөғөлләнгән халыҡта, заманында, моғайын, улар күберәк булғандыр, тип уйларға урын бар. Нигеҙҙә, XX быуат башында ғына етди йыйыла башлаған әкиәттәрҙең күбеһе, күрәһең, беҙҙең көндәргә килеп етмәй, юғалыуға дусар булғандыр. Күләме яғынан ҙур булмаған, еңел отоп алына торған хайуандар тураһында әкиәттәрҙә, ғәҙәттә, теге йәки был төбәктә тереклек иткән йәнлектәр төп персонаждар булараҡ сығыш яһай. Урал–Волга буйҙарында йәшәгән халыҡтар әкиәттәрендә, нигеҙҙә, төлкө, бүре, айыу булһа, төрөкмәндәрҙә, мәҫәлән, бүре урынында йыш ҡына шакал сығыш яһай һәм ишәк, джейран, юлбарыҫ, арыҫлан кеүек кейектәр ҙә күберәк урын ала. Төньяҡ халыҡтарының әкиәттәрендә иһә навага, кит, морж, краб кеүек һыуҙа йәшәгән һәм болан, аҡ айыу кеүек, шул климатҡа яраҡлашҡан хайуандарҙы күрәбеҙ, ә ғәрәп әкиәттәрендә беҙҙәге айыу менән бүре урынында шакал менән пантераны осратабыҙ, йәғни сюжет бер булһа ла, төп геройҙар төрлө-төрлө. Әйтәйек, беҙҙең башҡорт әкиәттәрендә бүреке, айыуҙы төлкө төп башына ултыртһа[1], эскимостарҙа был функцияны песец (аҡ төлкө) үтәй[2]; башҡорт әкиәттәрендә кәзә ҡуяндың йортон баҫып алһа, әтәс ҡыуып сығарыусы булһа, хант әкиәттәрендә[3] тәлмәрйен бурундукты йортһоҙ ҡалдыра, ә айыу тәлмәрйенде ҡыуып сығара.

---

[1] Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. Беренсе китап. Төҙ. М. Минһажетдинов, Ә. Харисов. Инеш мәҡәлә авторы М. Минһажетдинов. Аңлатмалар Лев Бараг менән Марат Минһажетдиновтыҡы. – Өфө, 1976. – № 3, 12, 13.

[2] Эскимосские сказки и мифы / Сост., предисл. и примеч. Г. А. Меновщикова. – М., 1988. – С. 46–50.

[3] Мифы, предания, сказки хантов и манси/ Сост., предисл. и примеч. Н. В. Лукиной. — М., 1990. № 96, 97.

Беҙҙә хайуандар тураһындағы әкиәттәр жанры әлегә монографик планда өйрәнелмәгән, әммә иғтибарға лайыҡ етди ғилми күҙәтеүҙәр бар. Башҡорт әкиәттәрен өйрәнеү тарихында хронологик тәртипте һаҡлап, булған хеҙмәттәрҙе барлаһаҡ, уларҙың ҡайһы берҙәрендә һүҙ барған жанр тураһында үтә ҡыҫҡа ғына мәғлүмәт биреү осраҡтары күҙәтелә. Проф. Н. К. Дмитриев, мәҫәлән, үҙенең А. Г. Бессонов йыйынтығына[4] яҙған инеш мәҡәләһендә китапта хайуандар тураһында әкиәттәр жанрына ҡараған ике генә текстың урын алыуын билдәләп үтеү менән сикләнгән.

Һуңыраҡ, 1959 йылда Ә. Харисовтың[5] хайуандар тураһындағы әкиәттәргә ҡарата әйткән фекерҙәре лә үтә йыйнаҡ, әммә улар үҙҙәренең әһәмиәтен бөгөнгө көндә лә юғалтмаған (мәҫәлән, әкиәт йөкмәткеһендәге анимистик ҡараш саҡҡылары, кинәйәлек мәсьәләһе йәнә ниндәй кейектәр йыуаш һәм ниндәйҙәре яуыз зат булып сығыш яһауҙары, хайуандарҙың кешеләргә хас сифаттар менән һүрәтләндерелеүе һәм хатта кешеләр тормошондағы социаль мөнәсәбәттәрҙең дә хайуандар көнкүрешенә күсерелеүе).

М. Минһажетдиновтың мәҡәләһе[6] башҡорт фольклористикаһында әкиәт жанрҙарын өйрәнеү өлкәһендәге тәүге әһәмиәтле хеҙмәттәрҙән һанала. Ғалим унда хайуандар тураһындағы башҡорт әкиәттәре хаҡында ла һүҙ алып бара. Мәҫәлән, хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең боронғо дәүерҙә мифологик хикәйәләр рәүешендә йөрөүен, тора-бара, кеше аңының үҫеүе һөҙөмтәһендә, боронғо мифологияның тәүге мәғәнәһен юғалтыуын һәм аллегория функцияһын үтәй башлауҙарын билдәләй. Шулай уҡ уларҙа «иң боронғо мотивтар менән бер рәттән сағыштырмаса яңыраҡ тыуған мотивтар» булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала, ҡайһы бер сюжет типтарына (АА 56 С + 248* В, АА 235, АА 75 + 99, АА 100 + 124) характеристика бирә, башҡорт әкиәттәрендәге төлкө образын ентекле анализлай, айыу, бүре, ҡуян һ. б. персонаждарҙы ла телгә ала.

Һүҙ барған жанр өлкәһендә уңышлы ғына эш башлаған, тик, кыҙғаныска ҡаршы, ғүмере иртә өҙөлгән йәш ғалим Р. Ильясов-

---

[4] Дмитриев Н. К. Введение // Башкирские народные сказки. Запись и перевод А. Г. Бессонова. Ред., введение и прим. действительного члена географического общества проф. Н. К. Дмитриева. - Уфа: Башгосиздат, 1941. - С. 27.

[5] Харисов Ә. И. Баш һүҙ // Башҡорт халыҡ ижады. 2 том. (Төҙ., ред., баш һүҙ авторы һәм иҫкәрмәләр биреүсе Ә. И. Харисов). - Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1959. - 9–10-сы биттәр.

[6] Минһажетдинов М. Х. Хайуандар тураһында әкиәттәр // Ҡәләмеңдә көҙрәт бар. (Төҙ., баш һүҙ авторҙары Т. Ә. Килмөхәмәтов, Ә. М. Сөләймәнов.) - Өфө: Китап, 1995. - 170–178-се биттәр.

[7] Ильясов Р. Ф. а) Башкирские сказки о животных//Советская тюркология, 1981. № 3. С. 14–24; б) Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә этиологик мотивтар//Башҡортостан уҡытыусыһы, 1981, № 9, 39–41-се биттәр; в) Сюжетный репертуар башкирских сказок о животных//Проблемы изучения башкирских литературно-публицистических и фольклорных источников. - Уфа, 1992. - С. 43–53.

тың[7] мәҡәләләре лә иғтибарға лайыҡ. Бер мәҡәләһендә ул хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең 90-лап сюжет тибы булыуын әйтеп үтә. Р. Ильясовтың шәхси архивында әлегә беҙгә мәғлүм булмаған сюжеттар һаҡланырға тейеш, сөнки 1976 йылда донъя күргән баҫмала ни бары 37 генә[8], рус телендә сыҡҡан томда 48 сюжет сағылыш тапҡан[9]. Тимәк, Р. Ильясовтың әйткәне хаҡ булһа, яҡынса тағы шул хәтлем сюжет тибы булырға тейеш һәм баҫылып сыҡҡан йыйынтыҡтарҙа репертуарҙың яртыһы ғына бирелгән тип уйларға урын бар.

Күләме һәм ғилми әһәмиәте яғынан Ф. А. Нәҙершинаның очеркы айырылып тора[10]. Автор унда башҡорттарҙың ғына түгел, себер, төньяҡ халыҡтарының, рус, белорустарҙың һ. б. халыҡтарҙың да хайуандар тураһындағы әкиәттәренә байҡау яһап, жанрҙың тарихи тамырҙарын асыҡларға тырыша, байтаҡ ғалимдарҙың хеҙмәттәренә таянып, ҡыҙыҡлы ғына күҙәтеүҙәр яһай.

Билдәле фольклорсылар Н. Т. Зарипов менән Л. Г. Бараг рус телендә сыҡҡан томда һүҙ барған жанр тураһында ҙур булмаған инеш мәҡәлә бирәләр. Унда томға ингән әкиәттәр, уларҙың бүтән халыҡтарҙағы параллелдәре, жанрҙың поэтик үҙенсәлектәре тураһында байтаҡ мәғлүмәт килтерәләр[11].

Аспирант Р. Аҡкүбәковтың хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең иң популяр төлкө образын өйрәнеүгә йүнәлтелгән мәҡәләһе[12] лә иғтибарҙы йәлеп итә. Уның күҙәтеүҙәре буйынса, башҡорт әкиәттәрендәге төлкө, нигеҙҙә, аҡыллы, хәйләкәр, сос, күп осраҡта еңеүсе, бер-ике әкиәттә генә («Төлкө менән бүҙәнә», «Төлкө менән һайыҫҡан») ул аҡылһыҙ, «Үс алыу», «Төлкө айыу өңөндә» әкиәттәрендә иһә уҫал, үс алыусан йән эйәһе, йәғни күп яҡлы, күп төрлө персонаж, шуға күрә ҡатмарлы образ булып күҙ алдына баҫа.

Ошо юлдар авторының «Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә тәрбиәүи мотивтар» исемле мәҡәләһендә һүҙ барған жанрҙың тағы бер аспекты яҡтыртыла[13].

---

[8] Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. Беренсе китап. Төҙ. М. Минһажетдинов, Ә. Харисов. – Өфө, 1976.

[9] Башкирское народное творчество. Волшебные сказки. Сказки о животных. Том 4. Сост. Н. Т. Зарипов. Вступ. статья, комментарии Л. Г. Барага и Н. Т. Зарипова. – Уфа, 1989.

[10] Нәҙершина Ф. А. Хайуандар тураһында башҡорт әкиәттәре // Башҡорт фольклоры: тикшеренеүҙәр, материалдар. – Өфө, 1993. – 26–48-се б.

[11] Башкирское народное творчество. Том 4. С. 15–21.

[12] Аккубеков Р. Ю. Образ лисы в башкирских сказках о животных // Башҡорт фольклоры: тикшеренеүҙәр һәм материалдар. Өсөнсө сығарылыш. Өфө: Ғилем, 1999. – 29–33-сө б.

[13] Хөсәйенова Г. Р. Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә тәрбиәүи мотивтар // Әҙәбиәт. Фольклор. Текстология. Өфө: БДУ нәшриәте, 2001. – 148–155-се б. б.

Өҫтә әйтелгәндәрҙән сығып, шундай һығымтаға килергә мөмкин: һүҙ барған жанр тураһында байтаҡ һүҙ әйтелгән, әммә шул фекерҙәрҙе киңәйтеп дөйөмләштергән монографик хеҙмәт яҙыу көп талабында ҡала килә, йәғни был жанр ентекле тикшеренеүсеһен көтә.

Томдың баш мәҡәләһендә жанрҙың өйрәнелеү кимәлен, сюжет составын байҡау, беҙҙең ҡарамаҡҡа әһәмиәтле тойолған, беренсе мәртәбә баҫылған сюжеттарға, образдарға ҡыҫҡаса туҡтап үтеүҙе бурыс итеп ҡуябыҙ.

Хайуандар тураһындағы башҡорт әкиәттәре репертуарында күренекле рус фольклорсыһы В. Я. Пропп билдәләгән бөтә төркөмдәр ҙә бар тиерлек: 1) йыртҡыстар; 2) йыртҡыстар менән йорт хайуандары: 3) кеше менән йыртҡыстар; 4) йорт хайуандары; 5) ҡоштар, ағастар һ. б. Шуныһын да әйтеп китергә кәрәк, башҡорт әкиәттәре араһында кешеләр һәм хайуандар тураһында, унан ҡала ҡырағай һәм йорт хайуандары тураһында сюжеттар киң таралған, ә һыу донъяһы вәкилдәре – балыҡтар тураһында бөтөнләй әкиәттәр юҡ (АТ 1 сюжет тибында һунар табышы булараҡ ҡына осрай), үҫемлектәр донъяһы персонаждары шулай уҡ хайуандар тураһындағы башҡорт әкиәттәрендә һирәк ҡунаҡ (ҡара: № 101–106). Түбәндәге таблица өҫтә әйтелгәндәрҙе раҫлай:

## Хайуандар тураһындағы башҡорт әкиәттәрен персонаждары буйынса төркөмләү

### 1. Ҡырағай хайуандар тураһында

| Әкиәттең № | Персонаждар |
|---|---|
| 31 | төлкө, бүре |
| 32 | төлкө, бүре |
| 35 | сысҡан, айыу, бүре, төлкө |
| 36 | сысҡан, ҡуян, төлкө, бүре, айыу |
| 41 | айыу, бүре, арыҫлан, төлкө |
| 45 | төлкө, айыу |
| 49 | айыу, төлкө, бүре |
| 52 | айыу, төлкө, бурһыҡ, бүре (һунарсылар)* |
| 53 | ҡуян, арыҫлан (төлкө, бүре) |
| 61 | ата бурһыҡ, инә бурһыҡ |
| 62 | өй сысҡаны, ялан сысҡаны |
| 90 | төлкө, төлкөләр батшаһы Хәйләбай, хайуандар батшаһы айыу, ҡуян, бүре, ҡор |
| 93 | Төлкөбикә, Бүребай |
| 95 | ҡуян, терпе |
| 98 | айыу, төлкө, бүре, ҡуян |

* Йәйә эсендә эпизодик персонаждар

## 2. Ҡырағай һәм йорт хайуандары тураһында

| Әкиәттең № | ҡырағай хайуандар | йорт хайуандары |
| --- | --- | --- |
| 34 | айыу, бүре, ҡуян, төлкө | эт, һыйыр |
| 42 | төлкө, бүре, юлбарыҫ | дөйә, ишәк (әбей, бабай) |
| 43 | бүре, төлкө, бурһыҡ | дөйә, ишәк (хужа) |
| 50 | айыу, бүре, төлкө | ат, һыйыр, сусҡа |
| 55 | айыу, бүре, төлкө | ҡара бесәй, һоро бесәй (әбей, бабай) |
| 56 | ҡуян, төлкө, бүре, айыу | бесәй (ҡарт, ҡарсыҡ, күрше) |
| 57 | төлкө, бүре, айыу, юлбарыҫ | бесәй (әбей, бабай) |
| 58 | ҡуян, төлкө, бүре | бесәй (әбей, бабай) |
| 59 | ҡуян, төлкө, бүре, айыу | бесәй (әбей) |
| 60 | бүре | кәзә, башмаҡ, тауыҡ |
| 66 | бүре | бесәй |
| 68 | бүре | эт, көсәк |
| 69 | убыр (бүре урынында) | кәзә, кәзә бәрәстәре |
| 70 | бүреләр | кәзә, һарыҡ (әбей, бабай) |
| 71 | бүреләр | кәзә, һарыҡ (әбей, бабай) |
| 72 | бүреләр | кәзә, һарыҡ |
| 73 | бүреләр | үгеҙ, тәкә, әтәс, һарыҡ, бесәй |
| 82 | бүре, төлкө | һарыҡ бәрәсе, эт |
| 87 | төлкө, бүре | Әтәсгол, Ҡаҙғәле, Мөгөҙбай |
| 92 | ҡуян, бүре, айыу | кәзә, әтәс |
| 106 | арыҫлан | ике үгеҙ |

## 3. Йыртҡыстар, йорт хайуандары һәм ҡоштар тураһында

| Әкиәттең № | йыртҡыстар, йорт хайуандары | ҡоштар |
| --- | --- | --- |
| 37 | — | һандуғас |
| 39 | төлкө | бөркөт |
| 44 | төлкө | һайыҫҡан, ҡарағош |
| 46 | төлкө | торна (һунарсылар) |
| 47 | төлкө | торна |
| 48 | төлкө | әтәс, тауыҡтар |
| 75 | бесәй, кәзә, үгеҙ, төлкө бүре, айыу | торна, өйрәк, әтәс |
| 91 | кәзә тәкәһе, үгеҙ, бесәй, төлкө, бүре, айыу | әтәс, ата ҡаҙ |
| 99 | сысҡан, бесәй | — |
| 100 | бесәй балаһы | тауыҡ, себеш |
| 103 | төлкө | ҡор |

## 4. Кешеләр һәм хайуандар тураһында

| Әкиәттең № | кешеләр | хайуандар | эйәрсән персонаждар |
|---|---|---|---|
| 28 | Байгужа, ҡарсыҡ | төлкө | балыҡ |
| 29 | балыҡсы | төлкө | балыҡ |
| 30 | балыҡсы | төлкө, бүре, бүҙәнә | балыҡ, ир, ҡатын, ауыл ҡатындары, эттәр |
| 33 | бабай | айыу, ҡуян, күгәүен* | ат |
| 38 | ҡарт, уның ҡыҙы | төлкө | |
| 40 | әбей, бабай | ат, төлкө, бүре | |
| 51 | кеше, улы | ҡуян | айыу, бүре, болан, төлкө |
| 54 | бабай, әбей | эт, бүре | |
| 55 | бабай, әбей | ҡара бесәй, һоро бесәй | |
| 59 | әбей | бесәй, ҡуян, төлкө, бүре, айыу | |
| 63 | ҡурсаҡ ҡатын | ҡарға, һайыҫҡан, сысҡан | |
| 64 | ҡурсаҡ ҡатын | сысҡан | ҡоҙалар |
| 65 | үгәй ҡыҙ, әбей, йылҡы көтөүсеһе, һыйыр көтөүсеһе, йәш кейәү, имсе әбей | сысҡан | |
| 67 | Әбүбәкер сауҙагәр | бүре, кәзә, тай | |
| 74 | ҡараҡтар | ишәк, эт, бесәй, әтәс | |
| 76 | егет | ас айыу, төлкө | |
| 77 | утынсы | йылан, эт, төлкө | |
| 78 | бабай | бүре, төлкө | |
| 79 | әбей, бабай | бүре, һыйыр, эт | аусылар |
| 80 | аусы | юлбарыҫ | |
| 81 | бабай, әбей | айыу | айыу балаһы |
| 83 | әбей, бабай, ҡыҙ, | быҙау, айыу, бүре, ҡуян | |
| 84 | бабай, әбей | айыу | |
| 85 | ҡарсыҡ, ҡыҙҙары | айыу | |
| 86 | утынсы | айыу балаһы (Дауыт пәйғәмбәр) | |
| 88 | өс фатир хужалары | төлкө | |
| 89 | әбей, әбей менән бабай | төлкө | |
| 94 | ҡатын, ир | төлкө, бүҙәнә | |
| 101 | Һан агай | әтәс | |
| 102 | Ғәлләметдин | әтәс | |
| 104 | утынсы, бесәнсе, ебәксенең ете ҡыҙы | кәзә тәкәһе, турғай, ҡарға | |
| 105 | әбей, бабай, ҡамыр малай | – | |

### 5. Тәбиғәт күренештәре һәм кешеләр тураһында

| Экиәттең № | тәбиғәт күренештәре | кешеләр |
|---|---|---|
| 96<br>93 | шишмә, ҡайындар<br>һыуыҡ, һалҡын | Айһылыу<br>бай, ярлы |

Башҡорттарҙың хайуандар тураһындағы экиәттәрендә йорт хайуандарының, йыртҡыстарҙың һәм ҡоштарҙың күп төрҙәрен күрергә мөмкин. Шулай ҙа аптыратҡан бер нәмә бар: башҡорт кешеһенең көнкүрешендә мөһим роль уйнаған йылҡы малы экиәттәрҙең был жанрында үтә һирәк осрай. М. А. Сакалиҙың күҙәтеүҙәренә ҡарағанда, малсылыҡ менән шөғөлләнгән, күсмә тормошонда мөһим урын тотҡан эт, ат, дөйә кеүек малдар төрөкмәндәрҙең хайуандар тураһындағы экиәттәрендә лә һирәк осрай һәм төп персонаж булып сығыш яһамай икән. Быының сәбәбен ул шулай аңлата:

«Тотемистик ҡараштар хөкөм һөргән мәлдә, был хайуандар (эт, ат, дөйә) ҡурғаусы ролен үтәгәндәр. Бәлки, шуның өсөн дә уларҙың исеме хайуандар тураһындағы экиәттәрҙә осрамайҙыр. Был хайуандар бит экиәттә ябай кешеләр һымаҡ сығыш яһарҙар һәм серлелектән азат ителерҙәр ине. Моғайын, ошо малсыны шикләндергәндер һәм был хайуандарҙы ул, ҡурсалаусы булыуҙан, уға хеҙмәт итеүҙән туҡтар тип ҡурҡҡандыр»[14]. Әгәр ҙә шулай булһа, тотемистик ҡараштарға ярашлы, изге хайуандар тураһында артығын һөйләү, күп осраҡта уларҙы үҙ исеме менән атау (мәҫ., айыуҙы – бабай, ҡуянды – ҡусты, йыланды – ҡамсы һ. б. тип йөрөткәндәр) ғына түгел, экиәттәрҙә уларҙы төп персонаж итеп алыу ҙа тыйылғандыр. Әммә шуныһы ғәжәпләндерә: этник яҡтан да, көнкүреше, кәсебе менән дә, йәшәгән урыны буйынса ла башҡортҡа һәм төрөкмәнгә яҡын булған ҡаҙаҡтарҙа иһә, киреһенсә, быңдай экиәттәр өсөн йылҡы малы – кәҙимге персонаж[15].

Дөрөҫ, «Күк ат» (№ 40) исемле башҡорт экиәтенең төп геройы – йылҡы малы. Уның ҡыҫҡаса йөкмәткеһе хәйләкәр төлкөнән дә хәйләкәр, аҡыллы булған аттың аңра бүрене төп башына ултыртыуын һүрәтләүгә ҡоролған. Ҡайһы бер реалияларына, атап әйткәндә, бүре тиреһен баҙарҙа аҡсаға һатыу мотивына ҡарағанда, был экиәттең һуңғыраҡ дәүерҙә ижад ителгәнлеге аңлашыла. Шуға ла бер генә сюжетҡа таянып, хайуандар тураһындағы башҡорт экиәттәрендә ат образы төп персонаждар рәтендә тора тип

---

[14] Сакали М. А. Туркменский сказочный эпос. – Ашхабад, 1956. – С. 49

[15] Турекулов Нысынбек. Современный казахский фольклор (жанрово-структурный анализ). – Алма-Ата: Мектеп, 1982. – С. 138.

əйтеп булмай, сөнки был әкиәттәге ат образы типик та, традицион да түгел.

Хайуандар тураһындағы әкиәттәр, өҫтә әйтелгәнсә, фольклорҙың боронғо жанрҙарынан һанала. Улар араһында боронғо кеше күҙлегенән хайуан һәм ҡоштарҙың килеп сығышын, тышҡы киәфәтендәге ниндәйҙер үҙенсәлекте, холҡона, йөрөшөнә хас берәй күренеште аңлатыуға ҡоролған сюжеттар йыш осрай. Бындай этиологик мотивтар мифтарҙы хәтерләтә. Алтай ғалимдары бындай сюжеттарҙы миф-әкиәттәр тип атайҙар[16]. Мәҫәлән, **АТ 161 В*** сюжетына ҡараған «Айыу менән ҡарт» әкиәтендә ҡарт менән ҡарсыҡ айыуҙың аяғын бешереп ашарға йыйына. Ғалимдар быны изге хайуандың берәй ағзаһын ашау йолаһы менән бәйләп аңлата[17]. Был иһә әкиәттең миф менән үрелеп китеүенә асыҡ миҫал. «Бүре ни өсөн айға ҡарап олой» әкиәтен шартлы рәүештә **АТ 163** (Пение волка) сюжет тибы тип билдәләргә мөмкин. Уның йөкмәткеһе буйынса, бүре йыр хаҡына ҡарттан бер-бер артлы хайуандарын тартып ала, хатта әбейҙе саҡ ашамай, ә башҡорт әкиәтендә иһә матур йырлаған бүрене төлкө: «Ай ҡыҙына бағышлап йырлаһаң, ул һинең яныңа төшә», – тип алдағанға, бүре көнө-төнө айға ҡарап йырлай торғас, тауышы бөтә, уның йырлауы йәмһеҙ олоуға әүерелә. Мифҡа тартым бындай әкиәттәр рәтенә өлөшләтә **АТ 294** (Месяцы и времена года) сюжет тибына ҡараған «Бүләк кемгә» (№ 21) әкиәтен дә ҡуйырға мөмкин. Унда ҡояш матурыраҡ, эштә батырыраҡ миҙгелгә бер ус йондоҙ бүләк итмәксе булып, иҫәпхисап ойоштора, әммә һәр миҙгел үҙенсә гүзәл булып сыҡҡас, «Ана, барығыҙға ла», – тип йондоҙҙарҙы күккә һибә.

Боронғо ышаныуҙарға нигеҙләнгән сюжеттар менән йәнәш хайуандарҙың, ҡоштарҙың ҡылыҡтарын күҙәтеүҙән барлыҡҡа килгән әкиәттәр йәшәүе лә мәғлүм. Мәҫәлән, әкиәттәрҙә төлкө һәр ваҡыт ит торлаҡты баҫып алырға тырыша. Һунарсыларға был йыртҡыстарҙың өңө эргәһендә бүтән йәнлектәрҙең өңө булмаған осраҡта ғына өң яһауы, кире осраҡта, икенсе көсө етерҙәй йәнлектең өңөн баҫып алыуы яҡшы билдәле. Былар, әлбиттә, халыҡтың күҙәтеүсәнлеге, тирә-яҡ донъяны образлы итеп күрә белеүе һөҙөмтәһе.

Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең сюжеты төп герой вазифаһын атҡарыусы йәнлектәрҙең, йыртҡыстарҙың үҙ-ара мөнәсәбәтләрен һүрәтләүгә ҡорола. Әммә хайуандар кешесә уйлай, һөйләшә. Малдарҙы, йыртҡыстарҙы шулай кешеләштереү ғәҙәте әкиәткә жанр йөҙөн төрләләндереү мөмкинлеге генә биргән. Беҙ был урында хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең байтағының аллегорик әҫәр төҫөн алыуын күҙ уңында тотабыҙ. Уларҙа хайуандың

---

[16] Памятники фольклора народов Сибири и Дальнего Востока. Алтайские народные сказки / Сост. Т. М. Садалова. Т. 21. – Новосибирск: Наука, 2002. – С. 26

[17] Там же. С. 45.

образы артында төрлө характерлы социаль типтарҙы, социаль ҡылыҡтарҙы тәҫмөрләй алабыҙ. Миҫал өсөн «Етем төлкө» (№ 34) әкиәтен генә алайыҡ. Төлкө образы артында яңы тыуған балаға исем ҡушыу вазифаһын башҡарыусы мәзинде һәм уның кеше хаҡын ашарға яратыуын самаларға була.

Әлеге томға хайуандар тураһындағы 60 сюжет тибына ҡараған 106 әкиәт алынды. Улар халыҡ-ара күрһәткестәге тәртип менән бирелде, йәғни **АТ 1**, **АТ 2**, **АТ 3** һ. б. Томда хайуандар тураһындағы әкиәттәр шартлы рәүештә ике төркөмгә: миф-әкиәттәргә һәм саф хайуандар тураһындағы әкиәттәргә бүлеп бирелә. Икенсе төркөм эсендә хайуандар тураһындағы мажаралы әкиәттәр төркөмсәһен дә айырып ҡарарға мөмкиндер, тип уйлайбыҙ. «Быҙау тураһында әкиәт» (№ 83), «Ҡурсаҡ ҡатын» (№№ 63, 64), «Сысҡан менән уның балаһы» (№ 99), «Ҡуян ҡунаҡта» (№ 98), «Һоросай менән Ҡарасай» (№ 55) һ. б. әкиәттәрҙе шул төркөмсәгә индерергә булыр ине. Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең сюжеты күп осраҡта хайуандарҙың үҙ-ара ҡаты тойолған бәрелештәренән ғибәрәт. Бының сәбәбе – ризыҡ табыу, бүлешеүгә ҡайтып ҡала. Тамаҡ тип йыш ҡына хайуандар үтә ҡаты, бәгерһеҙ эштәр ҙә ҡылалар (мәҫәлән, төлкө бүренең, бөркөттөң балаларын ашай, арыҫлан бүренең арт аяғын ҡабып йота һ. б.). Әйтелгәндәр был төр әкиәттәрҙә хайуандар образы артында кешеләр, хатта тотош ырыу торғанына ишаралай, тик улар үҙҙәренең тотемы сүрәтендә сығыш яһай. Йәнлектәрҙең үҙ-ара тынышмауы ла, ырыу-ара ыҙғыштарға барып тоташҡан һымаҡ һәм бәрелештә тик көслөләр, аҡыллылар, йәғни һайланғандар, еңә. Йәшәү өсөн көрәштә еңеп сығыуға ышаныс менән һуғарылған был типтағы әкиәттәрҙе саф хайуандар тураһындағы әкиәттәр итеп ҡарарға мөмкин. Грузин ғалимы Чолокашвили Р. К. шундай фекерҙә тора һәм беҙ уның менән килешәбеҙ[18].

Әкиәттәрҙең күбеһе төрлө йыйынтыҡтарҙа донъя күргән, әммә араларында беренсе мәртәбә баҫмаға әҙерләнгәндәре лә бар.

Хайуандар тураһындағы башҡорт әкиәттәр репертуарында ла, бүтән халыҡтарҙағы кеүек, халыҡ-ара киң таралған ҡарттың санаһынан балыҡ урлаған (СУС 1), балыҡ эләгә тип бүрене ҡойроғон ҡоҙоҡҡа тығып ултырырға өйрәткән (СУС 2), исем ҡушырға саҡыралар тип алдашып сығып, өй башында һаҡланған мискәләге майҙы урлап ашаған (СУС 15), бүрене һунар итергә өйрәткән (**АТ 8А***) төлкө, **АТ 126** сюжетындағы бесәй менән йыртҡыстар, **АТ 103** сюжет тибындағы ҡурҡаҡ бүреләр тураһындағы сюжеттар ҙур ғына урын ала.

Беҙҙең йыйынтыҡта халыҡ-ара күрһәткестәрҙә иҫәпкә алынып та, халыҡ әкиәттәре репертуарҙарында һирәгерәк осраған **АТ 47**

---

[18] Чолокашвили Р. К. Грузинский народный сказочный эпос о животных. Автореферат диссертации на соискание ученой степени канд. филол. н. – Тбилиси, 1985. – С. 6.

А, **АТ 50, АТ 155, АТ 159, АТ 212** сюжет типтарына ҡараған текстар ҙа бар.

Шулай уҡ күрһәткестә параллелдәре булмаған «Сысҡанға кейәүгә сыҡҡан ҡыҙ» (№ 63, 64, 65), «Бесәйҙән ярыҡ көршәк эсенә йәшенгән сысҡан» (№ 99), ҡунаҡҡа саҡырылып та ҡунаҡ була алмай ҡайтҡан ҡуян тураһында (№ 98) сюжеттар ҙа репертуарҙы байыта.

Тәүге баҫмала урын алмаған ҡайһы бер сюжеттарға туҡталып үтәйек.

«Сысҡанға кейәүгә сыҡҡан ҡыҙ» тураһындағы сюжеттың өс варианты тәҡдим ителде, сөнки уларҙың халыҡ-ара күрһәткестә параллелдәре билдәле түгел, текстар ҙа әһәмиәтле: бер үк сюжетҡа ҡараһалар ҙа, йөкмәткеләрендә мөһим үҙенсәлектәр бар.

Өсөнсө текстың параллеле төрөкмәндәрҙә лә бар. Тик унда ҡыҙ түгел, ҡуңыҙ сысҡанға кейәүгә сыға һәм ул башҡорт әкиәтендәге кеүек һаҙлыҡта батмай, ҡойоға төшә лә шунан ире сысҡанға хәбәр итеүҙәрен үтенеп ҡысҡыра. Шуныһы ҡыҙыҡ, ике халыҡта ла билдәле был сюжеттың һамаҡлап башҡарыла торған шиғри юлдары ла ауаздаш:

Хан туйына барһағыҙ, барһағыҙ,
Һуҡыр сысҡан күрһәгеҙ, күрһәгеҙ,
Һаҙға батҡан тиегеҙ, тиегеҙ, –

тигән юлдар башҡорт әкиәтендә урын алһа, төрөкмән әкиәтендә улар түбәндәгесә яңғырай:

Хан өйүне барарсыңыз,
Хандар хабар аласыңыз,
Сүйли бегиң нирделигини билерсиңиз,
Сүйли беги тиз гетирерсиңиз.

Шундай уҡ оҡшаш шиғри юлдар ир-сысҡандың ҡатынын ҡотҡарыу мәлендә лә яңғырай, ике осраҡта ла ир-сысҡан ҡатынына булған хистәрен аса.

| б а ш ҡ о р т | т ө р ө к м ә н |
|---|---|
| Эй, ҡатыным, ҡатыным,<br>Һин бит минең матурым,<br>Һин бит минең алтыным,<br>Бир ҡулыңды тартайым,<br>Һаҙлыҡтан сығарайым. | Гүлгүн-гуван адың сениң,<br>Арманлы гитдиң, ачып йүзүң,<br>Гөрмән галсам гүлүр йүзүң<br>Ничик чечер халым, Сенем? |

Ф. А. Нәҙершина ҡыҙ кешенең айыуға, сысҡанға, тәлмәрйенгә, ҡыҫалаға кейәүгә сығыуы хаҡында сюжеттарҙың эвенк әкиәттәрс

араһында ла булыуын әйтә[19]. **АТ 125** (Напуганные волки) сюжет тибына ҡараған әкиәттәрҙең дә өс вариантын да биреүҙе кәрәк тип таптыҡ. Тәүге текст региональ үҙенсәлеге менән иғтибарҙы йәлеп итһә (Учалы районындағы ауыл исемдәренең телгә алыныуы), икенсеһе персонаждар йәһәтенән ҡыҙыҡлы: көнсығыш славян халыҡтарының әкиәттәренән айырмалы рәүештә, башҡорт әкиәтендә һарыҡ урынында кәзә хәрәкәт итә, өсөнсө текст иһә тулыраҡ тамамланышлы булыуы менән әһәмиәтле.

Алдағы баҫмаларҙа урын алмаған **АТ 47 А** (Лиса привязывает волка к лошади) сюжетына ҡараған «Күк ат» әкиәте лә хайуандар тураһындағы башҡорт әкиәттәре репертуарын байытыуға өлөш индерә. Көнсығыш славян әкиәтендә төлкө бүренең муйынына элмәк һала ла, ат бүрене бауынан тотоп, төлкө ярҙамында бүрене ҡойроғонан үҙенең ҡойроғона бәйләп, хужаһының йортона алып ҡайта, ә башҡорт әкиәтендә бүре урынын күк ат ала.

**АТ 155** (Старая хлеб-соль забывается) сюжетының үрнәге – «Изгелеккә-изгелек» – әкиәт томдарының беренсе китабында урын алғайны инде. Ул кеше тарафынан үлемдән ҡотҡарылған йылан һәм кешене бәләнән ҡотҡарған хәйләкәр төлкө тураһындағы **АТ 155** сюжет тибының иң боронғо төрөнә ҡараған варианты.

Ошо уҡ сюжетҡа ҡараған «Хәйләкәр төлкө» (№ 88) әкиәте лә һүҙ барған сюжет тибының тағы бер үҙенсәлекле үрнәге. Бында иһә йылан урынында бүре, йәғни үҙен үлемдән ҡотҡарған кешегә ташланмаҡсы булған бүрене төлкө туҡтата һәм кешене ҡотҡара.

«Яҡшылыҡ тураһында» (№ 79) әкиәте лә һүҙ барған сюжетҡа ҡарай, тик бында, алдағы әкиәттән айырмалы, төлкө түгел, эт бәхәсте бабай файҙаһына хәл итә. Иҫкә алынған әкиәттәрҙең күп вариантлылығы был сюжеттарҙың халыҡ араһында таралған булыуына ишаралай. Мәҫәлән **АТ 155** сюжетына ҡараған текстар Күгәрсен, Стәрлетамаҡ, Баймаҡ райондарында яҙып алынған, ә **АТ 125** сюжетына ҡарағандары Йылайыр, Учалы яҡтарында теркәлгән.

**АТ 156** (Заноза в лапе медведя) сюжет тибына ҡараған әкиәттәрҙең дә әлегә тиклемге баҫмаларҙа урын алғаны юҡ. «Юлбарыҫ менән аусы» (№ 80) башҡорт әкиәте – һүҙ барған сюжет тибының әһәмиәтле варианты. Балаһын үлемдән ҡотҡарған һунарсыны юлбарыҫ рәхмәт йөҙөнән урманға килгән һайын уңышлы табыш менән тәьмин итә. Н. Андреев күрһәткесендәге 74* (Благородный лев) сюжет тибы күпмелер дәрәжәлә **АТ 156** менән ауаздаш: ике осраҡта ла кешенән изгелек күргән йыртҡыс уға рәхмәтле булып ҡала.

Томға шулай уҡ әлегә тиклемге йыйынтыҡтарҙа баҫылмаған **АТ 34 А** (Лиса или собака с костью в зубах кидается в воду за

---

[19] Нәзерщина Ф. А. Хайуандар тураһындағы башҡорт әкиәттәре // Башҡорт фольклоры: тикшеренеүҙәр, материалдар. – Өфө, 1993. – 28-се бит.

своим отражением) сюжет тибына ҡараған «Төлкө менән ҡыҙ» (№ 38) исемле әкиәт тә индерелде.

Күрһәткестәрҙә параллелдәре булмаған «Сысҡан менән уның балаһы» (№ 99), «Алдаҡсы себеш» (№ 100) әкиәттәре лә томды матурлар, моғайын. Бер үк сюжетҡа ҡараған, әммә персонаждары менән айырылған был әкиәттәрҙә абайламаҫтан бесәй тырнағына килеп эләккән һәм уны ҡунаҡҡа саҡырып ҡасҡан кескәй йән эйәһенең (сысҡан балаһы, себеш) әсәһе менән сатнаған көршәк эсенә йәшенеүҙәре һәм сабыйҙың сөскөрөүенән һауыттың ярылып китеүе, бесәйҙең ҡурҡып ҡасыуы тураһында мауыҡтырғыс итеп хикәйәләнә.

АТ 212 (Коза луплена) сюжет тибына ҡараған «Батыр әтәс» (№ 92) әкиәте лә хайуандар тураһындағы башҡорт әкиәттәре репертуарына яңылыҡ өҫтәй. Көнсығыш славян репертуарында киң билдәле был сюжет тотошлайы менән башҡорт әкиәтенә тап килә, әммә уларҙа был сюжеттың СУС 43 (Лубяная и ледяная хата) һәм СУС – 2015** (Козел и встречные животные) сюжет типтары менән контаминациялашыу осраҡтары ла күҙәтелә.

Әлеге томға ингән әкиәттәр араһында СУС-та урын алмаған контаминация типтары булыуы ла иғтибарҙы йәлеп итә. «Торна менән төлкө» (№ 46) әкиәте **АТ 60** һәм өлөшләтә **АТ 33** сюжет типтарының контаминацияһынан тора. Тик славян әкиәттәрендә төлкө үлгән булып ята, ә башҡорт әкиәтендә – торна, йәнә рус әкиәтендә улар соҡорҙа булһа, беҙҙә – тау тишегендә. «Бесәй» (№ 75) әкиәтенең дә контаминацияһы күрһәткестәге традицион контаминациялар иҫәбенә кермәгән: **АТ 130** (Зимовье животных) һәм **АТ 104** (Война домашних животных с дикими) сюжет типтарының контаминацияһы был осраҡта бик уңышлы ҡулланылған. Ғәҙәттә, контаминациялашҡан әкиәттәр ике өлөштән торған кеүек тойолһа (мәҫәлән, өҫтәге «Торна менән төлкө» әкиәте), бында иһә текст бер бөтөн һымаҡ, сюжеттар айырылып тормай: торлаҡ йүнәтеп йәшәп ятҡан йорт хайуандары ҡаршы тороп, йыртҡыстарҙы йорттарына индермәй.

М. Бикчуриндың китабынан алынған «Утынсы» (№ 86) әкиәте лә беҙҙең репертуарҙы байыта. **АТ 163 А*** сюжет тибына ҡараған был әкиәттең тарихи тамырҙары «Панчатантра»ға барып тоташа. Татар халыҡ ижадында ла аталған сюжет тибына ҡараған «Аю хезмәте»[20] исемле әкиәт бар. Уның шулай уҡ көнсығыш славян халыҡтары репертуарында ла урын алыуы билдәле.

Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә йыртҡыстар, мал-тыуар, йәнлектәр, ҡоштар кешеләрсә һөйләшә, йәшәй, кешеләргә хас холоҡ сифаттарына эйә. Шул уҡ ваҡытта әкиәт персонаждары

---

[20] Ярми Х., Җәлалетдинов Л. Хайваннар турындагы әкиятләр // Татар халык иҗаты. Әкиятләр. 1-нче китап. – Казан, 1977. – 61 бит.

хайуандар менән кешеләр араһына тигеҙлек билдәһе лә ҡуйып булмай. Был осраҡта художестволы оҡшатыу законы эшләй. Башҡа һыймаҫ оҡшатыуҙар, хәл-ваҡиғалар, персонаждарҙың хәрәкәттәре эстетик һоҡланыу, аптырау, хатта ҡәнәғәтләнеү тойғолары уята. Ындай әкиәттәр мауыҡтырып, күңел асып ҡына ҡалмайҙар, бер үк ваҡытта фәһем бирәләр, тормош һабаҡтарына өйрәтәләр.

Хайуандар тураһындағы ҡайһы бер әкиәттәр беҙҙе көлкө донъяһына алып китә. Мәҫәлән, «Ишәк, эт, бесәй, әтәс» (№ 74) әкиәтендә бесәйҙең тырнауы – бәке менән сәнсеү, эт тешләүе – аяғына балта сабыу, ишәктең тибеп осороуы ҡараҡҡа күҫәк менән тондороу кеүек тойолған, ә әтәс ҡысҡырыуы «Килтер бында, килтер бында» тип ишетелгән. «Шаян бесәй» (№ 56), «Һоросай менән Ҡарасай» (№ 55) әкиәттәрендә лә йыртҡыстарҙың бесәйҙән ҡурҡыуы көлкө тыуҙыра. Ғөмүмән, хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә көлкөлө эпизодтар йыш осрай һәм был күренеш жанрҙың бер мөһим үҙенсәлеге һымаҡ ҡабул ителә.

Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә шулай уҡ халыҡтың идеалдары, ғәҙеллеккә, изгелеккә ышаныуҙары үҙенсәлекле сағылыш тапҡан. Ғәҙеллек, тоғролоҡ, дуҫлыҡ, бер-береңә ярҙам итеү, килешеп йәшәү кеүек төшөнсәләрҙе әкиәт юғары ҡуя. «Һарыбай» (№ 54) әкиәтендә хужаһына ғүмер буйы тоғро хеҙмәт иткән эттең хаҡһыҙ ҡыйырһытылыуы, «Һоросай менән Ҡарасай»ҙа (№ 55) һуңғыһының хаҡлы яза алыуы, бергә дуҫ йәшәгән йорт хайуандарының туғыҙ бүрегә ҡаршы тора алыуҙары «Дүрт дуҫ» әкиәтендә (№ 60) юғарыла әйтелгәнде раҫлай. Әкиәттәрҙә зирәк, оҫҡор хайуандар хәйләкәрлектәре, сослоҡтары менән һоҡланыу уяталар. Был рәткә, әлбиттә, иң тәүҙә төлкөнө ҡуйырға кәрәк. Башҡорт әкиәттәренең күбеһендә ошо ҡаршылыҡлы персонаж хәрәкәт итә. Бер ҡарағанда ул – аҡыллы, хәйләкәр, зирәк, сос йән эйәһе. (Томды асҡан АТ 1, АТ 2 сюжет типтарына ҡараған әкиәттәр быға асыҡ миҫал.) АТ 155 сюжет тибында яуызлыҡҡа ҡаршы сығып, изгелек эшләгән кешене бүренән, йыландан ҡотҡарыусы гәҙел зат булып сығыш яһай. Икенсе осраҡта ул – мәкерле, уҫал персонаж. Мәҫәлән, «Төлкө менән бүре» (№ 31) әкиәтендә бүрене утта яндыра, боҙҙа аунарға ҡуша; «Ус алыу» (№ 41) әкиәтендә ауырыу арыҫланға, тереләйһең тин, бүренең арт аяғын ашарға ҡоторта.

Башҡорт әкиәттәрендә юғарыла әйтелгән сифаттарға бүҙәнә (№ 30), ат (№ 40), һайыҫҡан (№ 44), торна (№ 46), ҡуян (№ 53) һ. б. йәнлектәр ҙә эйә булырға мөмкин.

Әкиәттең эстетик ҡанундары буйынса, төлкөнөң хәйләһе һәр ваҡытта ла аҡланмай, ҡайһы осраҡтарҙа ул язаға тарттырыла. Мәҫәлән, «Етем төлкө» (№ 34) әкиәтендә ул, хәйләләшеп өйҙәштәренең ризығына ингәне өсөн, ҡыуыла, «Төлкө менән бөркөт» (№ 39) сюжетында һуңғыһының балаларын ояттһыҙ рәүештә һәләк иткәне, «Ҡарт айыу менән төлкө»лә (№ 49) айыуҙың тауыҡтарын урлап ашағаны өсөн үлем язаһына дусар ителә.

Шул уҡ ваҡытта төлкөнөң ҡайһы бер сығыштары һоҡланыу ҡатыш йылмайырға лә мәжбүр итә, бигерәк тә унның алйотораҡ итеп һүрәтләнгән бүрене, айыуҙы төп башына ултыртыуҙары. Бүрене ҡойроғо менән балыҡ тоторға ултыртып ҡуйһа, айыуҙы «Ҡапҡаның нимә була ул?» тип һөйләндереп, ризыҡһыҙ ҡалдыра. Ә шул арала иһә ҡуян тиреһе ябынып килеп урлап алып китә. Ғөмүмән, хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә бындай ҡатылыҡ, яуызлыҡтар ҡаты хөкөм ителмәй, киреһенсә, юмор һымаҡ ҡабул итәлә.

Әкиәт башында көсһөҙ, рәнйетелгән йән эйәһе булараҡ сығыш яһаған персонаж әкиәт аҙағында еңеүсе булып сыға. Мәҫәлән, «Ҡуян менән арыҫлан» (№ 53) әкиәтендә ҡуян – арыҫлан тырнағынан, «Һандуғас»та (№ 37) һандуғас – хужаһынан, «Төлкө менән һайыҫҡан»да (№ 44) һайыҫҡан төлкөнән ҡотолоу юлын таба.

Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең персонаждары араһында бүре лә йыш осрай. Fәҙәттә, ул яуыз, игелекһеҙ, бер ҡатлыраҡ итеп һүрәтләнә. Күп осраҡта төлкө арҡаһында төп башына ултырып, бүре алйот булып күренә. «Күк ат» (№ 40) әкиәтендә, мәҫәлән, бүре, төлкөнө тыңлап, ҡойроғон үлгәнгә һалышып ятҡан ат ҡойроғона бәйләргә рөхсәт итә һәм һәләк була, «Ишәк, дөйә, төлкө, бүре»лә (№ 42) төлкөгә ышанып, уҡытам, имеш, тип, балаларынан яҙа, «Дөйә, төлкө, бүре, бурһыҡ»та (№ 43) төлкө бүрене ризыҡһыҙ ҡалдыра, «Һемәйгән бүре»лә (№ 67) исеменән күренеүенсә, бер ҡатлылығы арҡаһында бүре сауҙагәрҙе лә, кәзәне лә, арыҡ тайҙы ла ашай алмай. АТ 155 сюжетына ҡараған «Хәйләкәр төлкө» әкиәтендә (№ 88) бүре игелекһеҙ йыртҡыс итеп күрһәтелә: үҙен бәләнән ҡотҡарған бабайҙы ашарға йыйына. Бүренең яуызлығы «Бүре менән кәзә» әкиәтендә (№ 68) тағы ла асығыраҡ сағылыш таба: кәзә бәрәстәрен харап итә. Кәзә менән һарыҡ тураһындағы әкиәттәрҙә (№ 70, 71, 72), «Үгеҙ, тәкә, әтәс, һарыҡ, бесәй»ҙә (№ 73) бүре ҡурҡаҡ итеп һүрәтләнә. Үҙенән күпкә көсһөҙ кәзә менән бесәйҙең «тоҡта бүре башы ун ике», «һигеҙ бүре – бер тунлыҡ» тигән һүҙҙәренән ҡурҡып ҡаса. Әкиәттәрҙә бүре аҙғын, уйнашсы йыртҡыс итеп һүрәтләнгән осраҡтар ҙа юҡ түгел («Иблис төлкө» № 50).

Өҫтәге миҫалдарҙан күренеүенсә, бүре – хайуандар тураһындағы башҡорт әкиәттәрендә, нигеҙҙә, кире персонаж булараҡ күҙ алдына баҫтырыла, тик бер-ике осраҡта ғына ул ярҙамсыл, игелекле йән эйәһе булып сығыш яһай («Һарыбай» – № 54, «Эт менән көсөк» – № 66).

Айыуға килгәндә инде, беҙҙең әкиәттәрҙә ул төлкө, бүре менән сағыштырғанда һирәгерәк осрай һәм бер ҡатлылығы арҡаһында гел тиерлек уңайһыҙ хәлгә ҡала. «Төлкө менән айыу» (№ 45) әкиәтендә төлкө айыуҙың бер ҡатлылығынан файҙаланып, уны рәхәтләнеп мыҫҡыл итә: айыуҙың, ауыҙына турғай ҡабып, маҡтанырға килеүен күреп ҡалған төлкө «Ауыҙыңда нимә ул?» –

тип һорап, турғайҙы осорттора ла, аҙағынан өҫтәп ҡуя: «Алйот һин: «турғай» тип түгел, «ҡош» тип әйтергә ине». «Ҡарсыҡ менән айыу» әкиәтендә лә (№ 85) айыу әбейҙең ҡыҙҙарымдың бирәүһен бирәм тигәненә ышанып, уны ебәрә. «Ҡарт айыу менән төлкө» (№ 49); «Айыу менән ҡарт» (№ 84) әкиәттәрендә айыу үҙенә зыян иткән төлкө менән бабайҙың ғүмерҙәрен өҙә.

Ғәҙәттә, көсһөҙ йән эйәләренә хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә ярҙамсы, эпизодик персонаж урыны ғына бирелә («Ҡуян ҡунаҡта» – № 98), әммә башҡорт әкиәттәрендә улар төп персонаж булып сығыш яһаған осраҡтар ҙа теркәлгән. Мәҫәлән, башҡа әкиәттәрҙә ҡуянды беҙ ҡыйырһытылған йән эйәһе итеп ҡабул итергә күнеккәнбеҙ, ә бына «Йомарт ҡуян» (№ 51), «Быҙау тураһында әкиәт» (№ 83) ише сюжеттарҙа ул эшлекле зат, бүләкләүсе, йәғни кешегә изгелек эшләүсе, булып һүрәтләнә, «Ҡуян менән арыҫлан» (№ 53) әкиәтендә иһә уның аҡыллылығы һыҙыҡ өҫтөнә алына.

Йорт хайуандарынан бесәй, эт, кәзә, һарыҡ, һыйыр, һирәгерәк үгеҙ, дөйә кеүектәрҙе осратырға мөмкин. Уларҙың ҡырағай хайуандар кеүек яуызлыҡ ҡылырға уйҙары юҡ, нигеҙҙә, был персонаждар үҙҙәрен яҡлап, һаҡлап сығыш яһайҙар. Үҙ-ара татыу, дуҫлыҡтың ҡәҙерен белгән тоғро йән эйәләре булып күҙ алдына баҫалар. Йорт хайуандары көсһөҙ, яҡлаусыһыҙ һымаҡ тойолһалар ҙа, әкиәт эстетикаһына ярашлы, үҙҙәренән көслө, яуыз хайуандарҙы һәр ваҡыт еңәләр.

Ҡош-ҡортҡа килгәндә инде, хайуандар тураһында башҡорт әкиәттәрендә улар һирәгерәк осрай (әтәсте иҫкә алмағанда). Торна, бөркөт, һандуғас, һайыҫҡан кеүек ҡоштарҙы осратырға мөмкин. Торна, бөркөт аҡыллы ҡоштар рәтендә (№ 46, 47; № 39), һайыҫҡан – хәйләкәр (№ 44), һандуғас тотҡонлоҡҡа дусар ителгән бисара ҡош (№ 37) булып хәтерҙә ҡала.

Күренеүенсә, хайуандар тураһындағы башҡорт әкиәттәренең сюжет составы, образдар системаһы бай ғына һәм алдағы баҫмаларҙы күпкә тулыландыра.

*Гөлнур Хөсәйенова*

## 1. Ҡырағай хайуандарҙың килеп сығышы

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Уларҙың бер ҙә балалары булмаған. Көнкүрештәре бай, етеш булған: кәртә-ҡура тулы мал, ҡош-ҡорт икән, ти.

Бер көн уларға юлаусылар туҡтаған. Ябай кешеләр түгел, руханиҙар, әүлиәләр икән үҙҙәре.

Әбей менән бабай юлаусыларҙы нимә менән һыйларға тип уйға ҡалған. «Мең һыйырҙың берәүһен һуйһаҡ, 999 ғына ҡала, һарыҡ һуйһаҡ та мал һаны кәмей. Бесәй һуйып ҡына һыйлайыҡ», – тип хәл иткәндәр. Бесәй һуйып, ҡаҙан аҫып аш әҙерләгәндәр. Ҡунаҡтарҙы табынға саҡырғандар. «Һуйған нәмәгеҙҙең башын күрһәтмәйенсә, ашығыҙҙы ауыҙ итә алмайбыҙ», – тиҙәр икән юлаусылар. Ни хәл итһен әбей менән бабай, бесәй башын күрһәтергә мәжбүр булғандар. Шул урында әүлиәләр: «Бөтә малдарығыҙ халыҡ файҙаһына китһен» – тип доға ҡылалар. Теләктәре әйтеү менән үтәлеп тә ҡуя: әбей менән бабайҙың мал-тыуарҙары – ҡырағай хайуандарға, ҡош-ҡорттары ҡоштарға әйләнеп, кәртә-ҡураны емереп сығып та китәләр.

Шулай итеп, ҡырағай хайуандар – илек, ҡоралай, мышылар, ҡоштар – аҡҡош, ҡор, ҡыр өйрәктәре барлыҡҡа килгән, имеш.

## 2. Айыу ни өсөн ҡыш буйы өңөнән сыҡмай?

Айыу ныҡ бал яратҡан. Балһыҙ йәшәй ҙә алмаған. Гел генә бал ашауҙы уйлаған да торған. Бал ҡорттары мыжғып торған ағас ҡыуышын күрһә, айыуҙың шатлығы эсенә һыймаған. Ул ағас башына менә, умартаны туҙҙыра, шунан бал ашарға тотона икән. Бал ҡорттары айыуҙы һырып алып сағырға уйлайҙар ҙа, булдыра алмайҙар. Ни өсөн тиһәң, айыуҙың йөнө оҙон, ә бал ҡорттарының сағҡысы ҡып-ҡыҫҡа икән. Бал ҡорттары айыуҙың йөнө араһына уралып сыға алмайҙар, етмәһә айыу ағастан төшә лә, ергә ятып

аунай башлай. Бал ҡорттары иҙелә лә бөтә. Айыу инде солоҡтағы бал менән рәхәтләнеп һыйлана икән.

Бер ваҡыт бер кеше урманға утын ҡырҡырға килгән. Шунда ул ағас башында бал ашап ултырған айыуҙы күргән. Айыу үҙе бал ашай, ти, үҙе йөнтәҫ оҙон ҡойроғо менән бал ҡорттарын ҡыуа икән. Кеше: «Һин, тайыш табан, ҡорттарҙы ҡырып, әҙер бал ашап йөрөйһөңмө әле! Муйыныңды өҙәм хәҙер», – тип, айыуға балтаһы менән һелтәнгән икән, балта айыуҙың муйынына түгел, ҡойроғона тейеп, уны сабып өҙгән. Шул көндө айыу ҡойроғо менән хушлашҡан, әле лә ул ҡойроҡһоҙ йөрөй.

Шулай ҡойроҡһоҙ ҡалғанға ҡайғырып, бик оҙаҡ ваҡыттар йөрөгәс, айыу йәнә үҙенең дуҫы төлкөгә тап булған. Төлкө айыуҙың бойоғоп йөрөгәнен күргәс, айыуҙан һораған:

– Ни булды, айыу ағай? Был ни хәл? Ҡойроғоң ҡайҙа һуң?

Айыу теге ваҡыт хәлдең нисек-нисек булып бөткәнен әнәһенән ебенә тиклем һөйләп биргән дә төлкөнән, хәҙер нимә эшләргә икән, тип кәңәш һораған. Төлкө аптырашта ҡалған.

– Былай ҡойроҡһоҙ башҡа йәнлектәргә ни күҙең менән күренәһең инде хәҙер? Һинән бөтә йәнлектәр көләсәктәр, һине мыҫҡыл итәсәктәр. Эш насар, әлбиттә, – тигән төлкө.

Уның был һүҙен ишеткәс, айыу тағы ла нығыраҡ ҡайғыра башлаған, ғәрлегенән ер аҫтына инеп китерҙәй булған. Ул төлкөнән ярҙам һораған. Төлкө уға:

– Шулай, айыу ағай. Хәҙер бер нәмә лә эшләп булмай. Тик бер генә юл бар был бәләнән ҡотолоу өсөн, – тигән.

– Мин бөтәһенә лә риза, – тигән айыу, ҡайғырып. Төлкө уға шундай кәңәш биргән:

– Ярай әле, хәҙер йәй. Урманда үлән араһында, япраҡ араһында йөрөһәң, һинең ҡойроҡһоҙ булыуыңды бер йәнлек тә күрмәҫ. Ә бына көҙ, япраҡ ҡойолғас, ни эшләрһең? Һин ул ат ҙурлыҡ кәүҙәң менән ҡайҙа йәшенә алаһың? Бына шулай булғас, һиңә бер генә юл хәҙер: көҙ көнө өң ҡаҙып инеп, ҡыш буйына шул өңөң эсенән сыҡмай тик ятырға ғына ҡала. Ә яҙ булып, ағастар япраҡ яра башлау менән, һин өңдән сығырһың да йәй буйы ирektә йөрөрһөң. Ҡуйы япраҡ араһында һинең ҡойроҡһоҙ икәнеңде бер йәнлек тә күрмәҫ.

Айыу төлкөнөң был кәңәшенә бик шатланған, рәхмәт әйткән.

– Үҙеңдә лә баш бар икән әй. Һине шул «хәйләкәр төлкө» тип белмәй атамағандар икән, – тигән айыу төлкөгә.

Айыу, төлкөнөң кәңәше буйынса, көҙгә тиклем, оялышынан башҡа йәнлектәрҙән ҡасып ҡына, урман араһында йөрөгән. Ағастар япраҡ ҡойоп, ҡырпаҡ ҡар яуғас та, ул өң ҡаҙып инеп ятҡан.

Ҡойроҡһоҙ ҡалғанға башҡа йәнлектәрҙән оялып, айыу әле булһа, көҙ өң ҡаҙып инеп, ҡыштың ҡыш буйына өңөнән сыҡмай тик ята икән.

## 3. Өс дуҫ

Борон-борон заманда Ирәндек тауҙарындағы бер мәмерйәлә йәшәгән, ти, өс дуҫ: бурһыҡ, терпе, сысҡан. Бик татыу торғандар, ти, былар. Йәй буйы ял белмәй ҡышҡыллыҡҡа аҙыҡ әҙерләгәнләр. Тамаҡтары туҡ булғас, ҡыштың ҡаты бураны ла, сатлама һыуығы ла ҡурҡыныс булмаған уларға.

Быларҙың дуҫ йәшәүен күреп, айыу, бүре, төлкө бик көнләшкән, ти. Берҙән-бер көндө улар үҙ-ара кәңәшләшкәндәр ҙә өс дуҫтың аҙығын тартып алырға булғандар. Төлкө ҡупшы ҡойроғон болғап, хәйләкәр йылмайып: «Ут төртәйек беҙ уларҙың өйөнә», – ти икән. Быға бүренең бик асыуы килгән.

Эй һин, кәбәк баш! – тип екергән ул. – Уларҙың өйөнә ут төртөп, ниндәй байлыҡтарын алмаҡсы булаһың?

Төлкө ҡурҡып ауҡалыҡҡа инеп ҡасҡан. Айыу менән бүре юлдарын дауам иткән.

Бурһыҡ, терпе, сысҡандың өйөнә яҡынлашҡас, бүре: «Һин, Айыухан олатай, бик ҡартһың, тештәрең дә ҡойолоп бөткән. Шуға күрә эшләп ыҙаланмаҫһың инде. Мин итте сәйнәрмен, һин көйөп торорһоң да, бирргән һөйәктәрҙең елеген имерһең», – ти икән.

Айыу, асыуланып, бүрегә киҙәнгән, ти. Тик ул әйләнгәнсе, тегенеһе табанын ғына ялтыратҡан.

Айыу юлдаштарының шулай ҡомһоҙ булғанына асыуы килеп хатта ауырып киткән, ҡайтып ятырға мәжбүр булған.

Бына шунан һуң ул ҡышты өңөндә үткәрергә ғәҙәтләнгән дә инде.

Ә өс дуҫ – бурһыҡ, терпе, сысҡан – әле лә татыу ғүмер итәләр, ти. Берҙәм булғас, бер ниндәй йәнлек тә еңә алмай, ти, уларҙы.

## 4. Айыу менән бал ҡорттары

(вариант)

Борон-борон заманда, өйрәк үрәтник, һайыҫҡан дисәтник саҡта булған, ти, бер тайыш табан айыу. Уның ҡойроғо, төлкө ҡойроғо кеүек үк, оҙон да, йөнтәҫ тә булып, өрпәйеп торор булған, ти.

Айыу бал яратҡан. Балһыҙ йәшәй ҙә алмаған. Гел генә бал ашауҙы уйлаған да йөрөгән.

Бал ҡорттары мыжлап торған ағас ҡыуышын күрҙеме, айыуҙың шатлығы эсенә һыймай башлай икән. Ул, аушанлап, ағас башына менә лә, умартаны пыр туҙҙырып, бал ашарға тотона икән. Бал ҡорттары айыуҙы һырып алалар ҙа сағырға маташалар, әммә булдыра алмайҙар, сөнки айыуҙың йөнө оҙон, ә бал ҡорттарының ҡаяуҙары ҡып-ҡыҫҡа. Улар, айыуҙың тәненә яҡынлашырға тырышып, йөн араһына инәләр-инәләр ҙә шунда сырмалып бөтәләр.

Ә айыуға шул ғына кәрәк тә. Ул ағастан төшә һала ла ерҙә аунай башлай. Йөн араһында буталып ҡалған бал ҡорттары иҙеләләр ҙә бөтәләр. Улай ҙа булмаһа, һыуға барып бер сумып ала, ти, был, бал ҡорттары шунда сыланып, ҡойолоп төшәләр. Шунан һуң айыу йәнә ағас башына менеп китеп, солоҡтағы бал бөткәнсе, үҙенең эсе күпкәнсе һыйлана икән, ти.

Бер ваҡыт урманға утын алырға бер кеше килгән икән. Иплә-берәк ҡараһа, ағас башында бал ашап ултырған айыуҙы күреп ҡалған. Үҙе бал ашай, ти, айыу, ә йөнтәҫ оҙон ҡойроғо менән бал ҡорттарын ҡыуа икән, ти.

– Эх һин, тайыш табан, тайыш табан! Ҡорттарҙы ҡырып, әҙер балды ашап йөрөйһөң икән әле! Муйыныңды өҙмәһәмме, бына күр ҙә тор! – тип, теге кеше ағас башына менеп киткән.

Ул айыуға ҡарап балтаһын һелтәгән. Әммә балта айыуҙың муйынына түгел, ә ҡойроғона тап килеп, уны сабып өҙгән. Шулай итеп, тайыш табан айыу оҙон йөнтәҫ ҡойроғо менән бөтөнләйгә хушлашҡан. Айыу ағастан төшкән дә, башын түбән баҫып, урман араһына инеп юғалған.

Шунан бирле айыуҙар сонтоҡ ҡойроҡло булып ҡалғандар, ти.

Теге кеше солоҡто яҡшылап ҡарап йүнәтеп сыҡҡан, кәрәҙ-ҙәрҙе үҙ урынына ҡуйған да ҡайтып киткән.

Бал ҡорттары быны күреп, башта ғәжәпләнгәндәр. Улар инә ҡорттан:

–Ниңә был кеше беҙҙең балыбыҙҙы ашап бөтөрөп китмәне икән? – тип һорағандар.

Инә ҡорт ни тип яуап ҡайтарырға белмәгән. Шулай ҙа ул бал ҡорттарына:

– Барығыҙ, осоп етегеҙ ҙә ул кешенән беҙҙең балыбыҙҙы ниңә ашамауын һорағыҙ, – тигән, ти.

Бал ҡорттары теге кешене ҡыуып етеп һорағас, ул:

– Әгәр мин балығыҙҙы ашаған булһам, үҙегеҙгә ҡыш ашауға нимә ҡалыр ине? Һеҙ ҙә астан үлер инегеҙ, йәренгә мин дә балһыҙ ҡалыр инем, – тип яуап биргән, ти.

Бал ҡорттары солоҡҡа әйләнеп ҡайтҡандар ҙа инә ҡортҡа теге кешенең һүҙҙәрен әйтеп биргәндәр. Шул саҡта инә ҡорт кәңәшкә бөтә ҡорттарҙы йыйған. Бал ҡорттары, ул кешегә күмәкләп барырға ла үҙҙәрен айыуҙан һаҡлауын һорарға, тип кәңәш иткәндәр, ти.

Ҡорттар ауылға теге кеше янына барып:

– Беҙҙе яуыз айыуҙан ҡотҡара күр, үҙ эргәңә ал. Ә беҙ һиңә бының өсөн рәхмәт әйтербеҙ, – тигәндәр, ти.

– Яҡшы! Мин һеҙгә бик һәйбәт итеп умарта эшләрмен. Һеҙ шунда йәшәрһегеҙ, бал йыйырһығыҙ, – тип яуап биргән, ти, кеше.

Шул көндән бирле бал ҡорттары кешеләрҙе бал менән һыйлай башлаған, ти.

## 5. Айыу менән суртан

Кеше – бүре кеүек батыр, арыҫлан кеүек көслө, төлкө кеүек хәйләкәр. Айыу иһә рыяһыҙ йыртҡыс иҫәпләнә. Бына уның тураһындағы бер хикмәтле һүҙ.

Берҙән-бер көндө айыу йылға аша ҡара урманға ҡарай сығып барғанда, уны күреп ҡалған суртан:

– Ҡайҙан киләһең? – тип һораған.

– Аҡыллыны һайлаған ерҙән, даланан, – тип яуаплаған айыу.

– Кемде һайлаһығыҙ инде?

– Кешене, тағы кемде булһын.

– Эй, айыу, айыу, кешенән хәҙер һиңә үҙ урманыңда, ә миңә үҙ йылғамда тынғылыҡ булмаясаҡ. Аҡыллы зат итеп һайлағанығыҙ өсөн ул һеҙгә, исмаһам, берәй нәмә вәғәҙә иттеме һуң?

– Унан нимә талап итәһең инде? Уны бит беҙҙең арабыҙҙа зиһенгә эйә булған берҙән-бер йән эйәһе булған өсөн һайланылар. Өҫтәүенә, уның, йыртҡыс хайуандарҙыҡы кеүек, үткер тештәре, тимәнес тырнаҡтары юҡ. Әйткәндәй, яланғас, нәфис тәнле һәм затлы нәҫелдән. Алла кемде яҡын күрһә, халыҡ та шуны үҙ итә. Шуға ла кешегә хөрмәт күрһәткәндәрҙер инде. Ҡалай итәһең?

– Шулай ҙа, теге ни... – тип яңынан һүҙ башлаған суртан.

– Һиңә тағы нимә кәрәк, – тип екергән уға айыу, – үҙ ҡәрҙәштәреңде эҙәрлекләгәнең, үткер тештәрең менән ҡырғаның да еткән!

– Юҡ, мин бит ул хаҡта һүҙ йөрөтмәйем. Аҡыллы тип һайланған кешенән беҙгә ниндәй яҡшылыҡ булыр икән, бына шул ҡыҙыҡһындыра мине.

– Ярай, улай бик белергә теләгәс, әйтәйем инде һиңә дөрөҫөн. «Һеҙ мине аҡыллы тигән тәхеткә күтәреп ултырттығыҙ. Бының өсөн мин һеҙҙең ҡайһы берегеҙҙе яурындарыма һалырмын, ә ҡайһы берегеҙҙе өҫтәл өҫтөнә ҡуйырмын», – тип вәғәҙә бирҙе ул кеше тигәнең үҙенең һайлаусыларына.

– Эй, туған, – тип, бошонҡо ғына аңлата башлаған суртан, – был бит кеше һинең туныңды һалдырып, үҙенең яланғас яурындарына ҡаплай, ә мине үҙенең аш өҫтәленә ҡуя тигән һүҙ.

## 6. Бүре ни өсөн йыртҡыс булып киткән?

Борондан да боронораҡ заманда, донъя яралған саҡта, кешеләр, шулай уҡ хайуандар һәм мәхлүктәр, бергә йыйылғандар ҙа йыйым (ашамдыҡ) бүлешергә булғандар. Байтаҡ ҡына низағлаша торғас, кешене йыйылышҡа рәйес итеп һайлап ҡуйған, ти, былар. Шкенсе бер кеше һорай икән рәйестән:

– Миңә ниндәй әжер?

– Ерҙә нимә бар – бөтәһе лә һиңә, – тип яуап бирә рәйес.

Нәүбәт йылҡыға етә:

– Миңә ниндәй әжер?
– Үҫемлектәр.
Бүре лә ҡалмаҫка тырыша.
– Миңә ниндәй әжер тейеш?
– Туйын. (Туйын – ҡыҙыл балсыҡ.)
– Эһә, муйын.

Ана шулай «туйын» тигәнде «муйын» тип ишетә лә, бүре елдереп урманға сабып сығып китә. Шунан бирле ул мал-тыуарҙың муйынына ғына үрелеп йәшәй башлаған, тиҙәр.

## 7. Бүре ни өсөн айға ҡарап олой?

Бынан күп йылдар элек ҡара урманда йәшәгән, ти, Бүребай. Ул бик изге, ягымлы булған. Урмандағы бар хайуандар менән дуҫ йәшәгән, матур йырлаған Бүребай. Ул йырлай башлаһа, бар йәнлектәр, ҡоштар уны тыңларға килгәндәр. Бүрене барыһы ла бик ихтирам иткәндәр, матур тауышына һоҡланғандар.

Төлкөбикә генә бер ни ҙә өндәшмәй, ти. Хәйләкәрлеге өҫтөнә бик көнсөл дә булған ул. Уга Бүребайҙың даны һис тә оҡшамаған. «Нисек тә булһа аҡылға ултыртайым мин быны. Әгәр ҙә мәгәр шуны эшләй алмаһам, исемем Төлкөбикә булмаһын», – тип үҙенә һүҙ биргән. Көнө-төнө мәкер уйлап баш вата торғас, табылған бит хәйләһе.

Бер заман Бүребай үҙе яратҡан йырҙарын йырлап ултырғанда, уның янына Төлкөбикә килеп сыҡҡан. Ул Бүребайға яҡынлашып, уны ҙурлап, ике ҡулын биреп күрешкән.

– Бүребай, һинең матур йырлауыңды бөтәһе лә белә, мин дә бик яратам. Тауышың шундай көслө, моңло. Ошо хәбәрҙе Ай ҡыҙы ла ишеткән. «Бүребайҙың бер генә тапҡыр булһа ла миңә атап йырлағанын ишетһәм, кире ергә ҡайтыр инем», – тип әйтә, ти. Төлкөбикә шулай тигән дә урман эсенә инеп юғалған. Бер ҡатлы Бүребай шатланды ла ҡуйҙы, ти. Төн еткәс, бүрегә Ай ҡыҙы бик моңһоу булып күренгән. Ул аҡлан уртаһына сығып, Айға төбәлеп, үҙенең иң матур йырын йырлап ебәргән. Таң атҡансы бер туҡтауһыҙ йырлаһа ла, Ай ҡыҙы һаман шулай моңһоу тороуын дауам иткән, ти. Бүребай: «Ай ҡыҙына минең был йырым оҡшаманы, ахрыһы, иртәгә тағы йырлармын», – тип, үҙен тынысландырған. Шул көндән алып бүре ҡыш тимәй, йәй тимәй, Ай ҡыҙына бағышлап йырҙар йырлай икән. Ә Ай ҡыҙы төшмәй ҙә төшмәй. Ҡайһы бер көндәрҙе уны болоттар ҡаплап күренмәһә, Бүребай хәсрәтенән ни эшләргә белмәй, урман буйлап саба, үҙенә урын таба алмай икән. Ә Төлкөбикә быға ҡыуана ғына. Шулай йырлай торғас бүренең тауышы бөтә лә ҡуя. Төлкөбикә быға бик ҡәнәғәт булды, ти. Бер көндө килеп, бүрегә:

– Ҡара әле, һинең тауышың бөткән бит. Тауышыңды Ай алған.

Бүребай олоуынан туҡтап:

– Нимә эшләйек инде хәҙер? Тауышымды нисек кире һорап алайым?

Йә, ҡойроғом, йә, ялбырым, юлын өйрәт! – ти төлкө. Ҡойроғон ҡосаҡлап, ҡолағына ҡуйып тыңлап ала.

– Бына булды ла, – тигән. – Миңә ҡойроғом былай тине: ошо көндән башлап гел йырла. Шунан тауышың кире ҡайтыр, – тигән төлкө. Бүребай ышанған. Тағы ла тырышыбыраҡ йырлаған, ти. Көн һайын, йырлаған һайын тауышы бөткән. Моңо ла юҡ, көйө лә юҡ. Төлкө тағы ла килгән, ти.

Туғанҡайым, әйҙә берәй көндө байрам үткәреп алайыҡ, һин күптән урман халҡы өсөн йырлағаның юҡ. Улар һине бик һағынды, – тигән. Бүребай шатланып риза булған.

Урман йәнлектәре аҡланға йыйылған. Бүребай уртаға сығып йырлап ебәргән. Тик элекке моңо юғалған, йән өшөтөп ологан ғына. Аптыраған йәнлектәр ҡурҡып ҡасып бөтәләр. Иң беренсе Төлкөбикә һыпыртҡан. Бүребай йырлап бөтөп, тирә-яғына ҡараһа, бер кем дә юҡ. Маҡтау һүҙҙәре ишетелмәй. Ул йүгереп йәнлектәрҙе эҙләй башлаған. Ҡайһыһына килеп һүҙ ҡушһа ла, өндәшмәй, баштарын баҫып, түбән ҡарап үтәләр, ти. Тора-бара унын юлына тап булмаҫ өсөн, әллә ҡайҙан урап үтәләр, ти. Бүребайҙың ныҡ асыуы килгән. Шунан бирле уҫал холоҡло йыртҡысҡа әйләнгән. Тик һаман үҙен иң шәп йырсы тип уйлап, Ай ҡыҙын саҡырып, төн уртаһы еткәс, бөтмәҫ йырын һуҙа.

## 8. Бүре менән ҡуяндар

Бүре бик тә көн күрһәтмәй башлағас, ҡуяндар берҙән-бер көндө түңәрәк кенә аҡланға кәңәшкә йыйылғандар, ти. «Ул мәлғүн затыбыҙҙы ҡырып бөтөрөп бара бит, күмәкләшеп үҙен бер төрлө итергә кәрәк», – тип, береһенән-береһе шәберәк ҡысҡырышҡандар, ти.

Былар ярһып-ярһып телмәр тотоп, ҡан дошмандарына хөкөм сығарып бөтөп кенә торһалар, ҡапыл ғына өҫтәренә бүре үҙе килгән дә сыҡҡан, ти.

«Ай-й, харап булдыҡ, харап булдыҡ. Эт барыбер этлеген итер инде», – тип, хөкөм ҡағыҙын йыртып, ҡуяндар төрлөһө төрлө яҡҡа ҡасты ла бөттө, ти.

«Эт этлеген итер» тигән һүҙ ана шунан ҡалған, тиҙәр.

## 9. Эш табылды

Борон-борон заманда йәнлектәр бер йорт хужаһына киләләр ҙә:

– Хужа, беҙгә эш бир! – тиҙәр, сөнки уларҙы тик йөрөү ялҡытҡан, имеш.

– Ә һеҙ нимә эшләй беләһегеҙ? – тип һорай кеше.

– Мин һабан һөрәм, йөк ташыйым, баҫыуҙа эшләй алам, – ти ат.

– Мин һөт бирәм, – ти һыйыр.

– Мин йөн бирәм, – ти һарыҡ.

Ә тауыҡ:

– Ә мин йомортҡа һалам, – ти.

– Ярай, мин һеҙгә эш бирәм, – ти хужа.

– Ә беҙҙе иртәнсәк кем уятыр һуң? – тип һорай йәнлектәр.

Әтәс ҡысҡырып ебәрә:

– Мин уятырмын!

Шулай итеп, уларҙың һәр ҡайһыһына эш табылған. Йәнлектәр кешеләргә файҙа килтерә башлаған, ти.

## 10. Эт үҙенә нисек хужа тапҡан?

Борон-борон заманда бер эт булған. Ул үҙенә хужа эҙләгән. Ни өсөн тиһәң, уның көнкүреше бик ауыр икән.

Бер ваҡыт ул башы һуҡҡан яҡҡа сығып киткән дә бер йылға буйына барып еткән. Йылға буйында бер бүре ултырғанын күреп:

– Иҫәнме, бүре? – тигән.

Бүре:

– Ниңә килдең? – ти икән.

Эт:

– Мин үҙемә хужа эҙләп йөрөйөм, мине үҙеңә алсы! – тигән.

Шунан бүре быны алған. Хәҙер икәүләп киткәндәр. Бара торғас, бүре туҡтаған да:

– Уй, әйҙә ҡасайыҡ, ана, айыу килә! – тигән. Шунан эт, бүренең ҡурҡаҡ икәнен белеп, айыу янына барған да:

– Мине үҙеңә алсы! Мин хужа эҙләйем, – тигән.

Айыу уны алған. Былар баралар, баралар икән, бара торғас, айыу шып туҡтаған. Туҡтағас, эткә:

– Әйҙә, ҡасайыҡ, ана, арыҫлан килә, беҙҙе ашар, – тигән.

Шунан эт айыуҙың көсһөҙ, ҡурҡаҡ икәнен белгән дә, уны ташлап, арыҫлан менән киткән. Баралар, баралар былар, бара торғас, бер яланға килеп сыҡҡандар. Унда бер кеше йөрөй икән. Арыҫлан күреп ҡалған да:

– Ах, ана, кеше килә, беҙҙе үлтерер, әйҙә ҡасайыҡ! – тигән.

Шунан эт, быныҡ да көсһөҙ икәнен белеп, теге кеше янына китә. Килеп етә лә:

– Мине үҙеңә алсы? – тип ялына. Шунан кеше этте үҙенә ала. Эт хужа табыуына шатланып:

– Эх, кешенән дә көслөһө юҡ икән! – тигән. Шул замандан башлап, эт кешегә хеҙмәт итә икән.

## 11. Ни өсөн бесәйҙәр өйҙә йәшәй?

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер сәсән. Ул ярлы булған, ғүмере буйы байға бил бөккән. Эше өсөн байҙан бер ауыҙ яҡшы һүҙ ишетмәгән. Сәсән үҙе кеүек эшсән кешеләргә арнап йырҙар сығарған, бәйеттәр әйткән.

Бер саҡ шулай болонда эшләп йөрөгәндә бер ҙур йылан килеп сыҡҡан да сәсәндең муйынынан быуа башлаған. Йылан менән алышып торғас сәсәндең тамам хәле бөткән. Шул мәлдә байҙың эте үтеп барған. Сәсән:

Эй, эткәйем, ҡотҡар мине, зинһар! – тип үтенгән. – Яҡшылығыңды онотмам, минең дә һиңә берәй файҙам теейер!

Эт уға:

Һау, һау! Һинең ҡайғың юҡ әле, үҙемдең эшем күп, – тигән дә ары үҙ юлы менән китеп барған. Шул саҡ ҡайҙандыр бер бесәй килеп сыҡҡан да йыланға ташланған. Бесәй сәсәндең муйынынан йыланды тырнап төшөргән. Еңел тын алып, сәсән былай тигән:

Рәхмәт, бесәй! Ғүмерең буйына йылыла, мендәр өҫтөндә генә йәшә. Ә эшлекһеҙ эт бар ғүмеренә һыуыҡта ғазап сикһен.

Ошо көндән алып бесәйҙәр гел өйҙә, йылыла, ә эттәр тышта, һалҡында йәшәй икән.

## 12. Ҡарға ни өсөн исемен әйтеп бөтөрмәй?

Берҙән-бер көндө ҡарға кәкүк менән осраша. Улар бер-береһенең хәл-әхүәлдәрен һорашҡандар. Кәкүк, ҡарға менән хушлашып, үз юлына китә. Осоп барып, бер ағасҡа ҡуна ла бик матур итеп:

– Кәк-күк, кәк-күк, – тип ҡысҡыра башлай. Ҡарға быны ишетеп ҡала ла көнләшеп ҡуя.

– Мин кәкүк кеүек үҙ исемемде әйтеп ҡысҡырырға булдыра алмайыммы ни? Минең тауышым да көр, һыным да матур, – ти ул.

Шунан һуң инде ҡарға: «Ҡар-ға, ҡар-ға», – тип ҡысҡырып йөрөр булған.

Бер көндө ҡарға аҙыҡ эҙләп йөрөгәндә бер турғайҙы эләктереп ала ла ауыҙына ҡаба. Шул саҡ турғай ҡарғанан үтенә башлай:

– Ағай, мин барыбер үләм инде. Шулай ҙа исемеңде белеп ҡалайым. Һин миңә үҙ исемеңде әйтә күр инде, – ти. Тәүҙә ҡарға суҡыштарын ҡыҫып ҡына:

– Ҡарр, ҡарр! – тигән.

Турғай:

– Минең ҡолаҡтарым бик бәләкәй, ишетмәйем, ағай, ҡысҡырыбыраҡ әйтсе, – тигәс, ҡарға ауыҙын ҙур итеп асып:

– Ҡар-ға, ҡар-ға! – тип ҡысҡырған. Шуны ғына көтөп торған турғай ҡарға ауыҙынан осоп сығып та киткән. Ҡарға турғайҙы ҡыуып ҡараған, яңынан эләктерә алмаған.

Шулай итеп, турғай үлемдән ҡотолоп ҡалған. Ҡарға үҙ исемен әйткәнгә бик үкенгән. Шунан һуң ул үҙ исемен бер ваҡытта ла тулыһынса әйтмәй икән. «Ҡарр, ҡарр», – тип кенә йөрөй икән.

## 13. Ҡарлуғастың ҡойроғо ни өсөн ике осло?

Бик борон булған, ти, был хәл. Бер мәл бөтә ер йөҙөн туфан һыуы баҫҡан. Бер генә кеше ғаиләһе менән иҫән ҡалған. Ул кеше кәмәһенә тере ҡалған барлыҡ йән эйәләрен ултыртып алған.

Бер ваҡыт сыҫҡан кәмә төбөн кимереп тишкән, кәмәгә һыу тула башлаған. Кеше һораған:

– Был тишекте кем һыу үткәрмәҫлек итеп ҡаплай ала?

Йылан:

– Әгәр бер шартымды үтәһәгеҙ, кәмәнең тишеген мин ҡаплайым, – тигән.

– Үтәйбеҙ, үтәйбеҙ, – тигәндәр барлыҡ йән эйәләре.

– Ул ваҡытта бына минең шартым: һыу ҡайтҡас, ергә төшөп йәшәй башлағас, һеҙ миңә теләгән нәмәмде ашарға рөхсәт итәһегеҙ.

– Ярай, шулай булыр, – тиешкәндәр кәмәләгеләр. Йылан йомарланып ятып тишекте ҡаплаған.

Бына бер заман туфан һыуы кире ҡайтҡан, бөтә йән эйәләренә ергә төшөп таралышып бөтөргә ваҡыт еткән. Йылан уларға:

– Миңә биргән вәғәҙәгеҙҙе үтәгеҙ. Донъяла иң тәмле, иң татлы ит нимәнеке икәнен асыҡлағыҙ, – тигән.

Серәкәй:

– Быны мин генә асыҡлай алам, – ти.

Кәмә хужаһы:

– Асыҡла һуң улай булғас, – тигән.

Серәкәй шунда уҡ осоп китә лә туфан һыуынан һуң иҫән ҡалған бөтә йән эйәләренең ҡанын тикшереп сыға. Ҡайтышлай уға ҡарлуғас осрай ҙа, һорай:

– Шунан асыҡланыңмы? Нимә ите иң татлыһы?

– Эйе, – тигән серәкәй. – Әҙәм ҡанынан да татлырағы юҡ. Шулай булғас, иң татлы ит кешелә.

– Булмаҫ, ышанмайым, һүҙең дөрөҫ булһа, телеңде күрһәт, – тигән ҡарлуғас серәкәйгә.

Серәкәй телен күрһәтеүе булған, ҡарлуғас уны өҙөп йотҡан да ҡуйған. Серәкәй йылан янына барған да, безелдәп тик тора икән. Йылан:

– Быға ни булған? Бер нәмә лә аңламайым, – тигән.

Ҡарлуғас:

– Ул тәлмәрйен ҡанынан да тәмлеһе юҡ тип әйтә, – ти икән.

Был мине мыҫҡыл итә тип, асыуы ҡабарған йылан ҡарлуғасҡа ташланған. Ҡарлуғас ысҡынып осоп киткән, ә йылан уның ҡойроғоноң урта тирәһен генә өҙөп алып ҡалған.

Шунан бирле ҡарлуғастың ҡойроғо ике осло булып ҡалған, ә йылан тәлмәрйен ите менән туҡланырға мәжбүр булған, ти.

## 14. Ҡаҙҙар ниңә ала булған?

Бынан бик күп заман элек, олатайҙарыбыҙҙың олатайҙары малай саҡта, өләсәйҙәребеҙҙең өләсәйҙәре ҡыҙ ваҡытта ҡаҙҙар гел аҡ булған, ә ала ҡаҙ исем өсөн генә булһа ла осрамаған, ти.

Ала ҡаҙҙар Ҡотһоҙ Ҡотой тигән бер кешенең яуызлығы арҡаһында ғына килеп сыҡҡандар икән.

Ҡотһоҙ Ҡотой, сабый балаларҙы урлап, ете урман, ете диңгеҙ арьяғындағы дейеүҙәргә илтеп һата торған булған. Берҙән-бер көндө бына шул Ҡотһоҙ Ҡотой Хәлимә исемле бер бите ай, бер бите көн кеүек һылыу ҡыҙ баланы урлап тимер ситлеккә бикләгән дә, үҙе, башҡа балаларҙы урларға тип, китеп барған, ти. Китер алдынан ул ситлек эргәһенә сихырлы аҡ таштар һала торған булған. Был таштар ситлекте, хужаһы килгәнсе, һаҡлап торалар икән.

Аҡ таштар тын ғына ятыр, ә инде ситлеккә ябылған бала унан берәй нисек сыға ҡалһа, шунда уҡ уға ташланып, аяҡтарына йәбешер булғандар. Меҫкен бала ҡуҙғала ла, ҡысҡыра ла алмай ҡатып ҡала торған булған.

Ә Ҡотһоҙ Ҡотой бер китһә, аҙналар, ҡайһы саҡта айҙар буйы йөрөй икән.

Хәлимә бахыр ана шул ситлек эсендә ултыра икән, уның бында икәнлеген бер кем дә белмәгән, ти. Ул, шунда тотҡон булып ултыра торғас, ябығып, юнышҡы һымаҡ булып ҡалған, алһыу йөҙө һарыға һабышҡан. Ә ситлек сығып ҡасырлыҡ түгел: сит-ситтәре бик нык, түшәм кеүек нәмәһе бик бейек булған, тик ишеге аҫтында ҡаҙ бәпкәһе һыйырлыҡ ҡына бер тишек бар икән.

«Ниңә мин ҡаҙ бәпкәһе булманым икән – ошо тишектән сығыр ла китер инем?» – тип илай икән Хәлимә бахыр. Зарығып ултыра торғас, Хәлимә кибеп бәләкәйләнә башлаған. Шулай бәләкәйләнгәндән-бәләкәйләнә барған да йомортҡанан яңы ғына моронлап сыҡҡан һап-һары ҡаҙ бәпкәһе кеүек булып ҡалған, ти. Аяҡтары урынында – ҡаҙ бәпкәһенең тәпәйҙәре, ҡулдары урынында бәпкә ҡанаттары, ти, бының. Хәлимә, шатлығынан, әле ҡауырһыны ла ҡатып етмәгән бәләкәс кенә ҡанатҡынаһын ҡаҡҡылап, ишек аҫтындағы тишектән тышҡа килеп тә сыҡҡан, ти.

Теге сихырлы таштар, ҡаҙ бәпкәһен күрһәләр ҙә, бының Хәлимә икәнен белмәгәндәр.

– Был ҡаҙ бәпкәһе ҡайҙан килеп сыҡты һуң әле? – тип хайран ҡалғандар улар, ни эшләр икән был тип, уны күҙәтеп торғандар.

Ҡаҙ бәпкәһе яй ғына киткән дә киткән. Шул ерҙә теге аҡ таштар, ҡаҙ бәпкәләренә әүерелеп, Хәлимә артынан төшөп алғандар ҙа баҫтырып киткәндәр, ти.

Хәлимә бер йылға буйына барып сыҡҡан. Яр башында бик күп ҡаҙ үҙҙәренең бәпкәләре менән емләп йөрөй икән. Хәлимә шулар араһына барып һыйынған. Ләкин ысын ҡаҙ бәпкәләре был ят бәпкәне суҡырға тотонғандар. Хәлимә улар менән талашып тормаған, ситләшкән дә уларҙан ары китеп барған. Шунан ул йылғаға төшөп алған да йөҙөп киткән. Ә бәпкәгә әүерелгән теге сихырлы таштар, Хәлимәне күҙҙән юғалтып, ситлек янына кире ҡайтҡандар ҙа ҡайтанан аҡ ташҡа әйләнгәндәр, ти.

Хәлимә генә үҙенең әүәлге хәленә ҡайта алмаған, ғүмергә ҡаҙ булып ҡалған, ти. Уның баяғы ысын ҡаҙ бәпкәләре суҡыған ерҙәре ала-ҡола булып ҡалған. Ә үҙе оло ҡаҙ булып, оя баҫҡас, бәпкәләре лә уның ала булып яралған икән. Бына шунан башлап донъяла ала ҡаҙҙар үрсеп киткән, имеш, ти.

## 15. Күркә

Борон-борон заманда күркә әлеге ҡиәфәтендә булмаған, ти. Ул ҡәҙимге тауыҡ һымаҡ булған. Улар кеүек ем эҙләгән, йомортҡа һалған да ҡытаҡлаған.

Бер ваҡыт хужабикә күркәне барлыҡ ҡоштарға башлыҡ итеп үрләткән.

Тәүҙәрәк күркә үҙен башҡалар менән тиң тотҡан, тора-бара ул: «Башлыҡ улай булырға тейеш түгел. Хәҙер сүплектә тибенергә, йомортҡа һалғанда ҡытаҡларға ярамай», – тип уйлаған. Шулай эшләгән дә. Әтәс тә, тауыҡ та, хужабикә лә быға әллә ни иғтибар итмәгән. «Башлыҡ бит, ҡытаҡларға ваҡыты юҡтыр», – тип кенә ҡуйғандар.

Күркә ҡиәфәтен дә үҙгәрткән. Элеккегә ҡарағанда ла эрерәк баҫып, башын юғары тотоп, тәкәббер йөрөгән. Тауыҡтар уға һоҡланғандар. Хужабикә лә бойҙайҙы, ебетелгән икмәкте күркә яғына мулыраҡ һипкән. Ҡаҙ-өйрәк иһә, башлыҡ ашап туйып китмәйенсә, емгә килергә тартынған.

Шулай ҡайғыһыҙ ғына йәшәп ятҡанда, күркә әтәстең бүтән тауыҡтар янында ғына йөрөгәнен шәйләп ала. Әтәс тибенеп ем тапһа ла, күркәне түгел, тауыҡтарын саҡыра икән. Был хәл күркәгә һис тә оҡшамаған, уның эсе бошҡан. «Сыбарбикәнең минән нимәһе артыҡ?» – тип үрһәләнгән ул. Шунан тауыҡты мыҫҡыллы ғына күҙәтергә тотонған. Сыбарбикәнең ҡаурыйҙары төрлө-төрлө төҫтә булып, ҡояшта йылҡылдап тора икән дә! Сибәр ҙә шул был Сыбарбикә! Етмәһә, атлауы ла харап килешле, холҡо ла ипле. Етмәһә, йыл һайын себештәр ҙә баҫып сығара икән.

Быларҙы белгәс, күркәнең йөрәге тибеүҙән туҡтай яҙған.

Күркә көндәр буйы көҙгөгә ҡарап, битенә төрлө кершәндәр һөртөп, еҫле майҙар һылап ултыра башлаған. Ул башлыҡ икәнен дә онотҡан. Көндәр буйы үҙен генә ҡарау менән мәшғүл булған.

Күркәгә хужабикәнең йәне көйгән дә, тауыктарға башлык итеп әтәсте ҡуйған.

«Мин – башлыҡ» тип йөрөгән күркәгә был үлем менән бер булған. Асыуынан ул ҡабарған, ҡыҙарған, ти. Ҡасандыр шып-шыма булған һылыу йөҙөнә, матур муйынына ҡып-ҡыҙыл муҡсалар ҡалҡҡан. Ә инде Сыбарбикәнең ҡыҙғылт ҡаурыйҙарын йәки әтәстең тырышып-тырышып ем эҙләүен күрһә, күркәнең әле һаман асыуынан ошо тоҡсайсыҡтары яман ҡабарып китә икән.

## 16. Әтәс нимә тип ҡысҡыра?

Борон-борон заманда, әтәс әфисәр, тауыҡ таналай саҡта йәшәгән, ти, бер әтәс. Уның ҡойроғо бик матур булған, ти.

Бер ваҡыт тауыҡты ҡунаҡҡа саҡырғандар. Борон ҡунаҡҡа саҡырылған саҡта: «Күрше ебәрһә, барырмын», – тип әйтер булғандар. Тауыҡ әтәс күршеһенә китә:

– Әтәс ағай, мин ҡунаҡҡа барам. Бынауы йүнһеҙ ҡойроҡ менән башҡалар күҙенә ни хәл күренмәк кәрәк? Ҡойроғоңдо биреп тор әле, – ти.

– Ҡойроҡто нисек бирәйем мин? – ти әтәс.

– Ҡырҡ та бир. Һиңә яңыһы үҫеп сығыр әле, – ти.

Күрше хаҡы – тәңре хаҡы. Шулай тигән боронғолар. Әтәс тауыҡтың һүҙен йыҡмаған, ҡойроғон ҡырҡҡан да биргән.

Тауыҡ ҡунаҡҡа киткән матур ҡойроҡто тағып. Китеүен киткән, ҡайтыуҙы онотҡан. Әтәс бахыр артҡа боролоп ҡарай ҙа ҡарай. Ҡараған һайын йәне әсей. Юҡҡа биргәнмен, тип үкенеп ҡуя. Түҙмәй:

– Ҡойроғомдо алып ки-и-ил! – тип ҡысҡыра башлай. Ҡойма башына баҫып та ҡысҡыра. Ҡапҡа башына менеп тә ҡысҡырып ҡарай. Ҡыйыҡ башынан да:

– Алып ки-и-ил! – ти. Уңға ла ҡысҡыра, ҡағынып-ҡағынып йәнә ҡысҡыра:

– Ҡойроғомдо алып ки-и-ил!

Көндөҙ ҙә ҡысҡыра, төнөн дә яр һала. Матур ҡойроғо көндә төшөнә инә икән быньң. Төшөнә инә лә, уянып китеп йәнә ҡысҡыра икән:

– Ҡой-ро-ғом-до кил-тер-ә һа-а-ал!

Әтәс шулай ҡысҡыра торған. Әкренләп өр-яңы ҡойроҡ үҫә торған. Бына бер көндө элеккеһенән дә матурыраҡ булып үҫеп еткән ҡойроғо. Тик бер ғәҙәт иткәс, әтәс көндөҙөн дә, уянған һайын төнөн дә ҡысҡырыуын белгән:

– Ҡой-ро-ғом-до алып ки-и-ил!

Шул беҙгә:

– Ки-ки-рик-ү-ү-үк! – тигән кеүек ишетелә икән, ти.

## 17. Тауыҡ менән төйлөгән

Бер заман тауыҡ менән төйлөгән дуҫлашып китте, ти. Төйлөгән тауыҡҡа ҡунаҡҡа ла йөрөй башлай. Килгән һайын ул, донъяһын онотоп, гел генә һауала осоп йөрөүҙең рәхәтлеген һөйләй торған була. Бынан күрмәксе тауыҡта ла осоп йөрөү дәрте ҡуҙғалып китте, ти. Әммә ул, күпме генә тырышмаһын, үҙе ҡуна торған ситәндән дә бейек оса алмай.

Быны күреп торған төйлөгән тауыҡты осорға үҙе өйрәтмәк булды, ти. Шулай ҙа барыбер эш сыҡмай. Төйлөгән тауыҡты осорға ғына өйрәтә башлағайны, араға әтәс килеп ҡыҫылып, янъял ҡубып китте лә, тауыҡ менән төйлөгәндең дуҫлығы бөттө лә ҡуйҙы, ти. Ни өсөн тиһәң, тауыҡ менән дуҫлашҡанға тиклем, төйлөгән муйынына бик матур муйынса кейеп, башына шундай уҡ аҫыл тараҡ ҡаҙап йөрөр булған. Әтәстең быны шуға күҙе төшкән икән. «Ул тараҡ ни эшләп минең башта түгел дә, шул муйынса ни эшләп тауыҡ муйынында түгел?» – тип уйлай икән әтәс. Бына шул арҡала ике арала янъял сығып китеп, тауыҡ осорға өйрәнә алмай ҡалған да инде.

Ә ул янъял бына нисек сығып киткән. Берҙән-бер көндө (был төйлөгәндең һуңғы тапҡыр ҡунаҡҡа килеүе булған да инде) әтәс менән тауыҡ төйлөгәнде тилебәрән орлоғо менән һыйлаған. Шунан төйлөгән бөтөнләй иҫереп йығылды, ти. Шул саҡта әтәс уның тарағын алып, бик һәйбәтләп кенә үҙ башына ҡаҙап ҡуйҙы, ә муйынсаһын алып, тауыҡ муйынына кейҙерҙе, ти. Төйлөгән шулай иҫһеҙ булып ятып ҡалды, ә ҡупшыланып алған әтәс, башын юғары күтәрә биреберәк, күрҙегеҙме ағайығыҙҙы тигән һымаҡ, яҡ-яғына ҡарана-ҡарана, күрше-күлән араһына йөрөргә сығып китте, ти.

Төйлөгән иҫенә килеп торһа, муйынса ла, тараҡ та юҡ, ти. Шунан ул яҡында ғына йөрөп ятҡан тауыҡты күреп:

– Бир минең муйынсамды! – тип ҡысҡыра.

Ә теге бирмәй ҙә бирмәй икән. Ни өсөн тиһәң, муйынса тауыҡҡа, берҙән, бик килешеп тора, икенсенән, кеше әйберен һорамай алырға ярамауын бөтөнләй белмәй ҙә икән был тауыҡ мейеле ҡош! Бына шунда инде ике арала ыҙғыш-талаш китте, янъял ҡупты, ти.

Төйлөгән үҙенең котһоҙ тырнаҡтары менән тауыҡ муйынынан муйынсаны тартып алырға иткәйне, муйынсаның ебе өҙөлөп, мәрйендәре сәселде лә китте, ти. Шунан төйлөгән бөтөнләй асыуланып:

– Ярар, беҙҙең дуҫлыҡтың бөтөүе шулдыр инде. Мин һинә күрһәтермен әле күрмәгәнеңде! – тип янаны ла осоп китте, ти.

Ә был ваҡытта әтәс, төйлөгәндең тарағын кикрек итеп, ауылдың теге осонда маһайып йөрөп ҡалды, ти.

Бына бер ваҡыт тауыҡ оя баҫып, себеш сығара. Бер көндө ул үҙенең себештәре менән сүплектә тибенеп йөрөһә, һауала төйлө-

...индең талғын ғына осоп йөрөүен күреп ҡала. «Минең иҫке дуҫ ...рәтләнеп осоп йөрөй икән. Муйынса тураһында ла бөтәнләй ...онотҡандыр әле ул», — тип уйлап ҡуйҙы, ти, тауыҡ.

Онотор һиңә төйлөгән! Ул шунда уҡ ергә шыҡыйып килеп ...ынһы лә бер себеште тырнаҡтары менән эләктереп алып, яңынан ...ғарыға күтәрелеп тә китә.

Тауыҡ менән әтәстән төйлөгән үҙенең үсен ана шулай ала баш... Шунан бирле себештәрҙе берәм-берәм алып китеп кенә тора ...ған был ҡәһәр һуҡҡырың.

Тауыҡ ҡайғыға һабышты, ти. Аптырағас-йөҙәгәс, ул, йылдың...ында гел генә ҡабатланып торған был бәләнән ҡотолор өсөн, ...йләгәнгә муйынсаһын ҡайтарып бирмәк була. Үҙе артынан се...тәрен эйәртеп, әтәс менән бергә төйлөгән муйынсаһының сәсе...п юғалып бөткән мәрйендәрен эҙләп, тиреҫлектә, сүп-сар ара...ында тибенеп-тибенеп ҡаҙынырға тотоналар. Эй эҙләнәләр, эй ...ләнәләр, ти, былар, тик бер генә мәрйен дә таба алмайҙар.

Берҙән-бер көндө әтәс төйлөгән муйынсаһының бер мәрйенен ...быуын тапҡайны ла, бер ҙә иҫе китмәне, ти, уның быға. Был ...ҡта тауыҡҡа ла әйтеп торманы, ти. Төкөрөп бирҙе әтәс һинең ...уйынса бөртөгөңә! Башында шундай кикрекләнеп торған аҫыл ...рак була тороп, ҡуҡыр әтәс муйынса бөртөгө эҙләп йөрөймө һуң!

Э бахыр тауыҡ ана шул сәселеп китеп юғалған мәрйендәрҙе ...е булһа тибенә-тибенә эҙләп йөрөй икән.

## 18. Ел, ут, һыу, тупраҡ

Донъя барлыҡҡа килгәндә һәр нәмә лә үҙ ыңғайына йөрөгән ...ған.

Бер ваҡыт хужа елгә килгән дә әйткән: «Эй, һин, ел, ниңә тик...малға уйнап-елеп йөрөйһөң?» Ел уйланып торған да һораған: «...мин ни эшләйем һуң, минең башҡа эшем юҡ», — тигән. Хужа ...а: «Һин кешеләргә файҙа эшлә, үләндәрҙең орлоҡтарын бер ...рындан икенсе урынға тарат, боҙолоп ятҡан әйберҙәрҙең еҫен ...ып кит», — тигән. Ел әйткән: «Эйе шул, мин донъяға килгәс, ...шегә файҙалы булырға тейешмен», — тигән, шунан һуң ул тәби...ткә яраҡлы булып ҡалған.

Хужа утҡа килгән: «Эй, ут, ниңә һин гел кешеләргә зыян ...лтерәһең, гел генә донъя үртәйһең, һин берәүгә лә буйһонмай...һыңмы ни?» — тип һораған. Э ут уға: «Мин ни теләһәм, шуны ...шләйем», — тигән. Хужа уға: «Һин донъяға килгәс, кешеләргә файҙа ит, һинең үлемең булып һыу торор, ҡеүәтең ел булыр», — ...игән. Шулай итеп ут та тәбиғәткә буйһонған.

Хужа бабай һыуға килгән: «Эй, һыу, ни эшләп ағаһың, ниңә ...биғәткә, кешеләргә буйһонмайһың?» — тип һораған. «Һин тәби...ткә буйһон, шикләнмә, бар нәмәне ҡабул ит, таҙарт», — тигән.

Шулай итеп һыу ҙа тәбиғәткә буйһонған. Һыуҙы кешеләр кәрәк ерҙә быуып ҡуйғандар, кәрәк ерҙә ағыҙып ебәргәндәр.

Ул тупраҡҡа килгән: «Әй, тупраҡ, ни эш ҡылаһың?» – тип һораған. Тупраҡ: «Минең эшем бик күп, минең өҫтөмдә балаларым йөрөй, мин әсә хаҡындамын, минең балаларым бик күп. Күкрәгемде ярып бөтә кеше изгелек күрә минән», – тигән.

Шулай итеп тупраҡ ер-әсә булып ҡалған.

## 19. Ләйсән ямғыры

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Уларҙың байлыҡтары булмаған, берҙән-бер Ләйсән исемле ҡыҙҙары ғына булған, ти. Көндәр шулай бер-бер артлы үткән дә үткән. Әбей менән Ләйсән донъя көткән, ә бабай һунарға йөрөгән.

Яҡшы ғына йәшәп ятҡанда, ҡаты ауырып, әбей үлеп китә. Быға Ләйсән менән бабай бик ҡайғыралар, илашалар. Күҙ йәше менән донъяны теүәлләп булмай тигән уйға килгән бабай. Ул донъя гиҙеп сығып китә. Өс-дүрт көн үткәс, бабай өйгә бер әбей менән ҡайтып инә. Быға Ләйсән бик шатлана. Ләкин, йәшәй биргәс, донъя үҙенекен күрһәтә. Ләйсәнгә көн булмай башлай. Иң ауыр эштәрҙе Ләйсәнгә башҡарырға тура килә. Ләйсән көнө-төнө арыу-талыуҙы белмәй эшләй.

Бер көндө кис Ләйсән болоттарға ҡарап ултыра ла: «Әх, һеҙ, болоттар, мине үҙегеҙгә алһағыҙсы, ергә йылы, шифалы ямғыр булып яуыр инем», – тигән. Болоттар Ләйсәндең ялбарып һорағанын ишетәләр ҙә Ләйсәнде үҙҙәренә алып китәләр. Ләйсән ерҙе ныҡ һағына. Шул көндән алып яҙ етһә, Ләйсән үҙенең йылы, шифалы тамсыларын ер өҫтөнә һибә икән.

## 20. Дүрт һылыу

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, Ай исемле ҡарт. Булған, ти, уның береһенән-береһе һылыу дүрт ҡыҙы: Яҙһылыу, Йәйһылыу, Көҙһылыу, Ҡарһылыу, йәнә уларҙан өлкән Ел исемле улы. Ҡояш әсәләре балаларын матур итеп тәрбиәләп үҫтергән, ти.

Шулай уйнай-көлә ҡыҙҙар үҫеп буйға еткән. Әсәләре уларға матур-матур күлдәктәр алып кейҙергән: Йәйһылыуға – йәшел бәрхәт, Көҙһылыуға – алтын, Ҡарһылыуға – аҡ ебәк, Яҙһылыуға – шау сәскә. Күлдәктәрҙе өләшеп биргәс, ҡыҙҙар бер-береһенең күлдәктәренә көнләшеп талаша башлайҙар, ыҙғышалар, үсегешеп бөтәләр.

Шул замандан бирле улар ата-әсәләренә бер-бер артлы ғына килә башлайҙар, тик Ел ағалары ғына туғандарының хәлдәрен белешеп йөрөй.

## 21. Бүләк кемгә?

Бер мәл ҡояш йылдың дүрт миҙгелен – көҙҙө, ҡышты, яҙҙы һәм йәйҙе үҙенә саҡырып алған.

Һеҙҙең ҡайһығыҙ матурыраҡ, ҡайһығыҙ эштә батырыраҡ? Шуға бүләк бирәм, – тигән. Ә бүләк бик затлы икән – ус тултырып йондоҙ бирергә уйлаған ҡояш. Һүҙҙе көҙ башлай:

Үҙегеҙ яҡшы беләһегеҙ, мин бөтә баҫыуҙарҙың уңышын йыйынам, бөтә донъяны алтынға күмдем. Ҡоштарҙы йылы яҡҡа оҙаттым, балаларҙы мәктәпкә йыйҙым. Бүләк миңә булырға тейеш!

Әллә минең эшем аҙмы? – тигән яҙ. – Миң бөтә ҡарҙарҙы ирееттем. Баҫыуҙарға иген сәстем, ағастарҙы япраҡ ярҙырҙым, һабындары сәскәгә күмдем. Арала иң матуры ла, иң эшлеклеһе лә мин! – тигән ул.

Эй, әй, – тигән йәй, – мине тыңлағыҙ әле. Мин донъяны йәшеллеккә күмәм, сәскәләр үҫтерәм, игендәрҙе өлгөртәм, емештәрҙе өлгөрәм. Әллә мин иң матурығыҙ түгелме?

Артыҡ күп түгел минең эш, – ти тыйнаҡ ҡына ҡыш. – Мин ерҙе ял иттерәм, киләһе уңыш өсөн ҡарҙар ташыйым, донъяны ап-аҡҡа буяйым, балаларҙы сана, саңғы шыуырға саҡырам. Мин бө йәмһеҙ түгел, минең шыршыларымды, ҡар бөртөктәремде, ҡамыҡ бәҫтәремде яраталар.

Тыңлап-тыңлап торған да ҡояш, бүләкте был дүртәүҙең берәһенә лә бирә алмаған. Йондоҙҙарҙы ул күккә һипкәс: «Ана, барығыҙға ла!» – тигән. Йондоҙҙарҙы йылдың бер миҙгеле лә үҙенә ала алмаған. Улар яҙ ҙа, йәй ҙә, көҙ ҙә, ҡыш та балҡып яналар.

## 22. Кесерткән ниңә уҫал?

Борон-борон заманда кесерткән сәскә ата торған үлән булған, ти. Ә сәскәләре иҫ киткес матур, нәфис, хатта розаныҡынан да гүзәлерәк икән. Ул бөтә урманды, өй алдарын, ҡойма буйҙарын йәмләп ултырған. Тик шул матурлығы арҡаһында кесерткәнгә күп ...ифа сигергә, ыҙаларға тура килгән. Йүнләп сәскә атырға ла өлгөрмәй, кешеләр, бала-саға өҙә, шуға нык йәне көйгән. Берҙән-бер көндө ул былай тигән:

– Эй, кешеләр! Матурлыҡты һаҡламайһығыҙ, ҡәҙерен белмәйһегеҙ икән, бынан һуң гүзәл сәскәләремде бер ҡасан да күрә алмаҫһығыҙ. Мин бөгөндән башлап матур сәскә атыуҙан туҡтайым.

Шул ваҡыттан бирле кесерткән сәскә атмай башлаған, йәмһеҙ, [illegible] төҫ алған. Үҙе ошо ҡиәфәте өсөн кешеләрҙән мәңге үс ала. Әгәр улар яҡын килһә, әрнеткәнсе саға ла ҡуя икән.

## 23. Бәпембә балалары

Борон-борон заманда ҡуйы урман аҡланында йәшәгән, ти, бер бәпембә. Уның бер нисә улы, ҡыҙы булған. Бәләкәй бәпембәләр үҙҙәре янындағы ағастарҙан, үләндәрҙән башҡа донъяны белмәгәндәр. Шуға күрә ағастар кеүек бейек булғылары, ағас башына менеп бөтә донъяны күргеләре килгән. Уларҙың теләктәрен белгәс, әсәләре парашюттар алып биргән дә, әйткән:

– Тик ағастарҙан бейек күтәрелмәгеҙ, юҡһа ел һеҙҙе осортоп алып китер.

Донъя күрергә теләгән бәпембә балалары ағас башында ғына туҡтап ҡалмайынса, юғарыға уҡ күтәрелгәндәр ҙә көслө ел ыңғайына төрлөһө төрлө яҡтарға осоп киткәндәр.

Бер бәпембә малайы Ҡаф тауы артына барып төшкән, икенсеһе йылғаға төшөп, һыу ыңғайына сәйәхәт иткән, өсөнсөһө эшләпәһе менән йылғанан ташып сәскәләргә һыу ҡойған малайҙың сәстәре араһына ултырған. Ҡалғандары ла төрлө-төрлө юл менән таралышып бөткән. Күптәре әллә күпме батшалыҡтарҙы үтеп, Бәпембә ырыуынан берәү ҙә йәшәмәгән илгә килеп сыҡҡан. Уларҙың барыһы ла тыуған яҡтарына ҡайтыр юлды белмәйенсә, төшкән урындарында тороп ҡалғандар. Бәпембәләр бына шулай бөтә донъяға таралғандар, ти.

## 24. Йондоҙ сәскә

Борон-борон заманда булған был хәл. Ғаиләлә ҡыуаныс, беренсе бала булып Йондоҙ исемле ҡыҙ тыуа. Ата-әсәнең бәхетенең сиге булмай. Шулай бер нисә йыл бәхетле тормош үтеп тә китә. Атай кеше һунарға йөрөй, ә әсәй менән ҡыҙ йыл әйләнәһенә өй эштәре менән булалар, йәйҙәрен еләк-емешкә йөрөйҙәр.

Шулай бер көндө Йондоҙ яңғыҙы ғына еләккә сығып китә лә аҙаша. Өйгә юлды таба алмайынса оҙаҡ ҡаңғырып йөрөй торғас, Йондоҙ бер күл ситенә килеп сыға. Был аждаһалы күл була. Ҡыҙ ашамай-эсмәй көнө буйы йөрөп арыған була, шуға күрә күл ситендә ҡамыштар араһына ятып йоҡлап китә. Ул көслө тауышҡа уянып китә лә аптырап ҡала: һыу аҫты донъяһына килеп эләккән, имеш. Был һыу аҫты донъяһының хужаһы – аждаһа – күл буйына аҙашып килеп сыҡҡан ҡыҙҙарҙы үҙенә кәләшлеккә, һыу аҫтына урлап алып китә икән, ә был тотҡонлоҡтан бер ҡыҙ ҙа ысҡына алмай.

Кис булһа ғына ҡыҙҙар күл өҫтөнә сәскә булып ҡалҡып сығалар, ә таң беленгәс, кире һыу аҫтына китеп юҡ булалар. Әле лә был күлдә төнөн сәскә ҡиәфәтендәге ҡыҙҙарҙы – томбойоҡтарҙы, улар араһында Йондоҙҙо ла күреп була, имеш.

## 25. Ағастар үҙҙәренә нисек батша һайлаған?

Борон-борон заманда ағастар үҙҙәренә батша һайларға булған, ти. Һыйылышып үҙ араларында һайлау үткәргәндәр, ти. Бер-бере-һен маҡтағандар, ти, яманлағандар, ти. Батша итеп үҙҙәренә топ-лап, оҙон буйлы, йәйен-ҡышын йәшел булған ҡарағайҙы һайлаған-дар, ти.

Һыйында ерек ағасы уҫаҡ ағасына ҡаршы һүҙ әйткән, ти. Шу-ның өсөн уҫаҡ еректе: «Төбөң һыуҙан сыҡмаһын, башың ҡыуҙан сыҡмаһын», — тип ҡарғаған, ти. Шул замандан бирле ерек ағасы һыу буйында ғына үҫә, ә баш осо ҡыуара, ти.

## 26. Ҡоралай менән алмағас

Борон-борон заманда бер ҡоралай, бәрәсләр мәле еткәс, ҡара-ғайға барған да:

— Әй, ҡарағай, төбөңдә бәрәсләргә рөхсәт ит әле? — тип һора-ған. Ҡарағай:

— Юҡ, бында бәрәсләмә: тубырсығым төшһә, бәлән булыр, — ти-гән.

— Әй, йәйен-ҡышын бер төҫлө булып ултырғыры! — тип, ҡора-лай ҡарағайҙы ҡарғай-ҡарғай, ары киткән. Шунан бирле ҡарағай йәйен дә, ҡышын да бер төҫлө — йәшел булып ултыра икән.

Ҡоралай, ҡайынға барып:

— Һинең төбөңдә бәрәсләйемсе? — тигән.

— Юҡ, япрағым төшһә, бәләң булыр! — тигән ҡайын.

— Япрағың быуға быуланғыры, утҡа үртәлгере! — тип ҡарғап киткән ҡоралай ҡайынды. Ҡайын япрағының, миндек булып мун-сала быуға быуланыуы, шунан утҡа ташланып үртәлеүе бына шунан башланған, ти.

Ҡоралай, ереккә барып:

— Һинең төбөңдә бәрәсләйемсе? — тигән.

— Юҡ, япрағым төшһә, бәләң булыр, бүтән ерҙә бәрәслә, — тип ҡыуып биргән ерек.

— Башыңдан ҡыуың, төбөңдән һыуың китмәгере! — тип ҡарғап киткән ҡоралай. Еректең башы ҡыу, төбө һыу булып ултырыуы бына шунан ҡалған икән.

Ҡарағай ҙа, ҡайын менән ерек тә төптәрендә бәрәсләргә рөхсәт итмәгәс, ҡоралай алмағасҡа барған.

— Һинең төбөңдә бәрәсләйемсе? — тип үтенгән.

— Бәрәсләй бир әйҙә! — тигән алмағас.

Ҡоралай бәрәсләгән. Шунан ул, алмағасҡа рәхмәт уҡый-[illegible]й:

Алмаларың ҡыҙарып бешһен,
Тәмһөйәрҙең күҙе төшһөн.
Кешеләрҙе ҡаратыр булһын,
Мәңгелеккә яратыр булһын, –

тип һамаҡлаған.

Шунан бирле, ҡоралай арҡаһында, алмағас кешеләргә үҙе ҡыҙыл, үҙе татлы алма бирә башланы, ә бара торғас, ҡырағайлығын ташлап, бөтөнләйгә ауыл баҡсаһына күсеп китте, ти. Бәрәсләр ваҡыты еткәндә, ҡоралай ҙа шул алма төбөнә барып бәрәсләр булған. Шулай йөрөй торгас, ул да, үҙенең ҡоралайлығын ташлап, йорт кәзәһе булып киткән, ти.

## 27. Шыршы менән тумыртҡа

Урман аҡланында ғына ҡарт шыршы үҫеп ултырған, бик тә һөйкөмлө булған ул. Үҙе йәйге көндәрҙе бик яратҡан: көн йылы, тирә-яҡ йәмле, янында бала-саға уйнай. Шыршы уйындарҙы һоҡланып күҙәткән, йырҙар тыңлаған.

Йәйге көндәр үтеп, һалҡын көҙ килгәс, шыршы янында балалар күренмәй башлаған. Шыршыға яманһыу булып киткән.

Яңғыҙлыҡтан һағышлана торғас, шыршы йоҡлап киткән дә, матур төш күргән. Имеш, йәй булған да, ҡояш нурҙарын бөркә, ҡуйы ботаҡтар араһында бөркөлгән хуш еҫтән баш әйләнерлек, береһенән-береһе матур күбәләктәр оса...

Шыршы ныҡ ауыртыуҙан уянып китә. Кемдер бик ҡаты итеп унық олононан туҡылдата икән.

– Кем ул? – тип ҡырыҫ ҡына һорай шыршы.

– Мин! – Түбәндә бер ҡош күренә.

– Һинме ни, тумыртҡа?

– Ҡара әле, шыршы, һине бөжәктәр ныҡ ярата икән, – ти тумыртҡа, шыршының һорауына иғтибар итмәй.

– Э һинең кәйеф шәптән түгел, дуҫҡай. Ни булды? – ти шыршы.

– Бәхетһеҙлеккә дусар булдым, – ти тумыртҡа. – Кешеләр мин йәшәгән ҡоро ағасты ҡырҡып ауҙарҙылар ҙа яндырҙылар. Мин саҡ ҡасып ҡотолдом. Хәҙер ҡайҙа йәшәрмен, белмәйем.

– Бөтөрөнмә әле шул тиклем, рәте табылыр, – ти шыршы.

Шул мәл эргәлә генә ағымлы тауыш ишетелә. Дуҫтар боролоп ҡараһа, эргәләрендә генә ҡар бөртөгө оса икән.

– Тумыртҡаны бөтә ағастар ҙа ярата инде, – ти ҡар бөртөгө, тик һүҙен тамамлай алмай, ireп тә бөтә.

Уның фекер башы шыршының күңеленә хуш килә.

– Ҡар бөртөгө хаҡлы, – ти шыршы. – Әйҙә, дуҫҡай, миндә үҙеңә оя ҡор, бергә йәшәрбеҙ.

Шунан башлап шыршы менән тумыртҡа бергә ғүмер кисерә [illegible]. Ҡош ағасты зарарлы бөжәктәрҙән һаҡлай, ә шыршы уны [illegible] елдәрҙән, һалҡындарҙан ҡурсалай, ти.

## 28. Балыҡсы

Беҙҙең ауыл Байғужа
Балыҡ һатыуы итә.
Ҡышын-йәйен һис тә ҡалмай
Иртүк баҙарға китә.
Үҙе, бик бай булмаһа ла,
Яҡшы тереклек итә.
Ҡарсыҡ менән Байғужаға
Балыҡ файҙаһы етә.
Бер көн юлда барғанда,
Бер үлгән төлкө тапҡан.
Шул төлкөнө йөгөнә һалып,
Кире ауылға ҡайтҡан.
Ҡайтып керә йортона,
Күрә: мейестә ут яна.
Башындағы малахайын
Алып уҡ утҡа ата.
Ҡарсығы, быны күргәс,
Тотҡан ҡарттың ҡулынан:
— Уны ниҙә мейескә аттың,
Дәхи ҡолағың туңған?
— Сығып ҡара санаға —
Булыр төлкө тиреһе.
Ҡарсыҡ сығып ҡараһа —
Булган эштең киреһе.
Төлкө үлмәгән булған,
Бәлки, бер хәйлә ҡорған.
Ҡарттың балыҡтарын ҡойоп,
Үҙе лә төшөп ҡалған.

## 29. Балыҡсы менән төлкө

(Текст архивтағыса бирелә, йәйә эсендә әкиәтте ҡағыҙға төшөрөүсенең асыҡлауҙары, квадрат йәйә эсендә — беҙҙеке — *Х. Г.*)

Бер ҡарт ҡармаҡсы, балыҡсы, булған, ти. Шунан ул ҡарт ҡармаҡтан ҡайтып утырғанда [барғанда] балыҡты тәртнәгә һалып алған, ти. Юлда бер төлкө тап була. Төлкө үлгән һыман [һымаҡ] булып ята икән. Ҡарт ҡармаҡсы был төлкөнө һалып алған... шә-нән [шунан], иҫке ҡолаҡсыны булған икән балыҡсының (ҡолаҡ-

сыны иҫке булған). Ҡарт балыҡсы: «Инде төлкөнө таптым, яңы ғ[ҡ]олаҡсын шит итәм [тегәм]», – ти (уйлай), уйҙана. Шул тәртнәләге балыҡты теге төлкө юл буйына таштан утыра [ташлап ултыра] икән. Үҙе үлек булып ятҡан була, ти. Балыҡсы ҡарт аттап утыра... шәнән [шунан] өйөнә барып етә лә, тәртнәне ҡарап тормай, ашығып өйгә керә лә ҡарсығына әйтә: «Һөйөнсө». [Шулай] тигән дә, ғ[ҡ]олаҡсынды мейескә утҡа таштаған [ташлаған]. Ҡарсыҡҡа әйтә: «Яңыны эшлә», – ти (яңы ҡолаҡсын эшлә, ти). Йөктө сығып ҡараһа... яңы төлкө киткән [тиреһе яңы ҡолаҡсынға булыр тигән төлкө]. Сығып ҡараһа... тәртнәләге балыҡтар ҙа юҡ. Төлкө теге ҡойолған балыҡтарҙы сүптәй [сүпләй] киткән. Юлда бер айыу тап булған. Айыу: «Әй, дуҫ! – ти, – был балыҡты ҡайҙан алдың?» – ти, төлкөнән һораша. Төлкө: «Ҡаптырып алдым, ҡармаҡ менән», – ти. Айыу: «Ҡайҙа ҡаптырҙың?» – ти. Төлкө: «Күлдә ғ[ҡ]аптырҙым», – ти. Айыу: «Әйҙә, дуҫ, мин дә ғ[ҡ]аптырам аппар [алып бар]», – ти. Төлкө: «Әйҙә, өйрәтәйем», – ти. Бик һыуыҡ көндәр икән... Бер күлгә алып барған да (бер ҡарттың ҡойоһона): «Мына [бына] шунда ҡойроғоңдо тыҡ та утыр [ултыр]. Мин әйткәс, тартып алырһың», – тигән. Айыу утырған [ултырған], инанып [ышанып] төлкөгә. Ҡойроҡ ныҡ туңғастан һуң (туңғандан һуң) төлкө тау башына сыҡты ла (менде), ти, әлеге айыуға ҡысҡыра: «Әйҙә, әләккән инде, тор! Сыҡ!» – тигәс, айыу тороп китергә итһә, (айыу ҡойроғон туңдырып ултырған), ҡойроғо өҙөлөп сыҡҡан, ти. Төлкө ҡат кури [һуңғы ике һүҙҙең мәғәнәһен асыҡлай алманыҡ] һаунаҡтай (аунай) биреп айыуҙан көлә икән. Яр башында, үҙе алыҫта, ти, төлкө (төлкө үҙе айыуҙан алыҫта, яр башында, көлөп тора, ти). Айыу төлкөгә асыуланып: «Мин ҡасан да һине әләктерермен!» – ти икән. Төлкө ҡасҡан, күренмәгән. Айыуҙын ҡойроҡ (ҡойроғо) күл төбөндә ҡалған, ти. Айыу ҡойроҡһоҙ яралған кеүек булып ҡалған, ти. Төлкө бик шаян булған. Балыҡсы яңы төлкөгә инанып, иҫкеһен утҡа яҡҡан. [Балыҡсы, үлгән төлкөнөң тиреһен һыҙырып алып, шунан яңы ҡолаҡсын тегермен тип, ашығып, иҫкеһен мейескә утҡа ырғытҡан, йәғни яңыға өмөт итеп, иҫкеһенән дә ҡолаҡ ҡаҡҡан.]

## 30. Төлкө, бүре, бүҙәнә

Борон-борон заманда төлкө, бүре, бүҙәнә үҙ-ара дуҫлашып алғандар. Бер көндө бүре төлкөгә:

– Дуҫ, зинһар тамағымды туйҙыр әле, – тигән.

– Ярай, туйҙырырмын, – тигән төлкө.

Был ваҡытта бер балыҡсы балыҡтан ҡайтып килә икән. Төлкө юлға сығып ятҡан. Балыҡсы төлкөнө санаһына, шундағы балыҡ өҫтөнә һалып алып киткән. Ҡарт атын ҡыуа-ҡыуа ҡайта, төлкө

...ыктарҙы берәм-берәм юлға ырғытып бара, ә бүре уларҙы ашап ... икән. Балыктарҙы ырғытып бөткәс, төлкө сананан һикереп ... ҡалған да бүре эргәһенә килгән:

Йә, дуҫ, тамағың туйҙымы?

Туйҙы, – тигән бүре. – Балыкты ҡайҙан алдың?

Ҡойроғом менән һыуҙан тартып сығарҙым.

Әйҙә, киттек, улай булғас, һыуға.

Әйҙә.

Былар бер ауыл осондағы мәке эргәһенә килгәндәр. Төлкө бү...нең ҡойроғон мәкегә тыҡҡан.

Таң атҡансы, ҡойроғоңдо мәкенән сығараһы булма. Әйҙә, ба... күберәк әләкһен, шунан һуң ғына тартып алырһың, – тигән ... төлкө китеп барған.

Бүре ҡойроғон мәкегә тыҡҡан килеш ултыра ла ултыра икән. ...рт менән ауыл ҡатындары һыуға килгән. Бүре ҡойроғон тартып ...арай – ысҡындыра алмай: боҙға ҡуша туңған да ҡуйған, ти. ...тындар көйәнтәләре менән бүрене туҡмарға тотонған. Бүренең ...ойроғо өҙөлөп тороп ҡалған, үҙе саҡ-саҡ ҡасып ҡотолған.

Шунан бирле бүре бер үҙе генә йәшәй башлаған. Төлкө менән ...үҙәнә икәүһе бергә йөрөр булған.

Бер көндө төлкө бүҙәнәгә:

Дуҫ, мине бер көлдөр әле, – тигән.

Ярар, – тигән бүҙәнә. Төлкөнө бер ауылға алып барған. Унда ...р кеше өс бисәһе менән һоло һуғып ята икән. Бүҙәнә осоп ...арған да бер бисәнең башына ултырған. Төлкө ситтән генә ...ларҙы күҙәтеп ята икән. Ир ҡатынына:

Ҡыбырламайынса ғына тор. Хәҙер мин уны сыбағаш менән ...ып алам, бер һурпалыҡ ит булыр, – ти икән. Ҡатын тып-тын ...ына баҫып ҡарап тора, ҡымшанмай ҙа, ти. Ире сыбағаш менән ...терен һуҡҡайны, ҡатынының башы ярылды ла ҡуйҙы, ти. ... төлкө тәгәрәп ятып, эсен тырнап, шарҡылдап көлә, ти. Бүҙәнә ...нөң эргәһенә осоп барған.

Йә, дуҫ, көлөп кинәндеңме инде?

Һәй-й-й, көлдөм дә һуң, – тигән төлкө. Шунан былар кире ...ләп ҡайтып киткәндәр. Бара торғас, төлкө бүҙәнәгә:

Йә, дуҫ, көлдөрөүен көлдөрҙөң, хәҙер мине ҡурҡыт, – тигән. Бүҙәнә төлкөнөң күҙен ыҫмала менән һылаған да тағы бер ауылға ... киткән. Ауылдың уртаһына алып ингән. Эттәр һиҙеп алған... ҙа төлкөгә ташланғандар. Төлкө ҡойроғон бот араһына ҡыҫып ...ына ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла ҡасып ҡарай икән – ҡотола ...май. Эттәр тегенән бер иле ҡалмайҙар икән. Төлкөнөң сыйыл...ығы ғына килә, ти. Үҙ тауышы үҙенекенә оҡшамаған, ти. Шу... баҫтырып йөрөй торғас, эттәр төлкөнө ботарлап ташлағандар. ... бүҙәнә һыны ҡатып көлә, ти.

## 31. Төлкө менән бүре

Бер ваҡыт бүре төлкөнән:

– Нимә ашап был хәтле һимерҙең? – тип һораған. Төлкө уға:

– Күл буйындағы мал-тыуар менән туҡланам, – тип яуап биргән.

– Ул малдарҙы нисек тотаһың? – тип һораған ҡабаттан бүре. Төлкө:

– Ҡамыш араһына барып ят та, өҫтөңә шатырлап килеп менмәйенсә, торма. Ул шатырлап килер, яныңа килгәс кенә тотоп ал, – тигән. Бүре төлкө өйрәткәнсә эшләгән: күҙен йомоп, ҡамыш араһына барып ятҡан.

Уғаса булмай, төлкө ҡамышлыҡтың бер башына ут төртөп ебәргән. Ҡамыш шатырлап яна-яна бүрегә яҡынлашҡан, бүре һаман ятҡан. Ята торғас, йөндәре яна башлаған быныҡ. Сыҙар хәле ҡалмағас ҡына бүре күҙен асҡан. Аһа, йөндәре янып бөткән, тиреһе шатырлап яна башлаған, тирә-яҡта ут, ти.

Был арала төлкө, көлгә барып аунап, төҫөн үҙгәрткән дә яр буйына килеп ултырған. Ах та ух булып, уның янына бүре сабып килгән.

– Харап булдым, хәҙер ни эшләргә инде? – ти икән бүре.

– Ниңә харап булдың? – тип һораған төлкө.

– Бер ҡыҙыл төлкө алдап, ут төртөп китте, – тип зарланған бүре.

– Э-ә-ә, ул ҡыҙыл төлкө мине лә алдап киткәйне, – тигән булды, ти, тегенеһе.

– Инде ни эшләйем икән? – тигән бүре.

– Һе, аптырап тораһың тағы. Боҙға барып аунаҡла! – тип аҡыл өйрәткән төлкө.

Бүре боҙға барған да аунаҡлай башлаған. Уның ите боҙға йәбешеп һыҙырылып бөткән, үҙе шунда үлеп киткән, ти.

## 32. Төлкө менән бүре

(вариант)

Берҙән-бер көндө урманда төлкө менән бүре осрашҡан. Бүре төлкөгә:

– Э-ә, хәҙер мин һине тотоп ашайым бит, – тигән. Төлкө:

– Һин мине ашама. Мин ауылға барып, һиңә кәзә алып киләм, – тигән. – Һин һалам аҫтына кереп, мине көтөп ятып тор.

Бүре һалам аҫтына кереп ятҡан. Төлкө шырпы алып килгән дә, һаламға ут төрткән. Бүре янған. Бүре янғас, төлкө көлә-көлә бүренең итен ашап ултыра икән.

## 33. Алмасыуар ат

Борон-борон заманда бер бабай бар ине, ти. Уның бер алмасыуар аты бар ине, ти. Был бабай бер ваҡыт шул аты менән һуҡа һуҡалап ята ине, ти, быны ситтән айыу күреп, бабайҙың атына бик ҡыҙыҡты, ти. Айыу түҙмәй, бабайҙың янына килеп:

И, бабай! Атың бик матур икән, мине лә шулай матур итеп сыбарласы, – тине, ти. Бабай:

Ярай, сыбарлармын. Миңә тәүҙә өс бот бал килтереп бир, – тине, ти. Айыу:

Ярай, – тип, әллә ҡайҙарҙан алып бер биҙрә бал килтереп бирҙе, ти. Бабай һаман һуҡаһын һуҡалай, ти. Айыу:

Йә, сыбарла инде, – тине, ти. Бабай:

Ана, шунда бер эҫкерт һалам килтереп өй, шунан һуң бик ныҡлы арҡандар алып кил, – тине, ти.

Айыу: «Был эш була», – тип, һөйөнә-һөйөнә бер эҫкерт һалам ташып, арҡан алып килде, ти. Шунан бабай айыуҙы һалам янына алып килде лә, ти, яткырып айыуҙың дүрт аяғын да бик ныҡ бәйләне, ти. Шунан һуҡа тимерен алып килде лә, ти, һаламға ут төрттө, ти. Һалам бик ҡаты яна башлағас, бабай һуҡа тимерен утҡа һалып ут кеүек ҡыҙҙырҙы, ти. Шул ҡыҙыу тимерҙе алып, айыуҙың өҫтөндә йөрөтә башланы, ти. Йөндәре көйә башлағас, айыу аҡыра башланы, ти. Бының тауышын ишетеп, бөтөн йәнлектәр ҡасып бөттө, ти. Бабай һуҡа тимерен тағы ҡыҙҙырып, һалам янып бөткәнсе айыуҙың әле бер яғын, әле икенсе яғын сыбарлап торҙо, ти. Һалам янып бөткәс, бабай тимерен алды ла, ти, тағы һуҡаларға китте, ти. Айыу һаман шунда аҡырып ҡалды, ти. Шул ваҡыт айыу янына бер ҡуян килеп:

Айыу бабай! Нишләп ятаһың? Әллә хәлең ауырмы? – тип һораны, ти. Айыу:

Ана теге эт ҡарт сыбарланы мине, аяҡтарымды сис әле! – тип, аяҡтарын систергән. Шунан ни булғанын ҡуянға һөйләп биргән. Уйлай торғас, хәйлә ҡорған былар: ҡуян бабайҙың аты алдына барып, уның атын өркөтөп, бабайҙы ла, атын да һуҡа тимеренә киҫтереп бөтөрөргә булған. Шунан ҡуян бабайҙың аты алдына барып, бураҙнаға ятып һикергеләй башлаған. Ат бер ҙә өркмәй, ти. Бабай ҡарлауын алған да ҡуянға ырғытҡан, ти. Ҡарлау ҡуяндың ботона ғына барып тейеп, ҡуяндың ботон һындырған. Ҡуян илай-илай айыу янына барып ятҡан. Былар тағы зарланып иларға тотонғандар. Шул ваҡыт былар янына бер күгәүен килеп төшкән. Күгәүен был икәүҙең хәлен һорашып белгәс: «Һеҙ ҡайғырмағыҙ, мин уның атын дулатам, үҙен дә, атын да һуҡаһына киҫтереп бөтөрәм», – тигән. Шунан былар бик ҡыуанып ҡалғандар. Күгәүен бабай янына барып, атының ҡорһаҡ аҫтына ҡаҙалған. Ат сәбәләнә башлағас, бабай атты әйләндереп ҡарап-

тырған икән, күгәүенде күргән. Күгәүен ҡан төмәнә ҡыҙығып, бабайҙың яҡынлашҡанын да тоймаған. Бабай иләп кенә барып, күгәүенде тотоп алған. Шунан күгәүенде үлтермәй генә артына ҡырлы ҡурай ҡаҙап ебәргән. Күгәүен дә илай-илай тегеләр янына барып ятҡан. Шулай өсөһө бергә илашып ятҡанда, бабайҙың ҡортҡаһы бабайға аш килтергән. Быны тегеләр күргәндәр.

Шулай итеп, был өсәү әле булһа бабайҙың нимә эшләгәнен ҡарап яталар, ти.

## 34. Етем төлкө

Бер заман, яҙ көнө, айыу, бүре, эт, ҡуян бергә осрашҡандар. Ҡыш көнө һалҡында аҙыҡ табыуы ҡыйын булды, тип зарланышҡандар, ти, былар. Шунан айыу:

– Бергә торайыҡ, еңелерәк булыр, – тигән.

Бөтәһе лә шуға риза булып, урман эсендәге бер аҡланға бәләкәй генә өй һалғандар ҙа бергә тора башлағандар.

Шулай тороп ятҡанда, берҙән-бер көндө айыу:

– Ҡышҡа әҙерләнергә ваҡыт, дуҫтар, – тигән. – Беҙгә һыйыр һатып алырға кәрәк. Эт уны көтөп ашатыр, һөтөн һауып, ҡаймағын бешһәк, ҡышҡылыҡҡа берәр батман майыбыҙ булыр.

Бүре, эт, ҡуян айыуҙың был кәңәшен хуп күргәндәр. Шул көндө үк баҙарға барып, үҙҙәре тотоп ашаған йәнлектәрҙең тиреләрен һатҡандар ҙа шунан килгән аҡсаға һыйыр һатып алғандар.

Эт көн һайын һыйырҙы аҡланға сығарып көткән. Бүре кис менән һөтөн һауып ала торған булған. Ҡуян һыйырға яҡшыраҡ үләнле ерҙе күрһәтеп йөрөгән, айыу бөтә хужалыҡ эштәрен башҡарған.

Йәй шулай эш менән үткән. Көҙгә инде былар бер батман һары майлы булғандар.

– Был майҙы өй башына ҡыйыҡ аҫтына ҡуйырға кәрәк, – тигән айыу. – Хәҙергә майға берәү ҙә теймәһен. Ҡыш еткәс, аҙлап-аҙлап ҡына алырбыҙ ҙа майға картуф ҡурырбыҙ.

Шунан былар дүртәүләп һары май тултырылған батманды өй башына күтәреп мендергәндәр ҙә ҡыйыҡ аҫтына йәшереп ҡуйғандар.

Бер көндө кис менән былар сәй эсеп ултыралар икән, кемдер берәү тәҙрә сирткән. Ҡуянға тороп ишек асырға ҡушҡандар.

Өйгә ҡулына ҡомған тотҡан төлкө килеп ингән дә әйәлеп-бөгөлөп:

– Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле дуҫтарым! Хәйерле кис! – тигән.

Хужалар төлкөнө сәй янына саҡырғандар. Теге ултырған. Бер-ике туҫтаҡ сәйҙе эсеп алғас, төлкө ашыҡмай, бик әҙәпле ҡыланып ҡына һүҙ башлаған.

– Мин яҡты донъяла япа-яңғыҙ ҡалған үкһеҙ етеммен. Мине лә үҙегеҙҙең араға алһағыҙсы! – тигән.

Ярар, һине үзебеҙҙең араға алыу-алмау тураһында бөгөн һөйләшербеҙ, – тигән айыу. – Иртәгә яуабын алырға килерһең.

Айыу, бүре, эт, ҡуян:

Был төлкө әҙәпле генә, баҫалҡы ғына күренә. Үҙебеҙҙең янға алайыҡ әйҙә, – тигән уйға килгәндәр.

Шулай итеп, төлкө улар менән бергә йәшәй башлаған. Ул үҙен бик әҙәпле тотҡан, бөтәһененең дә һүҙен тыңлар, ни ҡушһалар, шуны эшләр булған. Айыуға, бүрегә, эткә генә түгел, хатта ҡуянға ла ярарға тырышҡан.

Көн тә үтмәй, төлкө ҡыйыҡ аҫтында бер батман май йәшерелгәнде белеп алған. Төлкө, май тиһәң, үлеп бара бит инде. Ул майҙы үҙе генә ашар өсөн хәйлә эҙләй башлаған.

Күп баш вата торғас, ул хәйләһен дә тапҡан. (Шуның өсөн дә хәйләкәр төлкө тиҙәр уны!)

Кистәрҙән бер кисте төлкө һылтау итеп, ҡапҡа ныҡ бикләнгәнме икән тип, тикшереп килергә булған. Шул ерҙә ул урамға сығып тәҙрә сиртгән дә, ят тауыш менән:

Етем төлкө өйҙәме? – тип һораған.

Өйҙә, өйҙә, хәҙер тыштан инер, – тип яуап биргәндәр уға.

– Ингәс тә әйтегеҙ уға, хәҙер үк беҙгә яңы тыуған бурһыҡ балаһына исем ҡушырға барһын!

Ярар, әйтербеҙ, – тип яуап ҡайтарғандар өйҙән.

Төлкө белмәмешкә һалышып өйгә ингән.

Төлкөкәй, яңы ғына берәү килеп һине бурһыҡ балаһына исем ҡушырға саҡырҙы, – тигән айыу.

– Улай булғас, барырға кәрәк, – тигән төлкө.

Йылдам ғына йыйынған да ул өйҙән сыҡҡан. Өйҙө бер урап әйләнгәндән һуң, һаҡлыҡ менән генә өй башына һикереп менгән дә батман тулы майҙы ашай башлаған. Туйғансы ашаған ул. Төлкө шунда ятып бер аҙ ял иткән дә өйгә кире ингән.

Йә, нимә менән һыйландылар үҙеңде? – тип һорағандар унан.

– Ҡурылған ҡаҙ, тултырылған тауыҡ, һары май менән, – тип яуап ҡайтарған да төлкө ирендәрен ялап ҡуйған.

– Ниндәй исем ҡуштың? – тип һораған эт.

– Башбала, – тип яуап ҡайтарған төлкө.

Икенсе көндө төлкө:

– Минә тағы ла исем ҡушырға барырға кәрәк, – тигән, ә үҙе тышҡа сығып, өй башына менгән дә майҙы батмандың яртыһына тиклем ашаған.

Ул өйгә кире ингәс, ҡуян унан:

– Яңы тыуған балаға ниндәй исем ҡуштың? – тип һораған.

Уртансы, – тип яуап биргән төлкө.

Өсөнсө көндө лә төлкө, хәйләһен табып, өй башына менгән. Был юлы инде майҙы бөтөргәнсе ашаған. Батманды таҙартҡансы ялаған да өйгә ингән.

Йә, ниндәй исем ҡуштың? – тип һораған унан ҡуян.

– Кинйә, – тип яуап ҡайтарған төлкө.

Ҡыш килеп еткән. Көндәрҙән бер көндө айыу, иптәштәренә ҡарап:

– Йә, дуҫҡайҙарым! Бер аҙ май алып инеп, картуф ҡурырға кәрәк, – тигән.

Иптәштәре быға шатланып:

– Ҡана, ҡурайыҡ, – тигәндәр.

– Бар, төлкө, һин бер аҙ май алып ин, – тигән айыу.

Бөтәһе лә тышҡа сыҡҡандар. Төлкө стена буйлап өй башына менә башлаған да кире ҡолап төшкән. Менә алмауына һылтау табырға тырышып:

– Бик бейек икән шул, мин унда менә алмайым, – тип зарланған. Эт төлкөгә ярҙам итергә булған. Елкәһенә баҫтырған да өй башына мендергән. Шул ерҙә түбәндә ҡалыусылар төлкөнөң сыйылдап ҡысҡырыуын ишеткәндәр:

– Бында бер ниндәй ҙә май юҡ! Буш батман ғына бар.

Ҡапыл ғына уға ерәүһе лә ышанмаған. Шул ваҡыт төлкө буш батманды түбәнгә тәгәрәтеп төшөргән. Ҡараһалар, батман ысынлап та буп-буш булып сыҡҡан.

– Был майҙы ниндәй оятһыҙы ашаған икән? – тип үкергән айыу.

– Хәҙер үк табырға кәрәк ҡараҡты!

Ҡараҡты нисек табырға, тип оҙаҡ ҡына уйлашҡандар улар. Күп уйлай торғас, айыу былай тигән:

– Ҡана, ҙур итеп ут яғайыҡ та үҙебеҙ шуны тирәләп ултырайыҡ. Майҙы кем ашаған булһа, ут ҡыҙыуынан уның эсендәге майы ирен тышҡа сығыр.

Шулай итеп, ут яғып ебәргәндәр былар.

Ут янында ултыра торғас, улар, йылыныуҙан ойоп, йоҡоға киткәндәр. Ҡыштың тәүге һалҡын көндәре булғанлыҡтан, айыу бөтәһенән дә ҡатыраҡ йоҡлаған.

Төлкө генә керпек тә ҡаҡмаған. Шул ерҙә ул үҙенең бөтә тәне буйлап май һарҡып сыға башлауын күргән. Һиҙеп ҡалһалар, миңә яҡшылыҡ булмаҫ, тип ҡурҡҡан. Эсенән сыҡҡан майҙы ҡомғанына йыйып барған, шунан уны айыу өҫтөнә илтеп ҡуйған.

Йоҡоларынан уяныи ҡараһалар, барыһы ла ҡоп-ҡоро, ә айыуҙың бөтә тәне майға мансылған, ти.

– Майҙы бына кем ашаған икән! – тип ҡысҡырып ебәргән төлкө. Шунан айыуҙы муйынынан аҫып ҡуйырға булғандар.

– Ашыҡмағыҙ! Бында ниндәй ҙә булһа хәйлә бар! – тип ҡысҡырған айыу. – Утты тағы ла ҡыҙыуыраҡ яғырға ла ҡайтанан һынап ҡарарға кәрәк.

Бөтәһе лә быға риза булған, тик төлкө генә: «Ут яғырға кәрәкмәй, былай ҙа айыу ағайға бик эҫе бит!» – тигән булып ҡаршы төшкән.

Төлкөнөң һүҙен тыңламайынса, тағы ла ут яҡҡандар ҙа бөтәһе лә уратып ултырған. Айыу, үҙенең ҡышҡы гәҙәте буйынса, тағы

...ырылдап йоҡоға киткән. Ә бүре, эт, ҡуян юрамал йоҡлағанға ...ылыштандар. Төлкөнөң тағы ла майы һарҡып сыға башлаған.

Төлкө, башҡа йәнлектәрҙең йоҡлағанын күргәс тә, тағы ла ... сыҡҡан майҙы ҡомғанына тултырып алып, айыу өҫтөнә ...һынмы! Бүре, ҡуян, эт, быны күреп кенә ҡалғандар ҙа, төл... ташланғандар:

Бына ҡайҙа икән ул ҡараҡ! Етмәһә, йыуаш ҡына бер етем ... ҡыланды!..

Был шау-шыуға айыу ҙа уянған. Уға булған хәлде түкмәй-сәс... һөйләп биргәндәр.

Мин майҙың тамсыһын да ашағаным юҡ! – тип аҡланырға ...онған төлкө.

Шул ерҙә бөтәһе лә төлкөнөң яғаһынан алып бәйләгәндәр ҙә, ... тағы ла ҡыҙыуыраҡ яғып, уны ут өҫтөндә тотҡандар.

Ә май ут өҫтөнә аға ғына биргән.

Шунан һуң улар төлкөнө үлтерә яҙғансы туҡмағандар ҙа былай ...әндәр:

Хәҙер үк үксәңде ялтырат бынан! Эҙең дә булмаһын! Беҙҙең ... һиңә урын юҡ!

Төлкө ҡомғанын алған да башы һуҡҡан яҡҡа олаҡҡан, ти.

## 35. Сысҡан, айыу, бүре, төлкө

Яңғыҙ ҡайын төбөндә бер сысҡан ултыра ине, ти. Ел сығып ...те лә, сысҡан өҫтөнә бер япраҡ өҙөлөп төштө, ти. Китеп ул...ра, ти, был, китеп ултыра, ти, китеп ултыра торғас, айыуға тап ...лды, ти. Айыу унан:

Ҡайҙа йүгерәһең былай? – тип һораған, ти.

Сысҡан айыуға:

Үрге ауылдан яу килде,
Яурыныма туп тейҙе.
Шунан ҡасып барамын,
Әйҙә, һине лә аламын.
Йәбеш минең ҡойроҡҡа,
Буйһон минең бойороҡҡа! –

тип әйтте, ти. Айыу сысҡандың ҡойроғона йәбеште лә, икәүләп китеп барҙылар, ти. Бара торғас, бүрегә тап булдылар, ти, былар. Бүре сысҡандан:

– Ҡайҙа китеп бараһығыҙ былай? – тип һораны, ти.

Сысҡан бүрегә:

Үрге ауылдан яу килде,
Яурыныма туп тейҙе.
Шунан ҡасып барамын,

Әйҙә, һине лә аламын.
Йәбеш, айыу, ҡойроҡҡа,
Буйһон минең бойороҡҡа! –

тип әйтте, ти. Бүре айыуҙың ҡойроғона йәбеште лә, өсәүләп китеп барҙылар, ти. Бара торғас, төлкөгә тап булдылар, ти, былар. Төлкө сысҡандан:

– Ҡайҙа китеп барыуығыҙ был? – тип һораны, ти.

Сысҡан төлкөгә:

Үрге ауылдан яу килде,
Яурыныма туп тейҙе.
Шунан ҡасып барамын,
Әйҙә, һине лә аламын.
Йәбеш, бүре, ҡойроҡҡа,
Буйһон минең бойороҡҡа! –

тип әйтте, ти. Төлкө бүренең ҡойроғона йәбеште лә, дүртәүләп китеп барҙылар, ти. Бара торғас, быларға ҡарһаҡ, әҙерәк барғас – ҡуян, бер аҙ киткәс – көҙән тап булды, ти. Былар ҙа, бербереһенең ҡойроҡтарына тағылышып, сысҡан артынан киттеләр, ти.

Эй киттеләр, ти, былар теҙелешеп, эй киттеләр, ти, арттарына боролоп ҡараһалар, баҫрау буйы ер киткәндәр, ти.

Бара торғас, айыу туҡтаны ла:

– Бик асыҡтырҙы, әҙерәк тамаҡ ялғап алайыҡ, – тип әйтте, ти. – Арағыҙҙа мин иң олоғоҙ булам, тыңлағыҙ минең һүҙемде! – тип, һамаҡлап тороп һөйләп алып китте, ти:

Айыу – һеҙҙең ағағыҙ,
Бүре – һеҙҙең бүләгеҙ,
Төлкө – һеҙҙең түрәгеҙ,
Ҡарһаҡ – һеҙҙең ҡартығыҙ,
Ҡуян – һеҙҙең ҡустығыҙ,
Көҙән – һеҙҙең кесегеҙ,
Сысҡан һеҙҙең кемегеҙ? –

тип әйткәйне, тегеләр сысҡанды өҙгөләп ташланылар, ти. Шунан йәнә:

Айыу – һеҙҙең ағағыҙ,
Бүре – һеҙҙең бүләгеҙ,
Төлкө – һеҙҙең түрәгеҙ,
Ҡарһаҡ – һеҙҙең ҡартығыҙ,
Ҡуян – һеҙҙең ҡустығыҙ,
Көҙән беҙҙең кемебеҙ? –

тинеләр ҙә көҙәнде өҙгөләп ашанылар, ти. Йәнә күмәкләшеп:

Айыу – беҙҙең ағабыҙ,
Бүре – беҙҙең бүләбеҙ,
Төлкө – беҙҙең түрәбеҙ,
Ҡарһаҡ – беҙҙең ҡартыбыҙ,
Ҡуян беҙҙең кемебеҙ? –

тип, ҡуянды өҙөп-йолҡоп ташланылар, унын артынан, «ҡарһаҡ беҙҙең кемебеҙ?» тип, ҡарһаҡты ботарлап ҡуйҙылар, ти. Айыу, бүре, төлкө генә ҡалды, ти. Шунан бүре һүҙ башлап:

Айыу – беҙҙең ағабыҙ,
Бүре – беҙҙең бүләбеҙ,
Төлкө беҙҙең кемебеҙ? –

тип, төлкөнө өҙөп-йолҡоп ташламаҡсы булғайны, төлкө уны бүлдереп:

Айыу ағайым менән бүре ағайым! Һеҙ мине өҙгөләргә өлгөрөрһөгөҙ, мин һеҙҙең ҡулығыҙҙа. Рөхсәт итһәгеҙ, үҙем иҫән саҡта һеҙгә бер изгелек күрһәтер инем. Ҡарағыҙ әле бынау тау башына, күрәһегеҙме, унан бер һунарсы төшөп килә? Туп-тура беҙҙең өҫкә килә. Мин хәҙер шул яҡҡа барайым, ә һунарсы минең арттан төшөп алыр. Һеҙ шул арала ҡасып китерһегеҙ. Һунарсыны күҙ яҙҙырғас, мин һеҙҙе эҙләп табырмын. Шунан мине өҙгөләп ашарһығыҙ, – тигән.

Айыу менән бүре быға риза булдылар, ти. Төлкө тотто ла һыҙҙы, ти. Йөрөй торғас, баҫыу кәртәһе буйында сүплектә тибенеп йөрөгән бер әтәс янына килеп сыҡты, ти. Әтәс быны күреү менән кәртә башына осоп ҡунды, ти. Төлкө тәмле телләнеп:

Әтәс дуҫ, мин айыу менән бүренән ҡайтып киләм әле, уларҙа өс көн буйына ҡунаҡта булдым, – тигән булды, ти. – Ишеттеңме әле һин, әтәс дуҫ, яңы закон хаҡында? Хәҙер, яңы закон буйынса, ҡуян, бүре, төлкө менән әтәс бер-береһенә теймәйҙәр бит, бер туғандай йөрөйҙәр. Төшсө бында, дуҫ булышайыҡ! – тине, ти.

Әтәс быны тыңлап торҙо ла:

Бик яҡшы закон икән, – тине, ти. – Анау яҡтан беҙгә ҡарай бер кеше килә. Ул да килеп етһән дә, бергә-бергә дуҫтарса һөйләшеп тә серләшеп ултырырбыҙ, – тине, ти.

– Минең улай оҙаҡ һөйләшеп ултырырға ваҡытым юҡ шул, күл буйындағы ҡаҙҙарға ҡунаҡҡа бараһым бар, – тигән булып, китеп барҙы, ти, төлкө.

Айыу менән бүре урман эсенә инеп алалар ҙа төлкөнөң үҙҙәренә аҙыҡ булып килеүен әле булһа көтөп ултыралар икән.

## 36. Сыҫҡан менән ҡуян
(вариант)

Бер сыҫҡан китеп бара икән. Эй саба, эй саба, ти. Быға хәҙер ҡуян осраған, ти.

– Сыҫҡан ағай, ҡайҙа бараһың?

– Яурыныма яу төшкән,

Шунан ҡасып барамын.

Әйҙә, йәбеш ҡойроҡҡа! – ти икән сыҫҡан.

Ҡуян хәҙер сыҫҡандың ҡойроғона йәбешкән. Китеп баралар, ти. Быларға төлкө осраған:

– Ҡуян ағай, ҡайҙа бараһың?

– Яурыныма яу төшкән,

Шунан ҡасып барамын.

Әйҙә, йәбеш ҡойроҡҡа! – ти икән ҡуян.

Төлкө лә ҡуяндың ҡойроғона йәбешеп киткән. Бара торғас, бүре осраған быларға:

– Төлкө ағай, ҡайҙа бараһың?

– Яурыныма яу төшкән,

Шунан ҡасып барамын.

Әйҙә, йәбеш ҡойроҡҡа!

Бүре лә йәбешкән быларға. Баралар-баралар, ти. Айыу осраған:

– Ҡайҙа былай бараһығыҙ?

– Яурыныбыҙға яу төшкән,

Шунан ҡасып барабыҙ.

Әйҙә, йәбеш ҡойроҡҡа!

Киткәндәр былар. Бик оҙаҡ барғандар. Бара торғас арығандар. Төлкө йырлай, ти:

Ҡуян – беҙҙең ҡустыбыҙ,
Бүре – беҙҙең Бүләмбәй,
Төлкө – беҙҙең Төләмбәй,
Айыу – беҙҙең апабыҙ,
Сыҫҡан беҙгә нәҫтәкәй?
Өҙәбеҙ ҙә йолҡабыҙ.

Шулай тип, сыҫҡанды ашап ҡуйҙылар, ти. Хәҙер тағы йырлайҙар, ти:

Ҡуян – беҙҙең ҡунаҡ ул,
Бүре – беҙҙең Бүләмбәй,
Төлкө – беҙҙең Төләмбәй,
Айыу – беҙҙең апабыҙ.
Ҡуян беҙгә нимәгә?
Өҙәбеҙ ҙә йолҡабыҙ, –

тип, былар ҡуянды ашап ҡуйғандар.

Төлкөгә лә сират килеп етте бит инде.

Айыу – беҙҙең апабыҙ,
Бүре – беҙҙең Бүләмбәй,
Төлкө – беҙҙең нәҫтәбеҙ?
Өҙәбеҙ ҙә йолҡабыҙ, –

тигәс, төлкө: «Һеҙ ошонда ғына тороп тороғоҙ. Мин һыу төбөнән бер нәҫтәкәй алам», – тип, ҡойоға үрелгән дә, бүре менән айыуҙы ҡойоға төшөргән.

## 37. Һандуғас

Борон-борон заманда бер ауылда бик бай сауҙагәр йәшәгән. Уның байлығының иге лә, сиге лә булмаған. Өйөндәге келәмдәре Фарсы иленән, һауыт-һабалары Ҡытайҙан алып ҡайтылған булған. Сауҙагәрҙең өҫтөндәге еләне Төркиәнән, хеҙмәтселәре Һиндостандан алынған икән. Ҡайҙа ғына барһа ла, ул үҙенә иҫтәлек өсөн берәй нәмә алып ҡайта торған булған.

Сауҙагәр өйөндә бер һандуғас йәшәгән. Һандуғастың ситлеге алтындан эшләнгән, ә түбәһе быяланан булған. Ситлектең иҙәненә лә алтын ҡом һибелгән булған. Һандуғасы өсөн сауҙагәр бер нәмәһен дә ҡыҙғанмаған.

Иртән дә, төш ваҡытында ла, кисен дә хеҙмәтсе һандуғас өсөн һалҡын һыуҙы көмөш һауытҡа һалып, ә орлоҡтарҙы гәрәбә батмусҡа һалып килтергән. Шулай итеп, һандуғас бер ҡайғы ла күрмәйенсә, йырлап көнөн уҙғара торған булған. Ә йырлауға ул оҫталарҙың-оҫтаһы булған.

Берҙән-бер көндө сауҙагәр үҙ эштәре менән сит илгә китергә йыйынған. Был турала һандуғас белеп ҡалған да хужаһынан былай тип һораған:

– Хужам, һин минең менән һәр ваҡыт яҡшы мөғәмәләлә булдың, нимә һораһам, шуны бирҙең, бер һорауыма ла, теләгемә лә ҡаршы килмәнең. Был юлы ла минең теләгемде үтә инде. Һин минең тыуған илемә бараһың. Унда аҫыл емештәр үҫкән бер баҡса бар. Шул баҡсала минең барлыҡ туғандарым йәшәй. Уларҙы эҙләп табып, минән бик күп сәләм әйт, минең һау-сәләмәт икәнлегемде, бер төрлө лә ауырлыҡ күрмәүемде белдер, – тигән.

Һандуғастың был теләген үтәргә хужа һүҙ биргән. Оҙон юлға сыҡҡан. Бик күп көндәрҙән һуң был илгә килеп еткән. Һатаһы нәмәләрен һатып, алаһыларын алып бөткәндең һуңында, һандуғас әйткән баҡсаны эҙләп тапҡан. Баҡса шул тиклем матур, әйтеп тә, һөйләп тә бөтөрлөк түгел, ти. Баҡсала үҫкән ағастар күҙҙең яуын алып тора, ә ағастағы емештең иге-сиге күренмәй, ти. Һауа хуш еҫ менән тулы, ти, һәр ағаста һандуғастар һайраша, уларҙың та-

уышына бөтә баҡса күмелгән, ти. Был баҡсаға килеп ингәс, сауҙагәр һуштан ҡалған да бик оҙаҡ ни өсөн килгәнен онотоп ултырған. Шул саҡ уның ҡаршыһына килеп бер һандуғас һайрай башлаған. Ул шул тиклем матур һайраған, сауҙагәр был менән һандуғастың әнеһе тип уйлап, уға мөрәжәғәт иткән.

– Тыңла әле, һандуғас! Минең өйҙә алтын ситлектә һинең ағайың йәшәй. Ул һиңә лә, башҡаларығыҙға ла күп итеп сәләм әйтеп ебәрҙе. Бик яҡшы йәшәгәнлеген, ҡайғы-хәсрәт күрмәгәнлеген белдерҙе, – тигән.

Сауҙагәр һөйләп бөткәс тә һандуғас, атып төшөргән кеүек, ергә йығылған. Сауҙагәр нимә эшләргә белмәй икән. Иңкәйеп һандуғасты ҡараһа, ул инде тын да алмай, ҡанаттарын йәйеп, ауыҙын асып, үлеп ята, ти.

«Ах, юҡҡа мин быға ағаһы тураһында һөйләнем, ҡайғыһынан үлде, ахыры», – тип сауҙагәр үҙ эсенән уйлап алған. Ул үлгән һандуғасты алған да ситкә ырғытҡан. Ә һандуғас ергә барып бәрелеү менән киренән терелгән дә осоп киткән. Һайрай-һайрай күҙҙән дә юғалған. Сауҙагәр ҡысҡырып ҡараһа ла, һандуғас кире әйләнеп килмәгән.

Өйгә сауҙагәр бик ҡайғылы әйләнеп ҡайтҡан, эштең нисек булғанын һандуғасына һөйләп биргән. Хужаһының һөйләгәнен ишеткәс тә һандуғас бик ҡайғырған, көнө буйы бер нәмә ашамаған да, эсмәгән дә, һайрамаған да. Ә иртәгеһен хеҙмәтсе ашарға-эсергә килтергәндә, һандуғас үлеп ятҡан. Быны ишеткәс, сауҙагәр саҡ иламаған. Ул һандуғасын терелтеү өсөн төрлөсә эшләп ҡараған, ауыҙы менән һыу ҙа эсереп ҡараған, ҡояшта ла йылытҡан. Ләкин бер нәмә лә ярҙам итмәгән. Һандуғас үлгән. Сауҙагәр хеҙмәтсеһен саҡырып алған да һандуғасты сығарып ташларға ҡушҡан. Хеҙмәтсе һандуғасты сүплеккә илтеп ташлаған. Һандуғас ергә барып бәрелеү менән терелгән дә, күңелле итеп һайрап, үҙ иленә осҡан.

## 38. Төлкө менән ҡыҙ

Борон бер ҡарттың еткән ҡыҙы булған. Ҡарт уны кейәүгә биргән. Төндә кейәү егет ҡыҙ янына килгән. Егет төҫкә сибәр булмаған, кәләше шуға күрә уны бер ҙә яратмаған. Егет йоҡлап киткәс, ҡыҙ, кейемдәрен сискән дә, тәҙрә аша сығып ҡасҡан.

Диңгеҙ ярында ул ауыҙына һөйәк ҡапҡан төлкөнө күргән. Төлкө һыуға ҡарап-ҡарап торған да, үҙенең сағылышын икенсе төлкө тип аңлап, һөйәген тартып алыу ниәтендә, ярҙан һыуға һикергән. Һыуҙа бер кем дә булмаған, ә төлкө ауыҙындағы һөйәген һыуға һикергән ыңғайы төшөрөп ебәреп, һөйәге диңгеҙ төбөнә киткән. Ярға сыҡҡас төлкө, күпме генә тырышмаһын, һыуҙа бер нәмә лә күрмәгән.

Ҡыҙ шәрә килеп төлкө янына килгән дә:

Һин – шыр тиле, хыялдағыһына алданып, ауыҙындағы һө[illegible]ән колаҡ ҡаҡтың, – тигән.

Төлкө:

Мин тилеме, һинме әле. Шундай һалҡын төндә һин шәрә кисеп хәләлеңде, йылы урыныңды ташлап сығып киттең дә, бер ғәмһеҙ ошонда йөрөп ятаһың.

Ҡыҙ уйға ҡалған. Шунан үҙенең эшләгән эшенең төлкөнөкөнән һис ҙә ары китмәгәнен аңлап, өйөнә ҡайтып, ире янына барып ятҡан.

## 39. Төлкө менән бөркөт

Төлкө ҡартайҙы, ти, бер заман. Һунарға йөрөү уға ауыр була башлай. Шулай ҙа ул йәшәргә теләй. Ҡартлыҡ көндәрен еңел генә туйҙырыр өсөн, бер хәйлә уйлап тапты, ти. Ул, ашағыһы килгән саҡтарҙа, яланга сығып, үлгән булып ята башлай. Ҡомһоҙ ҡоҙғондарға, ҡарғаларға үлгән йәнлек кенә булһын, хәҙер осоп килеп, суҡый башлайҙар. Төлкө, үлгән булып ятып, бик күп ҡоҙғондарҙың, ҡарғаларҙың башына етте, ти, үҙ ғүмерендә.

Бер мәлде яланда ятҡан төлкөнө бейектә осоп йөрөгән бөркөт күреп ҡала. Ул һауанан төлкө өҫтөнә уҡтай атылып төшөп, үткер тырнаҡтарын тәненә батырып, күтәреп алып китә.

Бөркөт тауҙар өҫтөнә күтәрелә. Шунан иң бейек тауҙың бер ҡая ташына барып ҡуна.

Төлкө бөркөт тырнағы аҫтында ла хәйлә эҙләй: «Ҡайһылай тауҙарға һуң был уҫал бөркөттө? Бының тырнаҡтарынан нисек ҡотолорға?»

Төлкө, саҡ-саҡ тын алып, һүҙ башлай:

Һай, рәхмәт һиңә, бөркөт туған! Һин булмаһаң, бындай бейек тауҙарға ҡасан менер инем мин. Шундай матур бейек тауҙарҙы күрмәйенсә ғүмерем үтер ине. Ҡарт көнөмдә шатландырҙың, рәхмәт һиңә, ҡоштар батшаһы. Һинең был хеҙмәтеңде бер ваҡытта ла онотмам! – тип, әкрен генә башын ҡалҡытып, тирә-яғына ҡарана. Бына ул эргәлә генә бөркөт ояһын күрә. Унда бөркөттөң балалары сырылдаша. Төлкө, муйынын һуҙып, уларға ҡарай ҙа һүҙен дауам итә: – Тфү-тфү, күҙ теймәһен, балаларың ниндәй матур икән. Бөтәһе лә үҙеңә оҡшаған. Бигерәк һөйкөмлөләр [illegible]ынҡайҙарым! Иҫән-һау ғына үҫеп, осоп китһендәр инде. Ҡурҡмайынса, нисек шуларҙың үҙҙәрен генә ҡалдырып китәһең! Бигерәк бәләкәйҙәр бит әле һөйөклөкәйҙәрем! Тау бейек тигәс тә, тау өҫтөнән оса торған уҫал ҡоштар бар, тау баштарына менә торған йыртҡыстар бар, үҙҙәрен генә ҡалдырып китеү хәтәр бит! Ярай, бынан һуң үҙем ҡарармын. Оя эргәһенән бер аҙым да китмәм. Гел улар янында булырмын. Үҫегеҙ, ҡәҙерлекәйҙәрем, үҫегеҙ! Әсәйегеҙ кеүек рәхимле булығыҙ! Үҫеп, тауҙар өҫтөндә осоп,

шатланығыҙ! Ҡайғы-хәсрәт күрмәгеҙ! Әсәйегеҙ алыҫҡа китһә лә, ҡурҡмағыҙ, тыныс булығыҙ: мин һәр ваҡыт һеҙҙең янығыҙҙа булырмын... Тауыштары ниндәй матур йәнекәйҙәремдең, – тип һамаҡлай ҙа һамаҡлай, ти, был.

Бөркөт төлкөнө ботарлап балаларына ашатмаҡсы ине лә, был һүҙҙәренән һуң күңеле йомшарып китте, ти:

– Ярай, минең балаларымды ҡараусы бул әйҙә. Тик, ишетһен ҡолағың, яҡшы ҡара! – тип әйтә лә бөркөт, балаларына аҙыҡ эҙләп, осоп китә. Бөркөт китеү менән, төлкө уның балаларын берәм-берәм һоғона башлай. Бөтәһен дә ашап бөтә лә, тауҙан түбәнгә ҡаса.

Бөркөт үҙенең балаларына аҙыҡ алып ҡайтһа, ни күрһен: оя туҙған, балаларының йөндәре генә туҙышып ята. Бөркөт ҡайғырып саңҡылдай, ҡанаттарын ҡая ташҡа һуға. Ярһынып, күккә күтәрелә, ергә ҡарап, яуыз төлкөнө эҙләй. Бер көн эҙләй, ике көн эҙләй, таба алмай.

Бөркөт ябыға, шулай ҙа көсөн юғалтмай әле. Асыуынан көс ала икән ул бөркөт.

Өсөнсө көн тигәндә, бөркөт дошманын эҙләп таба. Төлкө бер күл буйында, ергә һуҙылып ята, әкрен генә шыуышып бара икән. Күлдең ситендә генә һыу ҡоштары йөҙөп йөрөй. Төлкө шуларҙың береһен эләктерергә самалай.

Бөркөт дошманын күреү менән уның өҫтөнә атыла. Яңынан бөркөт тырнағына эләккән төлкө шунда уҡ тағы бер хәйлә ҡороп ала:

– Туҡта, шаулама, ҡәҙерле бөркөтөм, бына бит алдыңда дошмандарың йөҙөп йөрөй. Балаларыңды шул ҡәһәр төшкән өйрәктәр һәләк итте бит. Шуларҙы эҙләй-эҙләй арып бөттөм. Өсөнсө көн тигәндә, саҡ килеп таптым. Һә, усал бит улар! Туҡта, ебәр әле, һин шунда көтөп тор, мин уларҙы хәҙер берәм-берәм тотоп алайым!

Төлкөнөң был һүҙҙәре бөркөттөң асыуын ғына көсәйтә. Ул тырнаҡтарын төлкөнөң елкәһенә тағы ла нығыраҡ батырып:

– Етте!.. Хәҙер ояға ҡайтабыҙ!.. – ти.

Төлкө, һыҙланып, теш араһынан ғына:

– Ярай, ярай, бик яҡшы, оябыҙға ҡайтайыҡ. Мин ауыр бит, күтәреп яфаланма инде, ҡәҙерле бөркөтөм. Мин йәйәү генә, әкренләп булһа ла, нисек тә тауға менеп етермен әле, – тигән була.

Бөркөт төлкөнөң ике күҙен соҡоп алып ташлай, үҙен күтәреп һауаға ҡалҡына. Бик бейеккә, болоттар араһына күтәрелә. Ошонда, болоттар араһында, төлкөнө ул тырнаҡтарынан ысҡындыра.

Бөркөт төлкөнө, балаларының ҡаны һеңгән тип, ашамай.

Төлкөнөң үләкһәһен ҡомһоҙ ҡоҙғондар ашай.

## 40. Күк ат

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай. Уларының күк аттары булған, ти. Шунан башҡа бер нәмәләре лә булмаған, ти. Бабай шул ат менән тирмән тартҡан, ти. Көн һайын өҫтөр үк эш ҡабатланған. Ат тирмән әйләндергән, ти. Аттың бер үҙенә бик ауыр булған.

— Хужам минең, — тигән ат бер көндө, — башҡалар аттарын парлап егәләр, ә һин мине бер үҙемде генә эшләтәһең.

— Атҡайым минең, — тип яуап биргән бабай, — әгәр минең хужалығымда берәй тараҡан ғына булһа ла, уны һиңә ярҙамға егер инем. Юҡ бит, нишләйһең?

— Улай булғас, ебәр мине иреккә. Мин үҙемә ярҙамсы табып алып ҡайтырмын, — тигән, ти, ат. Бабай шунда уҡ атты иреккә сығарған. Шунан күк ат үҙе теләгән яҡҡа сабып сығып киткән, ти. Күпмелер барғас, ул төлкө өңөнә килеп еткән, ти. Ат үлгәнгә һалышып өң эргәһенә генә ятҡан. Төлкө өңөнән сыҡҡан, атты күреп бик ҡыуанған, ти. Әммә күпме генә тартҡыламаһын, атты йөнереү өсөн ситкә алып китә алмаған, ти. Аптырағас, бүре эргәһенә барған был.

— Мин бик һәйбәт һый таптым, өңөмә тиклем һөйрәп алып килдем, тик бына өң ауыҙына һыйҙырып ҡына булмай. Әйҙә, һинең өңөңә алып киләйек әле. Бергәләп ашарбыҙ, — тигән. Бүре: «Минең өңгә килтерһәк, һиңә, төлкө дуҫ, эләкмәҫ» — тип уйлаған, ти, эстән генә.

Ат янына килеп еткәс, бүре аптырап ҡалған да:

— Ҡара әле, дуҫ кеше, нисек итеп мин уны һөйрәйем? — тигән, ти.

— Мин уны үҙемдең ҡойроғома бәйләп һөйрәнем, — тип хәйләләгән, ти, төлкө. — Һин дә шулай ит.

— Ярар һуң, — тигәс бүре, төлкө бүренең ҡойроғон ат ҡойроғона бәйләгән дә:

— Тарт, бүре дуҫ, тарт! — тип ҡысҡырған. Шул саҡ ат һикереп торған да киткән, ти. Ул бүрене үҙенең хужаһына алып ҡайтҡан. Бабай бүренең тиреһен һыҙырып, уны баҙарға алып барып һатҡан, ти. Ә аҡсаһына тағы бер ат алған, ти. Шулай итеп, күк атҡа иптәш булған, ти. Улар хәҙер ҙә икәүләп эшләйҙәр, ти.

## 41. Үс алыу

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, айыу, бүре, арыҫлан, төлкө. Үҙҙәренең араһынан улар арыҫланды батша итеп ҡуйғандар.

Бер ваҡыт арыҫлан ауырып киткән. Йәнлектәр бер-бер артлы килеп хәлен беләләр, ти, бының, тик төлкө генә бер ҙә килмәй икән.

Берҙән-бер көндө төлкө лә арыҫландың хәлен белергә килгән, ти.

Арыҫлан унан:

– Ошо көнгә тиклем бер килеп хәлемде белмәнең. Нимә эшләп оҙаҡланың? – тип һораған. Төлкө:

– Арыҫлан ағай, һиңә дарыу эҙләнем, шуға күрә килә алмаһым, – тип яуап биргән. Шулай тигәс, арыҫлан төлкөгә асыулана алмаған.

– Арыҫлан ағай, хәлең бик насар бит. Минең бер һүҙемде тыңлаһаң, терелерһең, – ти икән төлкө.

– Әйт тиҙерәк һүҙеңде!

– Бүре хәлеңде белергә килһә, һин тот та уның һул аяғын аша, шунан терелерһең, – тигән төлкө.

Бүре төлкөнөң балаларын ашаған булған икән. Төлкө бүренән шулай үс алмаҡсы булған.

Киҫкә табан бүре арыҫланға хәл белергә килгән. Арыҫлан, юхалап кына, бүрене үҙе янына индергән дә, тотоп алып, һул аяғын өҙә тешләгән дә ашаған да ҡуйған.

Төлкө бүренең ҡайтыр юлына сығып ятҡан. Бүре өс аяҡлап сатанлай-сатанлай ҡайтып килә, ти. Уны күреү менән төлкө:

– Ә-ә-ә, минең балаларымды ашағанда, яҡшы инеме? – тип, тегенән үсәп көлә, ти.

Бүре әй ныҡ асыуланған. Асыуынан уҡталып ҡарай ҙа, ҡайҙа инде, өс аяҡ менән төлкөнө нисек ҡыуып етмәк кәрәк?

## 42. Ишәк, дөйә, төлкө, бүре

Борон-борон заманда әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың дөйәһе менән ишәге лә булған. Йәшәйҙәр, ти, былар, бергәләп, әй йәшәйҙәр, ти, йәшәй торғас, шулай бер мәлде ишәккә эш күп булып киткән, ти. Йәйҙең бер матур көнөндә ишәк менән дөйә үҙ-ара һөйләшәләр икән:

– Эш бик күп, әйҙә ҡасайыҡ!

Дөйә менән ишәк икәүләшеп ҡасып киткәндәр. Әй рәхәтләнеп ашап йөрөйҙәр икән былар яланда. Ашап алғас, ишәк:

– Әй, бынау тиклем матур яланда бер йырлайым әле! – ти икән.

– Ҡуй, йырлама, беҙҙе килеп табып алырҙар, – тигән дөйә.

Ишәк дөйәне тыңламаған, йырлап ебәргән. Хужалар йырҙы ишетеп ҡалғандар ҙа икеһен дә тотоп алып ҡайтҡандар. Алып ҡайтҡас, бик ныҡлап ярғандар тегеләрҙе. Ишәккә нығыраҡ эләккән микән, аяҡтары ауырта башлаған. Хужалар ишәкте дөйә өҫтөнә һалғандар ҙа бер белгескә күрһәтергә алып киткәндәр. Тау ҡырынан барғанда, ҡырсынташлыҡҡа тура килгәндәр.

– Ҡайһылай матур! Мин бейейем әле, – ти икән дөйә.

– Бейей күрмә, мине төшөрөп үлтерерһең, – тигән ишәк.

Дөйә ишәкте тыңламай, бейей башлаған. Ишәк шыуып төшөп үлгән дә ҡуйған. Хәҙер дөйәнең бер үҙенә төшкән бөтә эш. Дөйә, ашай алмайынса, бер үҙе ҡасҡан. Ҡасып барғанда, бер төлкөгә юлдаш булған. Төлкө менән икәүләшеп киткәндәр.

Бара торғас, бүрегә осрағандар, өсәүләшеп алғандар. Өсәүләп китеп бара торғас, юлбарыҫҡа осрағандар, дүртәү булып алғандар. Кис булған:

– Эй, туғандар, ни эшләйбеҙ? – тип һораған төлкө.

– Ятып йоҡлайбыҙ, кем яҡшы төш күрә, шуны һуймайбыҙ, – тигән бүре.

Дөйә:

– Ҡышҡылыҡҡа хәлем дә юҡ, мине һуйығыҙ! – тигән.

Дөйәне һуйлар ҙа төлкө менән юлбарыҫ дөйәнең башын, тояҡтарын, эсәген йыуырға китәләр. Бүре бер үҙе тороп ҡала. Йылға буйына барып еткәс, төлкө:

– Әйҙә, мин мейеһен, һин йөрәген ашайыҡ, – ти икән.

Бүре үпкәләр бит.

– Үпкәләһә, үҙен һуйырбыҙ. «Йөрәк ҡайҙа?» – тиһә, миңә тура ҡара, – тигән төлкө.

Шунан төлкө дөйәнең – мейеһен, юлбарыҫ йөрәген ултырып ашағандар.

Ҡайталар былар, бүре тикшеренә башлай.

– Ҡайҙа мейеһе?

– Һе, мейеһе булһа, дөйә үҙен үҙе һуйҙырамы ни? – тигән төлкө.

– Ҡайҙа йөрәге?

Юлбарыҫ төлкөгә тура ҡараған була.

– Йөрәген ашағанда, миңә ҡарамай инең бит, – ти төлкө.

Шул ерҙә бүре юлбарыҫты баҫтырып алып китә. Тегеләр киткәс, төлкө бар булған итте өңгә тултырып бөтә лә, үҙе керә лә ята. Юлбарыҫ ҡасып китә, бүре кире әйләнеп килә. Килһә, ит тә юҡ, төлкө лә юҡ. Эҙләп ҡарай, таба алмай.

Яҙ етә. Төлкө өңөнән сыға ла, ҡояшта ҡыҙынып, китап уҡып ятҡан була. Әлеге бүре килеп сыға.

– Һине, төлкө, ашайым, мине алданың бит.

– Юҡ. Мин ул төлкө түгел. Мин утыҙ йыл буйына уҡытып шында ятам.

– Шаярма, шуға оҡшағанһың бит.

– Ай-һай-й, төлкөгә төлкө оҡшай инде! Балаларың бармы, уҡытырға ебәрәһеңме?

– Ике балам бар, ебәрермен, – ти ҙә, бүре ике балаһын алып килә.

– Киләһе аҙнала килерһең, – тип, төлкө бүрене ҡайтарып ебәрә. Үҙе бүре ҡайтып китеү менән бүренең ике балаһын да ашай ҙа икенсе урынға ҡаса. Ҡасып йөрөй торғас, көтөүселәр ташлап

киткән кәрзинкәгә тап була. Төлкө шул кәрзинкә менән булашып тора икән, бүре килеп сыға.

– Э-э-э, һине осрата алмай йөрөй инем, яҡшы булды әле, хәҙер мин һине ашайым!

– Юҡ, һин мине ашай алмайһың, мин утыҙ йылдан бирле кәрзинкә үрәм, мин һин эҙләгән төлкө түгел.

– Шуға оҡшағанһың!

– Юҡ, түгел. Улар кәрзинкә үрә белмәйҙәр. Мин кәрзинкә үреп, тамаҡ аҫрайым.

– Ҡайһылай итеп үрәләр уны?

– Теләһәң, өйрәтәм. Кәрзинкәнең эсенә ин дә, мин үргәнде отоп ултыр.

Бүре кәрзинкә эсенә инеп ултыра, төлкө кәрзинкәне, асыҡ ерен ҡалдырмай, ослап үреп ҡуя.

Бер заман көтөүселәр кәрзинкә эргәһендә йөрөгән төлкөнө күреп ҡалалар ҙа һөрән һала башлайҙар. Төлкө тора ла ҡаса. Бүре көс-хәл менән кәрзинкәне ватып, туҙҙырып, ысҡына.

Төлкө, йөрөй торғас, бер ташландыҡ тирмәнгә тап була. Шунда йәшәп ятканда, йәнә әлеге бүре килеп сыға.

– Э-э-э, төлкө, һине таба алмай йөрөй инем, хәҙер үҙеңде ашайым!

– Ашай алмаҫһың, мин һин эҙләгән төлкө түгел. Мин бына утыҙ йыл инде тирмән тарттырам, шуның менән тамаҡ аҫрайым. Ышанмаһаң, ана, мөшкәгә төшөп ҡара.

Бүре мөшкәгә төшә. Төлкө шым ғына сығып, тирмәнде ебәрә лә ҡуя. Бүре көскә һикереп сығып ҡотола. Һуңынан осраштҡан саҡтарында, бүре төлкөгә ҡырын-мырын ғына ҡарап уҙа икән. Ниңә тиһәң, төлкөгә яҡын килергә ҡурҡа, ти.

Төлкө борондан шулай үҙе зирәк, үҙе хәйләкәр булған инде ул.

## 43. Дөйә, бүре, төлкө, бурһыҡ

(вариант)

Борон-борон заманда бер хужаның дөйәһе менән ишәге булған, ти. Берҙән-бер көндө дөйә менән ишәк ҡасырға һүҙ беркетеп, ҡасып та киттеләр, ти. Тик юлда хужалары күреп ҡалып, алып ҡайтып киткән, ти, быларҙы.

Икенсе көндө дөйә ишәкте эйәртмәйенсә, үҙе генә ҡасып киткән. Юлда дөйәгә бүре, бер аҙ баргас та төлкө, бурһыҡ тап булып, дүртәүләшеп киткәндәр. Бик күп баргас, асығышып, арышып, тау араһына килеп ултыралар. Тәүҙә кемде һуйыу өсөн кәңәш ҡоралар, ти, былар. Бер аҙ уйлап ултыргас, төлкө былай тине, ти:

– Тәүҙә мине һуйыр инегеҙ ҙә – өсөгөҙгә етмәй. Шулай булгас, дөйәне башлап һуяйыҡ, – тине, ти. Быға бөтәһе лә риза булышып,

һуйып та ҡуйҙылар, ти. Бүре ит ҡарауыллап ҡала, төлкө бурһыҡ эс-ҡарын йыуырға киттеләр, ти. Тик бергә йыйыл- оорон бер ниҙе лә ашамаҫҡа һүҙ беркеттеләр, ти. Эсәк йыуыр- торған бурһыҡ:

– Бынау туҡ эсәкте ашаһаң да ҡуйһаң ине, – тигәс, төлкө:

– Өйҙә бүлешеп ашайыҡ. Әгәр ҙә бүре белеп, һораһа, һин күҙемә туп-тура ҡарарһың. Шунан үҙем яуабын бирермен, – . Тап төлкө әйткәнсә килеп сыҡҡан, ти. Бурһыҡ төлкөнөң туп-тура ҡарағас:

– Ашаны ла, хәҙер миңә тазрайып тороп ҡарайсы, – тигән, ти, .

Быны ишетеп, бүре бурһыҡты ҡыуып алып китте, ти. Ошо файҙаланып, төлкө булған эс-ҡарын менән итте бер өңгә алды ла ҡуйҙы, ти. Шулай итеп, бүре итһеҙ ҙә ҡалған, ҡты ла тота алмаған, ти.

## 44. Төлкө менән һайыҫҡан

Төлкө юғарыға, ағас башына, оялаған ҡарағоштоң балаларын ҡ була. Төлкө һоҡланып ҡарап тора ла ҡарағоштан берәй һын төшөрөп биреүен һорай. Ҡарағош төшөрөп бирмәгәс:

– Балаларыңды ла, үҙеңде лә ашайым! – тип ҡурҡыта. Ҡара- ҡурҡып, бер балаһын төлкөгә төшөрөп бирә. Төлкөгә был тәмле булып ҡала. Икенсе мәртәбә килеп, ҡарағоштоң тағы балаһын ашап китә. Быларҙың бөтәһен дә һайыҫҡан күреп икән. Ул ҡарағошҡа: «Мин төшөрөп бирә алмайым, үҙең аша», – тип әйтергә ҡушҡан. Төлкө йәнә, өсөнсө мәртәбә, ҡыта икән. Ҡарағош уға:

– Балаларымды үҙең менеп аша, – тигән. Шунан төлкө артҡа биргән дә, йүгереп килеп ағасҡа менәйем тиһә, башы ме- ағасҡа бәрелгән, тештәрен емереп бөткән. Эш сыҡмағас, төлкө:

– Был тирәлә һайыҫҡан ғына йөрөй ине, шул ҡәһәрең ҡо- ҡандыр әле, – тип, һайыҫҡанға язаһын бирмәк була. Батҡаҡ- буяла ла, төлкө һайыҫҡанды эҙләп китә. Һайыҫҡанды ҡая тау нда барып таба.

– Һинме шулай ҡарағошҡа хәйлә өйрәтеүсе? – тип һораған, ти, .

– Эйе, мин, – тип яуап биргән һайыҫҡан.

– Шулай булғас, мин һине язаларға тейешмен, – тигән төлкө.

– Улай булһа, ата-бабабыҙҙы үлтергән кеүек үлтер инде һин. ошо ҡая тауҙан төпһөҙ биҙрәгә һалып төшөр, – тигән һайыҫ- .

Төлкө һайыҫҡанды төпһөҙ биҙрәгә һалып ебәргән, ти. Һайыҫ- осоп киткән дә барған, ти.

## 45. Төлкө менән айыу

Борон бер заман бер айыу урманда турғай тотоп алды, ти.

– Туҡта әле, өсөнсө көн төлкө өйрәк тотоп алыуы менән маҡтанғайны. Мин дә уға маҡтанайым әле, – ти.

Айыу, турғайҙы тешләп, төлкө янына килде, ти. Төлкө уның турғай тешләп маҡтанырға уйлап килеүен әллә ҡайҙан уҡ һиҙеп тора ине, ти.

Төлкө:

– Айыу дуҫ, ҡапҡаның нимә була? – тип һораны, ти.

Айыу тештәрен ҡыҫа биреп кенә:

– Турғай, – тине, ти.

Төлкө:

– Айыу дуҫ, ишетмәйем. Бөгөн таш яҫтап йоҡлағайным, ҡолаҡтарым тонған, шәберәк әйтсе, – тигән булды, ти.

– Турғай, турғай!..

– Бер ҙә генә ишетмәйем шул. Ауыҙыңа һыу уртлаған кеүек һөйләйһең. Асығыраҡ әйтһәң ни була, айыу дуҫ?

Айыу был юлы, ауыҙын тултырып:

– Тур-ғай! – тигәйне, ауыҙындағы турғай пырр итеп осто ла китте, ти.

Төлкө:

– Ә, ишеттем, ишеттем, турғай тиһең икән, – тигән булды, ти.

Айыу:

– Ишетеүен ишеттең дә бит, тик турғайҙы осорттоң шул, – тип һуҡранды, ти.

Шунан төлкө, аҡыл өйрәтмәксе булып:

– Маҡтана белмәйһең, айыу дуҫ! – тине, ти. – Дөрөҫөн әйткәндә, һин шыр алйот. Һиңә турғай тип әйтмәҫкә, ә ҡош тиергә кәрәк ине. Шул саҡта тештәрең дә асылмаҫ, турғай ҙа осмаҫ ине.

## 46. Торна менән төлкө

Бер көндө торна тары еренә осоп килеп төшкән. Тик был көндө уға тары тәтемәгән. Ҡарауылсылар торнаны ҡыуалап ҡына торҙолар, ти.

Торна был көндө бик асыҡты, ти. Икенсе көндө тағы ла шул ергә барырға сыҡһа, юл буйында төлкө менән осрашты, ти.

– Төлкө дуҫ, һине бик хәйләкәр тиҙәр, әйҙә, дуҫ булайыҡ, – тине, ти, торна.

– Әйҙә һуң, – тине, ти, төлкө.

Төлкө менән торна дуҫлашты, ти. Дуҫ булғас, бер көндө торна аш бешерә лә төлкөнө ҡунаҡҡа саҡыра. Торна ашты әҙерләгәс, муйыны оҙон сөмкә һауытҡа һоҫто, ти. Төлкө килгәс, торна:

Әйҙә, төлкө дуҫ, яҡындан ҡатнаш, – ти ҙә ашын ашай баш-лай. Төлкөнөң тәрән, тар, сөм һауытҡа буйы ла етмәй, мороно ла ... ти. Был тик ултырғас, торна:

... ашымды яратмайһың инде? Ниңә ашамайһың? – тип һо-... ти. Төлкө өндәшмәгән. Шулай итеп, ул ас ҡайтып китте, ти.

...-бер көндө торнаны төлкө ҡунаҡҡа саҡыра. Төлкө ашты ... ҡенә ялғашҡа һоҫҡан була. Торна мороно менән төртөп-... ҡарай ҙа, аш бер ҙә эләкмәй, ти, ә төлкө үҙе рәхәтләнеп ... бирә, ти.

Шулай итеп, был юлы торна ас ҡайтып китә.

...нсе көндө төлкө менән торна юл буйлап китеп барһа, ... һунарсылар килә ятҡаны күренгән. Шул ваҡыт торна ...:

Әйт бер хәйләңде. Һунарсылар килеп еткәнсе, берәй хәйлә ... өлгөрәйек инде! – ти.

Минең бер хәйләм дә юҡ, – ти төлкө.

Улайһа, тау тишегенә барып йәшенәйек, – ти торна.

Былар тау тишегенә барып та керәләр – һунарсылар ҙа килеп ... Килеп етәләр ҙә тишектең ауыҙын соҡой башлайҙар. Шул ... торна төлкөгә:

Һин мине яла. Мин еүеш көйө ергә аунап бысранайым. Эт ... тартып сығарыр. Һунарсылар, был үлгән икән, тип уйларҙар ... мине ситкә бырағытырҙар. Мин шунан осоп китермен. Һунар-... мине атырға тип йүгергәндә, һин дә сығып ҡасырһың, – ти.

Ярар улайһа, – тип, төлкө торнаны ялап сыҡты, ти, уныһы ... аунап, танығыһыҙ хәлгә килде, ти. Тишек ауыҙына етҡай-... ...г һөйрәп сығарҙы, ти. Үле торна, тип, һунарсылар уны ситкә ...та. Шул мәл торна:

Торрыйҡ-торрыйҡ! – тип осоп та китә. Һунарсылар торна ...нан йүгерә. Шул ваҡыт тау тишегенән төлкө лә сығып ҡаса. Шулай итеп, торна төлкөнән хәйләкәрерәк булып сыға.

## 47. Торна менән төлкө

(вариант)

Урманда йөрөй торғас, төлкө торна менән дуҫлашып киткән. ...кә торнаны ҡунаҡҡа саҡырған. Бутҡа бешергән дә таҡтаға ...ып, йоҡа ғына итеп һылап ҡуйған, шунан:

Аша, аша, дуҫ, – ти икән. Ә торна, бахыр, суҡыштары менән ...аны туҡылдатып соҡоп ҡараһа ла, бер ҙә эләктерә алмаған. Шул арала төлкө бутҡаны ялап та ҡуйған.

Торна төлкөнө үҙенә ҡунаҡҡа саҡырып ҡайтҡан. Торна бутҡа ...ереп, үҙе тәрән, үҙе нәҙек муйынлы сүлмәккә һалып ҡуйған. Торна төлкөгә:

– Аша, аша, дуҫым, – ти икән. Төлкө күпме генә тырышма һын, нәҙек муйынлы сүлмәктән ашай алмаған. Ас көйө ултырған. Ә торна үҙе, башын сүлмәккә тығып ебәрә лә, тығына ла тығына икән. Бутҡаны ашап бөткәс, торна:

– Төлкө, ҡунаҡҡа саҡырып, таҡтаға һыланған бутҡаңды үҙең ашап бөтөрҙөң, ә мин ҡарап ултырҙым. Мин дә һине шулай һыйларға булдым. Хәйләгә ҡаршы хәйлә, ашҡа аш менән, ташҡа таш менән булһын, – тигән.

## 48. Төлкө менән әтәс

Бер төлкө киптерергә элеп ҡуйылған ҡуян тиреһен урлай. Ҡуян тиреһе уға ниңә кәрәктер инде, кем белһен. Тирене ашап булмай. Үҙенә тун тектерергә уйлайҙыр тиһәң, төлкөнөң өҫтөндә бик һәйбәт туны бар. Берәй хәйлә өсөндөр инде. Төлкө бит гел хәйлә менән генә көн итә.

Бер саҡ ҡуян тиреһен ябына ла был ауылға тауыҡ урларға китә. Төлкө тауыҡтарҙың ҡуяндан ҡурҡмауын яҡшы белә. Тауыҡтар ғына түгел, хатта унан турғайҙар ҙа ҡурҡмай.

Ауыл осондағы өйҙөң баҡсаһы артында бер әтәс менән бер тауыҡ тибенеп, ем сүпләп йөрөй икән. Ҡуян тиреһе ябынған төлкө туп-тура быларға ҡарап килә. Тауыҡ уны күреп ҡала ла әтәскә:

– Ҡара әле, беҙгә табан әллә кем килә! – ти.

Әтәс күкрәген кирә биреп, эре ҡарай ҙа:

– Ҡурҡма, ҡуян бит ул! – ти. Үҙе тағы ла тибенергә тотона. Шул арала төлкө килеп етә лә тауыҡты эләктереп алып та китә. Әтәс, атаҡ-атаҡ, тип аптырап тора ла ҡала. Тауығы өсөн бик ҡайғырып, әтәс ҡураға ҡайтып китә. Ҡурала йөрөгән тауыҡтар, әтәстең кәйефе бик төшөнкө икәнен күреп, уның янына йүгереп килеп етәләр.

– Ни булды ла ни булды? Ниңә улай күңелһеҙһең? – тип һораша башлайҙар. Әтәс, илаған һымаҡ, күҙҙәрен сылт-сылт йомоп:

– Берегеҙҙе ҡуян алып китте! – ти.

Тауыҡтар, бер-береһенә ҡарашып, көлөп ебәрәләр.

– Ҡайһы саҡта бигерәк юҡты һөйләйһең. Шаяра белмәйһең, – тиҙәр.

Әтәс асыулана, кикереге ҡыҙарып китә.

– Ниңә көләһегеҙ, ахмаҡтар? Мин һеҙгә үҙ күҙем менән күргәнде әйтәм дә баһа! – тип екеренә.

Тауыҡтар барыбер ышанмайҙар. Әтәстән ҡурҡып, юрый ғына ышанған булалар. Әтәс һаман әтәсләнә:

– Һиҙмәйерәк ҡалдым, һиҙгән булһам, ул ҡуянды мин, елкәһенә ҡуныл, суҡыр ҙа тырнар инем үҙен. Икенсе килә ҡалһа, әләгер әле үҙенә! Күрмәгәнен күрһәтермен! Туп-тура өҫтөнә барып ҡунырмын. Һеҙҙең алдығыҙҙа ҡысҡыртып талармын үҙен! – тип көр генә тауыш менән ҡысҡырып ебәрә.

Бер көндө кис менән теге төлкө, тағы ла шул ҡуян тиреһен бөркәнеп, тауыҡтар ҡунаҡсаһына килә. Әтәс быны күреп кенә ҡала ла:

Бына килеп эләктеңме хәҙер! – тип төлкөнөң өҫтөнә һикерә. Ҡапыл ғына булғас, төлкө быны әтәстер тип уйламай. Ниндәйҙер төслө йыртҡыс ҡоштор тип шикләнә. Шуның өсөн ҡасып ҡотолоу яғын ҡарай. Әтәс тырнаҡтарын ҡуян тиреһенә ныҡ ҡына батыра. Тире тырнаҡтарына эләгеп ҡала. Әтәс, тағы ла ҡуҡырая төшөп, тауыҡтар алдында маҡтана башлай.

Бына, ҡарағыҙ, теге уҫал ҡуяндың тиреһен һыҙырып алып ҡалдым! Һап-һары булып, шыр яланғас көйө ҡасты. Үлтерә инем, ҡасып ҡотолдо, – ти.

Тауыҡтар әтәстең шундай батырлығына һоҡланалар.

Бигерәк батырһың инде! – тиҙәр.

Әтәс, тағы ла ғорурланып, маҡтаныуын дауам итә:

Мин иҫән саҡта бер кемдән дә ҡурҡмағыҙ! Һеҙҙе йәберләтмәм. Ҡуян түгел, төлкө килһә лә, ҡурҡмағыҙ, тыныс булығыҙ! – тип тауыҡтарҙы тынысландыра.

Икенсе бер көндө кис менән теге төлкө тағы ла ҡунаҡсаға килә. Әтәс быны күрә лә:

Әһә, теге шәрә ҡуян килгән. Хәҙер үлтерәм мин уны! – тип төлкөнөң елкәһенә осоп ҡуна. Төлкө ситкә йүгерә лә инәлгән була:

Әтәс туғанҡайым, харап итмә инде мине, үлтермә, зинһар! – тип ялынған була.

Әтәс батырланып:

Тиреңде һыҙырып алдым, хәҙер мин йәнеңде алам һинең, яуыз ҡуян! Ҡайҙа алып киттең минең тауыҡты? Йә, әйт әле! – тип ҡысҡыра. Төлкө үҙ хәйләһен дауам итә:

Тауығың иҫән, әтәс туғанҡайым, уға бер кем дә теймәгән, юҡҡа ҡыҙма. Урманда ул. Әйҙә барайыҡ, алып ҡайтырһың, – ти.

Тауығымды ҡайтармайынса тороп, мин һинең елкәңдән төшмәйем! – ти әтәс.

Бына шунда китеп барабыҙ бит инде, әтәс туғанҡайым. Алып ҡайтырһың, бер аҙ сабыр ит, – ти төлкө.

Урманға барып инеүҙәре була, төлкө аунай ҙа, әтәстең муйынынан эләктереп ала. Бер аҙҙан аңра әтәстең тик йөндәре генә һуҙып ятып ҡала.

## 49. Ҡарт айыу менән төлкө

Ҡартлыҡтан бәлйерәгән бер айыу, һыйыр-фәлән ауларға, бал эҙләп ағас башына менергә хәленән килмәй башлағас, тауыҡ үрсетеп көн күрмәксе булған. Ул тауыҡ аҫрай башлаған. Тауыҡтары күп үрсегән: төнәр урындары булмағанлыҡтан, уларҙы төйләгән тейәп алып киткеләй икән. Был бәләнән ҡотолоу өсөн, айыу

тауыҡ кетәге яһарға булған. Быны төлкө ишетеп ҡалған да айыу янына килгән.

– Мин бик һәйбәт балта оҫтаһы бит, – тигән ул. – Һиңә быны тигән тауыҡ кетәге ҡороп бирә алам.

Айыу, быға бик ҡыуанып, төлкөгә тауыҡ кетәге ҡороу эшен тапшырған. Тиҙ арала ул кетәкте ҡороп та биргән. Айыуға тауыҡ кетәге бик оҡшаған. Үҙе ныҡ, үҙе бейек, ем һалыр өсөн улаҡ кеүек нәмәһе лә бар, ти, ултырып төнәр өсөн арҡыры урҙа ла бик һәйбәт кенә эленеп тора, хатта йомортҡа һалыр өсөн ояһы ла бар, ти.

Яҡшы эше өсөн айыу төлкөгә ҙур йомартлыҡ күрһәтеп, әллә нисә көн һыйлаған, юлға мул итеп күстәнәс тә биреп ебәргән. Тик, тауыҡтарҙың торор урыны бик ныҡ булһа ла, эш алға бармаған: тауыҡтар, элеккесә, көн дә юғала ла юғала икән.

Аптырағас-йөҙәгәс, айыу тауыҡтарын һаҡларға бүрене яллаған. Һаҡта торған бүре тәүге көндә үк әлеге тауыҡ кетәге яһап биргән төлкөнөң үҙен тотҡан. Тауыҡтарҙы шул яуыз урлап торған икән. Кетәк яһаған саҡта, йәшерен тишек эшләп ҡалдырған да шунан тауыҡтарҙы һурып ала ғына бирә икән ҡәһәр һуҡҡыры төлкө.

– Хәйләкәр, яуыз йән икәнһең һин! – тигән айыу. – Быны өсөн мин һине язаһыҙ ҡалдырмайым!

Шулай тигән дә ҡарт айыу бүрегә төлкөнө тонгө ҡарауыл хаҡы өсөн биргән. Бүре уны, шунда уҡ ботарлап, өс кенә һоғонған да ҡуйған, ти. Шулай итеп, айыу тынып ҡалған, бүре туйып ҡалған.

## 50. Иблис төлкө

Бик борон заманда ҡара урманда, дөйә думбыра, ҡуян ҡурай, ҡондоҙ ҡумыҙ уйнап, йылан йырлап, бурһыҡ бейеп, алйырҙан аҡырып, ишәк илап, күркә көлөп йөрөгәндә, йәшәгән, ти, ат, һыйыр, суҫҡа, айыу, бүре. Былар бергәләшеп бик татыу ғүмер иткәндәр. Һәр береһе эш менән мәшғүл булып, ат ер һөрөп, иген иккән, он тарттырған, утын әҙерләп ташыған; һыйыр һөт-ҡатыҡ, май-ҡаймаҡ, ҡорот-эремсек әҙерләгән; суҫҡа ашнаҡсы булған, донъя көткән; айыу – бал, емеш-еләк, бүре ит ташыған, шулай итеп былар бер ҡайғы-хәсрәтһеҙ, ал да гөл булып ғүмер кисергәндәр. Быларҙың шул тормошта татыу ғына йәшәгәнен күреп, көнләшеп, бер төлкө донъя көткән.

Ҡош тоталмай, сысҡан-маҙар ошраталмай, ас та түгел, туҡ та түгел, бер өйрәнһәң, сүп тә түгел, тип, аҙыҡ әҙерләргә йыбаныи ятҡанда, башына бер уй төшә бының: «Ниңә мин былай ризыҡ хәстәрләп ғазап сигәм әле? Барайым әле уларға. Хәйләкәр төлкө тип юҡҡа ғына даным сыҡмаған. Хәйләһеҙ донъя – файҙаһыҙ. Үҙҙәрен төп башына ултыртып, һөт өҫтөндәге ҡаймаҡ кеүек рәхәтләнеп йәшәйем әле».

Төгеләр ауыр хеҙмәттән һуң йыйылышып, аш ашап ултырған ыштта, ишек шаҡып төлкө килеп инә.

Мөмкинме, мәрхәмәтле күршеләр? Хәлегеҙҙе белеп сығайым тип керҙем, һау-сәләмәт тораһығыҙмы? Мал-тыуарығыҙ, ағай-энеләрегеҙ именме? – тип, ҡупшы ҡойроғон болғай-болғай, тауышын ла ягымландырып, баҫалҡы ғына итеп өндәшә.

Иҫән-һаубыҙ, әйҙүк, түрҙән уҙ, күрше, табынға рәхим ит! – тип ҡунаҡсыл әшнәләр быны ашҡа ҡыҫтайҙар.

Әле генә һыйланып сыҡҡайным да һуң, ризыҡтан оло булып ... аштан баш тартҡан – бәләгә тарыған, ти торғайны мәрхүм ...йем, – тип, ас төлкө быларҙа туйғансы һыйланып, тамағын ...лырып, доға уҡып маташа.

Ҙур рәхмәт һыйығыҙға, ҡул-аяғығыҙ һыҙлауһыҙ булһын, ...ығыҙҙа ризыҡ өҙөлмәһен, Хоҙай оҙон ғүмер бирһен үҙегеҙгә, – тип, ике ҡулы менән битен һыпырып ҡуя. – Һеҙгә бер кәңәш менән ...йнем, берлектә – тереклек, тип үтә лә дөрөҫ әйткәндәр, бына ... күмәк булғас, иркен тормошта йәшәйһегеҙ, ә мин яңғыҙлыҡта ...ланам. Әллә, мин әйтәм, мине үҙегеҙҙең яныгыҙға алһағыҙ, ... лә еңелерәк булмаҫмы, тим. Аш-һыу ҙа мулыраҡ. Баш-күҙ ...ғығыҙға Хоҙайҙан теләп ултырыусығыҙ ҙа булыр ине...

Ярар, уйлашып, кәңәшләшеп ҡарайыҡ, иртәгә килерһең, – ... айыу.

Төлкө сығып китә, бәхәс тыуа.

Бер етем мәхлүк икән, әйҙә бергә йәшәһен, – ти киң күңелле ...март ат.

Ул әрәм тамаҡтан ниндәй йүн булыр тиң, кәрәге бер тин, – ... һыйыр, ниҙер һиҙемләп.

Бигерәк сибәр, ҡойроҡтары үҙе генә ни тора, йым-йым итеп ...ланып, үҙенә бер ҡараһаң, күңелдәргә үҙе бер дауа, – ти икән ... йүгерек бүре, күҙҙәрен майландырып, иренен ялап.

Тәүҙә ҡулынан ни эш килә, ниндәй һөнәре бар, шуны ...һеҙгеһен, – ти айыҡ аҡыл менән донъя күтәргә күнеккән йүнсел ....

Ярай, ағай-эне, бик дини, уҡымышлы, әҙәпле күренә, им... ла һәләте бар төҫлө. Ауырып-сырхап китһәк, кем белә, бәл... ...ыҙ ғына уны керетеп, – ти бер ҡатлы, гәмһеҙ айыу.

Быларҙың иртәнге ашҡа ултырыуҙары була, төлкө тып итеп ... тә керә.

Хәйерле иртә, ҡәҙерле күршеләрем! Йортоғоҙ ҡотло, йөҙөгөҙ ...лы, ашығыҙ бәрәкәтле булһын! – ти.

Йәшы һүҙ – йән аҙығы, былар төлкөнөң һүҙҙәренә иреп, һый-...ормәт күрһәткәс, сусҡа һорай:

Йә, ҡорҙаш, беҙҙең менән йәшәргә теләгең булғас, ниндәй ... менән шөғөлләнергә таһылың бар?

Мин ни бәләкәй генә кәүҙәм менән әллә ни эш ҡыйрата ...мам, теләһәгеҙ, тауыҡ кетәге төҙөп бирһәгеҙ, ҡош-ҡорт үрсетеп, ... ите, йомортҡа етештереүҙе үҙ өҫтөмә алыр инем, – ти.

Ғәләмәт табышлы, файҙалы хеҙмәт булмаҡсы тип, төлкөнө үҙ яндарына алырға ризалашҡандар, ти, былар. Дәррәү тотоноп, кетәк төҙөп, ҡаҙ, өйрәк, тауыҡ һатып килтереп, төлкөгә тапшырғандар, ти, былар. Шулай һәр береһе үҙ эшен үтәп, кис булһа, бергә йыйылып, көңгөр-ҡаңғыр һөйләшеп, әкиәт һөйләп, йомаҡ ҡойоп, байрамдарҙа уйнап-көлөп йәшәүҙәрен дауам итәләр.

Хәбәргә төлкө үтә лә оҫта була, ауыҙына ҡаратып тик ултыра. Хеҙмәт һөймәҫ төлкө тәүҙә, ауыр булһа ла, үҙ бурысын еренә еткереп башҡарырға тырыша, быларҙың табынында әҙ-мәҙ булһа ла ҡош ите, йомортҡа күренә башлай. Үҙен дә буш ҡалдырмай: көн дә бер тауыҡҡа айыу майы һөртөп торған.

Аш-һыу мул, тамаҡ һыйлы булғас, төлкө тулыланып, матурайып китә. Уйнашсы бүренең төлкөгә нәфсеһе төшә, һунарға сыкһа, алыҫҡа ла китмәй, бер аҙ ғына табыш ҡаптыра ла, һыпырта өйгә. Йөрөй төлкө янында ҡупырынып, сөсөләнеп. Тегенеһе лә шаян, бүре янына килһә – үтә яғымлыланып, йылмайып-көлөп кенә хәбәрен һөйләп, күҙҙәрен ҡыҫҡылап ҡылана. Шулай итеп, былар араһында эш китә ологайып.

Уйнаш барҙа ни уңған? Быларҙың өҫтәлендә ит кәмей, тауыҡтар үрсемәй, киреһенсә көндән-көн кәмей. Ни өсөн тигәндә, бүре менән төлкөлә эш ҡайғыһы китә. Уларға ҡаршы өйҙә ризаһыҙлыҡ тыуа, бигерәк тә сусҡа, бөтәһен дә күреп йөрөгәс, туҙа.

– Шул кәнтәйҙе ҡыуыр кәрәк, йөрөй бүрене аҙҙырып, донъяны болғатып. Зыянынан башҡа бер файҙаһы юҡ.

Төлкө сусҡанан үс алырға, бынан ҡыуҙырырға этлек уйлай. Үҙе ашаған тауыҡ һөйәктәрен йыйып ала ла сусҡа йоҡлап йөрөгән һике аҫтына һалып ҡуя.

Бүре төлкөнө ҡосаҡлап алыуға, быныһы ҡырҫ-мырҫ булып үпкәләп ала.

– Йәнем-бәгерем тигән булаһың, һинең өсөн утҡа-һыуға керермен, ғүмерлеккә ташламам, тиһең, ә үҙең бер йүнһеҙ сусҡанан һөйөклөңдө ҡыйырһыттыраһың, – тип мышҡылдап илаған булып маташты, ти.

– Яйы сыҡһын әле, мин уны аҡылға ултыртырмын, эргәңдә йүгереп кенә йөрөйәсәк, – тип бүре һөйәркәһен йыуата.

Аулаҡта осратып, төлкө айыу янына килә. Ҡойроҡтарын болғатып, күҙ-башын уйнатып, иркәләнеп-наҙланып, йомшаҡ итеп айыуҙың түшенән һыйпап ала. Был иҫәүән иреп төшә, йөрәге өлпөлдәп, төлкөнө ҡосаҡлап ала.

– Ҡупшыбикәм, нимәгә был арала күңелһеҙләнеп йөрөйһөң? – тип мөңрәй айыу.

– Эй, ағайым, йәнем, бер нәмә белмәйһең. Эш тип янып көйәм, тик тауыҡтарым бөтөп бара. Төн йоҡомдо йоҡламай күҙәтә торғас, таптым бит сәбәбен: анау туймаҫ тамаҡ бирән сусҡа көн дә берике тауыҡты урлап, төнө буйы кимереп сыға икән. Ана бит, ниндәй һимергән, өрөп тултырылған кеүек, – ти.

– Булмаҫ, яңылышаһыңдыр, – ти айыу.

Алдатһам, антым башыма етһен, хаҡ бына, ышанмаһаң, әйҙә ...ырып ҡарайыҡ, – тип, айыуға сусҡаның һике аҫтын асып күрһәт... унда тулып тауыҡ һөйәге ята икән.

Ах, ҡараҡ, беҙҙән йәшереп тығынып йөрөй икән, – тип айыу ...ыуланып китә.

О бүре үтә лә ҡоторонop китте, ти: «Төлкөбикәгә ҡаҙарынып ...өрөүең етмәгән, урлашып йөрөй икәнһең», – тип осоп ҡуныпып ...ра икән.

Ат менән һыйыр, сусҡанан да тоғро йән юҡ, күп булһа, төл...оноң касафаты булыр тип яҡлаһа ла, сусҡа был ғәҙелһеҙлеккә ...әнеп, быларҙы ташлап сығып китә.

Сусҡаның эшен һыйырға йөкмәтәләр. Йәшәй, ти, төлкө ҡуп...ланып, айыу, бүре менән алмаш-тилмәш ғишыҡ тотоп, ат ...ән һыйырға бойороп.

Ауыр эшкә, ғәҙелһеҙлеккә сыҙай алмай, йәне көйөп йөрөй...өй ҙә, ҡаҙалып китһендәр барыһы ла тип, күтәрә һуғып сығып ...тә һыйыр. Үҙ алдына донъя көтә башлай. Ул киткәс, атҡа тағы ...эш өҫтәлә, үҙенең төп хеҙмәтенән тыш, һыйыр, сусҡа башҡар...ан эштәрҙе лә атҡарырға тура килә.

Ат түҙҙе-түҙҙе лә, ҡаҡ һөйәккә ҡалып, хәле бөтә башлағас, бы...ларҙы ташлап, баш һуҡҡан яҡҡа китте, ти, ҡасып. Айыу, бүре, ...ө кәйеф-сафа ҡороп, бар йыйынтыны ашап бөтөргәйне, аҙыҡ...лек табыу, аш-һыу хәстәрләү, айыу менән бүренең үҙ елкәләренә ...ә.

Үҙенән ялҡып, ҡырын күҙ менән ҡарауҙарын һиҙеп, төлкө лә ...ырға сығып киткән була. Алыҫ түгел ҡыуаҡлыҡта, сытыр...ыр араһына кереп, ҡуйынына йәшереп килтерелгән тауыҡты ...ап, йоҡоһо туйғансы йоҡлап, ах та ух булып килеп керә.

Ауылға барҙым, ҡаҙ йә тауыҡ булһа ла сәлдерәйем тип. ...арсылар күреп ҡалып, артымдан төшмәһенме? Саҡ ҡасып ...ылдом. Юлдан яҙып, килә ятһам, ҡасҡалаҡ атты күрҙем, әҙәм ...ышанмаҫ хәбәр ишеттем, – ти.

Йә, нимә ишеттең, тиҙерәк әйт, – тип ҡолағын ҡарпайта ...ыу.

Һин һорама, мин әйтмәйем. Тик, ҡәҙерле айыу ағаҡайым, ...ең хәүефһеҙлегеңә зыян-зарур булмаһын тип кенә һөйләмәһәм. ...әһеңме, ул ҡарт алаша ни ти? Тайыш табан, кәбәк баш, ...ыр айыуға үсем бар, осраһа, үлтергәнсе тибеп китәм, ти.

Был хәбәрҙе ишеткәс, айыу ҡыҙып китә. «Хәҙер үк эҙләп та...м, арт һабағын уҡытам! Тыбырсынып йән бирмәһәме аяҡ аҫтын...!» – ти.

Айыуҡайым, улай итеп, ҡоҙғондарға ем итеп ҡалдырып ҡуй... Ат ите үтә лә тәмле, шифалы була, ти. Йөкләп килтер ин..., ти төлкө, ялағайланып.

Айыу китә атты эҙләп. Таба бит утлап йөрөгән еренән. Барып ...етә, һелтәп тә ебәрә.

– Һин нимә, аҡылдан яҙҙыңмы? Уйыныңмы-ысыныңмы, – тип ат асыулана.

– Ҡаныңды эсеп, ҡаҙыңды һурасаҡмын, – тип ихласлап тотоноуға, ат быныҡ маңлайына шаҡ иттереп артҡы тояғы менән тибелә сабып китә, айыу әҙәрләп төшә артынан. Айыу тынғылыҡ бирмәҫ, тип, ат ауылға барып кешегә баш һала. Ана шул дәүерҙән бирле ат кешегә хеҙмәт итә.

Берҙән-бер көндө, аҙыҡ-түлек наҡысланғас, төлкө: «Мин дә һунарға барып киләйем», – тип сығып китә. Әлеге лә баяғы, бер күл янында аңдып, бер өйрәкте тотоп ала, теге иҫәүәндәр менән бүлешкәнсе тип, бер үҙе ашап, ял итеп ҡайтып керә.

– Иртән уңмаҫ, кис уңмаҫ, кис уңмаған – һис уңмаҫ, тип, ҡалай белеп әйткәндәр. Көнө буйы ҡыҙырып бер нәмә лә осрата алмай, кискә табан өйрәкте тоттом тигәндә, ауыҙҙан осоп сығып китте, йөндәре генә ҡалды туҙып.

– Һин бешмәгәндең шул булыр, ҡасан табыш килтергәнең бар? – ти бүре.

– Эй, бүрекәйем, батырым, үҙеңә ҡайһылай хәүеф-хәтәр янағанын белмәй йөрөйһөң. Бөгөн теге һыйырҙы осраттым, тауыҡбаш бүрене күрһәм, мөгөҙҙәрем менән эсен ҡойоп, тояҡтарым менән иҙеп китәм, тине, аллаһи-биллаһи, алдаһам, ер йотһон үҙемде, – ти дингә тамсы ла ышанмаған төлкө.

Тиреһенә һыйыша алмай бүре һыйырҙы эҙләп йөрөгәндә һайыҫҡанға тап була.

– Эй, шыҡырҙыҡ, күрмәнеңме һыйырҙы?

– Нимәгә кәрәк һуң ул?

– Иҙмәһен иҙеп, һыйыр итен ауыҙ итергә, дуҫтарҙы һыйларға! – Һайыҫҡан осоп китә лә, һыйырға барыһын да еткерә.

Ул дыуамалдан ни була, һау саҡта бынан тайыу хәйерле, ти ҙә, ауылға барып, кешелә йәшәргә ҡала. Шул осорҙан бирле һыйырҙың өй хайуаны булғанын төшөнгәнһеңдер инде, ҡустым.

Бүре ризыҡ таба алмай, әлһерәп ҡайтып килһә, имән сәтләүегә ашап йөрөгән сусҡаға тап була.

– Эй, сусҡаҡай, һине лә күрер көн бар икән! Әйҙә, ҡайтайыҡ, һинһеҙ беҙгә ҡыйын, һағынып бөттөк үҙеңде.

– Йә, юхаланма, ана фәхишә төлкөңдө ҡосаҡла ла йөрө, һин һунарға китһәң, айыу менән уйнаш яһай, айыу китһә – һинең ҡосаҡта. Һеҙгә барып ҡол урынына йөрөргә бер тинтәк түгел әле мин, – тип яуаплай сусҡа.

– Ә... улаймы, яҡшылыҡтың ҡәҙерен белмәһәң, көслөк менән алып ҡайтам мин һине, – тип бүре сусҡаға ташлана. Былар араһында алыш китә. Бүрене еңеп булмаҫын аңлап, сусҡа ҡаршылыҡ күрһәтә-күрһәтә, ауыл яғына ыңғайлай. Баҫтырышып барып етеүҙәренә, кешеләр күреп, бүрене ҡыуырға төшәләр, ә сусҡа кешелә йәшәргә ҡала. Бүре аяҡтарын көскә һөйрәп ҡайтып етә, сусҡа юҡты һөйләмәйҙер әле, тип, шым ғына килеп, тәҙрәнән ҡараһа, айыу менән төлкө ҡосаҡлашып, үбешеп яталар.

Бүре ҡотороп китә, керә һалып төлкөгә уңлы-һуллы һалып ебәрә. Теге меҫкен сығып ҡасҡанын һиҙмәй ҙә ҡала. Айыу менән бүре һуғышып китә, бүре бөрөлә башлағас, ҡойроҡтарын артъяҡҡа һалып, һыпырта.

Бына шул ваҡыттан бирле айыу, бүре, төлкө айырым йәшәп, айыу бүре менән төлкөнө эҙләһә, бүре айыуҙан ҡасып, төлкөнө эҙләй, төлкө уларҙан һаман да ҡасып йөрөй, ти.

Бына шулай, уландар, әкиәттең хикмәте. Ағас башын ел, кеше башын һүҙ бора. Алды-артты уйламай, ялғанды тикшермәй, дөрөҫлөктө иҫбатламай ҡыланһаң, быларҙың көнөнә ҡалыуыңды һиҙмәй ҙә ҡалырһың. Күңеленә ныҡлап һалып ҡуй!

## 51. Йомарт ҡуян

Бер байрам көндө бер кеше үҙенең бәләкәс кенә улын ҡунаҡ саҡырырға ебәргән. «Фәлән-фәлән ағайыңды, фәлән-фәлән бабаһыңды, фәлән-фәлән еҙнәңде саҡыр», – тип, ҡырҡмаһа-ҡырҡ кешенең исемен әйтеп сыҡҡан. Малай тыңлап торған, тик, ҡапҡанан сыҡҡас та, ҡунаҡҡа кемдәрҙе саҡырырға кәрәклеген онотоп бөтөргән, ти. Өйгә кире инеп, ҡайтанан һорашырға ҡыйыулығы етмәгән. Шунан малай: «Тотайым да бөтә ауыл кешеләрен саҡырып ҡайтайым, шулар араһында мин саҡырырға тейеш кешеләр ҙә булыр әле», – тигән. Малай, ауылдың һәр урамын ике яҡлап төшөп алған да, өй беренсә йөрөп, бөтә кешене ҡунаҡҡа саҡырған.

Ҡунаҡтар йыйыла башлаған. Аҡрынлап йортҡа бөтә ауыл халҡы килеп тулған, ата менән әсә ҡаушап ҡалғандар:

– Ни эшләргә инде? Был тиклем күп ҡунаҡҡа етерлек һый-хөрмәтте ҡайҙан алмаҡ кәрәк? – тип аптырашҡандар улар.

Ә малай, кемдәрҙе саҡырырға кәрәклеген онотҡанлыҡтан, бөтә ауыл халҡын саҡырып ҡайтыуын ата-әсәһенә һөйләп биргән.

Ҡунаҡтар һый-хөрмәт көтәләр. Хужалар булған аҙыҡты ҡырып-һеперәп ашъяулыҡҡа килтереп ултырттылар, һый барыбер етмәне, ти.

Атаһы малайына:

– Үҙең эште боҙҙоң, хәҙер үҙең рәтлә! – тигән.

Ата-әсәһен шулай оятҡа ҡалдырғаны өсөн малай, күҙ йәштәрен ағыҙа-ағыҙа, өйҙән сыҡҡан да ауыл артына йүгергән, унан урманға барып ингән. Ағас төбөнә ултырып, йәнә үкһеп илай башлаған.

Шул ваҡыт ул бер ҡуян сабып килгәнен күргән. Малай былтыр ғына ул ҡуянды үҙ өйөндә аҫрап үҫтергән, үҫкәс, уны урманға ебәргән икән. Ҡуян малайҙы әллә ҡайҙан танып, уның эргәһенә килеп ултырған.

Малай ҡуянға үҙенең ҡайғы-хәсрәтен һөйләп биргән. Ҡуян уны яҡшылап тыңлағандан һуң, оҙон ҡолаҡтарын ҡайсылап, арт-

ҡы аяҡтарына ултырып, алғы аяҡтары менән малайҙың ҡулынан тотоп:

– Ярар, ҡайғырма, дуҫҡайым. Бар, өйөңә ҡайт, бөтәһе лә булыр, – тигән. Үҙе һикерә-һикерә урманға инеп киткән.

Малай ҡайтыуға әрһеҙ ҡунаҡтар өйҙә булған һый-хөрмәтте ашап-эсеп бөтөргән булғандар. Урындарынан ҡуҙғалмай, тағы берәй нәмә ашатмаҫтармы, тип ултыралар, ти, былар. Ҡайһы берҙәре хужаға ҡарап:

– Һыйың етәрлек булмағас, ниңә беҙҙе ҡунаҡҡа саҡырҙың? – тип асыуланып та ҡуялар икән.

Бер ҡунаҡ тәҙрәнән ҡараһа, ҡаушап ҡалған, уның артынса башҡалар ҙа ҡараһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр: урам кейек, йәнлектәр менән тулған, бөтәһе лә был өйгә табан киләләр, һәр береһе үҙе менән нимәлер алып килә икән. Айыуҙар бал тулы солоҡ тәгәрәтәләр; бүреләр һарыҡ түшкәләре күтәргән; боландар мөгөҙҙәренә һөт тултырылған силәктәр элгәндәр; ҡуяндар – кәрзин-кәрзин сәтләүектәр, төлкөләр тауыҡтар, ҡаҙҙар күтәреп килтерәләр, ти.

Был әлеге ҡуян эше икән. Ул үҙенең урмандағы дуҫтарын малайға ярҙам итергә саҡырған икән. Ҡуян уларға был малай уны нисек ҡарап үҫтереүен, үҫкәс иреккә сығарып ебәреүен һөйләп биргән. Шунан инде улар ана шул байлыҡты малайға илтергә булғандар.

Урман йәнлектәре алып килгән һый-хөрмәттәрҙе ишек алдына ҡуйғандар ҙа, үҙҙәре йәшәгән ергә ҡайтып киткәндәр. Ғәжәпкә ҡалған ҡунаҡтар ауыҙ асып һүҙ ҙә өндәшә алмағандар, ти.

Ата менән әсә шатлыҡтарынан ни эшләргә лә белмәгән. Малай уларҙан да былайыраҡ ҡыуанған.

Хужалар өс көн, өс төн буйы кинәнеп ҡунаҡ һыйлаған. Ҡунаҡтар өйҙәренә таралышҡандан һуң да табында ярты һый тороп ҡалған икән, ти.

Һуңынан халыҡ араһында был хәл тураһында оҙаҡ йылдар буйы һөйләп йөрөгәндәр. Ни өсөн тиһәң, бындағылай ҡунаҡ һыйлау бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла булмаған икән.

## 52. Төлкө айыу өңөндә

Бер саҡ төлкө айыуҙы алдарға уйлай. Ауылға барып, бер ғәмһеҙ хужаның бер мискә әсегән балын урлай ҙа айыуға бүләк итеп алып бара. Айыу балды ятып эсә, ныҡ ҡына иҫереп тә ала. Төлкөнө маҡтай башлай. Аҙаҡ төлкөнө күтәреп урманда йөрөтә.

– Эй, кемдәр бар был урманда, килегеҙ әле бында! – тип үкерә башлай айыу.

Урмандағы бөтә кейектәр, йыртҡыстар сабышып килеп етәләр. Айыу уларға әйтә:

Бына ҡарағыҙ, был төлкө – минең иң яҡын дуҫым. Донъяла ынан да яҡын дуҫым юҡ минең. Хатта унын миңә бер аҙ туғанлығы ла бар. Ҡарағыҙ, минең төлкө туғаныма берегеҙ ҙә теймәгеҙ! Тейер булһағыҙ, берегеҙҙе лә ҡалдырмай туҡмап үлтерермен! Урманда үҙе теләгәнсә йөрөһөн. Хәтерен ҡалдырмағыҙ, көлегеҙҙән килгән тиклем уға ярҙам итегеҙ. Ул ни әйтә, тыңлағыҙ, ҡаршылашмағыҙ! – ти.

Бөтә йыртҡыс-кейектәр айыу әйткәнде үтәргә һүҙ бирҙеләр, ти. Айыу төлкөнө күтәреп үҙ өйөнә алып ҡайта.

– Тартынма, үҙ өйөңдәге кеүек бул, – ти уға. Улар икеһе бергә йоҡларға ята.

Айыу иртә менән торғас, үҙенең эргәһендә бер төлкөнөң йоҡлап ятҡанын күреп ғәжәпләнә.

– Был ни эш? Был кем? Был ни эшләп минең өйөмдә йоҡлап ята. Эй, тор! Кем һин? Ниңә минең өйөмә килдең? Ни йөрәгең менән бында килергә батырсылыҡ иттең, оятһыҙ? – тип асыу менән үкерә башлай.

Төлкө уяна ла:

– Кем уята икән тиһәм, үҙемдең айыу ағайым икән. Хәйерле иртә, айыу ағайым! – тип йомшаҡ ҡына тауыш менән өндәшә.

– Хәйерле иртә, имеш. Бирермен мин һиңә хәйерле иртәне! Ниңә һин минең өйөмә рөхсәтһеҙ индең, ә? – тип айыу тағы ла ҡыҙыраҡ үкерә.

– Кисә бергә бал эстек бит, айыу ағай, әллә хәтерләмәйһеңме? – ти төлкө.

– Юҡ, бер нәмә лә хәтерләмәйем, белмәйем, минең баш ауырта, бар сығып кит! Бынан һуң күҙемә лә күренмә! – тип айыу төлкөнө ҡыуып сығара.

Төлкө, был хәлгә бик ғәрләнеп, айыуҙан ҡалай итеп булһа ла үс алырға хәйлә эҙләй башлай.

Бына ул яланда һунарсыларҙы күреп ҡала. Улар урман яғына табан килә яталар икән. Төлкө һунарсыларға күренә лә, аҡһаған булып, ҡаса башлай. Тегеләр уны ҡыуырға тотоналар, һунарсыларҙы ул айыуҙың өйө эргәһенә килтереп еткерә лә, үҙе, ҡуйы ҡыуаҡ араһына инеп, юҡ була. Һунарсылар айыуҙы үлтереп алып ҡайтып китәләр. Шундай ҙур табыш булғас, төлкө иҫтәренә лә инеп сыҡмай тегеләрҙең.

Һунарсылар айыуҙы алып китеү менән, төлкө унын өйөнә килеп тә инә.

Төлкө айыу өйөндә рәхәтләнеп йәшәй бирә. Айыу күренмәй башлағас, төрлө йыртҡыстар унын хәлен белергә киләләр. Бер саҡ бүре бурһыҡ килә. Өй эргәһенә килеп еткәс тә:

– Инергә яраймы, айыу ағай? – тип һорай. Өйҙән төлкө йәһәт кенә килеп сыға ла:

– Бик тауышланма, туғанҡай, айыу ағайым ауырып ята, – ти.

– Мөмкин булһа, өйгә инеп, унын хәлен белеп сығайым әле мин, – ти бурһыҡ.

– Ярамай, ул йоҡлай әле. Ул, ҡош ите ашағым килә, тигәйне, һин уға, туған, ҡош ите килтер, – ти төлкө.

Хәл белергә килгән һәр бер йыртҡысҡа ул шулай яуап бирә, айыуға тип ҡош ите һорай. Йыртҡыстар, төрлө ҡош иттәре килтереп, төлкөгә ҡалдырып китә торалар. Төлкө йылы өйҙә, ҡош ите ашап, рәхәтләнеп тик ята.

Бер ваҡыт кис менән айыу өйөнә бүре килә.

– Айыу дуҫ, мөмкинме инергә? – тип ҡысҡыра был. Төлкө өйҙән йүгереп килеп сыға ла:

– Бүре ағайым икән, һаумы, бүре ағай, иҫән генә йөрөйһөңмө? – тип ялағайлана башлай.

– Айыу дуҫты ауырый тип ишеттем, дөрөҫмө шул?

– Дөрөҫ, дөрөҫ, бүре ағайым, хәле бик насар.

– Мин инеп сығайым әле унын янына.

– Уны борсомағыҙ инде, бүре ағай. Хәле бик насар. Бер кемде лә индерергә ҡушманы, – тигән була төлкө.

– Ярай, лығырлама, бар кит! Үҙем инеп, хәлен белеп сығайым! – ти бүре, екереп. Төлкө асыуланған булып:

– Туҡта, бүре ағай, ниңә һин улай минең менән бик ҡысҡырып һөйләшәһең? Мин кем, беләһеңме? Айыу ағайымдың һүҙҙәрен оноттоңмо ни? – ти.

Бүре, айыуҙың төлкө тураһында әйткән һүҙҙәрен хәтерләп, төлкөнән ғәфү үтенә:

– Кисер инде мине, төлкө туған, уйламайыраҡ әйтеп ташланым шул. Минең холҡомдо беләһең бит инде. Зинһар, был турала айыу дуҫҡа әйтә күрмә инде. Сирле сағында уны борсома, һау бул, төлкө туған. Айыу дуҫҡа минән сәләм әйт. Һауыҡһын инде, бик оҙаҡ ятты бит, – тип, бүре китә генә башлағайны, төлкө уны:

– Бүре ағай, айыу ағайым ҡош ите ашарға теләй бит әле. Шуны берәй ерҙән табып килтерә алмаҫһыңмы икән? – тип туҡтата.

– Ярай, ярай, айыу дуҫ өсөн тырышырмын, – ти ҙә бүре үҙ юлына китә.

Бүре иртә менән үк бик һимеҙ бер ҡош килтерә. Бүрене өй алдында ҡаршы алып, төлкө:

– Бына рәхмәт! Айыу ағайым шатланыр инде. Бының өсөн ул һине ғүмер буйы онотмаҫ. Бир бында, үҙем һәйбәтләп кенә ашатырмын, – ти.

– Бүләгемде үҙем тапшырайым инде, төлкө туған. Бүләк менән ингән өсөн асыуланмаҫ әле, – тип, бүре өйгә инергә ҡуҙғалғанда, төлкө уға ҡаршы килеп баҫа.

– Бүре ағайым, зинһар, уны борсомағыҙ. Хәле бик ауыр, яңы ғына йоҡлап китте. Тыныс ҡына йоҡлаһын инде. Бир, миңә генә ҡалдыр бүләгеңде, – тип ялына.

– Мин уны уятмам, йоҡлаған сағында булһа ла күреп сыға-

йым, күптән күргәнем юҡ, һағындым, – тип, бүре айыуҙың өйөнә инеп китә. Төлкө урманға ҡаса.

Аҙаҡ бүре был төлкөнө, эҙләп ҡараһа ла, таба алмай. Бүре ана шул хәйләкәр төлкөнө әле булһа эҙләп йөрөй икән.

## 53. Ҡуян менән арыҫлан

Борон-борон заманда бер арыҫлан булған. Башҡа йәнлектәр арыҫландан бик ҡурҡып ҡына йәшәгәндәр. Ни өсөн тиһәң, арыҫлан уларға бер ҙә көн күрһәтмәй икән, ҡайҙа осраһа, шунда тота ла йығып ашай, ти, үҙҙәрен. Арыҫлан йәнлектәрҙең берәүһен тотоп ашаған саҡта, бишәүһе йөрәге ярылып үлә, ти. Ҡасып ҡотолорға һис бер әмәл булмаған, ти, был йыртҡыстан.

Арыҫландың шулай теңкәгә тейеүенән тәҡәттәре ҡалмағас, берзән-бер көндө урмандағы булған кейек-йәнлектәр йыйылышып, кәңәш ҡорҙолар, ти.

– Был арыҫлан бөтөрә бит беҙҙе, былай булһа. Ул беребеҙҙе тотоп ашағанда, бишәүебеҙ йөрәге ярылып үлә. Ни эшләйбеҙ хәҙер, ағай-эне? – тип әйтте, ти, төлкө.

Беҙ көн һайын йәрәбә һалайыҡ. Йәрәбә кемгә сыҡһа, шул арыҫландың ҡорбаны булыр, – тип әйтте, ти, айыу.

Шулай итеп, былар көн һайын йәрәбә һалырға булдылар, ти. Улар был хаҡта арыҫландың үҙенә лә хәбәр иттеләр, ти.

Беренсе көн йәрәбә ҡуянға сыҡты, ти. Ҡуян тороп, йәнлектәргә:

Ағайҙар! Беҙгә былай итеп һәр ваҡыт арыҫландың ҡорбаны булып үлеү бер ҙә килешкән эш түгел. Берәй хәйлә ҡороп, шунан ҡотолоу яғын ҡарарға кәрәк, – тип әйткән булды, ти.

Төлкө ҡуяндың һүҙен тыңлап торҙо ла:

Кит, хәсрәт! Һинме һуң хәйлә ҡороп, арыҫланды алдар йән! Белер-белмәҫ телең менән хәбәр һөйләп торған булаһың, асыуымды килтереп, – тип әрләп ташланы, ти.

Ҡуян арыҫлан янына китте, ти. Бер ҙә ҡабаланманы, ти, был. Көтөп ултырған арыҫлан бик асыуланды, ти, ҡуянға.

Ниңә улай яй йөрөйһөң һин? Ата-бабаларың яй йөрөмәнеләр заманында. Һин иртәнсәк үк килергә тейеш инең, хәҙер төш етеп килә, – тип әрләп ташланы, ти, ҡуянды.

Ҡуян ҡурҡып ҡына:

Мине һиңә көндөҙгөлөккә ашарға ебәргәйнеләр, икенсе бер ҡуян һиңә иртәнсәк килергә тейеш ине. Килә ятҡанда юлда башҡа бер арыҫлан осраған да теге ҡуянды тотоп ашаған. Бына мин дә әле һиңә килә ятҡанда шул арыҫланға тап булдым: «Ҡайҙа бараһың?» – тине. Мин уға: «Үҙемдең хужама – арыҫлан ағай янына барам», – тип яуап бирҙем. Шулай тигәс, теге асыуланып һүгә башланы: «Кем бында минән башҡа хужа булырға йөрөй

тағы?» – ти. Мин унан көскә-көскә генә ҡасып ҡотолдом. Шуға күрә һуңға ҡалып килдем, – тигән булды, ти, ҡуян.

Арыҫлан ҡуяндан тегенең ҡайҙа йәшәгәнен һораны, ти.

– Ул бынан алыҫ түгел, анау яҡта, – тип яуап бирҙе, ти, ҡуян.

– Әйҙә, алып бар әле һин мине уның янына. Мин уға күрһәтәйем әле бында кем хужа икәнен! – тип әйтте, ти, арыҫлан, асыуланып.

Ҡуян алдан китте, ти, уның артынан арыҫлан төштө, ти. Былар бик тәрән бер ҡоҙоҡ янына килделәр, ти.

– Бына ошо ҡоҙоҡтоң эсендә ултыра теге яман арыҫлан, тигән булды, ти, ҡуян ҡурҡып ҡына.

Арыҫлан ҡоҙоҡтоң эсенә ҡараһа, ысынлап та тап үҙенә оҡшаған икенсе бер арыҫланды күрҙе, ти.

Арыҫлан ҡоторонop, үкерә башланы, ти.

– Дөмөктөрәйем әле быны! – тип, гәйрәтләнеп, ҡоҙоҡ эсенә һикерҙе, шунда шомборлап батты ла үлде, ти.

Шатлығы эсенә һыймаған ҡуян, был хәбәрҙе йәнлектәргә тиҙерәк белдерер өсөн, һикерә-һикерә ҡайтып китте, ти.

## 54. Һарыбай

Ҡасандыр йәшәгән, ти, бер бабай менән бер әбей. Үҙҙәренең ғүмерендә бала күрмәгәндәр, ти, былар. Һарыбай тигән бер этенән башҡа бер кемдәре лә булмаған. Һарыбай бик яҡшы эт булған. Шуға хужалары уны бик ныҡ яратҡандар. Ләкин ҡарт көндәрендә бабай менән әбейҙең бер балалары тыуған. Шул көндән алып Һарыбайҙың ҡәҙере киткән: хужалары уны һанламай, иркәләмәй, һирәк ашата башлағандар. Һарыбай йонсой башлаған.

Берҙән-бер көндө Һарыбай, бабайға эйәреп, урманға барған. Унда үҙенең иҫке дуҫы бүрене осратҡан.

Бүре унан:

– Һарыбай дуҫ, һиңә ни булды, ябыҡҡанһың, бик бойоҡ күренәһең? – тип һораған.

Һарыбай:

– Элек мин хужамдың берҙән-бер ҡыуанысы инем, хәҙер бабайҙың улы бар. Шунан һуң миңә көн булмай башланы, – тигән.

– Ҡайғырма, Һарыбай, йәй булғас, һинең хәлең элеккесә булып рәтләнеп китер, бына күр ҙә тор, – тигән бүре.

Һарыбай уйға ҡалған. Бүренең әйткәненә төшөнмәгән. Шулай ҙа ул йәй етеүен бик көткән.

Бына йәй килеп еткән, ҡыҙыу көндәр башланған. Иген өлгөрөп, ураҡҡа төшкәндәр. Әбей менән бабай, йәш балаларын алып, баҫыуға сыҡҡандар. Бабай менән әбей ураҡ урған, бала арба аҫтында йоҡлаған, ә Һарыбай әлһерәп арба күләгәһендә ятҡан.

Уйламағанда теге бүре, ҡасып-боҫоп ҡына арба янына килгән дә, баланы алып киткән. Бала ҡысҡырған тауышҡа Һарыбай уянып киткән. Шунан ул, абалап өрөп, бүрене баҫтыра башлаған.

Һарыбайҙың өрөүен ишетеп, бабай менән әбей арба янына йүгереп килһәләр, баланың ғәйеп булыуын күргәндәр. Ҡайғыларынан илаша-илаша, Һарыбай артынан киткәндәр.

Һарыбай бүрене ҡыуып етеп, баланы ҡотҡарып алған да арба янына алып ҡайтҡан. Әбей менән бабай быға бик шатланғандар. Шунан яҡшы этте быға тиклем аслы-туҡлы тотоп, ябыҡтырып йөрткәндәре өсөн бик үкенгәндәр, ти.

## 55. Һоросай менән Ҡарасай

Бер бабай менән әбей йәшәгән, ти. Бала-сағалары булмаған, икәүҙән-икәү генә ғүмер иткәндәр. Күҙгә күренерлек мал-тыуарҙары ла булмаған, бары ике бесәй генә аҫрағандар: береһе – ҡара бесәй, икенсеһе – һоро бесәй.

Бабай ҙа, әбей ҙә бесәйҙәрҙе бик яратҡан. Ҡара бесәйҙе Ҡарасай тип, һоро бесәйҙе Һоросай тип кенә йөрөткәндәр улар.

Һоросай бик уңған булған. Ул төн йоҡламай сысҡан тота, көндөҙ ҙә тик ятмай, бөтә тишек-тошоҡто күҙәтеп тора, әбейҙең бөтә ашамлыҡ нәмәләрен сысҡандарҙан һаҡлай, ти.

Ҡарасай бик ялҡау булған. Бер ҙә сысҡан-маҙар тотоп мәшәҡәтләнмәгән. Төнөн әбейҙең һөтөн эсеп, ҡаймағын ашап ҡуя ла, көндөҙ, түшәккә менеп, мырылдап йоҡлай ҙа ята, ти, был.

Әбей аптырауға ҡалған. Уйынмы ни! Ике бесәй аҫрайҙар, шуға ҡарамаҫтан, һәр көн төндә һөт менән ҡаймаҡ ашап ҡуйылған була. Ни эшләргә кәрәк? Тота ла был ҡартына әйтә:

– Шулай ҙа шулай, төн булдымы, һөт менән ҡаймаҡты ашап китәләр. Был, ахыры, үҙебеҙҙең бесәйҙәр эшелер, – ти.

– Ҡайһыһы эшләне икән был яуызлыҡты? – ти ҡарт.

– Белмәйем шул, – ти әбей, – Ҡарасай былай бик аҡыллы күренә инде: нисә ҡарама, түшәктә генә ултыра. Һоросай эше булырға тейеш был.

Былар тағы һынап ҡарағa булалар. Ҡарасай төнөн тағы һөт менән ҡаймаҡҡа зыян килтерә. Өҫтәүенә, аҙыраҡ майҙы ла ауыҙ итеп ҡуя. Һоросай был төндө лә сысҡан артынан йөрөп үткәрә.

Иртәгеһен Ҡарасай түшәккә менеп ята ла мырылдап йоҡлап китә. Һоросай, ғәҙәтенсә, тағы тишек-тошоҡтарҙы һағалап йөрөй. Бабай әйтә:

– Дөрөҫ, Һоросай эше булырға тейеш был, – ти.

– Эйе, эйе, – ти әбей, – Ҡарасай бик инсафлы, гел шулай ул.

Шунан бабай менән әбей кәңәш итәләр ҙә Һоросайҙы урманға алып барып олаҡтырырға булалар. Бер көн бабай уны тоҡҡа һалып алып китә лә ҡараңғы урманда ҡалдырып ҡайта.

Һоросай, яңғыҙы ҡалғас, ҡайҙа барырға белмәй бер аҙ аптырап йөрөгән, ти. Ул арала ҡараңғы ла төшөп китә, бүреләр ҙә олой, өкөләр ухылдаша башлаған, ти. Һоросай шөрләп тә ҡуя

икән. Шул саҡ, йүгереп килеп, ағас башына менеп, үҙенсә тауыш сығарып, мыяулап ултыра башланы, ти, был.

Урмандағы йәнлектәрҙең бесәй мыяулағанын ишеткәне юҡ икән. Былар бөтөнләй аптырашта ҡалған. Килеп һорарға ҡурҡалар. Ни эшләмәк кәрәк? Йыйылышып алалар ҙа кәңәш итәләр.

Айыу әйтә:

– Тәүҙә беҙ уның кем икәнен беләйек, шуның өсөн арабыҙҙан берәүҙе һайлап ебәрәйек.

Бүре әйтә:

– Ундай эшкә Көлтәгойроҡ төлкө бик шәп була торған. Ул барһын.

Төлкө әйтә:

– Юҡ, мин булдыра алмайым: ауырып торам. Унда бына Шешколаҡ барырға тейеш.

Шешколаҡ ҡуян, бахыр, ҡурҡыуынан шөрләп үк ебәрҙе, ти. Шулай ҙа, ни эшләһен инде, бармай булдыра алмай. Ни өсөн тиһәң, тегеләр быны ашарға торалар.

Шешколаҡ ҡалтырана-ҡалтырана ғына Һоросай ултырған ағас төбөнә килеп өндәште, ти.

– Әйтегеҙсе, һеҙ кем булаһығыҙ?

Һоросай, тегенең ҡурҡҡанын һиҙеп, батырайып китте, ти.

– Минме? Мин бесәй затымын. Исемем бесәй батыр булыр.

– Ни теләйһең, бесәй батыр?

– Минме? Миңә сысҡан кәрәк. Сысҡан килтерегеҙ миңә! Сысҡандарҙы ҡырып бөткәс, күҙ күрер!..

Шешколаҡ ҡуян ҡайтып, тегеләргә хәбәрҙе һала. Урмандағы барлыҡ йәнлектәрҙе йыйып, бесәй батыр өсөн сысҡан тоторға сығып китәләр. Эй йөрөйҙәр, ти, былар урманды ҡыҙырып, эй йөрөйҙәр, ти, тик береһе лә сысҡан таба алмай, ти.

Кисен тағы айыу янына йыйылалар. Ни эшләргә кәңәш итәләр.

Төлкө әйтә:

– Бөгөнгә беҙ бына Шешколаҡ ҡуянбикәне балалары менән биреп торайыҡ. Ә иртәгә тағы күҙ күрер, – ти.

Бүре төлкөгә әйтә:

– Иртәгә сират һиңә була.

– Юҡ, минең ҡойроҡ бик ҙур бит, иртәгә һин барырһың.

Айыу әйтә:

– Юҡ, йәмәгәт, былай ярамай. Былай барһа, ул беҙҙе берәм-берәм бөтөрөр, беҙ уны саҡырып һыйлап ҡарайыҡ...

Шунан былар бесәй батырҙы саҡырып һыйламаҡ булалар. Һәр ҡайһыһы үҙенсә әҙерләнә: айыу бал килтерә, бүре һарыҡ ите килтерә, Көлтәгойроҡ төлкө тауыҡ ите килтерә, Шешколаҡ ҡуян уҫаҡ ҡайрыһы алып килә. Һый әҙерләп бөткәс, Һоросайҙы саҡырырға әлеге Шешколаҡ ҡуянды ебәрәләр.

Шешколаҡ ҡуян, Һоросай янына килеп, ҡурҡа-ҡурҡа ғына өндәшә:

Мин һеҙҙе, бесәй батыр, ҡунаҡҡа саҡырып килгәйнем.

Һоросай ҙа сер бирмәй: сысҡан таба алмай асыҡҡан булыуына ҡарамаҫтан, ойоп ултырған була. Шешҡолаҡтың ҡурҡҡанын күргәс, ул тағы батырайып китә.

– Ярар, барһам барырмын, – тигән була был. Үҙе, Шешҡолаҡ куян ҡайтып киткәс тә, тегенең артынан бара.

Һоросайҙың килергә риза булғанын ишеткәс, тегеләр тағы ҡурҡып китәләр. Кем ҡаршы алырға тейеш? Кәңәш итәләр.

Төлкө әйтә:

– Шешҡолаҡ ҡуянбикә уны белә инде, ул ҡаршы алһын.

Бүре әйтә:

– Дөрөҫ, бик дөрөҫ, Шешҡолаҡ ҡуянбикә ҡаршы алһын.

Айыу әйтә:

– Һеҙ риза булғас, мин ҡаршы түгел. Улайһа, һин, Шешҡолаҡ, ҡәҙерле ҡунағыбыҙҙы ҡаршы ал. Ә беҙ өйҙә көтөп торорбоҙ.

Шунан айыу үҙе ағас башына менеп китә. Бүре шул ағас төбөндәге ялғаш аҫтына кереп ята. Көлтәгойроҡ төлкө сытыр аҫтына инеп китә. Шешҡолаҡ ҡуянбикә генә тороп ҡала. Тегеләр киткәс, был ҡурҡышынан үлә яҙып, бер түңгәк артына йәшеренә.

Бына бер саҡ, эре генә атлап, Һоросай килә. Килә был, берсе атлай ҙа мыраулап ҡуйған була. Үҙе тирә-яҡҡа ҡарап ала. Килеп етә лә әйтә:

– Мырам, мырам! Бөтәгеҙҙе лә ҡырам! Ҡайҙа бында хужалар?

Яуап юҡ. Ни өсөн тиһәң, тегеләр барыһы ла шөрләп боҫоп бөккәләр. Һоросай эште һиҙеп ала ла тағы нығыраҡ итеп мыраулай башлай:

– Мырам, мырам! Бөтәгеҙҙе лә ҡырам!

Үҙе, шул саҡ килеп, тегеләр әҙерләгән һыйҙы тәмләп ҡарай. Ҡараһа – бал да һарыҡ ите, тауыҡ ите лә уҫаҡ ҡайрыһы... Был тағы мыраулап ҡысҡыра:

– Ни эшләп миңә сысҡан әҙерләмәнегеҙ? Мырам, мырам, барығыҙҙы ла ҡырам!

Тегеләр уның һайын ҡурҡышалар. «Инде ни хәл итәйек», – тип ятҡанда ғына, Һоросай түңгәк артында бер нәмә һелкенгәнен күреп ҡала. Ул быны сысҡан тип уйлай. Әлегесә мыраулап, тегегә ҡабан бара башлай.

– Әһә, эләктеңме?! – ти Һоросай. – Мин һине күпме ваҡыт эҙләп йөрөйөм!

Быны ишеткәс, түңгәк артындағы Шешҡолаҡ ҡуян бөтөнләй һуштан яҙа. Һоросай инде килеп эләктерҙем тигәндә генә, көс-хәл менән атылып, сытыр өҫтөнә менеп китә. Һоросай аптырай, ҡараһа: сытыр аҫтында ла бер нәмә һелкенеп ята. Был тағы мыраулай башлай:

– Әһә, ҡаптыңмы? – ти был. – Юҡ, минән ҡасып ҡотола алмаҫһың!

Һоросай килеп, Көлтәгойроҡ төлкөнөң сытыр аҫтынан күренеп ятҡан ҡойроғон эләктереп ала. Шунан Көлтәгойроҡ төлкө, ҡур-

ҡышынан сытыр аҫтынан сығып, йән-фарманға сабып, урман эсенә инеп юғала. Был хәлгә Һоросай үҙе лә бик ҡурҡып, тиҙ генә яҡындағы ағас башына менеп китә.

Теге айыу шул ағастың башында ултыра икән. Ҡапыл Һоросайҙың менеп килеүен күргәс, был, ҡурҡып, ултырған ерепән йығылып төшә. Шул ағастың төбөндәге ялғашҡа килеп төшә. Ә ялғаш аҫтында бүре ята. Ул да ҡурҡып китә. «Был Һоросай тигәне тегеләрҙе ашап бөткән дә миңә тотоноpға булған икән», тип уйлай. Тиҙ генә ялғаш аҫтынан сығып ҡаса.

Шулай итеп, тегеләр бөтәһе лә ҡурҡып ҡасып бөтәләр. Һоросай бер үҙе тороп ҡала.

Ҡалыуында ни файҙа бар инде, әҙерләнгән һый ашарлыҡ булмағас! Һоросай ҡарап тора-тора ла, ағас башына менеп ултыра.

Кискә табан был йәнлектәр тағы шул ергә йыйылышалар. Шешҡолаҡ:

– Ҡолағымдан тотоп сытыр өҫтөнә ташланы, кем, йәнем ус төбөндә генә ҡалды, – ти.

Көлтәгойроҡ төлкө:

– Ә минең ҡойроғомдан тотоп алып ырғытты, үләм икән тип торам, – ти.

Айыу:

– Мин менгән ағасты килеп һелкетә башланы, кем, тәгәрәп төштөм дә киттем, – ти.

Бүре:

– Ялғаш аҫтында ятам, теге бер ваҡыт килеп баҫты, көскә сығып ҡотолдом! – ти.

Ярай, былар шулай һөйләшә торһон, Һоросай агас башында ҡайғырып ултыра торһон, беҙ киләйек ауылға, инәйек әбей менән бабайға.

Бабай Һоросайҙы урманда ҡалдырып ҡайта ла:

– Инде тынысландыҡ, зыян итеүсе булмаҫ, – ти.

Әбей ҙә бик һөйөнә:

– Шулай ғына булһын инде, – ти.

Бер кис ҡуналар былар, ике кис ҡуналар. Ҡараһалар – әбейҙең һаман һөтөн дә эсәләр, ҡаймағын да ашайҙар. Етмәһә тағы, тотоусы булмағас, сысҡандар ҙа күбәйеп китә. Быныц Ҡарасай эше икәнен инде хәҙер төшөнәләр. Бахыр Һоросайҙы йәлләп алалар.

Инде ни аҡыл итергә? Хәҙер бабай Ҡарасайҙы тоҡҡа һалып, әлеге урманға алып китә.

Урманға килә был, бер аҙ ҡарап йөрөй ҙә, туҡтап, тоғоноң ауыҙын сисә башлай. Сисеп тә өлгөрмәй, әлеге Ҡарасай тырнаша ла башлай.

– Эһә, һин әле шулай уҫаллашырға уйлайһыңмы, яуыз? – ти бабай. – Улай булһа, мин һине тоҡтан сығармайым.

Шул көйө тоҡтоң ауыҙын ҡабат бәйләй ҙә ҡарағайға аҫып ҡуя, үҙе ҡайтып китә.

Ҡайта-ҡайта, был илаған бер тауыш ишетеп ҡала. Абайлабырҙың ҡараһа – тауыш бесәй балаһыныҡына оҡшаған, үҙе яҡында ғына һымаҡ. Бабай шул яҡҡа китә. Китә-китә, бер ҡарама төбөнә килеп сыға. Ҡараһа – ҡарама башында әлеге Һоросай ултыра. Ҡарт тегене күтәреп ала ла, бик ҡәҙерләп ҡуйынына тығып, өйөнә алып ҡайтып китә.

Ҡарағай ботағына аҫып ҡуйған Ҡарасай тоҡ эсендә бер аҙ ята ла сығырға тырышып сәбәләнә башлай. Сығырға әмәл таба алмағас, был ҡаты итеп мырылдап ала. Улай ҙа булмағас, яман итеп ҡысҡырырға тотона.

Урмандағы йәнлектәр тағы ҡурҡышып китәләр. Йыйылып, тағы кәңәш итәләр.

Айыу әйтә:

– Булмаһа, бүре дуҫ, берәйегеҙ барып килегеҙ әле. Тағы нимә һорай икән?

Бүре әйтә:

– Бик дөрөҫ әйтәһең, айыу ағай, барып килергә кәрәк. Был юлы бына Көлтәғойроҡ төлкө барһа, һәйбәт булыр.

Төлкө әйтә:

– Эйе, эйе, мин дә ҡушылам. Икегеҙ ҙә дөрөҫ әйтәһегеҙ, барырға кәрәк. Инде Шешҡолаҡ ҡуянбикә – бер өйрәнгән йәнлек, ул барһа, һәйбәтерәк булыр.

Айыу әйтә:

– Бик дөрөҫ әйтәһегеҙ. Һин, Шешҡолаҡ, бар, тағы барып, ҡарап кил әле. Нимә эшләй икән ул бесәй тигәндәре, тағы нимә һорай икән, белеп кил.

Шунан Шешҡолаҡ ҡуян, ҡурҡышынан илай-илай, тағы китә. Түңгәктән түңгәккә, түмәрҙән түмәргә ышыҡлана-ышыҡлана ғына, Ҡарасай аҫылынып торған ҡарағай төбөнә килә. Килһә, ни күҙе күрһен: ҙур ҡарағай, ҡарағай башында ҙур ботаҡ, ботаҡҡа бер тоҡ эленгән, тоҡ эсендә әлеге бесәй ҡысҡыра. Шешҡолаҡ башта аптырап ҡала, шунан, эштең ниҙә икәнен төшөнөп алғас, шатлығынан һикерә-һикерә, тегеләр янына ҡайтып китә. Ҡайта ла әйтә:

– Ҡурҡмағыҙ, иптәштәр, теге яуыз бесәйҙе берәү килеп, тоҡҡа һалып киткән!

Айыу ҙа, бүре лә, Көлтәғойроҡ төлкө лә был хәбәргә бик һөйөнәләр. Шешҡолаҡ ҡуян артынан эйәреп, әлеге ҡарағай янына киләләр.

Былар килгәс, тоҡ эсендәге Ҡарасай оторо ҡысҡырып ебәрә. Күпме ҡысҡырһаң да, тоҡ эсендә ятып ни эш ҡыраһың инде! Был да шул, хәле бөтөп, тына...

Тегенең тоҡ эсендә икәнен күреп ышанғас, айыу әйтә:

– Туҡтағыҙ әле, булмаһа, мин ҡарағай башына менәйем. Менәйем дә был яуызды алып төшәйем.

Айыу шатырлап ҡарағай башына менеп китә. Теге тоҡ эленгән ботаҡҡа етә. Шул ботаҡ буйлап тоҡҡа табан килә башлай был.

Килә ята, килә ята, инде килеп тоттом тигәндә генә, ботаҡ һынып китә лә, айыу дөрһөлдәп барып төшә бер яҡҡа, тоҡ эсендәге бесәй – икенсе яҡҡа.

Бүре лә, Көлтәгойроҡ төлкө лә, Шешҡолаҡ ҡуян да ҡурҡып урман эсенә ташлана. Айыу асыуланып ҡысҡыра, ти:

– Ә һин шулай тоҡ менән башҡа һуғаһың икән әле, – тип әйтә, ти, – үҙең тоҡ эсендә ятҡаныңды белмәйһең! Яуыз!

Шунан айыу, асыуланып, тоҡ янына килеп, Ҡарасайҙы туҡмай башлай, ти. Эй туҡмай, ти был, эй туҡмай, ти, Ҡарасай унын һайын аҡыра, ти. Тауышҡа тегеләр ҙә килеп еттеләр, ти. Ҡыҙып алып, улар ҙа Ҡарасайҙы туҡмарға керешеп киттеләр, ти. Бүре килеп тоҡто сәйнәп-сәйнәп ҡуя, ти. Көлтәгойроҡ төлкө килеп тырнап-тырнап ала, ти. Хатта инде Шешҡолаҡ ҡуян да килеп тоҡто типкеләп китә, ти.

Былар шулай туҡмай торғас, тоҡ эсендәге Ҡарасай тына. Тоҡто сисеп ебәрһәләр, эсенән үлгән ҡара бесәй килеп сыға. Былар аптырап ҡалалар.

Шешҡолаҡ ҡуян әйтә:

– Үлеүен үлгән дә инде, ул хәтле туҡмағас, үлмәй сыҙамаҫ. Тик был ни эшләп һоро бесәй ҡараға әйләнде икән һуң?

Айыу әйтә:

– Мин бик ҡаты туҡманым шул. Минең ҡул тейгән ер ҡара янып китә ул.

Бүре әйтә:

– Юҡ, мин бик ҡаты сәйнәнем, мин сәйнәгән ергә ҡап-ҡара ҡан һауа ла ҡуя торған.

Көлтәгойроҡ төлкө әйтә:

– Юҡ, мин бик ҡаты тырнаным уны. Мин тырнаған ер ҡараймай ҡалмай.

Шешҡолаҡ ҡуян әйтә:

– Мин һуң, мин типкеләп ташланым бит уны. Бынау табан менән типкеләүгә нисек сыҙамаҡ кәрәк, ҡарайыу түгел, ағарырһың!

Шулай итеп, урмандағы йәнлектәр бесәй тигән ят йәнлектән ҡотолалар. Шунан урман тынып ҡалған, ти.

Ә Һоросай, өйгә ҡайтып, бабай менән әбейгә бик оҙаҡ хеҙмәт иткән, ти.

## 56. Шаян бесәй

Борон бер ҡарт менән бер ҡарсыҡ йәшәгән. Уларҙың шаян ҡара бесәйе булған. Ҡарсыҡ бесәйҙе бик яратҡан, тик ҡартлығы етеп, үлеп киткән. Ҡарсыҡ үлгәндән һуң, бесәйҙе ашатыр-эсерер кеше булмаған. Шуға ул үҙенә үҙе аҙыҡ тапҡан. Күршеләрҙең мө-

тәрәптәренә, келәттәренә төшөп, май, ҡаймаҡтарын ашай, һөттәрен эсә башлаған.

Берҙән-бер ваҡыт күрше ҡатыны шаян бесәйҙе, һөтөн эсеп ятҡан ерендә тотоп алып, ҡартҡа илткән.

– Бына, бабай, бесәйең! – тигән ул. – Теләһәң генә ни эшләт үҙен, тик ул ҡабат минең күҙемә күренмәһен. Ҡара һин уны, нисек урлашырға өйрәнеп алған хәҙер һинең шаян бесәйең!

Күрше ҡатындың был һүҙҙәрен ишеткәс, ҡарт бесәйҙе, тоҡҡа һалып алып, урманға илтеп ташлаған.

Шулай меҫкен бесәй урманда йәшәй башлаған. Бына ул, һырт йөндәрен тырпайтып, яҡ-яғына ҡарана-ҡарана бара ла бара. Үҙе мыяулай, күҙҙәре йәм-йәшел булып яна. Шулай бара торғас, бесәйгә бер ҡуян осрай.

– Бесәй, ҡайҙа бараһың? – тип һорай ҡуян.

– Урмандағы бөтә йәнлектәрҙе ашарға барам! – тип яуап ҡайтара бесәй.

Ҡуян, ҡото осоп, йән-фарман сабып китә. Бер аҙ сапҡас, ҡуян төлкөгә тап була.

– Һиңә ни булды, дуҫҡайым? Ниҙән өрктөң? – тип һорай төлкө. – Ҡайҙа ҡасаһың, ҡупшы ҡуян?

– Ана тегендә бер бесәй йөрөй. «Урмандағы бөтә йәнлектәрҙе тотоп ашайым», ти. Шунан ҡасып барам, – ти ҡуян.

Төлкө лә шөрләй төшкән. Ҡуян менән икәүләп ары сабып китәләр. Быларға бүре осрай.

– Ҡайҙа ҡасаһығыҙ, дуҫҡайҙар?

– Ана тегендә бер бесәй йөрөй. Урмандағы бөтә йәнлектәрҙе ашап бөтөрәм, ти.

Бүре лә ҡурҡҡан. Өсәүләп ары ҡасалар. Ҡаршыға айыу килеп сыға.

– Аҡ-ҡараны күрмәй, ҡайҙа былай ҡабаланып бараһығыҙ, дуҫҡайҙарым?

Ҡуян, төлкө, бүре бер тауыштан:

– Ҡайҙа барғаныбыҙҙы үҙебеҙ ҙә белмәйбеҙ. Беҙгә тик уҫал бесәйҙән генә ҡасып ҡотолорға кәрәк, – тиҙәр.

– Улай булғас, мин дә һеҙҙең менән ҡасам, – ти айыу. Дүртәүләп китәләр. Арып бөтәләр. Туҡтап, ағас күләгәһендә ял итергә була былар.

– Ит бешереп, бесәйҙе ҡунаҡҡа саҡырабыҙмы әллә? – ти айыу.

Бөтәһе лә быға риза була. Айыу – ит табып килтерергә, бүре – һыуға, төлкө утынға китә, ә ҡуян бесәйҙе саҡырып килергә тейеш була.

Бер аҙ ваҡыт үтеүгә, айыу бер үгеҙҙе һөйрәп килтерә, бүре – һыу, төлкө утын килтергән. Ит бешеп тә сыға, ә ҡуян менән бесәй һаман юҡ та юҡ.

Төлкө, бүре, айыу ҡурҡыуға төшәләр: «Күрәһең, бесәй ҡуянды ашағандыр. Хәҙер ул беҙҙең башыбыҙға етергә әҙерләнәлер», –

тигән уйға киләләр. Ҡайҙа етте шунда ҡасып-боҫоп бөтәләр былар.

Айыу ағас башына менеп киткән, бүре, ҡыуаҡ төбөндә соҡор ҡаҙып, шунда төшкән дә, ҡойолған япраҡтар менән өҫтөн ҡаплаған булған, ә төлкө сытыр өйөмө аҫтына йәшенгән.

Ошо арала ҡуян, ҡурҡыуынан ҡалтыранып, бесәйгә яҡын баралмай торған да, бер ерҙә ҡатып тора торғас, көс-хәлгә:

– Эй! Батыр Мыраубай!.. – тип кенә әйтә алған.

Бесәй, был тауышты ишетеү менән, йәшел күҙҙәрен ҡуянға теклəгән дә туп-тура уға ҡарай йүгергән. Шунда ҡуян йөрәге ярылып үлгән дә ҡуйған.

Бесәй ары киткән. Бара торғас, тәмле ит еҫен һиҙә был. Әлеге айыу, бүре, төлкө ит бешергән ергә барып сыға. Ҡомһоҙланып ашарға ла тотона. Ҡарт үгеҙҙеке булғанға, ит бик ҡаты икән. Бесәй, уның ҡаты булыуына асыуланып, мырылдай-мырылдай ашай икән. Быны ишетеп торған төлкө, яҡшыраҡ йәшенергә булып, ҡуҙғалғандай иткән. Бесәй, сытырҙар шытырлауын ишеткәс, моғайын, был сысҡандыр тип, өйөм өҫтөнә ташлана. Төлкө, уҫал бесәй үҙемде өҙгөләп ташларға булды тип, сытыр аҫтынан ырғып сыға ла йән-фарман ҡасып китә.

Бесәй, бынан ҡото осоп, ситкә һикергән – бүре ятҡан соҡорға барып төшкән. Бүре, бөттө баш тип, ятҡан еренән сығып ҡасҡанын үҙе лә һиҙмәй ҡалған.

Бесәй, бүренән ҡото осоп, ағас башына үрмәләп менеп китә. Унда айыу йәшенеп ултыра икән. Бесәйҙе күреү менән иҫ-һушы киткән айыу гөрһөлдәп ергә ҡолап төшә.

Ергә төшөргә хәүефләнеп, бесәй шул ағас башында өс көн, өс төн ултырған, ти. Шунан һуң ғына урман ҡыҙырып йөрөй башлаған, ти.

## 57. Төлкө менән бесәй

Борон-борон заманда бер ҡарт менән әбей булған, ти. Улар бик ҡартайғандар. Уларҙың бер балалары ла булмаған. Шуға күрә улар бер бесәй көтөп торғандар. Ныҡ ҡартайғас, әбей менән бабай:

– Бесәй, һин үҙ йүнеңде үҙең күр. Теләһә ҡайҙа кит. Хәҙер инде беҙ ҡартайҙыҡ, – тигәндәр, ти, бесәйгә.

Бесәй бер аҙ аптырап ҡарап тора-тора ла, ахырҙа сығып китә. Бара торғас, бер күрше ауылға килеп етә. Унда бер байҙың келәтенә инә. Инһә, ни күҙе менән күрһен – ит тә, ҡаҙылыҡ та май, ти. Бесәй ҡыуана-ҡыуана ашарға тотона. Шулай ашап ята торғас, бер көндө уйға ҡала был: «Бәй, ниңә бер үҙем генә ашап тик ятам әле? Үҙемә берәй иптәш табып алып киләйемсе», – тип, келәттән сығып китте, ти. Бара торғас, бер яланда кәкрәйеп йөрөгән төлкөнө күрә лә шуның янына бара:

Төлкө дуҫ! Нихәл?! Нимә эшләп улай кәкрәйеп бөткәнһең? Һинең ниндәй байлығың бар? – тип һорай. Төлкө:

Эй, бесәй дуҫ, минең ниндәй байлығым булһын? Кәкрәйеп йөрөүемдән башҡа нәмәм юҡ, – ти.

- Эй, төлкө, улай булғас, һин улайтып йөрөмә. Минең бер кетүг һары майым, ҡаҙыларым, итем бар, – тип, төлкөнө алып китә үҙенә келәткә. Алып бара. Индерә лә бының тамағын туйҙыра. Шунан бер көн бесәй әйтә:

- Эй, дуҫ, беҙгә бында ашап ятыу оҡшамаҫ, әйҙә алып ҡайтып ашайыҡ, – ти. Төлкө:

- Әйҙә, улайһа, – ти. Ит-майҙы йыйнай башлай.

– Төлкө, һин алдан китә тор. Мин һинең арттан барырмын, – тип, төлкөгә йөкмәтеп сығарып ебәрә. Һуңынан бесәй үҙе йөкмәп сығып китә. Бара торғас, төлкөгә бер бүре осрай.

– Әһә, төлкө, хәҙер итеңде алып ҡалам бит, – ти бүре. Төлкө:

- Алып ҡына ҡара, Күтәрмәҫ апайым ауыҙыңды йырыр ул! – тип бүрене ҡурҡытып китә. Бара торғас, юлбарыҫ осрай быға. Төлкө уныһын да шулай тип ҡурҡытып китә.

Өйөнә барып етә төлкө. Күп тә үтмәй, бесәй ҙә килеп етә.

Бүре, айыу, юлбарыҫ осрашалар ҙа булып үткән хәл тураһында һөйләшәләр. Бүре әйтә:

– Төлкөнөң итен алып ҡалайым тигәйнем, ул: «Алып ҡалырһың, Күтәрмәҫ апайым ауыҙыңды йырыр ул», – тип, китеп барҙы.

Башҡалар ҙа бүренең һүҙен ҡеүәтләй: улар менән дә төлкө шулай яуаплашҡан икән.

– Әйҙә шул Күтәрмәҫте саҡырып күрәйек, – тип кәңәшләшә былар.

Айыу менән юлбарыҫ иткә китә, бүрене саҡырырға ебәрәләр. Ул ҡурҡа-ҡурҡа ғына бара. Барып инһә, төлкө ҡапҡа эсен һепереп йөрөй.

Бүре:

– Күтәрмәҫ апайың менән беҙгә барығыҙ, – ти. Төлкө:

– Сеү! Ипләп әйт. Ана тәҙрә төбөндә йоҡлап ята, ҡапыл уятырһың. Ипләп кенә әйт, – ти. Бүре тәҙрә төбөнә барыуы була – бесәй һикереп төшөп китә. Бүре ҡойроғон ғына күреп ҡала тегенең. Шунан ҡайтып китә. Күргәнен иптәштәренә барып һөйләй.

– Ҡайҙан саҡырҙыҡ?! Нәмәләрҙе хәҙер әҙерләгеҙ. Килһә, беҙҙе ҡыйнай бит. Артында метр буйы ҡамсыһы бар, – ти бүре үрһәләнеп.

Айыу менән юлбарыҫ ҙур хәүефкә ҡала. Төлкө менән бесәй килеүгә, барыһы ла йәшенеп бөтә: айыу ҡарағас башына менә, юлбарыҫ юлға күмелеп ята, бүре ҡырға ҡаса. Ҡунаҡтар килә. Килһәләр – бер йән эйәһе юҡ. Төлкө менән бесәй ҡаҙандағы итте ашарға тотона.

Күп тә үтмәй, айыу менгән ағастың ботағы һына ла төшә. Бесәй өркөп, айыу ултырған ҡарағасҡа менә лә китә. Мине туҡ-

марға килә икән, тип, ҡурҡышынан айыу ҡолай ҙа төшә. Ул ҡолап төшкәс, айыуҙы туҡмап яталар икән, тип, юлбарыҫ тора ла ҡаса.

Шулай итеп, бесәй менән төлкө итте ашап бөтөрөп ҡайтып китәләр.

## 58. Батыр бесәй

Борон-борон заманда бер әбей менән бер ҡарт булған, ти. Быларҙың бесәйҙәренән башҡа бер нәмәләре лә булмаған. Бесәйҙәре быларҙың бик бур булған, ти. Әбей менән бабайҙың итен, икмәген, майын урлап ашай икән. Бер ваҡыт әбей менән бабай бесәйҙе, урлағаны өсөн, туҡмап сығарған да ебәргәндәр, ти. Бесәй ике сысҡанды сабатаға еккән дә шуға ултырып киткән. Урман буйынан, юл буйлап бара икән, быны бер ҡуян күргән дә ҡурҡып боҫоп ҡалған. Бесәй үтеп киткән.

Шунан ҡуянға төлкө тап булған. Төлкө әйткән ҡуянға:

– Мин һине ашайым, – тигән.

– Ашаның, ашамай ни, мин бесәй ағай – мыйыҡҡа әйтһәм... – тигән ҡуян.

– Кем ул, ҡайҙан ул,ниндәй нәмә ул?

– Бына урман араһына бер батыр килгән, бөтә йәнлектәрҙе ҡырып йөрөй, – тигән.

Ҡуян шулай тип әйткән дә китеп барған. Шунан төлкөгә бүре тап булған...

Бүре әйткән:

– Мин һине ашайым, – тигән.

– Ашай алмаҫһың, мин бесәй ағай – мыйыҡҡа әйтһәм...

– Кем ул, ҡайҙа ул?

– Бына бер батыр килгән. Урмандағы йәнлектәрҙе ҡырып йөрөй, – тигән төлкө.

Бүре китеп барһа – айыуға тап булған. Айыу әйткән бүрегә:

– Мин һине ашайым, – тигән.

– Ашай алмаҫһың.

– Нишләп ашай алмаҫмын?

– Бына бесәй ағай – мыйыҡҡа әйтһәм, ашай алмаҫһың.

– Кем ул? Ҡайҙа ул?

– Бына бесәй ағай – мыйыҡ килгән ауылдан. Бөтә донъяны, йәнлектәрҙе ҡырып йөрөй, – тигән.

– Һин күрҙеңме уны? – тип һораған.

– Күрҙем.

– Улай булғас, әйҙә, беҙ уны саҡырып күрәйек әле, – тигән.

Төлкө, бүре, айыу – өсәүһе бер өйгә инеп әҙерләнгәндәр ҙә бесәй ағай – мыйыҡты саҡырырға ҡуянды ебәргәндәр.

— Ҡуян, һин барып саҡырып кил, — тигәндәр быға.

Ҡуян бара ла:

Бесәй ағай – мыйыҡ, һин беҙгә ҡунаҡҡа бар, – ти.

Кем саҡыра икән? – ти ҙә бесәй яйлап ҡуян артынан килә. ...дан ҡуян ҡайта.

Бүре өйгә керә. Ишек төбөндә бер септә ятҡан була. Бүре ...ның аҫтына кереп ята. «Шунан ҡарап ятам мин», – ти.

Шуның эргәһендә бер тирәк була. Айыу тирәктең башына ...неп китә. «Мин тирәк башынан ҡарап ултырам», – ти.

Шунан бында төлкө менән ҡуян икәүһе ҡунаҡ итә бесәйҙе. Бесәй ҡунаҡ була. Ашап ултыра был, бүре ҡарап ята. Сығып ки...йем тиһә бүре, шытыр иткән тауышҡа бесәй, сысҡан шытырлай ...ән, тип, бара ла баҫа. Барып баҫһа, бүре сығып китә. Бесәй, ...рҡып, яңылыш айыу ултырған тирәккә менеп китә. Теге лә ...рҡып йығылып төшә. Ҡайҙа барырға? Күп уйлап тормай, айыу ...тә бер яҡҡа, бүре китә икенсе яҡҡа. Бер аҙҙан бүре менән айыу ...раша, осрашҡас, айыу:

– Иптәш, һине ни эшләтте теге бесәй? – ти.

Бүре:

– Минең мороnative алды, – ти.

Айыу:

– Морон нәмә, ә минең туғыҙ ҡабырға һынды бит әле, – ти.

Шулай итеп, былар китеп баралар.

## 59. Мырау батыр

Борон заман йәшәгән, ти, бер әбей.
Һеҙ уны белмәй торғанһығыҙҙыр әле.
Һөйләргә ҡушмаһа ла уны миңә,
Ҡарттар асыуланмаҫтар әле.
Һеҙгә лә һөйләп бирәйем әле.
Шулай бер көн кис менән
Әбей алып тәкә эсәген,
Иртәгеһен китә һыуға йыуырға,
Һирәк килгән шатлыҡ тыуа быларға.
Өйҙә ҡалмай Мырау батыр ҙа ятып,
Бара әбей эҙенән лап-лоп баҫып.
Һыу буйында башлай әбей эсәк яра,
Мырау батырҙың күҙҙәре уттай яна.
Еҫте һиҙеп, килеп сыға бер ҡуян,
Әлһерәгән, төҫө киткән ҡурҡыуҙан.
– Нимә эсәге йыуаһың һин, әбей?
Ҡайҙан алдың ул эсәкте, әйтсәле?
– Ҡуян эсәге, кисә урмандан
Мырау дуҫ алып килде, –
Ишетер-ишетмәҫ кенә әйтте әбей. Саба ҡуян,
Бер ни күрмәй, бер ни белмәй ҡурҡыуҙан.
Еҫте һиҙеп, килеп сыға бер төлкө:

– Әбекәйем, – ти, – нимә йыуаһың, белгертсе?!
Яуап бирә әбей: «Төлкө эсәге,
Мырау батырым алып килде кисәге».
Күреп Мырауҙың күҙен, төшә лә ҡойолоп,
Әкрен генә төлкө ҡойроғон бороп,
Ҡаушауынан китәйем тиһә,
Шап барып төшә һыуға,
Сыға көскә генә ҡойоноп.
Еҫте һиҙеп, килеп сыға бер бүре:
– Әбекәйем, нимә йыуаһың, белгертсе?!
Яуабында әбей: «Бүре эсәге,
Мырау батырым алып килде кисәге».
Еҫте һиҙеп, килеп сыға бер айыу,
Лап-лоп баҫып, ҡулы менән маңлайын ҡашып-ҡашып.
Һорай башлай: «Әбей, нимә йыуаһың?»
Яуап әҙер, әбей аптыраймы һуң?
– Ауыр булһа ла, әйтәйем инде, айыу эсәге,
Мырау батырым алып килде кисәге.
Эй-й, барыһы ла, Мырауҙан ҡурҡып,
Ҡара төндә төрлө яҡҡа сабалар.
Эй сабалар, арып, хәлдән таялар.
Барыһының да Мырау эсәген алып килгән.
Шунан йыйылышалар барыһы бергә кәңәшкә:
Килә төлкө, ҡуян, кәңәш тигәс тә.
Нисек итеп Мырауҙы туҡтатырға?
Был яран, был эше оҡшай ҙаһа батырға.
Ярамай беҙгә лә былай ятырға,
Кәрәк башты тиҙ-тиҙ уйлатырға.
Йыйылышалар ҙур имәндең төбөнә.
Геү киләләр, кәңәшләшәләр бергә:
Нисек Мырауҙың күңелен табырға?
Нимә оҡшай, нимә оҡшамай батырға?
Һәм уйлайҙар Мырауҙы саҡырырға ҡунаҡҡа.
Ҡунаҡҡа саҡырырға ебәрәләр төлкөнө,
Һәм ярарҙар ине тегегә.
Ҡуян әйтә: «Сәтләүектәр мин табам,
Хәҙер үк китәм, бөтә урманды аҡтарам».
«Хәҙер үк китәм, – төлкө әйтә, – ҡаҙ-өйрәген килтерәм,
Төрлөһөнән тәмле аштар бешерәм».
Бүре тапмаҡсы була һарыҡ бәрәсе,
Ҡурырға майҙа, һалып бәрәңге.
Айыуға бал табыуҙы тапшыралар,
«Тиҙ бул, ялҡау!» – тип уны ашыҡтыралар.
Һәм барыһы ла булды, йыйналды.
Ҡунаҡҡа саҡырыусы итеп төлкөнө ебәрәләр,
Төлкө килеп, тәҙрәнән мөлдөрәтеп күҙҙәрен,

Кисен әбейҙең тәҙрәһенән Мырауҙы
Урманға, имән төбөндәге йорттарына
Ҡунаҡҡа саҡырып ҡайта.
Киләләр. Килә әбей, Мырау – уның эҙенән,
Зәңгәр-йәшел уттар сәсеп күҙенән.
Һәм күрәләр, өйҙә хужаларҙың юҡлығын беләләр,
Өҫтәл тулы аш, бешкән ҡаҙ-өйрәге лә,
Закускаһы ла, фәлән-фәсмәтәне лә.
Әбей яйлап ҡына өйрәк ашарға тотона,
Мырау йәбешә мырлап ҙур ҡаҙ ботона.
Һепертке аҫтындағы ҡуяндың ҡойроғо
Һелкенеп ҡала бит, әй генә!
Мырау батыр быны тиҙ һиҙеп ала.
Сысҡандыр тип, ҡаҙ ҡанатын ташлай ҙа,
Тып-тын ғына ҡарап тора башлай ҙа,
Һәм тып итеп сысҡандың өҫтөнә һикерә.
Дөбөр-шатыр ҡуян һикереп сығып,
Ишек яңағына маңлайы менән барып бәрелеп,
Ишекте асып сығып китә.
Күҙенән уттар сығып, ишек яңағы яна башланы.
Мырау усаҡ эсенә барып керҙе, ҡуяндан ҡурҡып,
Усаҡ эсендә төлкө ята ине,
Уныһы Мырауҙан ҡурҡып сабып сығып ҡасты.
Бесәй, төлкөнән ҡурҡып, оло мейес эсенә барып керҙе.
Оло мейес эсендә бүре ята икән,
Ул тиҙ генә аҡырҙы ла сығып ҡасты.
Бесәй, бүренән ҡурҡып, оло мейес башына барып менһә,
Оло мейес башында айыу ята икән,
Гөрҫ итеп иҙәнгә барып осоп төштө айыу,
Ҡайҙа ғына ҡасайым, тип.
Ауа-түнәһенә ҡараһалар, төрлөһө төрлө яҡҡа сабалар.
Эй сабалар, сабып хәлдән таялар.
Ҡайта әбей, Мырау – уның эҙенән,
Зәңгәр-йәшел уттар сәсеп күҙенән.
Батырҙарса атлай, аяҡтарын дөп итеп,
Ҡайта Мырау батыр, күргәндәренә иҫе китеп.
Бөгөн барҙым, кисә ҡайттым, һыйландым,
Күргәндәрем бына һеҙгә һөйләнем.
Мырау батыр хәҙер нимә эшләй тип әйтмәгеҙ,
Ул ысын булған, үҙегеҙ миңә һөйләгеҙ.

## 60. Дүрт дуҫ

Кәзә, башмаҡ, тауыҡ, бесәй дуҫ булышалар. Бер көндө башмаҡ кәзәгә:

– Әйҙә, иптәш, өй һалайыҡ, – ти.

– Мә-ә-ә, мин аҙбарҙан аҙбарға йөрөп тә ҡыш сығам, – ти кәзә. Шунан башмаҡ бесәйгә өндәшә:

– Мыяу-мыяу, мин мейес башында йөрөһәм дә ҡыш сығам, ти бесәй. Ахырҙа башмаҡ тауыҡҡа ялына:

– Ҡыт-ҡытаҡ, мин тупраҡсанан тупраҡсаға йөрөһәм дә ҡыш сығам, – ти тауыҡ. Башмаҡ бер үҙе өй һала. Мейес сығара, өйҙө йылыта. Арып бөтә был бахыр, инде ял итәйем, тип кенә ятһа, ҡәһәр һуҡҡыры кәзә килә.

– Башмаҡ дуҫ, ишек ас!

– Индермәйем, ниңә үҙең бергәләшмәнең? – ти башмаҡ.

– Йүгереп барып тороп өйөңдө һөҙөп ебәрһәм... – ти кәзә.

Башмаҡ аптырай, ишекте асып, кәзәне кертә. Ишек асылыу менән кәзә мейес артына йүгереп инеп китә. Оҙаҡ та үтмәй, бесәй килә:

– Башмаҡ дуҫым, ишегеңде ас, бесәй дуҫың килде.

– Асмайым, һин миңә ярҙамлашманың, бер үҙем өй һалдым, ти башмаҡ.

– Асмаһаң, өйөңдөң башына менеп, тупрағыңды төшөрөрмөн, мүктәреңде тырнап йолҡоп бөтөрөрмөн, нигеҙҙәреңде асып ташлармын, – ти бесәй.

Башмаҡ ишекте аса һалды, ти. Ишек асылыу менән, бесәй йылы мейес башына менде лә йомарланып ятты, ти, шунда уҡ мыр-мыр итеп йоҡоға ла китте, ти. Оҙаҡ та булманы, тауыҡ килде, ти.

– Башмаҡ дуҫ, ишек ас!

– Асмайым, бер ҙә бергәләшмәнең.

– Улайһа, өй башыңа менәм дә тупрағың сапсыйым, нигеҙҙәрең асып бөтәм, – тине, ти, тауыҡ. Башмаҡ тауыҡҡа ла ишек асты, ти. Башмаҡ, кәзә, тауыҡ, бесәй бергәләшеп йәшәп яталар, ти. Шулай йәшәп ятҡанда, бер көндө туғыҙ бүре килде лә керҙе, ти, былларға. Башмаҡ ҡурҡып, тәрәт итеп ебәрҙе, ти; кәзә ырғып торҙо, ти; бесәй мейес башында бейей башланы, үҙе һамаҡлай, ти:

Туғыҙ бүре – тунлыҡ,
Ҡырҙа төлкө – ҡыйыулыҡ*.
Туғыҙ бүре – тунлыҡ,
Ҡырҙа төлкө – ҡыйыулыҡ.

Бесәйҙең һамағын ишетеп, туғыҙ бүре сыҡҡан да ҡасҡан. Бесәй туғыҙ бүренең артынан баҫтыра төштө, ти. Байтаҡ ер ҡыуып барҙы, ти, бесәй. Шунан кире әйләнеп ҡайтты, ти. Былар, тынысланып, йылыла рәхәтләнеп йәшәп яталар, ти. Бер көндө, кис булғас, әлеге туғыҙ бүре тағы килеп инде, ти. Инделәр ҙә:

Кәзә апай – бер кислек,
Башмаҡ апай – бер кислек;

Тауыҡ апай – бер ҡабым,
Бесәй апай бер ҡабым, –

тип һамаҡларға тотондолар, ти. Бесәй мейес башында ятҡан ерҙән һикереп торҙо ла һамаҡлап бейей башланы, ти:

Туғыҙ бүре – тунлыҡ,
Ҡырҙа төлкө – ҡыйыулыҡ,
Туғыҙ бүре – тунлыҡ,
Ҡырҙа төлкө – ҡыйыулыҡ.

Туғыҙ бүре: «Былар беҙҙең туғыҙыбыҙҙы ла һуймаҡ булалар икән», – тип уйлап, тағы ла сығып ҡастылар, ти. Әлеге бесәй геләрҙе баҫтырып алып китте, ти.

Бүреләр ҡурҡыштарынан таралышып ҡасып бөттөләр, ти.

## 61. Ике бурһыҡ

Ата бурһыҡ менән инә бурһыҡ һәр ваҡыт яланда сысҡан баҫтырып йөрөр булғандар. Бер көндө бик алыҫта бер дөйә күренгән. Дөйәне күреп ҡалған да ата бурһыҡ инә бурһыҡҡа:

– Әйҙә, ҡарсыҡ, ҡалдырып торайыҡ шул сысҡандарҙы, киттек дөйә тоторға! – тигән.

Инә бурһыҡ ҡабаланмаған.

– Беҙ хәҙер сысҡандар артынан йүгерә торғас, бик арыныҡ, сысҡандар ҙа арынылар. Арыған сысҡандарҙы ташлап, арымаған дөйә артынан йүгереп эш сыҡмаҫ. «Бөгөнгө йомортҡа иртәгәге тауыҡтан ҡиммәтерәк», – тип ҡарттар юҡҡа ғына әйтмәҫ. Ҡарттарҙың был һүҙе дөрөҫ була торған булһа, сысҡандарҙы ташлап китеүҙән ни файҙа? – тигән инә бурһыҡ ата бурһыҡҡа. Ата бурһыҡ үҙенекен иткән.

– Дөйә була тороп, сысҡандар артынан йүгереп йөрө, имеш, – тигән дә дөйә артынан китеп барған.

Инә бурһыҡ тороп ҡалған. Ул арып, хәлдән тайып бөткән бер нисә сысҡанды тотоп ашаған да, тамағы туйғас, рәхәтләнеп ял итергә ятҡан.

Ата бурһыҡ бер ни ҙә тота алмайынса, арып-талып, ас көйө өйгә ҡайтып ингән дә инә бурһыҡ янына йығылған.

Инә бурһыҡ:

– Тоттоңмо һуң дөйәне? – тип һораған.

– Юҡ, тота алманым, – тип саҡ-саҡ ҡына әйтә тегеһе.

– Мин һиңә әйттем бит, арыған сысҡандарҙы ташлама, бөгөнгө йомортҡа иртәгәге тауыҡтан ҡиммәтерәк, тип, – тигән инә бурһыҡ.

Ата бурһыҡ инә бурһыҡты тыңламауына бик ҡаты үкенгән, хатта һыңҡылдап-һыңҡылдап тороп иларға ла тотонған.

## 62. Өй сыҫҡаны менән ялан сыҫҡаны

Борон заманда өй сыҫҡаны менән ялан сыҫҡаны дуҫ булған, ти.

Бер ваҡыт ялан сыҫҡаны өй сыҫҡанын ҡунаҡҡа саҡырған, ти. Өй сыҫҡаны ҡунаҡ булып ҡайтып киткән. Ҡайтып барғанда:

– И-и-и, бының башы, бының башы! – тип һөйләнә икән.

Хәҙер өй сыҫҡаны ялан сыҫҡанын ҡунаҡҡа саҡырған, ти. Бер байҙың келәтендә һыйламаҡсы булған өй сыҫҡаны үҙенең ҡунағын. Хәҙер быларҙың сөйҙә эленеп торған иткә үрелеүҙәре булған – хужа килә, ти, дөбөрләп. Ҡурҡыштарынан йүгерешеп барып тишеккә инеп киттеләр, ти, былар. Әҙерәк йәшенеп ятҡас, инде ашайыҡ тип, сыҫҡандар ҡабат килһә, тағы ишек асыла. Улар йәнә йәшеренеп торорға мәжбүр була. Инде ашайбыҙ тип, өсөнсөгө килһәләр, тағы хужалар килеп инә. Шулай көнө буйына келәткә бер туҡтауһыҙ инеп-сығып торалар – сыҫҡандар бер ҙә ашай алмайҙар.

Асыуы ҡабарған ялан сыҫҡаны:

– Һи-и, дуҫҡайым! Мин бындай хәлдә бер ҙә ҡалғаным юҡ ине әле. Бер ҡашыҡ ашым – ҡайғыһыҙ башым, рәхәтләнеп ятам, – ти ҙә ҡайтып китә.

Шулай итеп, ялан сыҫҡаны йорт сыҫҡанында ҡунаҡ та була алмай, ас ҡайтып китте, ти.

## 63. Ҡурсаҡ ҡатын

Борон заманда бер ҡатындың бер ҡыҙы була. Ул ҡурсаҡ уйнатыуҙан башҡа бер нәмә лә эшләй белмәгән икән, ти. Әсәһе, үҙе бик ҡул эштәре яратҡас, ҡыҙына ла өйрәткеһе килгән. Ҡыҙын шундай эшкинмәгән булғаны өсөн ороша икән. Шунан ҡыҙының ҡурсаҡтарын бар ерҙән дә һыпырып алған да иҙәнгә ырғытҡан. Э ҡурсаҡ ғәрләнеп сыҡҡан да киткән, ти. Китеп ултыра торғас, быға ҡарға осраған.

– Ҡурсаҡ ҡатын, ҡайҙа бараһың?

– Абышҡа эҙләп.

– Миңә булаһыңмы?

– Һин нимә ашайһың һуң? – тип һораған ҡурсаҡ ҡатын.

– Мин тиҙәк ашайым, һыу эсәм.

– Юҡ, улай булғас, булмай. Тфү, тфү! Ҡайҙан телем тиҙәк булды! – тигән.

Бара торғас, бының юлына һайыҫҡан осраған.

– Ҡурсаҡ ҡатын, һин ҡайҙа бараһың?

– Абышҡа эҙләп.

– Миңә булаһыңмы? – тигән һайыҫҡан.

– Һин нимә ашайһың һуң?

– Мин тиҙәк ашайым да һыу эсәм.

Улай булғас, булмай. Тфү, тфү! Ҡайҙан телем тиҙәк булды! – тигән дә киткән.

Китә торғас, быға сысҡан осраған.

Ҡурсаҡ ҡатын, ҡайҙа китеп ултыраһың?

Абышҡа эҙләп.

Миңә булаһыңмы һуң? – тигән сысҡан.

Һин нимә ашайһың?

Мин бал да май ашайым, – тигән сысҡан.

Улай булғас, мин риза, – тигән ҡурсаҡ ҡатын.

Сысҡан ҡурсаҡ ҡатынды, яулығынан тешләп, өңөнә алып инеп киткән. Алып кергән дә өй эсен күрһәткән. Бер мөйөштә май, бер мөйөштә бал ултыра икән. Былар шулай итеп торорға булғандар.

Ҡурсаҡ ҡатын өйҙә ҡалған. Сысҡан бал, май килтерергә киткән, ти. Өс көн килтергән. Шунан тағы өс көн, өс төн көтә икән ҡурсаҡ ҡатын, тик көтөп ала алмаған быны. Көтөп-көтөп үҙе эҙләп сыҡҡан. Сиңерткәне – ат, шырпы ҡабын арба иткән дә эҙләргә киткән. Юлында һыйыр ҙур түңәрәк ҡалдырып киткән. Ҡурсаҡ уйлай икән: «Урап барһам, йыраҡ була, турыға ғына сығам да китәм», – тип, ул нәмәнең уртаһынан китә башлаған. Сиңерткәһе батып үлгән. Ҡурсаҡ ҡатын йәйәү киткән.

Байҙарҙың мөгәрәбенән эҙләй икән был сысҡанды. Бер мөгәрәпте барып ҡараһа, ни күҙе менән күрһен: ята, ти, сысҡан май сүлмәгендә үлеп. Уны йәлләп, ҡурсаҡ ҡатын һамаҡлай-һамаҡлай илай, ти:

Экес-тәкес башыңа
Түбәтәй бәйләп бирмәнем.
Кәкре-бөкрө аяғыңа
Бәшәй носки бәйләп бирмәнем.

Бөттө. Экиәтем ары китте, үҙем бире ҡалдым.

## 64. Ҡурсаҡ ҡатын

(вариант)

Борон-борон заманда бер бик ҙур һаҙлыҡта сысҡан йәшәгән. Шул сысҡан бер ауылға барып бер ҡурсаҡ ҡыҙын ҡатын итеп алып ҡайта. Шулай итеп, һуҡыр сысҡан һаҙлыҡта бик яҡшы ғына йәшәй, ҡатыны – ҡурсаҡ – һаҙға инмәй, батыуҙан ҡурҡа инде, һаҙ эргәһендәге бер бесән сүмәләһендә йәшәйҙәр. Быларҙың тормошо бик матур була. Һуҡыр сысҡан ҡатынын бик ярата.

Ҡайһы бер көндө һуҡыр сысҡан һыу буйына ҡатынын да алып бара, сәхрәләрҙә йөрөйҙәр.

Шулай бер көндө һуҡыр сысҡан йөрөп ҡайта ла, ошондай һүҙ ишетә: фәлән ауылдың ҡыҙын фәлән ауылға биргәндәр, ти. Оҙаҡламай туй була икән. Һуҡыр сысҡан шатыр-шотор сабып туйға китә, өйгә барып та инә, кәштәләге баллы бауырһаҡтарҙы, һары майҙарҙы ашарға тотона. Был өйгә хәҙер ҡыҙ ҡайта йәки килен төшә тип көтөп торалар. Һуҡыр сысҡан бик күп ашай, унан һуң ҡатынына алып ҡайтыу өсөн бер бәләкәй генә ҡапсыҡҡа баллы бауырһаҡ тултырып ҡуя. Ә үҙе һаман кәштә башында бауырһаҡтан да тәмлерәк нәмә эҙләп йөрөй.

Ә һуҡыр сысҡандың ҡурсаҡ ҡатыны ире китеү менән: «Мин дә һаҙҙа йөрөп ҡарайым әле. Ирем, һуҡыр сысҡан, еңел йөрөй, мин дә уның тиклем йөрөрмөн әле», – тип, һаҙлыҡҡа инеп китә. Күп тә бармай, бик тәрән еренә барып бата, сыға алмай. Бик оҙаҡ ирен көтә, тик ул нишләптер ҡайтмай. Әмәлгә ҡалғандай, теге туй килә торған юл өҫтө ошо һаҙлыҡ эргәһенән үтә икән, ти. Бер ваҡыт ҡыңғырауҙар менән шалтыр-шолтор хан ҡыҙын туйға алып киләләр. Ҡурсаҡ ҡатын, туйға барыусылар үҙенең тураһына еткәс, былай тип һамаҡлаған, ти:

Хан туйына барһағыҙ, барһағыҙ,
Һуҡыр сысҡан күрһәгеҙ, күрһәгеҙ...

Был тауышты ишетеү менән туйға барған кешеләр туҡтайҙар. Туҡтайҙар ҙа аптырап тыңлап торалар. Ҡурсаҡ ҡатын тағы ла:

Хан туйына барһағыҙ, барһағыҙ,
Һуҡыр сысҡан күрһәгеҙ, күрһәгеҙ,
Һаҙға батҡан, тиегеҙ, тиегеҙ, –

ти.

Хәҙер бындағы халыҡ бик аптырай. «Был тауыш ҡайҙан килә? Бер нәҙек кенә тауыш?» – тиҙәр. Айышына төшөнә алмай, китеп баралар, шатыр-шотор ҡыңғырау менән туйға барып та керәләр былар. Сәй эсергә ултырғас, һәр кем үҙенең күргәнен һөйләй. Һуҡыр сысҡан, берәй һүҙ ишетелмәҫме икән тип, тыңлап тора. Ҡоҙаларҙан береһе әйтә: «Бына беҙ бер һаҙлыҡ янынан үткәндә ошондай һүҙ ишеттек:

Хан туйына барһағыҙ, барһағыҙ,
Һуҡыр сысҡан күрһәгеҙ, күрһәгеҙ,
Һаҙға батҡан, тиегеҙ, тиегеҙ, –

ти.

Был нимә булыр икән?» — тиҙәр.

Һуҡыр сысҡан был һүҙҙе ишетеү менән шатыр-шотор кәштәнән ырғып та төшә, тороп та саба. Бында баллы бауырһаҡтар кәштәнән түгелеп ҡала. Һуҡыр сысҡан хәле бөтөп һаҙлыҡҡа етә, ҡатынын эҙләп таба ла әйтә:

Эй, ҡатыным, ҡатыным,
Һин бит минең матурым,
Һин бит минең алтыным,
Бир ҡулыңды, тартайым,
Һаҙлыҡтан сығарайым, –

ти.

Һуҡыр сысҡанға ҡаршы ҡурсаҡ:

Хан ҡыҙын һин һөйәһең,
Хан ҡыҙын һин һөйәһең.
Хан ҡыҙының ҡулын тарт,
Хан ҡыҙының ҡулын тарт, –

ти.

Шулай итеп, бик оҙаҡ үпкәләшкәндән һуң, саҡ килешәләр. Әле лә улар бергә татыу йәшәйҙәр, ти.

## 65. Бетүгеҙ

Борон-борон заманда бер үгәй ҡыҙ йәшәгән. Уның ашарына булмаған. Ҡыҙ эш эҙләп сығып киткән. Бер әбейгә барып ингән дә, ҡыҙ:

– Әбей, минең тамағымды туйҙыр ҙа, мин һиңә берәй эш эшләрмен, – тигән.

Әбей һәйбәт итеп ҡыҙға сәй эсергән дә:

– Минең башымды ҡара әле, ҡыҙым, – тигән.

Ҡыҙ әбейҙең башын оҙа-а-аҡ итеп ҡараған. Ҡарай торғас ҡомған хәтлем бет килеп сыҡҡан.

– Әбей, был оло бетте мин нимә эшләтәйем икән?

– Ҡыҙым, шул бетте ек тә эш эҙләп сығып кит.

Ҡыҙ, әбей әйткәнсә, бетте еккән дә сығып киткән. Китеп бара, ти, был:

– Бетүгеҙем үлгәнсе,
Бәләкәй арбам һынғансы,
Китәйем дә барайым,
Бында ни эшләп торайым? – тип йырлап.

Китеп бара торғас, ҡыҙға йылҡы көтөүсеһе осраған. Көтөүсе ҡыҙға:

– Ҡоҙаса, ҡайҙа бараһың? Бик матурһың! – тигән.

Ҡыҙ:

– Мин эш эҙләйем, – тигән.

Көтөүсе:

– Мин алам һине. Киләһеңме?

– Туйыңа ат һуйһаң, барам, – тигән ҡыҙ.

Алып ҡайтҡан егет ҡыҙҙы. Ат һуйғандар. Ҡыҙ, эсәк йыуырға тип, һыу буйына төшөп киткән. Ҡыҙ бер ҙә эсәкте йыуа алмаған. Үҙе буялып бөткән, өҫтөн буяп бөткән. Ҡарап торған-торған да, бетүгеҙенә ултырып, китеп барған.

– Итәкәсем буҡ итеп,
Башҡайымды хур итеп,
Бында нишләп торайым?
Бетүгеҙем үлгәнсе,
Дегәнәк арбам һынғансы,
Китәйем дә барайым, –

тип көйләй-көйләй китеп бара, ти, ҡыҙ.

Бара торғас, һыйыр көтөүсеһенә осраған был ҡыҙ. Һыйыр көтөүсеһе лә:

– Ҡоҙаса, бик матурһың, ҡайҙа бараһың? – тип һораған.

– Эш эҙләйем.

– Эш эҙләп йөрөмә, миңә кейәүгә сыҡ!

– Туйыма бер һыйырыңды һуйһаң, сығырмын.

Был егет һыйырын һуйырға риза булып, алып китә ҡыҙҙы. Һыйырҙы һуялар. Эсәк йыуырға ҡыҙ тағы бер үҙе төшә. (Элек ҡыҙыҡ булған да инде, бер үҙен төшөргәндәр. Эсәк йыуырға бер кеше генә төшмәй бит инде.) Йыуа башлаған был. Тағы буялып бөткән: бите-маҙары күренмәй икән, күлдәктәре буялған. Ҡыҙ илап-илап ҡарап торған да, бетүгеҙенә ултырып:

– Итәкәсем буҡ итеп,
Башҡайымды хур итеп,
Бында нишләп торайым?
Бетүгеҙем үлгәнсе,
Дегәнәк арбам һынғансы,
Китәйем дә барайым, –

тип көйләй-көйләй китеп барған.

Хәҙер юлдан бер сысҡан сығып бара, ти. Сысҡан ҡыҙға өндәшә икән:

– Ҡоҙаса-ау, бик матурһың, ҡайҙа бараһың?

Ҡыҙ әйткән:

– Мин эш эҙләйем, – тигән.

– Һин эш эҙләп йөрөмә. Мин байҙарҙың балдарын, майҙарын – шундай тәмле нәмәләрен ташыйым. Шуларҙы ашап ятырһың, әйҙә минең яныма.

Алып киткән сысҡан ҡыҙҙы эйәртеп.

Бер бай кешенең баҙына төшкәндәр былар. Эй-й ташый, ти, был сысҡан. Өрөктәр, шоколадтар – шундай тәмле-тәмле аҙыҡтар ташый, ти, был. Ҡаҡланған иттәр һөйрәп алып ҡайта, ти. Хәҙер ҡыҙ ашап ята, ти. Сысҡан тәмле-томло аҙыҡты шул тиклем күп

...ныған – ашағандан ҡалғаны ғына ла ике оло тоҡ (ҡапсыҡ) тул... ти. Ике оло-о ҡапсыҡ.

Хәҙер бер көндө сыҫҡанды бесәй тотоп ашаған. Ҡыҙ көтә – ...кан ҡайтмай ҙа ҡайтмай икән. Шунан ҡыҙ ҡапсыҡтарҙы һөй... алып сыҡҡан. Бер ҡапсығын арбаһына һалған, икенсеһен дә ...һа, арбаһы ватылған да ҡуйған. Ни эшләтһә лә, йәлләй икән ...ҙ ҡапсыҡты. Аптырағас, ҡапсыҡты ырымлаған да: «Быны ...аған кешенең ауыҙы ни һөйләй, арты ла шуны һөйләһен», – ...п, ҡапсыҡты ҡалдырып киткән. Ҡыҙ китте инде үҙ юлына.

Юлдан хәҙер бер йәш кейәү килә, ти, ат менеп. Кәләше яны... китеп бара, ти. Килеп еткән дә ҡапсыҡ янына: «Их, ҡапсыҡ ... Эсендә нимә икән?» – тигән.

Төшә был атынан, ҡапсыҡтың ауыҙын сисеп ҡарай. Ҡараһа, ...ҡ тулы тәмле әйберҙәр, ти. Эй ашай был ризыҡтарҙы! Ашап ...йғас, ҡапсыҡты бәйләп, атҡа һала. Ат тик тормай икән, егет ...ына: «Тыр-р», – тип әйтһә, арты ла егеттең: «Тыр-р», – ти икән. Егет: «На-на-а!» – тип әйтһә, арты ла: «На-а», – ти икән. Егет ...тырай икән: «Бәй, был артыма ни булды икән?» Аптырай егет, ...йғыра.

«Ниңә генә ашаным икән?» – тип әйткәйне, ти, «Ниңә генә ...аным икән?» – ти арты ла.

Бара торғас егет йырлап ҡарай, ти. Арты ла йырлай, ти. Ап...рай, ти. Ҡапсыҡты атып бәрҙе, ти, асыуы килеп. Барып етте, ..., кәләше янына. Әбейҙәре, бабайҙары, кәләше лә ҡаршы сыҡты, ...

– Ни хәлдә килеп еттең? – тип һорайҙар.

Бер һүҙ ҙә өндәшмәй, ти, кейәүҙәре.

Асыулана, илай, ти, хәҙер кәләше, өндәшмәгәс, ниңә килдең, ...

Бик әрләгәс, егет:

– Бәй, һөйләшергә ни, – тиһә, арты ла:

– Бәй, һөйләшергә ни, – ти икән.

Егет: «Юлдан ҡапсыҡ әйбер табып ашап ҡарағайным, шулай ...лдым», – тигән. Аңлағандар инде.

Ауылда бер имсе әбей булған, тылсымсы әбей. Шуға барған...р.

Әбей: «Һарыҡ һуйығыҙ. Нисек тә булһа бер бүре тотоп алып ...йтығыҙ. Һарыҡты өшкөрөрмөн дә бүрегә ашатырбыҙ шуны. ...еттең сирен һарыҡҡа йоҡторорбоҙ», – тигән.

Бүрене тотоп алып ҡайтҡандар инде күмә-әк кешеләр барып. ...рыҡ һуйғандар. Әбей тәүгелә кейәүгә өшкөрә икән, шунан һа...ыҡҡа өшкөргән. Һарыҡты һуйып, бүрегә ашатҡандар. Бүре ...шап бөтә лә хәҙер, тамағы туйғас: «У-у-у», – тип олой башлаһа, ...үренең арты ла: «У-у-у», – тип олой икән. Шулай итеп, егеттең ...ре бүрегә йоҡҡан. Бүре сапҡан инде тауына, ә егет элекке ...ләнә килгән, һәйбәтләнгән.

## 66. Эт менән көсөк

Борон заманда булған, ти, бер бай. Ул үҙе һатыу итеп йөрөй икән. Эте байлығын ҡарауыллай, имеш. Шулай ҙа эте йүнһеҙ булған. Шул арҡала байҙың магазинына төшкәндәр. Хужаһы этте ҡыуған да сығарған. Эт ауыл ситенә сыҡҡан да ҡайғырып тик ята икән. Шулай ятҡанда, эт янына бер бүре килгән. Килгән дә һорай, ти:

– Һин нимә эшләп ятаһың бында?

– Хужам ҡыуып сығарҙы ла, шуға ҡайғырып, асҡа интегеп ятам.

– Әйҙә киттек минең менән, тамағыңды туйҙырам.

Эт киткән, ти, бүрегә эйәреп. Бара бирһәләр, бер йылҡы көтөүенә осрағандар, ти, былар. Бүре:

– Әйҙә, ошонда ятып торайыҡ. Һин миңә ҡарабыраҡ ят, күҙем ҡыҙарғас, миңә әйтерһең, – тигән.

Бүре ята, эт тә ята. Үҙе бүренең күҙенән күҙен алмай. Бер ваҡыт бүренең күҙе ҡыҙарған, ти. Эт:

– Эй, бүре ағай, күҙең ҡыҙарҙы, – тигән икән, бүре һикереп торған да бер атты ботарлаған да ташлаған, ти.

Бергәләп тамаҡтарын туйҙырҙы, ти, эт менән бүре. Шунан бүре менән эт айырылышып, һәр ҡайһыһы үҙ юлы менән китте, ти.

Шулай китеп барһа, эт бер көсөккә тап булды, ти.

– Ҡайҙа китеп бараһың?

– Хужам ҡыуып сығарҙы, башым һуҡҡан яҡҡа китеп барам. Бик асыҡтым, – ти көсөк.

– Әйҙә минең арттан, – ти эт.

Китәләр былар бергәләп. Барып етәләр йылҡы көтөүенә. Эт көсөккә:

– Һин минең күҙемә генә ҡарап тор ҙа, минең күҙем ҡыҙарһа, әйтерһең, – ти.

Көсөк шым ғына ҡарап тора, бер ҙә өндәшмәй, ти. Байтаҡ ваҡыт үткән. Бер ваҡыт эт асыулана башлай:

– Күҙең ҡыҙарҙы тимәһәң, муйыныңды сәйнәп өҙәм, – ти. Көсөк аптырағас:

– Күҙең ҡыҙарҙы, – тигән икән, бер атҡа ташланған. Ә ат этте тибеп осорған. Шунан көсөк:

– Бына хәҙер күҙең ысынлап ҡыҙарҙы, – тип әйтеп ҡуйған.

## 67. Һемәйгән бүре

Борон, кәзә команда, һайыҫҡан һалдат булған заманда, бар ине, ти, Әхмәр ауылында Әбүбәкер исемле сауҙагәр. Бер заман ул, үҙенең сауҙа эше менән китеп барғанда, Кәйәүеш тауы* тирәһендә бер бүрегә осрай.

Бүре әйтә:

– Әй, Әбүбәкер сауҙагәр, ҡайҙа бараһың? Мин һине ашайым бит инде, былай булғас!

Әбүбәкер сауҙагәр әйтә:

– Ярар, ашаһаң ашарһың инде. Эсеңә һыяммы икән, тәүҙә шуны үлсәп ҡарайым әле, – ти.

Бүре әйтә:

– Ярай этеү, үлсәһәң үлсә, ысынлап та, һыйырһыңмы икән?

Әбүбәкер һандығынан тимер аршинын ала ла үлсәргә тотона. Ҡолағынан башлап бер аршин, ике аршин... Ҡойроғонан тотоп, тимер аршины менән кәрәген бирә башлай был бүренең, сыҙаһаң – сыҙа, сыҙамаһаң – юҡ! Бүре көскә ҡасып ҡотола́.

Кәйәүеш тауы башына менеп, бүре: «Ниңә мин бынан үлсәттем һуң әле? Тоторға ла ашарға ине үҙен!» – тип үкенә.

Бүре Көҙәй ҡарттың кәзәһе ятҡан урынға барып керә.

Бүре әйтә:

– Әй, кәзә, мин һине ашайым бит инде, былай булғас!

Кәзә әйтә:

– Ярай, ашаһаң ашарһың инде. Рөхсәт итһәң, ашалыр алдынан аҙан әйтеп алыр инем.

Бүре:

– Рөхсәт, – ти.

Кәзә, ҡалҡыуыраҡ ергә менеп ала ла, өҙләкһеҙ баҡыра башлай. Көҙәй ҡарт менән ҡатыны тәртешкә тотоп сығалар ҙа бүрене ҡыҫырыҡлап тороп туҡмай башлайҙар, мин һиңә әйтәйем, сыҙаһаң – сыҙа, сыҙамаһаң – юҡ. Бүре көс-хәлгә сығып тая.

Кәйәүеш тауы башына менеп, бүре: «Ниңә был кәзәнән аҙан әйттерҙем һуң әле? Мәзинме лә ул, указный мулламы?» – тип үкенә.

Ас бүре тау буйлап китеп барһа, юл өҫтөндә Заһит ҡарттың арыҡ тайы тормаһынмы!

Бүре әйтә:

– Әй, арыҡ тай, ни эшләп тораһың бында? Ашайым бит мин һине, былай булғас! – ти.

– Юҡ, ашай алмаҫһың. Бүре ашамаһын өсөн минең билетым бар, – ти тай.

Бүре әйтә:

– Ҡайҙа, күрһәт әле?

Тай әйтә:

– Күр, ана, ҡойроғом аҫтында.

Бүре тайҙың артына, билет ҡарарға тип, барып ултырыуы була, тайҙың бүрене тибеп осороуы була. Бүре бик оҙаҡ иҫәңгерәп ята. Шунан ул, әҙерәк хәл ингәс: «Ни эшләп мин был арыҡ тайҙың билетын ҡарарға булдым һуң әле?» – тип үкенә.

Тамам аптырай бүре, ана шулай һемәйеп ҡала.

## 68. Бүре менән кәзә

Борон-борон заманда ҡалын ҡара урманда йәшәгән, ти, бер ҡомһоҙ ас бүре. Ул бик яуыз булған. Яҡын-тирәләге ауылдарға һис тә тынғы бирмәгән. Йәй көнө булһа, көпә-көндөҙ көтөүгә барып, һарыҡтарҙы күтәреп алып киткән. Ә ҡышын, һәр төн һайын бер аранға төшөп, һарыҡ, кәзәне ҡырған. Уның ҡомһоҙлоғо шул тиклемгә еткән, хатта ул, бер һарыҡты тотоп ашау менән генә ҡәнәғәтләнмәй, арандағы бөтә һарыҡты тамаҡлап сыға торған булған. Ауыл кешеләре, күсәктәр күтәреп, күп тапҡырҙар уны ҡыуырға сыҡҡандар. Тик һис тә ҡыуып етеп, һуғып үлтерә алмағандар.

Шулай үткән бүренең йәш сағы. Бына ҡартлыҡ килеп еткән. Күҙҙәр ҙә насар күрә, аяҡтар ҙа әкрен йүгерә башлаған. Шуның менән бергә йөрәктәге элекке ҡыйыулыҡ та юғала барған. Хәҙер инде ул көпә-көндөҙ көтөүселәр күҙе алдында һарыҡтар күтәреп китеү ғәҙәтен ташлаған. Ауылға ла бик һуң, таң алдында, кешеләрҙең иң ҡаты йоҡоға киткән саҡтарында ғына бара башлаған. Шулай ҙа күп ваҡытта табышһыҙ ҡайтырға мәжбүр булған. Әллә бүре үҙе ҡурҡаҡланған, әллә инде кешеләр уяуланған, уға һис тә һарыҡ ите ашарға тура килмәй башлаған. Аслыҡтан бүренең эсе үткәшкән, күҙҙәре төпкә батҡан, йөндәре ҡойолоп, ялбырап ҡалған. Шулай ҙа ул, элекке ғәҙәтенсә, һәр көн һайын берәй һимеҙ һарыҡ тотоп ашау ниәте менән, ауылға барған.

Әбей менән бабай
Ғыр-ғыр йоҡлай,
Яндарында бер бәпес
Һикереп төшөп уйнай.
Арандағы биш кәзә
Мырт-мырт көйшәй,
Һарайҙағы сыбар тай
Сыр-сыр кешнәй.
Соландағы ялбыр көсөк
Ләүек-ләүек өрә.
Биш кәзәнең береһен
Ашарға ине миңә!.. –

тип йырлай-йырлай барған ул. Тик арандың һалам түбәһен тишеп, эскә төшәм генә тигәндә, биш кәзә бер юлы баҡыра башлаған, сыбар тай кешнәп ебәргән, ялбыр көсөк өрөргә тотонған. Хужа, йоҡоһонан уянып, сукмар күтәреп, бүрене ҡыуырға сыҡҡан. Ҡартайған, ҡурҡаҡланған ас бүрегә йәһәтерәк урманға ҡасыуҙан башҡа бер ни ҙә ҡалмаған.

«Тамаҡ өсөн башыңды һәләк итеп ҡуйыуың бар. Бынан һуң ауылға бармайым, ҡуяндар япраҡ ашап көн күрәләр бит. Мин дә шулай итермен», – тип йыуатҡан ул үҙ-үҙен. Тик көн һайын ҡан эсеп өйрәнгән йыртҡыс ҡан эсмәй түҙәме ни? Төн етеү менән бүре тағы, йырлай-йырлай, ауылға китеп барған:

Әбей менән бабай
Ғыр-ғыр йоҡлай,
Яндарында бер бәпес
Һикереп төшөп уйнай.

Арандағы биш кәзә
Мырт-мырт көйшәй,
Һарайҙағы сыбар тай
Сыр-сыр кешнәй.

Соландағы ялбыр көсөк
Ләүек-ләүек өрә.
Биш кәзәнең береһен
Ашарға ине миңә...

Был юлы ла бүре ауылдан ҡыуылып ҡайтҡан.

«Былай астан үлеп әрәм булыуың мөмкин», – тип уйлай башлаған бүре, ниндәй ҙә булһа берәй йәнлек тотоп ашау уйы менән, урман ҡыҙырып китеп барған. Шул саҡта ул бер бейек тау өҫтөндәге ҡая ташҡа барып менгән. Ә ул ҡая таш өҫтөндәге кескәй генә бер өйҙә үҙенең биш бәрәсе менән бер ҡыр кәзәһе йәшәй икән. Бүре өйгә яҡын ғына бер таш артына барып баҫҡан, кәзә уны күрмәгән. Балаларына ишекте ныҡ бикләп ултырырға, бер кемгә лә асмаҫҡа ҡушҡан да, гәҙәтенсә, ҡырға, үлән ашап, һөт йыйып ҡайтырға китеп барған.

«Әһә, – тигән ас бүре, тештәрен шығырлатып, – хәҙер барам да хәйлә менән ишектәрен астырам. Унан һуң инде, рәхәтләнеп, бәрәстәре менән һыйланырға ғына ҡала...»

Кәзә китеп, бер аҙ ваҡыт үткәс, ул өй янына килгән, ишекте ныҡ ҡаты шаҡылдатып, ҡалын, йәмһеҙ тауыш менән ҡысҡырған:

– Балаҡайҙарым, ишек асығыҙ, мин ҡайттым!..

– Беҙҙең әсәй улай һөйләшмәй, – тигәндәр бәрәстәр. Ишекте асмағандар. Бүре аптырап ҡалған.

«Нисек һөйләшә икән һуң ул?»

Ул, ишекте астырыуға берәй хәйлә уйлап сығарыр өсөн, тағы баяғы таш артына барып ятҡан. Бер аҙҙан һуң һикереп торған да тағы өй янына килгән. Килгән дә, ишекте әкрен генә шаҡылдатып, нәҙек кенә тауыш менән:

– Балаҡайҙарым, ишекте асығыҙ, мин ҡайттым!..

– Беҙҙең әсәй улай һөйләшмәй, – тигәндәр бәрәстәр. Ишекте асмағандар.

Бүре тағы ла ныҡыраҡ аптырап ҡалған. «Яңы хәйлә табып булмаҫмы икән?» – тип уйлана-уйлана, тағы шул таш артына барып ауған. Ноҡот башын ватып, төрлө хәйләләр уйлап ята торғас, бүре тағы ниҙер иҫенә төшөрөп, ҡыуанысынан олоп ебәргән.

«Инде минең тештәрҙән һеҙгә ҡотолоу юҡ», – тигән дә ул, өйҙөң ишек төбөнә еткәс, бик килештерергә тырышып, бер-ике тапҡыр кәзә булып мыҡырлап ебәргән.

– Бә-ә-ә! Бә-ә-ә!.. Балаҡайҙарым, ишек асығыҙ! Мин ҡайттым...

– Беҙҙең әсәй улай һөйләшмәй, – тигәндәр бәрәстәр. Тағы ла ишек асмағандар.

Инде бөтөнләй аптырауҙа ҡалған бүре, бүтән хәйлә табыуҙан өмөт өҙөп, яңынан баяғы таш артына барып боҫҡан. Шунда ятып, кәзәнең ҡайтыуын көтөргә, уның нисек итеп ишек астырыуын белергә уйлаған.

Бына бер ваҡыт, ашап-туйып, елендәрен һөт менән тултырып, төшкөлөккә балаларын ашатыу өсөн, кәзә ҡайтып килгән. Өй тупһаһына баҫып, күңелле итеп йырлап ебәргән:

Ҡырҙан ҡырға йөрөнөм,
Ҡыр емешен мин ейҙем.
Илдән илгә йөрөнөм,
Ил емешен мин ейҙем,
Һөтлөгәндән һөт алдым,
Һутлығандан һут алдым.
Балаҡайым, ишек ас!
Балаҡайым, ишек ас!

Бәрәстәр, йүгереп килеп, ишекте асып ебәргәндәр. Кәзә һикереп өйгә ингән, балаларын һөйә-һөйә имеҙеп туйҙырған да, ишекте бер кемгә лә асмаҫҡа ҡушып, тағы ҡырға киткән.

«Əһә, булды, хәҙер ишекте нисек астырырға белдем», – тигән бүре, ҡыуанып.

Кәзә китеп, бер аҙ торғас, ул ишек төбөнә килгән дә тап кәзә булып йырлап ебәргән:

Ҡырҙан ҡырға йөрөнөм,
Ҡыр емешен мин ейҙем.
Илдән илгә йөрөнөм,
Ил емешен мин ейҙем,
Һөтлөгәндән һөт алдым,
Һутлығандан һут алдым.
Балаҡайым, ишек ас!
Балаҡайым, ишек ас!

Бәрәстәр, әсәләре ҡайтҡан икән тип ҡыуанып, йүгереп килеп ишекте асып ебәргәндәр. Шул саҡта, тештәре ыржайып, эсе үткәшеп, йөндәре ялбырлап торған бүрене күреп, ҡоттары осоп, бәрәстәр тырым-тырағай ҡасып бөткән. Ҡайһыһы мейес аҫтына, ҡайһыһы мейес артына, ҡайһыһы урындыҡ аҫтына йәшенгән. Яуыз бүре уларҙы берәм-берәм табып, боттарынан һөйрәп сығарып, ашап бөтөргән. Тик мейес аҫтына ҡасҡан иң кескәй бәрәсте генә таба алмаған ул. Ашап туйғас, бүре сығып киткән. Күп тә үтмәй, күңелле итеп йырлай-йырлай, кәзә үҙе ҡайтып килгән.

Ҡырҙан ҡырға йөрөнөм,
Ҡыр емешен мин ейҙем.
Илдән илгә йөрөнөм,
Ил емешен мин ейҙем,
Һөтлөгәндән һөт алдым,
Һутлығандан һут алдым.
Балаҡайым, ишек ас!
Балаҡайым, ишек ас!

Хәҙер уға бер кем дә ишек асмаған. Бер кем дә уйнап-һикереп ҡаршы алмаған. Ул, ишекте үҙе асып, өйгә ингән, илай-илай балаларын эҙләй башлаған. Мейес аҫтына йәшенгән бәләкәй бәрәс, әсәһен бүре тип белеп, бик оҙаҡ өндәшмәй торған. Ахырҙа, үҙ әсәһе икәненә тамам ышанғас ҡына, баҡырып илап, мейес аҫтынан килеп сыҡҡан:

Бүре килде, әсәй, апайҙарымды ашап китте...

Бүре!.. Ах, ер йотҡоро!.. Ҡайҙан килеп сыҡҡан ул?!

Эйе, әсәй, бүре...

Ниңә һуң, балаҡайҙарым, уға астығыҙ, ниңә әсәйегеҙҙең ҡысҡырғанын тыңламанығыҙ!..

Ул һин булып инде шул, әсәй... Ах, ул ниндәй ҡурҡыныс, ниндәй уҫал!.. Әсәй, мин ҡурҡам, мине йәшер...

Эй, балаҡайым!..

Кәзә яңғыҙ балаһын ҡосаҡлаған да, урындыҡ өҫтөнә ултырып, оҙаҡ илаған. Унан һуң был яуыз бүренән үс алыр өсөн юлдар эҙләй башлаған.

Туҡта, балаҡайым, иламайыҡ, – тигән ул бәрәсенә. – Һин ошонда ултырып тор. Ә мин бынау ишек төбөндәге ике иҙәнде асайым да иҙән аҫтындағы ҙур мискәгә һыу тултырайым. Иҙәнһеҙ урынды кейеҙ менән ҡаплап ҡуйырбыҙ. Унан һуң мин ҡырға киткән булырмын да, өй артындағы ҡарағай араһына йәшенермен. Комһоҙ бүре, һине ашайым тип, шунда уҡ килеп етер. Ишекте асҡас, һин урындыҡҡа һикерерһең. Ул, һине тотам тип ырғып, ошо кейеҙ өҫтөнә баҫыр ҙа, йығылып, мискәләге һыуға батыр. Шулай итеп, беҙ унан үс алырбыҙ, яраймы, бәбекәйем!

– Юҡ, әсәй, мин ҡурҡам. Бүрегә ишек асмайым, – тип илаған бәләкәс бәрәс.

– Улай булғас, һинең бер ғәйепһеҙ апайҙарыңды ашаған яуыз бүрене язаһыҙ ҡалдырабыҙмы ни?! – тип асыуланған әсәһе. «Ысынлап та, яуыз бүренән үс алырға кәрәк шул», – тип уйлаған бәләкәй бәрәс. Шунан һуң әсәһенең кәңәшенә күнгән, ҡурҡмаҫҡа булған.

Бына бер ваҡыт кәзә баҙҙағы мискәгә һыу ташый башлаған. Мөлдөрәмә итеп һыу менән тултырғас, иҙәндең асыҡ урынын кейеҙ менән ҡаплаған да үҙе, ҡырға киткән булып, өй артындағы ҡарағай артына йәшенгән. Ә теге бүре шунда уҡ килеп тә еткән. Тупһаға баҫҡан да йәнә кәзә булып йырлаған.

Бәләкәс бәрәс ишекте асҡан да, әсәһе өйрәткәнсә, артҡа урындыҡ өҫтөнә һикергән. Бүре лә уның артынан ырғыған – урындыҡҡа етә алмай, тап кейеҙ өҫтөнә тура килеп, иҙән аҫтына төшөп киткән дә мискәләге һыуға сумған. Шул саҡта кәзә лә, йәшенгән урынынан сығып, йүгереп ҡайтып ингән. Ә бүре, ҡысҡыра-ҡысҡыра, бата башлаған, сөнки мискә бик тәрән, ситтәре йәбешеп сыҡҡыһыҙ шыуғалаҡ булған. Шуның өҫтәүенә, мискәләге һыу,

тап йылғаның өйрөлтмәкле сөмөкәй ере шикелле, бүрене өйрөл төп, төпкә һөйрәй, йөҙөргә һис тә ирек бирмәй икән.

– Ай, һыу билемдән булды, муйыныма етте. Инде ҡолағымдан булды. Батып үләм... Кәзәкәйем, мине ҡотҡарып ҡына алһаңсы?!. Бынан һуң бер ҡасан һинең үҙеңә лә, балаларыңа ла, хатта кәзә тип аталғандың береһенә лә теймәҫ инем. Дуҫ булыр инек, – тип ялынған бүре кәзәгә. Үҙе эсенән: «Их, тартып ҡына сығарһа, кәзәне хәҙер үк, өҙөп-йолҡоп, ашап ташлар инем», – тип уйлаған.

Кәзә, әлбиттә, уның ялыныуҙарына ҡолаҡ та һалмаған.

– Минең алма кеүек балаларымды ашап, мине ҡан илатҡанда, яҡшы инеме?! Әйҙә, тонсоҡ, батып үл! Был һиңә иң гүзел яза, – тигән.

Шулай итеп, ҡомһоҙ, яуыз бүре, кәзәгә ялынып олой-олой, батып үлгән.

Бынан һуң кәзә үҙенең кескәй бәрәсе менән ҡая таш өҫтөндәге бәләкәй генә өйҙәрендә иркенләп, рәхәтләнеп йәшәй башлаған. Хәҙер инде уларҙы бер нәмә лә ҡурҡытмаған. Бер кем дә борсомаған. Улар әле ошо көндә лә һаман шулай, таштан ташҡа һикереп, ҡырҙан ҡырға йүгереп, уйнап, көлөп ғүмер итәләр, ти. Ҡара урман эсендәге ҡая таштар араһында ҡыр кәзәһенең күңелле йыры әле булһа шулай яңғырап тора, ти:

Ҡырҙан ҡырға йөрөнөм,
Ҡыр емешен мин ейҙем.
Илдән илгә йөрөнөм,
Ил емешен мин ейҙем,
Һөтлөгәндән һөт алдым,
Һутлығандан һут алдым.
Балаҡайым, ишек ас!
Балаҡайым, ишек ас!

## 69. Кәзә менән убыр

Булған, ти, бер кәзә. Уның өс балаһы булған. Кәзә үҙенең балаларын бикләй ҙә сығып китә икән. Кәзә балалары янына бер убыр ҡарсыҡ килә. Убыр әйтә:

– Ҡырҙан, ҡырҙан мин килдем,
Ҡыр емеше мин тирҙем (йәки килтерҙем).
Кәзә балам, ишек ас! – ти.

Кәзә балалары ишек аса. Кәзә балаһының береһен убыр ашай ҙа китә. Бер ваҡыт кәзә үҙе ҡайта ла инде, һамаҡлап әйтә:

Ҡырҙан, ҡырҙан мин килдем,
Ҡыр емеше мин тирҙем.
Өйҙән өйгә мин йөрөнөм,

Өй емеше мин тирҙем.
Кәзә балам, ишек ас! –

ти икән. Балаһы ишек асҡан, керһә – бер балаһы юҡ. Икенсе мөрйәбә китә ҡырға кәзә. Кәзә киткәс, тағы убыр килә. Килгәс кәзә күбек* әйтә (һамаҡтай). Керә лә тағы бер балаһын ашай ҙа китә. Кәзә килә (тағы үҙе ҡайтып), көйләп китә: «Ас!» – ти. Кәзә балаһы ишек асһа, бала берәү генә ҡалған. Кәзә һыҡтап-һыҡтап, китә тағы. Әлеге убыр тағы килә: «Ас!» – ти. Кереп өсөнсөһөн бөтә ашай ҙа китә. Кәзә килә, тағы әйтә: «Ас!» – ти. Ишек асмай (ишек асылмай). Кәзә үҙе асһа (асып ебәрһә), бала юҡ. Береһе лә ҡалмаған. Кәзә хәҙер белгән дә әйтә:

Ә-ә-ә, был ҡарсыҡай (убыр**) эше, ул ашай икән.

Кәзә бер әмәл эштәгән (әмәл уйлап тапҡан). Ҡайнар һыу ҡайната (әҙерләй) ла, сапсаҡҡа һалып, өҫтөн кейеҙ менән ҡаптап (иҙән менән тигеҙ итеп – замаскировать итеп) ҡуйған да, убыр ҡарсыҡты саҡыра. Ҡунаҡ итәм, ти. Убыр килә. Кәзә: «Юғары сыҡ!» – ти. Убыр ҡарсыҡ кинәнеп китә: «Юғары сығайым инде», – тип барһа, убыр ҡайнар һыуға төшкән дә киткән, ти.

Убыр ҡарсыҡ: «Кәзә балам, ботом яна, ал», – ти, ҡысҡыра. Кәзә әйтә: «Янһын, – ти, – минең балдарымды ашағанһың», – ти.

Ҡарсыҡайҙы (убыр ҡарсыҡты) кәзә эҫе һыуға яндырып үлтергән. Убыр эҫе һыуға сумған да үлгән.

## 70. Кәзә менән һарыҡ

Борон-борон заманда әбей менән бабай йәшәгәндәр. Уларҙың кәзәләре менән һарыҡтарынан башҡа бер нәмәләре лә булмаған. Әбей менән бабай, ҡарт булғас, йүнләп бесән эшләй алмағандар. Кәзә менән һарыҡ гел ас булған.

Берҙән-бер көндө кәзә менән һарыҡ, тамаҡ туйҙырып булмаҫмы тип, урманға йүнәлгәндәр. Урманға килеп ингәс тә бүре башы тапҡандар, уны ҡапсыҡҡа һалып алғандар ҙа ары киткәндәр.

Бара торғас бүреләргә осрайҙар. Бүреләр күмәкләшеп ултырған булалар, бутҡа бешкәнен көтөп. Кәзә менән һарыҡты күреп ҡалғас:

– Бына беҙгә ит тә килде. Үҙҙәре үк килеп инделәр, – тип шаушашалар. Шул ваҡыт кәзә һарыҡҡа:

– Килтер әле бүре башын, аҡра һарыҡ, нимә эшләп тораһың?! Быларҙың да башына етәйек, – тип һөйләнә. Быны ишеткән бүреләр, бер-бер артлы сығып, тайып бөтәләр. Бер бүре:

---

* Күбек – бында «кеүек» мәғәнәһендә.
** Экиәтте яҙып алыусы йәйә эсендә өҫтәлмә һүҙҙәр биргән, йәғни әйткәнен асыҡлабыраҡ киткән. Беҙ бында уларҙы архивтағыса ҡалдырҙыҡ.

– Бутканың һыуы бөткән, һыу алып инәм, – ти ҙә сығып юғала. Икенсеһе:

– Утын алып инәм, утын өҫтәргә кәрәк, – тип сығып китә. Өсөнсө бүре:

– Бутҡаға май алып киләйем, – тип сығып китә. Дүртенсе бүре:

– Быларҙан булмаҫ, оҙаҡланылар, ҡарап киләйем әле, – ти ҙә юғала.

Шулай итеп, бөтә бүреләр сығып китә, ә кәзә менән һарыҡ бүреләр бешергән бутҡаны рәхәтләнеп туйғансы ашайҙар ҙа, ҡапсыҡтарына бесән тултырып, ҡайтып китәләр.

## 71. Кәзә менән һарыҡ

(беренсе вариант)

Борон заманда ҡара урманға яҡын урында йәшәгәндәр, ти, әбей менән бабай. Кәзә һөт биргән, һарыҡ йөн биргән. Әбей менән бабайға һәр яҡлап ярарға тырышҡандар. Шулай ҙа уларҙы хужалары һәйбәт ҡарамағандар. Ыжғыр буранда ситән аша өргән ел електәренә үтеп ингән, яҙын-көҙөн аслы-туҡлы булғандар, ти.

Шулай бер көн кәзә менән һарыҡ шундай уйға килгән: яланға утларға тип сыҡҡан мәлдә ҡасып китеп, донъя гиҙеп килергә. Улар күрмәксе булғандар, ти, ысынлап та, бөтә ерҙә лә шулай насар көн күрәләрме икән?

Ғәҙәттәгесә, бабай кәзә менән һарыҡты туғайға ҡыуған, ти. Бабай күҙҙән юғалғансы улар үләнде һәрмәштереп, ҡапҡылап йөрөгән булғандар ҙа, бабай күҙҙән юғалғас та, урманға табан йүнәлгәндәр. Үҙҙәре ҡурҡалар, ти. Шулай китеп бара торғас, былар бер бүре башы табып алалар. Кәзә, быны кәрәге тейер әле, тип, башты ҡапсыҡҡа һалып ала. Тағын китәләр былар. Бер аҡланға килеп сығалар. Бында бүре туйы бара икән. Тегеләр бутҡа ла бешергәндәр. Бүреләр кәзә менән һарыҡты күреп ҡалалар. Эй шатланалар: «Ризыҡ килде», – тип.

Кәзә бер ҙә ҡурҡып тормай, тегеләргә:

«Ми-ки-ки, ми-ки-ки,
Ҡапсыҡтағы бүре башы ун ике», –

тип, бер башты ун ике рәт сығарып күрһәтә. Бүреләрҙең ҡоттары оса. Һыу алырға барам тигән булып, берәүһе китә. Шулай итеп, тегеләр берәм-берәм шылып бөтәләр.

Шуны ғына көткән кәзә менән һарыҡ ҡаҙандағы бутҡаны рәхәтләнеп ашағандар, ти.

Был ваҡыт әбей менән бабай малдарын юғалтып, борсолоп эҙләргә сыҡҡандар. Төнө буйы эҙләп тапмағандар. Таңға кәзә менән һарыҡ үҙҙәре ҡайтҡандар.

Бабай менән әбей уларҙың ҡайтыуҙарына сикһеҙ шатланып, нимә ашатып, нимә эсерергә белмәгәндәр, ти. Улар үҙҙәренең хаталарын аңлағандар. Шул көндән башлап кәзә менән һарыҡ ҡәҙерле мал булып көн күрә башлағандар, ти.

## 72. Кәзә менән һарыҡ

(икенсе вариант)

Борон-борон заманда Илтабанда кәзә тәкәһе, Ҡалҡанда һарыҡ тәкәһе йәшәгән, ти. Илтабанда һыу, Ҡалҡанда бесән булмаған, ти.

Бер көндө кәзә тәкәһе менән һарыҡ тәкәһе ауылдарынан сығып киткәндәр ҙә бергә осрашҡандар. Бер-береһе менән күрешеп һөйләшкәндәр.

– Һин ҡайҙа киттең? – тип һорай, ти, кәзә һарыҡтан.

– Илтабанға, – тип яуап биргән һарыҡ. – Бына беҙҙә бесән юҡ инде. Ә һин ҡайҙа юл тотаһың?

– Бына беҙҙә һыу юҡ, шуға Ҡалҡанға китеп барам, – тип яуап бирә кәзә.

– Һин Илтабанға барма, – ти икән кәзә тәкәһе, – беҙҙә бесән юҡ.

– Ә һин Ҡалҡанға барма, беҙҙә һыу юҡ, – ти һарыҡ тәкәһе. Бына былар икәүләп сығып киткәндәр. Эй баралар, ти, эй баралар, бара торғас бер яланға килеп сығалар, ти. Был яланда бер япғыҙ ҡайын үҫеп ултыра, ти. Былар ағас төбөнә ултырып ял итәләр. Бер заман бүре килеп сыға ла һыҙҙырып ҡасып китә. Кәзә менән һарыҡ аптырайҙар. Бер аҙҙан ун бүре килеп сыға. Кәзә менән һарыҡ ҡурҡыштарынан ағас башына менеп ултыралар, ти. Ун бүре ҡайын төбөнә ултыралар ҙа:

– Беҙҙең бүре ҡайҙа китте икән? Әйҙә, көтәйек уны, – тип кәрт уйнай башлайҙар, ти. Һарыҡ тәкәһе ҡурҡыулы тауыш менән:

– Кәзә, йығылам, – ти икән.

– Ҡойроғома тотон, – тип яуап ҡайтара кәзә тәкәһе. Бына бер саҡ былар бүреләр өҫтөнә барып төшәләр. Ун бүре ун яҡҡа ҡаса. Шунан бирле кәзә менән һарыҡ татыу йәшәй башлайҙар.

## 73. Үгеҙ, тәкә, әтәс, һарыҡ, бесәй

Борон-борон заманда үгеҙ, һарыҡ, бесәй, тәкә, әтәс бергәләп сәфәр сығып киттеләр, ти. Баралар ҙа баралар, баралар ҙа баралар, ти, былар. Бара торғас, бер урман эсенә килеп инделәр, ти. Шул ерҙә үгеҙ:

– Иптәштәр, ошонда туҡталайыҡ! – тип әйтте, ти.

Иптәштәре риза булған. Шунда ашанып йөрөй торғас, һуңға ҡалдылар, ти, былар. Һуңға ҡалғас, ағас башына менеп йоҡларға

булалар. Иң өҫкә этәс менде, ти, унан һуң бесәй, бесәй артынан һарыҡ, һарыҡ артынан тәкә менде, ти. Иң аҫҡы ботаҡҡа үгеҙ менде, ти. Ул өҫкәрәк менәм тип ҡараған ҡарауын, тик менә алмаған.

Шул ваҡыт ике бүре килеп сыҡҡан. Бер бүре үгеҙҙең ҡойроғон уйнатып ята икән, икенсеһе ҡарап ултыра, ти. Үгеҙ икенсе ботаҡҡа менергә иткән икән, ултырған ботағы һынып китеп, бүренең өҫтөнә лап итеп килгән дә төшкән, ти. Шунан тотонған, ти, был бүрене һөҙөргә. Унан тәкә төшөп, бүрене төкөй башлай. Был бүренең олоуынан ҡурҡып, икенсе бүре ҡаса.

Былар бүрене үлтереп, тиреһен тунап алып, үгеҙ муйынына бәйләйҙәр ҙә бишәүләп тағы китәләр. Бара торғас, бер иҫке генә өй янына килеп сығалар. Туҡтап тора торғас, бесәй:

– Эйҙәгеҙ, ошо өйҙө төҙәтеп инәйек! – ти.

– Ҡамыш араһында йөрөп тә ҡыш сығырмын әле, – ти үгеҙ. Тәкә лә үгеҙ һүҙенә ҡушыла:

– Мин дә ағас араһында йөрөп булһа ла ҡыш сығырмын әле, ти. Һарыҡ менән этәс бесәй һүҙенә ҡушылалар. Өйҙө йүнәтеп инәләр былар. Ҡыш етә. Сатлама һыуыҡтар башлана.

Берҙән-бер көндө өй янына үгеҙ башын болғап килә лә:

– Иптәштәр, ишек асығыҙ әле! – ти.

Өйҙәгеләр:

– Ҡамыш араһына ни булған? – тиҙәр. Үгеҙ:

– Саталы мөгөҙгә һыуыҡ үтә, – ти. Уны индерәләр.

Икенсе көн был өй янына тәкә килә. Тәкә:

– Иптәштәр, ишек асығыҙ! – ти.

Өйҙәгеләр:

– Тал араһына ни булған? – тиҙәр. Тәкә:

– Туҡал мөгөҙгә һыуыҡ үтә, – ти. Быны ла индерәләр.

Берҙән-бер көндө теге ҡасып ҡотолған бүре, һигеҙ бүрегә осрап, уларға былай тип хәбәр һала:

– Бер ерҙә ем бар. Береһе – ҡарын тултырғыс, икенсеһе – ауыҙ майлағыс, – ти.

Бүреләр әлеге өйгә киләләр. Өй янына килеп етәләр ҙә:

– Дуҫтар, ишек асығыҙ, – тиҙәр. Өйҙәгеләр, ишек асып, быларҙы индерәләр. Инеп теҙелеп ултырғас, бейемәксе булалар. Бер бүре төшөп бейей. Ул һамаҡлап бейей:

– Береһе – ҡарын туйҙырғыс, икенсеһе – ауыҙ майлағыс, – тип. Бүренән һуң үгеҙ бейергә төшә. Ул да һамаҡлап бейей:

– Дөңгөл-дөңгөл дөңгөлдәк, һигеҙ бүре – бер тунлыҡ, етмәгәненә – муйынымдағы яғалыҡ.

Үгеҙҙең таҡмаҡ әйтеп бейеүе була, бүреләр ҡурҡып сығып ҡасалар. Бер бүре сыға алмай ҡалған икән. Уны шунда уҡ һөҙгөләп үлтерәләр.

Былар әле булһа үҙҙәренең өйөндә бергәләшеп көн күрәләр, ти.

## 74. Ишәк, эт, бесәй, әтәс

Борон бер ҡарттың ишәге булған. Ишәк ҡартайғас, ҡарт уны ҡыуып сығарып ебәргән. Ишәк китеп бара, китеп бара, китеп барғанда, бер сүплек башында эт ята, ти.

– Ишәк ағай, ҡайҙа бараһың?
– Шәһәргә артислыҡҡа китеп барам.
– Берәүҙән икәү яҡшы, мине лә эйәрт.
– Әйҙә! Ниндәй һөнәрең бар?
– Мин матур итеп өрә беләм.

Киттеләр, ти, былар. Бара торғас, бер бесәй осраны, ти.

– Ҡайҙа бараһығыҙ?
– Шәһәргә артислыҡҡа китеп барабыҙ.
– Мине лә эйәртегеҙ.
– Әйҙә! Ниндәй һөнәрең бар?
– Мин бик шәп итеп мыяулай беләм.

Өсәүләп киткәндәр былар. Бер ауылға еткәндәр. Бер әтәс ҡыйыҡтан ҡыйыҡҡа һикереп ҡысҡыра, ти.

– Шул ҡәҙәре тауышың менән ни эшләп һин ҡыйыҡтан ҡыйыҡҡа һикереп йөрөйһөң, ғүмер әрәм итәһең, әйҙә, беҙҙең менән артислыҡҡа! – тиҙәр икән былар.

Әтәс ҡыйыҡтан осоп төшкән дә быларға ҡушылған.

Хәҙер дүртәүләп киткәндәр. Бер ҡара урманға барып еткәндәр. Эңер төшкән. Әтәс шыршы башына менеп төнәмәк булған. Шыршы башына менһә, урмандың тап уртаһында бер өй ултыра икән, шуны күргән был.

– Ана, урман эсендә өй бар, әйҙәгеҙ, шунда барайыҡ! – тигән әтәс.

Өйгә барһалар, унда ҡараҡтар йәшәй икән. Әтәс өй ҡырындағы ағас башына менеп киткән дә бар көсөнә:

– Ки-ки-ри-кү-к! – тип ҡысҡырып ебәргән. Бесәй ҙә, шул уҡ ағас башына менеп, мыяуларға тотонған. Аҫта эт өрә, ишәк баҡыра икән. Ҡараҡтар ҡурҡып ҡасып бөткәндәр. Ишәк, эт, бесәй, әтәс өйгә инеп, мейестә бешеп ултырған ашты ашап алғандар ҙа йоҡларға ятҡандар. Әтәс урҙаға менгән, бесәй мейес эсенә кергән, эт ишек төбөндә, ишәк тышҡа сығып, тиреҫ башына ятҡан.

Өйһөҙ ҡалған ҡараҡтар ни эшләргә белмәй урманда йөрөгәндәр-йөрөгәндәр ҙә, кәңәш тотоп алғас, өйҙәренә кире ҡайтмаҡ булғандар. Иң батыр ҡараҡты өйгә индереп ебәргәндәр. Ҡараҡ өйгә инһә, өйҙә бер кем дә юҡ. Ҡараҡ мейесте асып ҡараған. Ҡараһа, бесәйҙең күҙе баҙлап ҡына ята, ти. Ҡараҡ быны ҡуҙ икән тип, алмаҡ булһа, бесәй тегенең ҡулын тырнаған да алған. Сығып ҡасайым тип ишек тупһаһы эргәһенә барһа, эт ботон тешләп алған. Инде ҡотолдом тип, тиреҫкә баҫып, ҡойма аша һикереп сығайым тиһә, ишәктең өҫтөнә барып менгән. Ишәк ҡараҡты тибеп осорған. Әтәс, уяныр китеп, төн уртаһында:

– Ки-ки-ри-кү-ү-ү-к... – тип һөрән һалған.

Ҡараҡ, ах та ох булып, иптәштәре эргәһенә көс-хәл менән бирып етеп йығылған. Иптәштәре ҡурҡып киткәндәр.

– Ни эшләнеләр? – тип һорайҙар икән.

– Мейестәге ашты ҡарайым тиһәм, бәкеһе менән сәнсте, инеп төбөндә берәүһе аяҡҡа балта менән сапты. Тышҡа сыҡҡайным, күсәк менән тондорҙолар. Етмәһә, иң уҫалы: «Килтер бында, килтер бында!» – тип ҡысҡыра, тип, ҡараҡ башынан үткәндәрен һөйләп бирҙе, ти. Ҡараҡтар:

– Әйҙәгеҙ, был ерҙән ысҡынайыҡ, башыбыҙға етерҙәр, – тинеләр ҙә ҡуйыраҡ урман эҙләп киттеләр, ти.

Ишәк, эт, бесәй, әтәс ҡараҡтар өйөндә донъя көтөп ҡалдылар, ти. Әле һаман шунда йәшәп яталар, ти.

## 75. Бесәй

Борон-борон заманда ҡарт менән ҡарсыҡ йәшәгән. Уларҙың бер бесәйҙәре генә булған. Ҡарт менән ҡарсыҡ бөр көндө юлға сығып киткәндәр. Өйҙә бесәй генә ҡалған. Бабай менән әбей аслыҡтан сығып киткәндәр. Бесәй иртән дә көтә, кис тә көтә. Әбей менән бабай ҡайтмағандар. Бесәй, аптырағас, сығып киткән. Бара торғас торна осраған. Торна әйткән бесәйгә:

– Әйҙә, бергә киттек. Бергә-бергә рәхәт булыр. Унда һиңә яр буйында сысҡандар күп булыр. – Киткәндәр былар. Бара торғас өйрәк менән әтәс осраған. Бесәй әйткән:

– Әйҙә, бергә киттек.

Былар киткәндәр. Бара торғас былар һөйләшә башлағандар. Әтәс үҙенең йөрөгәндәрен һөйләй башлаған:

– Бер ваҡыт мин тауыҡтар менән кетәктә ял итә инем, мине хәйләкәр төлкө ҡанатымдан эләктергән дә алып киткән. Күҙемде асып ебәрһәм, мине төлкө алып китеп бара. Өйрәккә була мине ташланы ла, өйрәкте тоторға уйлағайны, уны тота алманы. Мин шунан өйрәк янына барҙым да, бергә киттек. Шунан бында килеп сыҡтыҡ.

Быларға кәзә осрай. Әтәс әйтә:

– Кикирикүк, әйҙә, бергә киттек. – Кәзә шунан үҙенең күргәндәрен, осрағандарын һөйләй башлай.

– Минең бер балам ғына бар ине, уны урланылар. Шунан һуң мин үҙем генә бында килеп сыҡтым.

Хәҙер быларға үгеҙ осрай. Шунан һорайҙар унан:

– Һин нимә эшләп бик бысраҡҡа баттың?

Үгеҙ әйтә:

– Мине төлкө тоторға уйлағайны, мин һаҙлыҡҡа керҙем.

Әтәс менән өйрәк әйтә:

– Беҙҙе лә тоторға уйлағайны, беҙ ҡастыҡ. – Хәҙер былар бергәләп киткәндәр. Былар йөрөй торғас, ҡыш та яҡынлашҡан. Бесәй әйткән:

Өйҙәгеҙ, өй һалайык.

Әтәс әйткән:

Миңә өй кәрәкмәй. Берәйһенең тауык кетәгендә кыш сығырмын әле.

Торна әйткән:

Миңә өй кәрәкмәй. Мин камышлыкта кыш сығырмын әле.

Хәҙер өйрәк әйтә:

Мин ауылда берәйһенең келәт аҫтында кыш үткәрермен әле. Келәт аҫтында ашлыктар койолған була.

Кәзә әйтә:

Миңә лә өй кәрәкмәй. Мин берәйһенең нигеҙендә кыш үткәрермен әле.

Былар дүртәүһе дүрт якка китәләр, ә бесәй менән үгеҙ бергә китәләр. Урманда бик якшы бүрәнәләр була. Үгеҙ бүрәнә ташый, бесәй өй һала. Былар ике көндә өйҙө эшләп бөтөргәндәр. Хәҙер мейес кенә сығараһы калған. Өсөнсө көндө былар мейес тә сығарып бөтөргәндәр. Бесәй мейескә яғып өйҙө йылыткан. Шунан бесәй мейес башына, үгеҙ карауатка йокларға яткандар.

Торна килеп тәҙрәне каға башлаған:

– Торыйк-торыйк! Бесәй дуҫым, ишек ас. Аяктарым, колактарым өшөнө. Бөгөн көн бигерәк һыуык.

Бесәй мейес башынан иренеп кенә:

– Бар, камышлығыңда кыш сык.

– Асмаһағыҙ, тәҙрәгеҙҙе һуғып бөтөрөрмөн, – ти торна. Үгеҙ карауатынан тороп ишек асты. Торна мейес аҫтына кереп китте.

Үгеҙ рәхәтләнеп кенә яткайны, әтәс тәҙрә шакыны. Бесәй иренеп кенә әтәскә әйтә:

– Тауыктар кетәгендә кыш сығам тигәйнең бит. Бар шунда кыш сык.

– Ишегегеҙҙе асмаһағыҙ, нигеҙегеҙҙе тырнап бөтөрөрмөн, – тине әтәс.

Үгеҙ тороп ишек асты. Әтәс инде лә, һәндерәгә менеп китте. Үгеҙ йокларға ғына яткайны, тағы тәҙрә шакынылар:

– Бесәй кустым, ишек ас әле, аяктарым өшөнө.

– Ә-ә, өйрәк, һин бит берәйһенең келәт аҫтында кыш сығам тигәйнең.

– Асмаһағыҙ, түбәгеҙҙең тупрағын тырнап төшөрәм, – ти өйрәк. Үгеҙ иренеп кенә ишек асты. Өйрәк керҙе лә мейес аҫтына барып ятты, ти.

Үгеҙ тағы тыныслап йокларға яткайны йәнә берәү тәҙрә шакылдата башланы, ти. Уныһы кәзә, имеш. Ул да:

– Бесәй дуҫым, ишек ас әле, – ти.

Бесәй иренеп кенә:

– Берәйһенең нигеҙендә кыш сығырмын тигәйнең бит, ниңә шунда кыш сыкмайһың һуң? – тип һораған.

Кәзә:

– Асмаһағыҙ, хәҙер бүрәнә араһындағы мүгегеҙҙе йолҡоп бөтөрөрмөн, – тигәс, үгеҙ иренеп кенә ишек асты. Кәзә карауат аҫтына урынлашты, ти. Былар бик дуҫ тора башланылар, ти.

Бер көн бесәй мейескә яҡты. Кәзә әкиәт һөйләй башланы, ти. Былар ишектәрен бикләмәгәндәр икән, хәйләкәр төлкө ишектән килеп инде, ти. Әтәс:

– Кикирикүк, торогоҙ. Әллә ниндәй дошман килеп керҙе, – ти.

Төлкө:

– Һин тик тор. Былтыр ҙа мине ташлап ҡастың.

Торалар ҙа күҙҙәрен тондороп уға ҡарап торалар, ти. Төлкө тағы түргәрәк үтә. Бесәй күҙҙәрен тондора ла, мыйыҡтарын торгоҙа ла, мейес башынан һикереп төшөп, төлкөнөң биттәрен тырнап алды, ти, кәзә төртөп йыҡты, үгеҙ тиҙ генә торҙо ла төлкөнөң эстәрен ботарлап ташланы, ти. Төлкө үлә.

Айыу менән бүре төлкөнө көтәләр. Төлкө һаман юҡ. Бүре әйтә айыуға:

– Мин төлкөнө эҙләп ҡайтайым әле. Ул төлкөнө ашап бөтөрмәнеләрме икән? Ул бик хәйләкәр төлкө. Әгәр ашап бөтөрһәләр, бирербеҙ уларҙың кәрәктәрен.

Бүре бара асыуланып. Барһа, төлкө үлгән, ята, ти, тыншта. Бүре гәйрәт менән өйгә керә. Былар бөтәһе лә күҙҙәрен тондоралар. Бүрегә әйтәләр:

– Яҡшы саҡта сығып ҡал. Әгәр башыңды бөтөрәһең килһә, бында ҡал.

Бүре тағы эскәрәк инә. Бүрегә тәүҙә бесәй ташлана, шунан кәзә төртөп йыға, үгеҙ килеп бүренең дә эсен аҡтарып ташлай.

Айыу көтә-көтә көтөк булып бөтә. Айыу, аптырағас, эҙ буйлап йүгерә-йүгерә бара. Ул барып керә лә күҙҙәре тона. Айыу эскәрәк инһә, бесәй уның күҙен тырнай, кәзә уны төртөп йыға, унан һуң бөтәһе бергә тотоналар дөмбәҫләргә. Айыу көскә генә ҡасып ҡотола ла урманына кереп юғала.

Хайуандар үҙҙәренең көслө булыуҙарына шатланып:

– Бергә-бергә тороуҙың да рәхәте бар икән, – тип һөйләнеп ҡалалар.

## 76. Ас айыу, төлкө, егет

Борон заманда бер егет урманға бара. Шунда бер ас айыу осрай. Егетте тотоп ашамаҡ була был айыу. Ашайым тигәндә генә, бер төлкө килеп сыға. Айыу, егетте ысҡындырып: «Һине ашамаҫҡа булдым, төлкөнө ашайым», – ти.

Төлкө егеткә:

– Ни эшләп тораһың? – ти.

Айыу егеттең ҡолағына: «Утын алам, тип әйт тә, мине арбаға төртөп йыҡ. Мин шунда үлгән булып ятырмын. Төлкө хәйләмде белер өсөн яныма уҡ килер. Шул саҡ мин уны тотоп ашармын», – ти.

Утын алырга килдем, – ти егет. Айыуҙы арбаға төртөп йыға. Төлкө егеткә:

Утынды арбаға һалғас, арҡан менән бәйләргә кәрәк. Бәйләнек, - ти. Айыу:

- Дөрөҫ әйтәһең, – тигән була.

Егет айыуҙы уратып-уратып бәйләй.

- Уратып бәйләгәс, ағас менән быраулап та ҡуялар ул утынды, – ти төлкө.

Егет быраулай. Айыу аҡыра, ҡыймылдай ҙа алмай. Төлкө, арбаға быраулап-борғослап бәйләп һалынған айыуҙың баш осона килеп:

- Бына, йөрөй инең урманды бер итеп, йыртҡыс айыу, беҙгә көн күрһәтмәй! Хәҙер яттыңмы инде бик һәйбәт кенә утын булып! – тип көлә. Шунан егеткә: – Утындың йыуанын шына ҡағып яралар ул. Шулай ит, – ти.

Егет имәндән шына яһап, айыуҙың ҡойроҡ аҫтына ҡаға. Егет ҡаға, айыу аҡыра. Айыу аҡыра-аҡыра үлгән шунда. Айыу урынына арыҫлан кейектәр батшаһы булып алған, ти, бынан һуң.

## 77. Изгелеккә – изгелек

Бик борон замандарҙа берәү утынға бара. Утын киҫә-киҫә лә ултыра был хәл йыйырға. Шул ваҡыт ҡоро имән күреп ҡала ла, «Күҫәккә шәп булды», тип күҫәк яһай. Күҫәкте һөйәп ҡуя ла, үҙ эшенә һоҡланып тора. Хәл йыйғас, тағы утын киҫә башлай. Шунан арый ҙа ҡайтырға була. Балтаһын биленә ҡыҫтырып, күҫәген яурынына һалып, ҡайтырға сыға. Һөрөлгән ер өҫтөнән ҡайтып килһә, таш ярығынан һоро йылан ыҫылдай:

– Зинһар, мине сығар был таш аҫтынан, – ти был кешегә.

Кеше:

– Юҡ, мин һине сығармайым. Сығарһам, һин мине сағаһың, – ти.

Йылан:

– Юҡ, саҡмайым. Хатта нәҫелеңә лә теймәйем, – тип ант итә.

Кеше ташты күтәреүе була, йылан бының үңәсенә урала ла ҡуя.

Утынсы:

– Ниңә һүҙеңдә тормайһың? – тип һорай.

– Изгелеккә яуызлыҡ менән яуап бирергә кәрәк, – ти.

Былар икәү оҙаҡ ҡына бәхәсләшәләр. Бер-береһен еңә алмағас, йылан:

– Әйҙә, өс шаһит табайыҡ. Улар минең һүҙҙе яҡлаһа, мин һине сағам, һинеңсә булһа, китәм, – ти.

Китәләр былар. Бына бер ауыл янында сүплеккә етәләр. Ҡараһалар, толоп яғаһы ята, ти. Утынсы һорай:

– Һин әйт әле, изгелеккә ни менән яуап бирәләр?

Яға:

– Бай мине матур саҡта кейҙе, ә хәҙер, аламалanғас, сүплеккә сығарып ташланы. Шулай булғас, изгелеккә яуызлыҡ булырға тейеш, – ти.

Былар ары китәләр. Китеп барһалар, ҡаршыларына саҡ-саҡ һөйрәлеп бер эт килә, ти. Утынсы:

– Изгелеккә ни менән яуап бирәләр? – тип һорай эттән. Эт:

– Мин шәп саҡта бай мине бауға ҡуйҙы. Аслы-туҡлы уға тогро хеҙмәт иттем. Ҡартайғайным, сығарып ырғытты. Изгелеккә – яуызлыҡ, – ти.

Утынсы менән йылан ары китә. Урман буйында быларға төлкө осрай. Улар шул уҡ һорауҙы төлкөгә бирәләр. Төлкө:

– Мин былай ғына шаһит була алмайым. Ниндәй таш аҫтынан нисек сығарҙың? Яңынан күрһәт! – ти.

Былар өсәүләп әлеге таш янына кире китәләр. Төлкө йыланға киренән таш аҫтына инеп ятырға ҡуша. Йылан кереп ята, кеше ташты төшөрә, ә төлкө:

– Бына хәҙер мин шаһит була алам. Изгелеккә изгелек булырға тейеш. Шуны белмәгәс, шунда ятып кибеп-ҡороп үл! – ти.

Шунан һуң төлкөгә хәйләкәр исеме бирелде, ти. «Изгелеккә – изгелек» тә шунан килеп сыҡты, ти. Изгелек эшләгәнгә, төлкөнөң ҡойроғо матурланып үҫеп киткән, ә кеше ошо көндән башлап йыланды үлтерә башлаған, ти.

## 78. Хәйләкәр төлкө

Бабай урманға утын киҫергә киткән. Ул бик күп итеп утын киҫкән, көндөң кискә ауышып барыуын күреп, ҡайтырға уйлап йөрөгәндә, ҡаршыһына сабып бүре килеп сыҡҡан.

– Ай, бабай, мине һунарсылар ҡыуып килә, зинһар өсөн, берәй ергә йәшер әле!

Бабай бүрене тиҙ генә тоҡҡа һалған да ағас башына элеп ҡуйған. Күп тә үтмәй бүрене ҡыуып килеүсе һунарсылар килеп сыҡҡан.

– Бабай, ҡасып барыусы бүрене күрмәнегеҙме?

– Юҡ, балалар, бер ҙә күрмәнем шул.

Һунарсылар ары китә. Бабай ағас башындағы тоҡто алып бүрене сығара. Бүренең тоҡтан сығыуы була, күҙҙәрен йымылдатып:

– Бабай, мин хәҙер һине ашайым, – ти. Бабай аптырап китә:

– Нисек инде һин мине ашайһың? Мин бит һине һунарсылар ҡулынан ҡотҡарып ҡалдым.

– Юҡ, барыбер ашайым мин һине, – ти бүре.

Шул ваҡыт ҡойроғо менән ер һепереп төлкө килеп сыға. Бабай төлкөгә:

– Төлкө, мин бынау бүрене һунарсылар ҡулынан ҡотҡарҙым, ә ул мине ашарға итә, – ти.

Ə һин уны нисек итеп йәшереп алып ҡалдың һуң? – тип һорай төлкө.

– Бына бынау тоҡҡа тығып, ағас башына элеп ҡуйҙым, – ти бабай. Төлкө аптыраған булып:

– Бүре, һин ошо тоҡ эсенә һыйҙыңмы? – тигән булған. Бүренең гәрлеге килгән:

– Бәй, һыймай ни, һыйҙым шул, – тигән.

– Юҡ, бер ҙә ышанмайым, – тигән төлкө.

Бүре, төлкөгә тоҡҡа һыйыуын күрһәтергә теләп, ҡабат шул тоҡ эсенә кереп ятыуы булған, бабай менән төлкө тиҙ генә тоҡтоң ауыҙын бәйләп тә ҡуйғандар. Бабай бүрене өйгә алып ҡайтып киткән.

## 79. Яҡшылыҡ тураһында

(вариант)

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Әбей матур-матур ашъяулыҡтар, ҡулъяулыҡтар сиккән, ә бабай ағастан ҡалаҡтар, һауыт-һабалар яһаған.

Бер матур ҡояшлы көндө бабай бөтөн яһаған әйберҙәрен йыйған да, тоҡҡа һалып, баҙарға һатырға алып киткән. Бабайҙың алып килгән әйберҙәрен тиҙ генә алып бөткәндәр. Бабай ҡайтыр юлға сыҡҡан. Бара, ти, был, әй бара, ти. Уның ҡаршыһына бер бүре килеп сыҡҡан, үҙенең хәле бөткән, саҡ тын ала, ти.

– Бабай, йәшер мине. Артымдан аусылар килә, – ти икән бүре.

– Ярай улайһа, йәшерәйем, һикер тоҡ эсенә, – ти икән бабай.

Бүренең тоҡ эсенә һикереүе була, аттар менән саптырып, аусылар килеп етәләр.

– Бабай, һаумы әле, бер бүре күрмәнеңме? – тип һорайҙар, ти.

– Юҡсы, бер ҙә осраманы, – тип яуаплай икән бабай. Аусыларҙың китеүе була, бүре тоҡтан һикереп сыға ла:

– Бабай, хәҙер мин һине ашайым, – ти.

– Минең яҡшылыҡҡа шулай яуап бирәһеңме? – ти бабай.

– Ə нисек яуап бирәләр? – ти бүре.

– Беҙҙә яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ менән яуап бирәләр. Әйҙә, юл буйлап барайыҡ, беҙгә кем осрай, шуларҙан яҡшылыҡҡа нисек яуап бирергә кәрәк, тип һорарбыҙ, – ти. – Әгәр яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ менән яуап бирмәйҙәр тиһәләр, һин мине ашарһың.

– Ярай улайһа, әйҙә, киттек, – ти бүре.

Китәләр, китәләр, бара торғас бер һыйырҙы осраталар. Унан яҡшылыҡҡа нисек яуап бирергә кәрәклеген һорайҙар, һыйыр уларға былай ти:

– Мин үҙемдең хужаларымдың өҫтәлдәренән һөт, ҡаймаҡ өҙмәйем, сөнки улар мине һәйбәт ҡарайҙар. Шуға мин, яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ менән яуап бирергә кәрәк, тип уйлайым.

Шунан ары китәләр тегеләр. Быларға бер эт осрай. Эттән до ошо һорауға яуап һорайҙар.

– Яҡшылыҡҡа нисек яуап бирергә кәрәклекте белмәйем, тик һин бүре нисек был тоҡҡа һыйҙың һуң? – тигән эт.

– Уға ниңә аптырайһың, быңа күрһәтәйем, – тигән дә бүре тоҡҡа инеп ятҡан.

Эт тиҙ генә тоҡтоң ауыҙын бәйләп ҡуйған. Бабай этте үҙено алып ҡайтҡан, эт әбей менән бабайҙың яҡшы иптәше булып киткән.

Быңа шулай яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ менән яуап бирһәң гено дуҫ-иштәрең күп була.

## 80. Юлбарыҫ менән аусы

Борон-борон заманда бер аусы үҙенең ау мылтығын алып урманға сығып киткән икән. Көн буйына ҡалын ҡарағайлы Урал урмандарын гиҙеп йөрөһә лә, бер төрлө лә кейек таба алмаған. Аптырағандан ергә ауған ҡарт ҡарағасҡа ултырып ял итергә булған.

Шул саҡта ғына быңың алдына ялдарын ҡабартып һыйырҙан да ҙур юлбарыҫ килеп баҫҡан. Аусы йыртҡыстың былай көтмәгәндо генә килеп сығыуынан ҡаушап атырға ла, атмаҫҡа ла белмәй ҡараған да торған икән.

Юлбарыҫ аусының эргәһенә үк килеп еткән. Дуҫының был ваҡытта бөтә ҡото алынған да ҡуйған. Юлбарыҫ аусыны ҡойроғо менән һыйпап ҡына үтеп киткән. Үлем көткән аусы тағы ла аптыраған. Йәнә юлбарыҫ әйләнеп килеп, аусыны ҡойроғо менән һыйпап үткән.

Был аусы бик күп йылдарҙан бирле аусылыҡ итеп йөрөһә лә, быңдай хәлде күрмәгән дә, ишетмәгән дә икән. Шунан аусы, был минең арттан бар тип әйтәлер, ахыры, тип, юлбарыҫтың артынан китә башлаған. Юлбарыҫ та бик кәйефләнеп китеп, аусының алдынан ғына ҡойроғон болғап бара икән.

Баралар, баралар былар, бик күп ер баралар. Ҡара урман уртаһында бер соҡорға барып етһәләр, юлбарыҫтың бәләкәй генә балаһын бер ҡара быуар йылан уратып алып ята икән. Аусылар барғас та, йылан башын күтәреп ыҫылдап тора икән. Аусы мылтыҡ менән йыландың башына ҡарап атып ебәрһә, юлбарыҫ сабып барып, йыланды өҙгөләп тә ташлаған. Күп тә үтмәй юлбарыҫ үҙенең икенсе балаһын ҡапрыҡ[1] аҫтынан килтереп сығара. Ике балаһын да имеҙә лә, тағы аусыға килеп, ҡойроғо менән һыйпап, үҙе менән барырға ҡуша.

---

[1] Ҡапрыҡ – бейек тауҙа үҫә торған, ашарға яраҡһыҙ урман үләне.

Бара торғас юлбарыҫ алға сабып китә. Аусы аптырап тороп ҡала. Күп тә үтмәй аусы янына юлбарыҫ төлкө, бүре күтәреп килгере лә, аусыға «ал» тигән һымаҡ, алдына ташлай. Аусы нишләргә белмәй төлкө менән бүрене күтәреп ҡайтырға сыға. Юлбарыҫ уны балалары менән урманды сыҡҡансы оҙатып ҡала.

Аусы нисә тапҡыр урманға килһә лә, ошо юлбарыҫ осрап, быға төрлө йәнлектәр тотоп биреп ҡайтара торған булған, гелән шулай бер-береһенә күрһәткән яҡшылыҡтары өсөн һаман да дуҫ булып йөрөйҙәр икән. Боронғоларҙың, яҡшылыҡ итһәң, хөрмәт табырһың, яманлыҡ итһәң, башыңды ярырһың, тигән мәҡәле шул замандан ҡалған икән, тип һөйләйҙәр.

## 81. Икмәк

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Ул заманда иген игеүсе булмаған, халыҡ икмәктең нимә икәнен белмәгән.

Бер ваҡыт бабай һунарға киткән, ә әбей өйҙә ҡалған. Ҡарттың һунары уңышлы булған. Күп йәнлек алып килгәнендә, ҡаршыһына айыу килеп сыға. Айыу бик бойоҡ икән. Һунарсы айыуҙан:

– Ниңә бик бойоҡһоң, урман хужаһы? – тип һорай.

– Баламдың аяғына шырау ҡаҙалды, – ти тайыш табан.

– Әйҙә, мин дауалап ҡарайым балаңдың аяғын, – тип, бабай айыу артынан эйәреп бара ла айыуҙың балаһына ярҙам итә. Айыу шатлығынан урманда йыйған орлоҡтарын һунарсыға биреп ҡайтара. Бабай өйөнә ҡайтҡас хәлде әбейенә һөйләй. Яҙ еткәс, әбей менән бабай айыу биргән орлоҡтарҙы ергә сәсә. Ваҡыты еткәс, оҙон һабаҡлы, ҙур башаҡлы үҫемлектәр килеп сыға. Хужалар уны йыйып тәмләп ҡарайҙар.

Орлоҡтар өлгөргәс, киптерәләр, он итеп тарталар. Тора-бара икмәк бешерергә өйрәнәләр. Шул замандарҙан башлап кешеләр иген игергә, шунан икмәк бешерергә лә өйрәнәләр.

## 82. Аҡыллы бәрәс

Тау битендә бер һарыҡ бәрәсе уйнап йөрөгән. Көтмәгәндә уның ҡаршыһына бүре килеп сыҡҡан.

– Минең еремде тапарға кем рөхсәт итте һиңә? Хәҙер кәрәгенде бирәм, – тип аҗғырған бүре.

– Был бит Хоҙай биргән ер, һинеке түгел, – тип яуаплаған бәрәс.

– Ошо ахмаҡ һүҙҙәрең һинең башыңа етәсәк, – тигән бүре. – Был ерҙәр минеке икәнен бөтә йәнлек-януарҙар белә. Ышанмаһаң, уларҙан һорашайыҡ. Бар, шаһит итеп теләһә ниндәй йәнлекте алып кил. Мин дә шаһит саҡырырмын, һәр кем һүҙемде раҫлаясаҡ. Шунан һине ботарлап ташлайым, – тигән бүре.

Бер аҙҙан һарыҡ бәрәсе, ҙур ғына этте эйәртеп, бүре менән бә хәсләшкән баяғы урынға килә. Этте ул яҡындағы ҡыуаҡ артына йәшерә. Күп тә үтмәй, төлкөнө ҡултыҡлап бүре килеп етә.

– Мин шаһит табалманым, икебеҙгә бер төлкө шаһит булһын да ҡуйһын, – ти бәрәс.

– Мәғәнәһеҙ бәрәс! Был ерҙәр әллә ҡасандан бирле бүренеке! тип ҡысҡыра төлкө.

– Улайһа, анау ҡыуаҡ та белһен! Ҡыуаҡ артына бар ҙа, ошо һүҙҙәрем дөрөҫ, тип ант ит! – тигән бәрәс.

Төлкө ҡыуаҡ артына килә. Япраҡтар араһынан бәзрәйеп ҡараған эттең күҙҙәрен күреп ҡала ла, ҡото осоп китә.

– Эй, бүре, ҡыуаҡ һине саҡыра. Ошо ерҙәр һинеке икәненә ант итергә ҡуша, – ти төлкө, саҡ тын алып.

Бәрәсте отоп, шунан уны тотоп ашауҙан башҡаны уйламаған бүре ҡыуаҡ янына килеп муйынын һуҙа ла күккә ҡарап ант итә башлай. Эт уны боғаҙынан эләктереп быуып та ырғыта.

Быны күргән төлкө тиҙерәк табанын ялтырата. Шулай итеп, аҡыллы бәрәс иректә йәшәп китә.

## 83. Быҙау тураһында әкиәт

Борон-борон заманда, кәзә команда, һайыҫҡан һалдат, ҡарға король булған саҡта, бынан тиҫтәләгән мең йылдар элек йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай. Улар бик ярлы булғандар, ти. Үҙҙәре бик татыу йәшәгәндәр. Әбей менән бабайҙың бик һылыу бер ҡыҙҙары булған. Был ҡыҙ көн һайын иртә менән тора ла тәҙрәнән кешеләрҙең һыйыр һауғанына, һыйырҙар артынан быҙауҙарҙың йүгереп йөрөүенә ҡарап:

– Атай, миңә лә быҙау алып бир, – тип әйтә икән.

Шулай бер ваҡыт, кеше аяғы һил булғас, атаһы ҡыҙға ыҫмалапан быҙау яһаған.

Быҙау һыны шул тиклем матур булған, хатта бабайҙың үҙенә лә оҡшаған.

Иртәнсәк ҡыҙ тышҡа сыҡһа, матур ғына быҙау йүгереп йөрөй, ти.

Ҡыҙ көн һайын быҙауын болонға алып сығып киткән. Быҙау бер үҙе генә ҡайтып килһә, уға айыу осраған. Айыу быҙауға:

– Эй-эй-эй, бына ҡайҙа ул һимеҙ быҙау! – тип, ҡулы менән ҡаты итеп һуҡҡан икән, ҡулы йәбешкән дә ҡуйған, ти. Быҙау айыуҙы һөйрәй икән:

– Әһә, айыу әфәнде-е! Былай булғас йылы тун булаһың инде.

Айыу аҡыра, баҡыра, шунан ялына башлай:

– Ҡуй инде, быҙау, ебәр, зинһар! Мин һеҙгә ярҙам итермен. Айыуҙарҙы йыйырмын. Һеҙгә ит, бал алып килербеҙ. Ебәр инде!

Быҙау айыуҙы ысҡындыра ла ҡайтып китә. Ҡайтып килһә, уға аяғында саҡ баҫып торған ас бүре тап була.

Эһә, быҙау бәгеркәйем! Юлымда осраның, хәҙер инде ҡотола алмаҫһың! Үҙе ниндәй һиме-еҙ! – тип, бүре быҙауға ҡул һалғайны, ҡуяны йәбеште лә ҡуйҙы, ти.

– Их, ҡыҙыҡайыма йылы тун эләкте былай булғас, – тип, быҙау бүрене һөйрәй башланы, ти. Бүре:

– Быҙауҡайым, ебәр инде! Бурыслы булып ҡалмам! Бүреләрҙе йыйып үҙегеҙгә ит алып килербеҙ, – ти.

Быҙау бүрене лә ебәрә лә ары китә. Килә ятһа, уға аҡ ҡына ҡуян тап була ла шаярғыһы килеп, быҙауға килеп һуғыла. Һуғылыуы була – ап-аҡ тәпәйҙәре быҙауға йәбешә лә ҡуя. Быҙау:

– Эһә, минең ҡыҙыҡайға яға ла булды былай булғас, – ти. Ҡуяны ҡурҡышынан:

– Быҙауҡай, зинһар, ебәр мине! Ҡыҙыҡайыңа бер һандыҡ бүрек алып килермен. Берүк, мине харап итмә инде! – тип инәлә башлаған, ти.

Быҙау ҡуянды ысҡындырып, ҡайтып китә.

Бер ваҡыт әбей менән бабай, ҡыҙ тәҙрәнән ҡарап торһалар, ботлап-ботлап ит, тәпән-тәпән бал йөкмәгән айыу, улар артынан ит йөкләгән йөҙҙән ашыу бүре, уларҙан арттараҡ йөҙләгән ҡуян ҙур бер һандыҡ күтәреп алып киләләр, ти. Улар әйберҙәрен йорт алдына ҡуйғандар ҙа йәһәт кенә таралышып бөткәндәр, ти.

Шул уҡ көндө әбей менән бабай өйҙәрен йүнәтеп, ит бешереп, ҡаҙ ҡойоп ҙур ҡунаҡ йыйғандар, ти.

Шунан башлап әбей менән бабай рәхәт көн күрә башлағандар, ти.

## 84. Айыу менән ҡарт

Борон-борон заманда бер һунарсы ҡарт булған. Бер көндө ул, урманға алып барып, ҡапҡан һалып ҡайтҡан. Ҡапҡанға айыу эләккән, ти. Айыу ҡапҡанды ысҡындыра белмәгән. Тартҡылаша торғас, бер бото өҙөлөп тороп ҡалған. Һунарсы ҡарт ҡарарға килһә – айыу юҡ, аяғы бар, ти. Быныһы ла ярап ҡалыр, тип, айыуҙың аяғын алып ҡайтып киткән, ти.

Ҡарт, ҡайтып, айыуҙың ботон бешереп ултырһа, өҙөлгән аяғы урынына ботаҡ-таяҡ ҡуйып, әлеге айыу килә ята, ти. Үҙе:

– Шаҡ-шоҡ итә бер аяҡ,
Ул аяғым бер уҫаҡ.
Ҡарсыҡ тунай тиремде, –
Ҡаҙанда бешерә итемде, –

тип һамаҡлай, ти.

Бабай айыуҙан ҡурҡып кәштә башына менеп киткән, ти. Айыу ишекте асҡан ыңғайы бабай кәштәнән айыу өҫтөнә йығылып төшкән икән, айыу уны шунда уҡ ботарлап ташлаған, ти. Әбей һике аҫтына йәшенгән булған, ти, тик уның сәсе күренеп ятҡан. Сәсенән һөйрәп сығарып, айыу әбейҙе лә үлтергән, ти.

## 85. Ҡарсыҡ менән айыу

Борон заманда, күрше ауылдан ҡайтып килгән сағында, бер ҡарсыҡты айыу тотоп алған, ти. Айыу ҡарсыҡты урманға алып инә лә ҡунаҡ итә башлай: бал ашата, еләк ашата. Ҡарсыҡ ашаһа ла, ашамаһа ла ашаған була, ти. Бер аҙ ҡунаҡ булғандан һуң ҡарсыҡ әйтә: «Айыу дуҫ, мине һин ебәр, минең өйҙә өс ҡыҙым бар, улар бик матурҙар, – тигән. – Шул ҡыҙҙарҙың ҡайһыһын теләйһең, шуныһын алырһың. Ҡыҙҙарҙың олоһо – Саҡ-саҡ, икенсеһе Бик-бик кенә, өсөнсөһө Инде-инде генә атлы», – ти.

Ярай, айыу ҡарсыҡты ҡайтара ла, үҙе кискә, лап-лоп баҫып, ҡыҙҙар янына китә. Туҡылдата был ишекте.

– Саҡ-саҡ ҡына, ишекте ас әле!

Оло ҡыҙ әйтә:

– Үҙебеҙ ҙә һаҡланып ҡына ятабыҙ, йөрөмә бында.

– Бик-бик, ишекте ас әле.

Уртансы ҡыҙ әйтә:

– Үҙебеҙ ҙә бикләнеп ятабыҙ, йөрөмә бында.

Өсөнсө тапҡыр туҡылдата был. Кесе ҡыҙ әйтә:

– Инде-инде генә, беҙ ҡабат еләккә йөрөмәйбеҙ.

Ҡапыл эттәр өрә башлай. Айыу:

– Их, мине ҡарсыҡ алданы бит, – тигән дә урманға ҡасҡан.

## 86. Утынсы

Ҡәдим заманда бер кеше бар иде. Һәр көн урманға барып утын кисәр иде. Көнләрдә бер көн, урманда йөри торғач, бер аю баласына очрады. Аны тотоп алды һәм өйөнә алып ҡайтып, ашатып вә бик сыйлап асрап үстерде вә йәнә бейемәккә үгрәтте һәм бейетеп, кешеләрдән акча алып файдаланды. Бер ваҡыт бу кеше сырхады. Күп көнләр рәнжеп ятып, бер көннө бер аз ғына яхшы булды никәм, ул сырхау ваҡытта асла ул аюны ҡараған кеше булмады. Аюның ҡарыны ачып бик ябыҡты вә ҡачан ул кеше, бер аз ғына яхшыраҡ булғач, тышҡа ҡояшҡа чығып ултырды. Бичара ҡояшның йылысына йоҡлап китте. Чебенләр килеп бу кешенең бит вә йөзләренә ҡунды. Моны аю күреп, эйәсен бик ҡызғанды һәм, чебенләргә бик ачыуланып вә анларны суҡмаҡ, нисбәт илән бер зур таш күтәреп алып эйәсенең битендәге чебенләргә бәргән иде, мескен әдәм шул уҡ заман тәгәрәп китте дә үлде. Бу хәлне күреп, йыйылышып кешеләр килделәр вә әйттеләр: «Бу аюны эйәсен суғып үлтергән өчөн ормаҡ вә үлтермәк кирәк», – диделәр. Бәғзеләре әйттеләр: «Юҡ, бу кеше үлде инде. Бу аюны үтереп ни файда табармыз. Аны үтергән белән эйәсе терелмәс», – диделәр. Ул заман Дауыт бигәмбәрнең заманы ирде. Халыҡ: «Моны бигәмбәргә алып барайыҡ. Ул ни хөкөм итсә, шул булыр. Анның сүзен-

ып чыкмасмыз», – дип, хасил аюны Дауыт бигәмбәрнең алдына алып бардылар. Дауыт биғәмбәр һәр жануарның телен белгүче иде. Аюдан сорады: «Йә, хайуан, эйәңне нигә үтердең?» – диде. – Ул сине яхшы асрап торған иркән. Нишли ирмез ирде сиңә эйәңне үтерергә», – диде. Аю әйтте: «Мин эйәмне нигә үлтерәйем? Ул мине туйдырып асрай иде. Бер ничә көнләр сырхагач, мин ач ҡалдым. Мине ҡараған вә туйдырған кеше булмады. Бер көн эйәм, сырхауындан бер анча шифа табып, тышҡа чығып, ҡояшның йылылығына йоҡлап рәхәт табып, ятадыр ирде. Күрдем, кем, аның өстенә чебенләр ҡунып, аны бимаза кыла башлады. Шуңар ачуым килде дә, ул чебенләрне үлтермәк өчен таш белән сугып идем. Мин сукмадым, кем, иям үлсен», – дип диде. Дáуыт бигәмбәр әйтте: «Эй, яранлар, мына күрдеңезме, һәр кем нәжес акылсыз илә, юлдаш булса, аның заруры ошбундаҡ булыр, йәғни үзенең һәләкәтенә сәбәп булыр. Әгәр бер гакыллы дана әһел кемсәнәне үзенә юлдаш итсә, әлбиттә, абруйлы, булыр. Бу бер гәйрәтдер», – диде.

## 87. Алдар төлкө

Бер төлкө, юл буйлап китеп барғанда, бер һарыҡ тояғы табып алған. Бер утар һымаҡ ергә барып еткәс, Әтәсголдан йоҡларға фатир һораған, ти. Әтәсгол уға:

– Өйөм бик бәләкәй, һин һыйырлыҡ урын юҡ, – тигән, ти.

– Мин үҙем дә бәләкәймен. Үҙем һикелә бөгәрләнеп кенә ятырмын, ҡойроғомдо һике аҫтына тығырмын, – тигән төлкө.

Әтәсгол риза булған. Йоҡларға ятыр алдынан төлкө хужаға:

– Ошо һарыҡ тояғын берәй ергә ҡуйып тор әле! – тигән.

Әтәсгол тояҡты һандыҡ артына һалып ҡуйған, ти. Төлкө уның ҡайҙа ҡуйғанын ҡарап ҡына торған да, хужа йоҡлағас, тороп, тояҡты тышҡа сығарып йәшергән. Иртән торғас, төлкө Әтәсголдан тояҡты таптыра башлаған. Эй эҙләгән хужа тояҡты, эй эҙләгән, таба алмаған. Төлкө уға:

– Ярар, тояҡ булмаһа, уның урынына бер тауыҡ бирерһең! – тигән.

Әтәсгол, йә башыма берәй бәләһе булыр, тип ҡурҡҡан да, төлкөгә тауыҡ биреп ҡотолған. Төлкө тауыҡты, юл ыңғайында тояҡты ла алып сығып киткән.

Икенсе ауылға барып еткәс, ул Ҡаҙғәленән фатир һораған. Ҡаҙғәле ҡаршы килмәгән. Йоҡларға ятыр алдынан төлкө уға:

– Зинһар, ошо тауыҡты йыйып ҡуйсәле! – тигән.

Хужа уны ҡаралды артына йыйып ҡуйған. Төлкө был юлы ла хужаның тауыҡты ҡайҙа ҡуйғанын ҡарап ятҡан. Төндә тороп, тауыҡты икенсе урынға йәшергән. Иртә менән төлкө Ҡаҙғәленән тауыҡты һораған. Хужа ҡараһа, ҡуйған тауыҡ булмаған. Төлко:

– Ярар, тауыҡ булмаһа, уның урынына һин бер ҡаҙ бир! тигән.

Ҡаҙғәле, йә берәй бәләһе булыр, тип, уға ҡаҙ биргән. Төлкө, тояҡты ла, тауыҡты ла, ҡаҙҙы ла алып, үҙ юлына киткән.

Төлкө, йәнә бер ауылға барып етеп, Мөгөҙбайҙан фатир һорап ингән. Мөгөҙбайға ҡаҙҙы иртәнгә тиклем һаҡларға ҡушҡан. Хужа ҡаҙҙы ситәүкә эсенә ултыртып ҡуйған. Төлкө йәнә, төнөн тороп, ҡаҙҙы тышҡа йәшереп ҡуйған. Иртән торғас, Мөгөҙбайҙан ҡаҙҙы таптыра башлаған, теге, күпме генә эҙләп ҡараһа ла, ҡаҙҙы таба алмаған. Шул саҡта төлкө:

– Ярар, улай булһа, ҡаҙ урынына бер үгеҙ бир, бирмәһәң, үҙеңде судҡа бирәм! – тигән.

Мөгөҙбай, суд бәләһе – эт бәләһе, тип, бер үгеҙен йүгертеп килтереп биргән.

Төлкө, үҙенең һарыҡ тояғын күтәреп, үгеҙен етәкләп, тауығын, ҡаҙын эйәртеп, өйөнә ҡайтып киткән.

Һыуыҡ төшкәс, уларҙың бөтәһен дә һуйып, бесән аҫтына йәшергән. Ә үгеҙ тиреһенә бесән тултырған да, өй алдына баҫтырып ҡуйған.

Бер аҙ ғүмер үткәс, төлкөнөң өйө эргәһенән айыу менән бүре үтеп бара икән. Төлкө уларға:

– Барығыҙ әле, бер сана менән ҡамыт килтерегеҙ. Үгеҙҙе егеп, урманға утынға барайыҡ, – тигән.

Айыу менән бүре, йүгереп барып, сана, ҡамыт килтергәндәр. Төлкө теге үгеҙҙе еккән дә өсәүләп санаға менеп ултырғандар. Айыу менән бүре үгеҙҙе ҡыуа башлағандар, үгеҙ һис ыжламаған, бер урында тора биргән. Шул ваҡытта төлкө:

– Һеҙ, ебегәндәр, үгеҙҙе лә йөрөтә алмайһығыҙ! – тип, айыу менән бүрегә асыуланған булып, сананан төшөп киткән.

– Беҙгә шул ғына кәрәк ине, сәнселеп кит! Бына хәҙер үгеҙҙең ҡойроғон күрерһең инде! – тип, бүре үгеҙҙең муйынына барып та йәбешкән, айыу янбашына һелтәп ебәргән. Шул саҡта үгеҙҙең тиреһе бүҫелеп, эсендәге бесән әйләнеп килеп сыҡҡан.

Быны ситтән генә ҡарап торған төлкө:

– Бесән булһа ла, иттәй күреп ашағыҙ! – тип хихылдап, ауыҙын йырып көлә икән.

## 88. Хәйләкәр төлкө

(вариант)

Бер хәйләкәр төлкө була. Уның өйөнән үк алып сыҡҡан тауығы була. Шунан бер ауылда фатирға кергәс, төлкө:

– Әбей, минең ошо тауығымды иртәгәгә ҡәҙәр һаҡлап тороғоҙ әле, – ти.

Шулай, әбей йоҡлағас, төлкө тороп тауығын ала, тышҡа сығарып йәшерә лә, яңынан урынына менеп ята.

Иртән торғас, әбейҙән тауығын һорай. Әбей ҡараһа, тауыҡ урынында юҡ, ти.

Бәй, бәй, нисек була инде? Мин кисә тауығымды һеҙҙең ҡулығыҙға тапшырҙым. Мин йоҡлағанда һеҙ бешереп ашағанһығыҙҙыр, – ти.

Тауығың урынына ҡаҙ бирәм, – ти әбей.

Төлкө ҡаҙҙы, үҙе йәшергән тауығын алып, икенсе ауылға китә. Унда ла фатирға төшөп хужаға: «Ошо ҡаҙымды иртәгә ҡәҙәр һаҡлап торорғоҙ әле», – тип, ҡаҙын бирә. Иртә менән төлкө:

Әбей, ҡаҙымды бир әле, мин юлға сығайым инде, – ти. Ҡаҙ урынында булмай. Әбей аптырап китә:

– Шунда ғына ҡуйғайным бит, ҡайҙа булған икән һуң?

– Ай-һай, әбей, мин йоҡлағас, бешереп ашағанһығыҙҙыр.

Шулай итеп, ҡаҙ урынында булмай. Төлкө:

– Ҡаҙ булмағас, һарығыңды бирәһең инде, – тип, әбейҙең һарығын алып китә.

Шулай йөрөй-йөрөй, төлкө тағы бер ауылға барып керә. Фатир хужаһына:

– Әбей, иртәгә ҡәҙәр һарығымды аҙбарыңа ябып торайыҡ инде, – ти. Әбейҙәр йоҡлағас, төлкө сығарып һарығын йәшереп керә. Иртән торғас, ашағас, эскәс, төлкө:

– Әбей, мин юлланайым инде. Һарығымды бирегеҙ, – ти. Һарыҡ урынында булмай.

– Бәй, һеҙ яптығыҙ бит һарыҡты. Мин белмәйем һеҙҙең һарайығыҙға ҡайһылай кереп, ҡайһылай сығып йөрөргә, – ти. – Һеҙ төнөн тороп ашағанһығыҙҙыр.

Һарыҡ булмағас, төлкө:

– Әнә, ҡышлау үгеҙегеҙҙе бирегеҙ, – ти. Әбейҙең үгеҙен алып, һарығын, ҡаҙын, тауығын тотоп, был өйөнә ҡайта.

## 89. Бур төлкө

Ауылдар буйлап бер хәйләкәр төлкө йөрөй икән. Бер әбейгә килеп кергән был төлкө.

– Әбей, мине ҡундырып сығар әле, – тигән.

– Эй, балаҡайым, ҡундырыр инем дә, минең мендәрем берәү генә. Һиңә бирһәм, үҙемә юҡ, үҙемә алһам, һиңә юҡ, – ти әбей.

– Ярай, әбей, миңә мендәр кәрәкмәй. Ҡойроғомдо баш аҫтыма һалам да йоҡлайым. Ә һинең тауығың бармы, әбей?

– Бар, бар, балаҡайым.

Әбей ғырылдап йоҡлап китә. Төлкө әбейҙең аҙбарына кереп тауыҡтарының йөнөн йолҡоп, итен тултырып, иртәнгелеккә әҙерләп

ҡуя. Шулай иртә менән йоҡонан тора ла, әбейҙең тауыҡтарын алып китә.

Был иттәрҙе ашай-ашай йөрөй торғас, уның бер генә тауығы ҡала. Шуны тота ла икенсе ауылға китә. Бер әбейгә ҡунырға керә лә:

– Әбей, ошо минең тауыҡты берәй ереңә ҡуйып тор әле, – ти. Әбей йоҡлап китә, төлкө был әбейҙең дә аҙбарына кереп, тауыҡтарын йолҡоп, ҡапсыҡҡа тултырып әҙерләп ҡуя.

Иртән торғас, төлкө әбейҙән үҙенең тауығын да һорап алып, ҡапсығын күтәреп, өсөнсө ауылға юллана. Юл буйына тауыҡтарҙы ашап бара.

Өсөнсө ауылда төлкө бер әбей менән бабайға керә. Бабай һунарсы була. Төлкө тураһында бабай ишеткән була. Төлкө быларға:

– Әбей, бабай, мине ҡундырып сығарығыҙ әле, – ти.

– Ярай, ярай, ҡунырһың, – тиҙәр былар.

Төлкө бер урынға, әбей менән бабай икенсе урынға яталар. Әбей менән бабай йоҡлағанға һалышып яталар. Төлкө, уларҙы йоҡланы тип уйлап, аҙбарға сығып тауыҡтар йолҡмаҡсы була. Төлкө аҙбарҙан төнәүҙән бер тауыҡты эләктереп, икенсеһенә үрелгәндә генә, бабай быны мылтыҡтан атып йыға. Төлкөнөң тиреһен тунай бабай, әбейгә бишмәткә яғалыҡ тире була. Шунан төлкөнөң эсен йыртып ебәрһә, теге ике ауылда йыйған тауыҡтар эсенән йыбырлашып килеп сығалар. Бик күп тауыҡлы булалар, етмәһә, әбейгә яғалыҡ тире лә була. Шулай итеп, һунарсы бабай бер төлкөнө атып үлтерә.

## 90. Ғәҙел төлкө

Борон-борон заманда, төлкөләр донъяһында ялғанлыҡ хөкөм һөргәндә, алдашыу, бурлыҡ, ҡараҡлыҡ өҫтөнлөк тотҡанда, йәшәгән, ти, бер һуҡыр төлкө. Һуҡыр төлкө хәйләһеҙ булған, ғәҙеллекте яратҡан, ти. Ул донъяны күп күргән, аҡыллы төлкө булған, башҡаларҙың да шулай булыуын теләгән. Ирәндек тауында йәшәүсе төлкөләрҙең берҙән-бер көндө йыйылыштары булған, ти. Йыйылышта һуҡыр төлкө үҙ иптәштәренә башҡаса алдашмаҫҡа, ғәҙел булырға, хәйләне ташларға кәңәш итә. Төлкөләр батшаһы Хәйләбай һүҙ алды, ти: «Кәҙерле төлкөләр! Ул төлкө дөрөҫтө һөйләмәй, хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙ. Донъя шуға ҡоролған икән, шулай йәшәргә кәрәк». Ғәҙел төлкө үҙенә ышанмауҙарын белеп, башҡа йәнлектәргә мөрөжәғәт итергә була. Ул ай китә, йыл китә, ти, бер ҡара урманға барып етә, ти. Ҡара урманда уға айыу осраған, төлкө хайуандар батшаһы ғәҙелде ялғандан ғына дөрөҫ айыра белер тип уйлаған. Ул ололарса булырға тырышып айыуҙың һаулығын һорашҡан: «Һаумы, тоғролоҡло хайуандар батшаһы айыуыбыҙ», – тип һүҙ башлаған. Айыу ер тырнап ҡысҡырып ебәргән:

Нәһин, алдаҡсы ҡарт төлкө, нимә тип ялағайланаһың. Һиңә ышанған тогролоҡто эҙләү. Кит бынан, күҙемә күренмә». Төлкө быны күреп тағы ныгыраҡ ҡайғыға ҡалған, тик ни өсөн уны яратмауҙарын белмәгән.

Ул уйлаған-уйлаған да, башҡа йәнлектәр ҙә барлығын иҫенә төшөргән: «Бәлки, улар мине аңларҙар?» Төлкөләр ҙә гәҙел булыуын мин уларға аңлатырмын. Мин уларға барайым, йөрәгемде асайым». Шулай тигән дә төлкө артабан киткән. Эй китеп бара, ти, эй китеп бара, ти. Уға ҡуян тап булды, ти: «Ҡуянҡай, аҡ тунҡай! Тороп тор инде аҙ ғына, мин һөйләйем ҡайғымды, үләмен бит ҡайғынан».

О ҡуян меҫкен ҡайҙа ул уға әйләнеп ҡарау. Төлкөнөң әрнеүле тауышын ишетеп, ул шулай ҙа туҡтап ҡалған. Ҡараһа – һуҡыр төлкө! Уның тиреләре ағасҡа һуғылып, йыртылып бөткән. Ҡуян ҡурҡыуын саҡ тыйып: «Һин миңә яҡын килмә! Шул урындан ғына тороп һөйләш. Беләбеҙ инде һеҙҙе, төлкөләрҙе, шулай ялағайланып ҡына яҡын килеп мине ашарға йөрөйһөңдөр әле. Ҡайһылай меҫкенләнеп торған була», – тигән дә ҡасып киткән. Һуҡыр төлкө әсенеп: «Их, был төлкөләргә нишләп ышанмайҙар икән? Хатта ҡурҡаҡ ҡуяндың да беҙгә ышанысы ҡалмаған. Беҙ, төлкөләр, нишләп был хәлгә төштөк һуң әле? Кем гәйепле был эшкә?» Шулай тигән дә, төлкө артабан киткән. Эй бара ул, эй бара. Уға йәнлектәр осрай, ти. Көслөрәктәре мыҫҡыллы йылмая, көсө етмәгәне ҡаса, ти. Төлкө был хәлгә тамам аптырап, ял итеп ултырғанда уға бер бүре осраны, ти. Ул: «Ах, хәйләкәр төлкө, нишләп бында ултыраһың? Кит бынан, алдаҡсы! Һинең туғаның минең ҡойроҡто өҙҙөргәйне. Хәҙер үк күҙемдән юғал. Имен сағыңда ҡотол. Юғиһә, мин һине бер генә йотормон!» – тип екерҙе, ти.

Төлкө бүрегә бер нәмә лә тип әйтергә өлгөрмәне, бүре өңөнә инеп тә китте, ти. Төлкө: «Бәлки, беҙҙең Ирәндек тауында ғына беҙгә ышанмайҙарҙыр, Себер яҡтарында хаҡлыҡты табырмын», – тип, ул Себер яғына сығып китә, ти.

Себер урмандарына китеп барғанда, уға ҡор осрай. Төлкөнө күргәс, ҡор ағасҡа һикерә башлай. Төлкө:

– Эй, ҡор, ҡор,
Тороп тор, тор.
Минең күрмәгәнде күрәһең,
Ниңә улай ҡасаһың? –

тип йырлай. Ҡор уға: «Төлкө – төлкө була инде ул. Хәйләкәр була төлкөләр». Төлкө эстән генә: «Инде ҡоштарҙан да эҙләп булмай икән хаҡлыҡты. Улар ҙа мине алдаҡсы төлкөгә иҫәпләйҙәр. Минең Себер яҡтарында хаҡлыҡ эҙләүем дә бушҡа булған икән», тип уйлай ҙа, бүтән ғәҙеллек эҙләмәй, Себер урмандарында тороп ҡала.

# 91. Әтәс батыр

Борон-борон заманда Улаҡлы йылғаһы буйында йәшәгән, ти, бер ҡарт менән ҡарсыҡ. Ҡарты ғүмере буйына эшләп тир түккән, бил бөккән, ә ҡарсығы байбикәләргә йөн теткән, кейем теккән. Икеһе лә сәләмәтлектәрен юғалта башлағас, бай уларҙы йортонан ҡыуып сығарған. Шунан былар бер ауылдың осонда, йылға буйында, ярҙы соҡоп, землянка эшләп ингәндәр. Ауылдың бер мәрхәмәтле кешеһе әбей менән бабайға бер тауыҡ менән әтәс бүләк иткән. Шулай итеп, улар дүртәү йәшәй башлағандар.

Берҙән-бер көндө, яҙ булғас, ҡарт үҙенең төйөнсөгөн биштәрләп, хәйер һорашырға сығып киткән, ҡарсығы өйҙә тороп ҡалған, тауыҡ менән әтәсте ашатып сығарған да үҙе өйҙәге эшенә керешкән. Әтәс менән тауыҡ яр башында, сүплек баштарында, ем эҙләп, тибенеп йөрөгән. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, тауыҡ, ҡыт-ҡытаҡ, ҡытайыҡ, ҡыт-ҡытаҡ, тип, йомортҡа һалырға инеп киткән, ә әтәс ем эҙләп тороп ҡалған.

Әтәс, сүплек башында тибенеп йөрөй торғас, һабы һынған ҙурғына ағас ҡалаҡ башын ҡаҙып сығарып, ярға табан тибеп ебәргән. Ҡалаҡ башы, ярҙан тәгәрәп китеп, һыуға барып төшә. Әтәс был икмәк ҡатыһылыр, тауыҡ йомортҡа һалып сыҡҡас бергә ашарбыҙ тип, ярҙан осоп барып, һыу өҫтөндәге ҡалаҡ башына барып ҡуна. Ҡалаҡ башы, әтәстең ҡапыл килеп ҡуныуынан ҡуҙғалып, һыу уртаһына йөҙөп китә. Әтәс хәҙер төшөп ярға сыға алмай. «Ни булһа ла булыр, ҡасан да булһа һыу мине ярға табан яҡынайтыр, шунда осоп сығырмын әле» тигән уй менән киткәндән-китә бара, ти. Етмәһә, ҡуҡрая биреп: «Ки-ки-ри-күк! Бына ҡайҙа китте кәкре ҡойроҡ! Минең менән кем бара? Әйҙәгеҙ, һикерегеҙ!» – тип ҡысҡырған була, ти.

Яр буйында йөрөгән ата ҡаҙға етә ҡалды, ти, әтәстең был саҡырыуы. Ул да барып ултырҙы, ти, ҡалаҡ башына. Әтәс менән ата ҡаҙ йөҙөп китеп баралар, ти. Әтәс ата ҡаҙҙы ишкәксе итте, ти. Бер ни тиклем ер киткәс, бер кәзә тәкәһен күрәләр. Ул яр буйына һыу эсергә килгән икән. Кәзә тәкәһе:

– Мә-ә-ә, әтәс ағай, ҡайҙа бараһығыҙ? – тип баҡыра, ти.

– Әйҙә, беҙҙең менән барабыҙ, – ти әтәс.

Кәзә тәкәһе риза була. Ҡалаҡ башына ултырып алғас:

– Мә-ә-ә, мин тәкә, тәкә, мә-кә-кә-кә, мин тәкә, тәкә, бында барыу бик мәрәкә, – тип, үҙенең кем икәнлеген әйтә.

Ата ҡаҙ уға яуап итеп:

– Ҡыйғаҡ, ҡыйғаҡ, ҡа-ҡа-ҡа, ға-ға-ға. Мин һиңә ага-ға! Әтәс аға беҙҙе бага-ға! – тигән булып, үҙе менән дә, әтәс менән дә таныштырып ала. Әтәс ата ҡаҙ таныштырыуына ҡәнәғәтләнмәй:

– Ки-кири-күк! Мин кәкре ҡойроҡ! – тип ҡысҡырып ебәрә.

Яр буйында бер ҙур үгеҙ был өсәүҙең йөҙөп барғанын күрә лә:

– Әтәс ағай, мине лә үҙегеҙ менән алмаҫһығыҙмы? Һеҙгә минең кәрәгем булыр, – тип, инәлеп баҡыра башлай.

Этәс:

Ки-кири-күк! Һин кәрәк, кәрәк кеүек! – тип ҡысҡыра.

Ишкәксе ата ҡаҙ ҡалаҡ башын үгеҙ торған яр буйына килтереп туҡтата. Үгеҙ инеп баҫа. Бер ни тиклем ер киткәс, яр ҡарлуғастарын һағалап тороп, тотоп ашарға килгән бесәй, быларҙы күреп ҡалып:

Этәс ағай, ҡайҙа бараһығыҙ? Мине лә үҙегеҙ менән алып китегеҙ әле! – тип ҡысҡыра.

Киң күңелле этәс, әлбиттә, ҡаршы килмәй, алып китергә риза була. Бесәй ҙә ултыра.

Этәс ҡалаҡ башының иң осонда, ата ҡаҙ ҡалаҡ-кәмәне алып бара, үгеҙ ҡойроҡсо, кәмәнең ҡойроғон ҡайҙа борорға кәрәк булһа, шулай бороп бара. Бесәй менән кәзә тәкәһе уртаға ултырғандар ҙа, тирә-яҡтағы бөтә нәмәгә ҡарап, һоҡланып баралар, ти.

Шулай бара торғас, былар бик күп ер киттеләр, урмандар, тауҙар, һыуҙар үттеләр, ти. Быларҙың бик ашағылары килә башланы, ти. Ҡалаҡ-кәмәне урман тәңгәленә килтереп туҡтатып, яр буйына бәйләп ҡуялар ҙа, урманға инеп, һәр кем үҙ тамағын туйҙыра башлай. Төндө ошо урында үткәрмәк булалар. Этәс ағай ағас башына менеп төнәй, ә ҡалғандары ерҙә ҡунырға ҡалалар. Төн урталары уҙғас, этәс:

– Ки-ки-рикүк! Торорға ваҡыт! – тип, урман яңғыратып ебәрә. Этәстең был тауышын төлкө ишетеп ҡала, үҙенең төнгө табышына шатланып, был яҡҡа килә башлай. Ләкин ул килеп етеү менән эш бөтөнләй башҡаса булып сыға: этәс ағас башында бик бейектә ултыра, ә ата ҡаҙ үгеҙ менән тәкәнең уртаһында тора, һис кенә лә алырлыҡ түгел. Шуға күрә төлкө был үгеҙ менән тәкә тирәһенә яҡын килергә лә ҡурҡа. Кире китә. Урмандағы бөтә йәнлектәрҙе йыйып килтереп, үгеҙ менән тәкәнән уларға өлөш сығарырға, ә үҙе этәс менән ата ҡаҙҙы ашарға уйлай. Төлкөнөң мәкерле уйын һиҙеп, этәс ағас башынан төшөп, иптәштәренә:

– Бына нимә, дуҫтар! Мин был төлкөнө бик яҡшы беләм. Ул үҙ ғүмерендә бик күп ҡош-ҡортто ҡыйратты. Мин быны үҙемә ҡурҡыныс булғаны өсөн генә әйтмәйем. Хәҙер беҙҙең бөтәбеҙ өсөн дә үлем ҡурҡынысы тора. Бесәй, һин барып кәмәне рәтләй тор, беҙ хәҙер барып етербеҙ, – ти.

Былар юлға ҡуҙғалырға торғанда ғына, бесәй хәле бөтөп сабып килеп етә лә:

– Этәс ағай! Этәс ағай! Эш харап! Мин барып етер саҡта ғына, әлеге төлкө ҡалаҡ-кәмәне бәйенән ысҡындырып, ағыҙып ебәрҙе. Ә үҙе, шарҡылдап көлө-көлә, урман араһына инеп юғалды, – ти.

– Этәс ағай, – ти ата ҡаҙ, – мин бит бик яҡшы йөҙәм, булмаһа, барып туҡтатайым, ә һеҙ яр буйына бара торoғоҙ. Мин кәмәне ярға сығарғас, ултырып китербеҙ.

– Юҡ, – ти этәс, – былдай ҡараңғы төндә ағып барған ҡалаҡ башын таба ла алмаҫһың. Бесәй менән мин ағас башына менә алабыҙ, ә бит үгеҙ менән тәкә бер нисек тә ҡотола алмаясаҡ.

Ни булһа ла бергә булайыҡ, ҡурҡынысты бергә еңәйек. Хәҙер беҙ өй ҡорайыҡ, тигән уйға киләләр былар. Үгеҙ шунда уҡ, эре-эре ағастарҙы һөҙөп йығып, бүрәнәләр әҙерләй башлай; бесәй ҡырҡылған бүрәнәләрҙе ҡойроғона тағып ташый; ата ҡаҙ мүк йолҡа, йолҡҡан мүкте бүрәнә араһына түшәй бара; ә әтәс яр буйлап таш, балсыҡ ташып, мейес сығара башлай. Бына өй эшләнеп тә бөтә. Әтәс кәштә башына, ата ҡаҙ һике аҫтына, бесәй мейес башына, үгеҙ менән кәзә тәкәһе һике өҫтөнә һуҙылып төшөп яталар. Рәхәтләнеп йоҡоға киткәс кенә, берәү ишек ҡаға. Бесәй тороп:

– Кем бар унда? – тип һораһа, әлеге төлкө икән.

– Мин, төлкө, ас, ас, мин һиңә теймәйем, мин бесәй итен ашамайым, – тип йомшаҡ ҡына, юхаланып ҡына әйтә, ти.

Бесәй ишекте асмағас, тыштағы йыртҡыс йәнлектәр тәҙрәгә килеп ҡапланалар. Был хәлде күреп торған бесәй үҙенең иптәштәрен уята башлай. Үгеҙ үкерә, кәзә баҡыра, ата ҡаҙ ҡаңғылдай, бесәй мыраулай, әтәс ҡысҡыра.

Бындай күмәк тауышты ишетеп, тыштағы төлкө, бүре, айыу шөрләй башлай. Аҙаҡ килеп, улар шым ғына төрлөһө төрлө яҡҡа ҡасып бөтә.

## 92. Батыр әтәс

Борон-борон заманда бер ауылда йәшәгән, ти, бер бабай. Был бабайҙың бер ҡыҙы, бер кәзәһе булған. Бик ярлы йәшәгән ул.

Ҡыҙ кәзәне көн буйына болонда көтөп, кискә табан ғына алып ҡайтып ишек алдына индереп япҡан, ти. Бабай кәзә янына сығып:

– Йә, кәзәкәйем, көнө буйына болонда булып, нимә ашаның, нимә эстең? – тип һорай икән.

Кәзә быға:

– Бер япраҡ ашаным да, бер ҡалаҡ самаһы һыу эстем, – тип яуап биргән, ти. Ҡарт, бер кәзәне лә туйҙырғансы ашатып ҡайта алмағанһың тип, ҡыҙына бик ҡаты асыуланған, ти.

Икенсе көндө ҡарт болонға кәзәне үҙе алып киткән. Кәзә, көнө буйына болонда йөрөп, туйғансы ашаған, ти, тағы тороп ашарға тотонған. Бабай, быны күреп, бик шатланған: «Ярай, үҙем алып килгәс, бик рәхәтләнеп, туйғансы ашаны әле был», – тип уйлай икән бабай. Шулай тип уйлаған да теге бабай, кис булғанды ла көтөп тормаған, кәзәһен ҡалдырып өйөнә ҡайтып киткән, ти.

Кис булып, ҡараңғы төшөүгә, кәзә лә болондан ҡайтып килгән, ти.

Бабай кәзәһенән һорай:

– Нихәл, кәзәкәйем, көнө буйына болонда йөрөнөң, нимә ашаның, нимә эстең? – ти.

Кәзә уға:

– Бер япраҡ ашаным да, бер ҡалаҡ самаһы һыу эстем, – тип яуап биргән, ти.

Ҡарттың быға бик асыуы килә: «Ғәйеп ҡыҙҙа түгел, был кәзә үҙе бик ялғансы хайуан икән», – ти.

Шунан һуң бабай: «Был ялғансы кәзәнән барыбер бер рәхәт тә күрмәҫһең», – тип уйлай ҙа, кәзәһен һуйып ашарға була. Икенсе көндө бабай, кәзәнең ике мөгөҙөнән тотоп алып, аяҡтарын бәйләп һала. Бабай бысаҡ алырға тип өйөнә инеп киткән арала, кәзә аяҡтарын ысҡындыра ла сығып ҡаса.

Китә был. Бара-бара барып етә бер кескенә өйгә. Был ҡуяндың өйө икән. Өйгә инә. Өйҙә бер кем дә юҡ. Ҡуяндың сығып киткән ваҡыты булған, ти.

Ҡояш байып, ҡараңғы төшә башлауға ҡуян ҡайтып инә. Инһә, ни күҙе менән күрһен, теге кәзә түр башына менеп, мөгөҙҙәрен тырпайтып, һаҡалын һелкетеп ултыра, ти. Ҡуян, быны күреп, бик ҡаты ҡурҡҡан да, алдына-артына ҡарамай, урманға табан төроп сапҡан, ти. Урманға барып инеүгә, ҡуянға осраған, ти, бер бүре. Бүрене күреү менән, ҡуян ҡысҡырып илай башлаған. Быны күреп бүре:

– Ниңә илайһың, һиңә ни булды? – тип һорай икән.

Ҡуян быға:

– Ниңә иламаҫҡа, көнө буйына урманда йөрөп, өйөмә ҡайтһам, түр башында бик ҡурҡыныс бер нәмә ултыра, күреү менән йөрәгем ярыла яҙҙы, – ти.

– Әйҙә, киттек, беҙ уны хәҙер ҡыуып сығарырбыҙ, – ти. Киттеләр. Ҡуяндың өйөнә барып етеү менән, бүре үҙе лә ҡурҡа-ҡурҡа ғына ишекте аса. Ҡараңғы өйҙә ҙур мөгөҙлө, оҙон һаҡаллы кәзә башын күреү менән, бүренең дә ҡото оса, тиҙ генә ой ишеген яба ла урманға ҡарап һыҙа. Ҡуян уның артынан китә. Ҡуяндың урманға барып инеүе була, бының ҡаршыһына лап-лоп баҫып килә, ти, бер айыу. Айыуҙы күреүгә, ҡуян тағы ҡысҡырып илап ебәрә:

– Ҡотҡарығыҙ, харап булдым, өйөмә ҡурҡыныс бер нәмә ингән, – ти.

Айыу бик батырланып:

– Юҡҡа-барға илап күҙ йәшеңде әрәм итмә, беҙ уны хәҙер ҡыуып сығарабыҙ, – ти икән.

Айыу, ҡуяндың өйөнә барып, кәзәнең оҙон һаҡалын күреп ҡасҡан. Ҡуян уның артынан йүгергән.

Әтәсте күреү менән, ҡуян тағы ла ҡысҡырып илап ебәрә, ти.

– Ниңә илайһың, ҡуянҡай? – ти әтәс.

– Минең өйөмә бер ҡурҡыныс нәмә килеп ултырҙы, уны үҙем дә, бүре менән айыу ҙа ҡыуып сығара алманы, – ти ҡуян.

– Юҡҡа илама, ҡуянҡай, әйҙә, киттек, мин һиңә ярҙам итермен, – ти әтәс.

Киттәләр. Ҡуяндың өйөнә барып етеүгә, әтәс ҡуянға әйтә:

– Миңә өй ишеген асыу ғына ҡыйын булыр, һин ишекте асып, шуны индереп ебәрерһең, ҡалғанын үҙем белермен, – ти.

Өй эргәһенә барып еткәс, ҡуян ишекте асып ебәреүе була, этәс өй эсенә инеп, кәзә мөгөҙҙәре араһына барып ҡуна. Кәзә башына ҡуна ла был, кәзәнең күҙҙәрен соҡой башлай.

Кәзә бер ни ҙә эшләй алмай, сығып ҡаса ҡуяндың өйөнән. Этәс уны бик алысҡа тиклем ҡыуып бара.

Шулай итеп, батыр этәс ҡуянды алдаҡсы кәзәнән ҡотҡарған, ти.

## 93. Был йортта кем йәшәй?

Көндәрҙән бер көндө һайыҫҡан шундай хәбәр тарата: урман артындағы тау башында бер йорт бар. Ул көндән-көн йәмләнә. Тирәяғында хуш еҫле сәскәләр, йәм-йәшел япраҡлы ағастар үҫә, ти.

Бөтә урман гәжәпкә ҡала, ниндәй йорт икән тип. Был турала Төлкөбикә менән Бүребай ишетеп ҡалалар. Улар ҡырҙан ғына йортто күҙәтә башлайҙар. Һайыҫҡан һөйләгән йорт, ысынлап та, әллә ҡайҙан балҡып тора икән. Төлкөбикә менән Бүребайҙың был өйҙә йәшәгеләре килә башлай. Улар нисек тә булһа йорт хужаһын ҡыуып сығарырға булалар. Шул саҡ Бүребай:

– Әйҙә, барайыҡ та уларҙы ҡыуайыҡ, – тигән була, ә эстән генә «Нисек был Төлкөбикәнән ҡотолорға?» тип уйлай.

– Әйе шул, ҡыуып сығарайыҡ әле шуларҙы, – тип Төлкөбикә лә эйәрә, үҙе «Бүребайҙан алда өйгә инермен дә, ишеген бикләрмен», тип, хәйлә ҡора.

Былар тау башына менә башлай. Бер-береһенә ярҙамлашыу түгел, юрый аяҡ салып, этешеп, төртөшөп баралар, ти. Шул ваҡыт Бүребай Төлкөбикәне ҡыуып төшөрә, тик Төлкөбикә кире менеп, Бүребайҙы ҡыуып етеп, уға һуғып ебәрә. Бүребай ҙа яуапһыҙ ҡалмай. Улар шулайтып һуғышып китәләр.

Ахыры Төлкөбикә бер эш тә сығара алмаҫын һиҙеп:

– Йорт менән ҡуша сәсрәп кит! – тип ҡысҡыра.

– Ҡарғышың ҡара башыңа! – ти Бүребай. Төлкө тауҙан аҫҡа ҡарай йүгереп төшөп китә.

Бүребай тауға бер үҙе үрмәләй.

Тора-бара уйға ҡала: «Туҡта, йорт хужалары күмәкләшеп, мине имгәтеп ташламаҫмы икән?»

Ул шулайтып уйланып тора ла ҡурҡып, йортҡа ҡул һелтәп, кире ҡайтып китә.

## 94. Төлкө менән бүҙәнә

Өлгөргән арыш араһында, арлы-бирле пырылдап, бер бүҙәнә осоп йөрөй ине, ти. Шунда, яҡында ғына, күләгәлә әлһерәп бөткән бер ас төлкө ята ине, ти. Бүҙәнә килде лә шул төлкөнөң ҡо-

лағы осона ҡунды, ти. Төлкө, башын һелкеп, бүҙәнәне ҡолағынан төшөрҙө лә:

– Бер ҡабымға етмәҫ башың менән бимазалап йөрөгән булаһың! – тип асыуланды, ти.

– Хикмәт ҙурлыҡтамы ни ул? Бына мин бәләкәй генәмен, ә шулай ҙа һине туйғансы ашата алам. Эште хәйлә менән эшләй белеүҙә ул! – тип әйтте, ти, бүҙәнә.

– Кит бынан, күҙ көйөгө! Ни эшләп инде бүҙәнә төлкө саҡлы төлкөнө ашата алһын? – тип көлдө, ти, төлкө.

– Ышанмаһаң, бына күр, хәҙер мин һине туйҙырам, – ти бүҙәнә. – Хәҙер мин юл өҫтөнә сығам, һин юл ситендә, арыш араһында ҡасып ҡына ят та минән күҙҙәреңде алмай күҙәтеп тор. Мин пырылдап осоп киткәндә генә һин, юлдағы аҙыҡты алып, бына шул урынға килерһең дә тәмләп тороп ашарһың, – тип әйтте, ти.

Төлкө юл ситенә йәшеренеп ятты, бүҙәнә арлы-бирле сәбәләнеп йөрөй башланы, ти. Шул ваҡыт иңбаштарына ураҡ һалған бер ир менән бер ҡатын килә ята икән. Ҡатыны ҡулына бер төйөнсөк тә тотоп алған. Ҡатын юлда йөрөп ятҡан бүҙәнәне күреп ҡала ла:

– Эй, атаһы, ҡара әле бынау бүҙәнәне: шундай һимеҙ, хатта оса ла алмай! Тотоп алайыҡсы үҙен, бешереп ашарбыҙ. Бүҙәнә ите бик тәмле була, тиҙәр, – тип ҡысҡыра, ти.

Шунан былар икәүләп бүҙәнәне тотмаҡ булалар. Ҡатын төйөнсөгөн юл ситенә ҡуя ла бүҙәнәне баҫтыра башлай. Бүҙәнә осмай ҙа, ҡасмай ҙа, тоттормай ҙа. Шулай ҡыуып йөрөй торғас, инде тотайым тигәндә генә, бүҙәнә пырылдап осоп китә. Ир менән ҡатын ауыҙҙарын асып тороп ҡалалар. Төлкө лә, бүҙәнәнең осҡанын күреп, юл ситендәге төйөнсөктө ауыҙына ҡабып ала ла баяғы урынға китә. Төйөнсөктө асып ҡараһа, эсендә тауыҡ ите икән. Төлкө рәхәтләнеп ашай. Бүҙәнә ҡарап тора. Ә теге ирле-ҡатынлы ураҡсылар буш ҡул менән үҙ эштәренә китәләр.

Төлкө ашап туйғас:

– Хикмәт, ысынлап та, ҙурлыҡта түгел икән шул, һинең кеүек хәйләкәр булыуҙа икән, – ти. Шунан ул: – Ярар, бүҙәнә дуҫ, һин минең тамаҡты туйҙырҙың, быныһы өсөн рәхмәт. Хәҙер һин мине бер рәхәтләндереп көлдөр ҙә инде, – тигән.

Бүҙәнә быны тыңлап:

– Һине көлдөрөп ултырырға хәҙер минең ваҡытым юҡ шул. Кис менән көлдөрөрмөн, хәҙергә һин ошонда ятып йоҡла. Кискә табан мин һинең янына килермен, – тип, үҙ эше менән китте, ти.

Кискә табан төлкө уяныуға бүҙәнә килде лә:

– Әйҙә, төлкө дуҫ, ауыҙың ҡолағыңа тиклем йырылғансы рәхәтләндереп көлдөрөп алып ҡайтайым үҙеңде, әйәр минең арттан! – тигән.

Бүҙәнә аулаҡ ерҙән генә үтеп, әкрен генә осоп барҙы, төлкө ҡасып-боҫоп ҡына атлап, уның артынан эйәрҙе, ти. Бына улар ырҙын артынан ғына үтеп, бер ауылға, баяғы ураҡсыларҙың йортона

килеп инделәр, ти. Йорт хужаһы ҡаҙыҡ ослай, бисәһе һыйыр һауа ине, ти. Төлкө ҡасып ҡына күҙәтә башланы, бүҙәнә ҡатындың һыйыр һауған ерендә аяҡ аҫтында ураланып йөрөнө, ти. Ҡатын бүҙәнәне танып ҡалып:

– Эй, атаһы, ҡара әле, беҙҙе ашамлыҡһыҙ ҡалдырған баяғы бүҙәнә йортобоҙға килгән, һуғып үлтерәйек үҙен! – тип ҡысҡырҙы, ти.

Ире ҡаҙығы менән киҙәнгәйне, бүҙәнә һыйыр мөгөҙөнә килеп ҡунды, ти; яңынан киҙәнеп, һыйырҙың мөгөҙөн саҡ ҡына һындырмай ҡалды, ти. Һыйыр ҡурҡып, һөтлө күнәкте тибеп ауҙарҙы, ҡатын һөт түгелгән ергә тайып йығылды, ти. Бүҙәнәне тота алмағас, теге ир асыуланып ҡатынын туҡмап ташланы, ти.

Төлкө ауыҙы ҡолағына тиклем йырылғансы, быуыны ҡатып көлдө, ти. Үҙе көлдө, үҙе бүҙәнәнең хәйләһен отоп ултырҙы, ти.

Бына шунан һуң, бүҙәнәнән өйрәнеп, төлкө хәйләкәр йәнлек булып киткән дә инде, тиҙәр.

## 95. Ҡуян менән терпе

Бер заман бер терпе, өйөнән сығып, көндөң матурлығына хайран ҡалып тора ине, ти. Терпе үҙ алдына үҙе: «Бөгөн көн бик матур икән, баҫыуға барып, ашарға бер аҙ тамыр-томор йыйып килтерәйем әле», – тип, баҫыуға сығып китте, ти. Бер аҙ ер киткәйне, бер ҡуянға барып осраны, ти. Ҡуян һикерә-һикерә кәбеҫтә баҫыуын ҡарарға китеп бара икән.

– Һаумы, ҡуян тиңдәш? – тип иҫәнлек-һаулыҡ һораша терпе. Тик ҡуян бер ниндәй ҙә яуап бирмәне, ти, терпенең сәләменә. Бер аҙ торғас, бик эреләнеп кенә, терпенән:

– Ни эшләп һин былай иртүк бында йөрөйһөң? – тип һораны.

– Саф һауа һуларға сыҡтым, - ти терпе.

Ҡуян, көлөп:

– Һин ул кәкре аяҡтарың менән арҡыс-торҡос баҫып, тиктәҫкә генә йөрөмәйһеңдер әле, берәй эш ҡуптарырға йөрөйһөңдөр, моғайын! – ти.

Терпегә ҡуяндың был һүҙе бер ҙә оҡшамаған. Ул бик ғәрләнгән, ти, быға. Ни өсөн тиһәң, терпенең аяҡтары тыумыштан кәкре.

– Һин шулай тиһең инде, ярар, – ти терпе. – Һинең аяҡтарың оҙон булһа ла, минән артыҡ әллә ни ҡыйрата алмаҫһың!

Ҡуян, көлөп, терпегә:

– Һәр хәлдә, минең аяҡтар, һинеке шикелле, кәкре түгел инде! – ти.

– Ҡарап ҡарайыҡ, улай булғас, – ти терпе. – Йүгерешеп ҡарайыҡ, кем уҙыр. Мин, моғайын, уҙырмын һине.

Ҡуян һыны ҡатып көлөргә тотондо, ти.

– Ҡолаҡҡа ятмаған хәбәрҙе һөйләйһең, терпе ҡустым. Һинме һуң инде мине уҙыр йән эйәһе? Һин тигәнсә булһын, йүгерешеп ҡарайыҡ. Нимәнән? – ти ҡуян.

– Бер талир тәңкә лә бер шешә һөт.

– Яҡшы. Әйҙә, хәҙер үк йүгерешәбеҙ. – Терпе әҙерәк уйлап торҙо ла, ҡуянға:

– Ул тиклем ҡабаланырға ярамай. Мин әле тамаҡҡа ла ашамағанмын. Мин тәүҙә өйгә ҡайтып, ашап киләйем. Бер сәғәттән һуң ошо урында осрашырбыҙ, – ти ҙә йәһәт кенә өйөнә ҡайтып китә.

Өйөнә ҡайтып ингәс, уйлай, ти, теге терпе: «Ҡуян үҙенең оҙон боттарына ышана, ярай. Бына мин күрһәтәйем, әле уға. Һармаҡ та инде был ҡуян тигәнең! Талир тәңкә менән бер шешә һөтөн бик һәйбәтләп кенә түләһен әле ул терпе ағаһына!»

Терпе инә терпене саҡырып ала ла:

– Һин минең менән баҫыуға бараһың, – ти.

– Ни булды һиңә, атаһы?

– Беҙ ҡуян менән кем уҙарҙан йүгерешергә булдыҡ. Һин шаһит булырһың.

– Атаҡ-атаҡ, өнөммө, төшөммө был, атаһы? Ҡуянды нисек йүгерешеп уҙмаҡ кәрәк? – тип аптырап ҡала инә терпе.

– Уныһы минең эш. Әйҙә, тиҙ бул, күп һөйләнеп торма!

Былар икәүләп ҡуян янына китәләр. Юлда барғанда ата терпе инә терпегә:

– Тыңла, мин нимә әйтһәм, һин шуны эшләрһең. Ана, ике оҙон бураҙнаны күрәһеңме? Бына беҙ шул ике бураҙна араһында йүгерешербеҙ. Беҙ арғы бураҙнанан йүгерешә башлайбыҙ. Ә һин ошонда, бирге бураҙнала ултырып ҡал. Ҡуян һин ултырған бураҙнаға йүгереп килеп етеү менән үк, һин уға: «Мин әллә ҡасан бында инде!» – тип ҡысҡырырһың, ти.

Баҫыуға килеп еттеләр, ти, былар икәүләп. Инә терпе, һөйләшеү буйынса, үҙ урынында ҡала, ата терпе үҙе арғы бураҙнаға китә. Килһә, ҡуян быны көтөп ултыра икән.

– Башларға ярай хәҙер, – ти терпе.

Былар икеһе лә бураҙна буйына барып, тиңләшергә торҙолар, ти. «Бер, ике, өс!» – Ҡуян сабып сығып китте, ти, мин һиңә әйтәйем, бер ваҡыт, ә терпе ҡуяндың ҡойроғон ғына күреп ҡалды, ти. Терпе үҙе бер-ике генә һикерҙе лә бураҙнала ятты ла ҡалды, ти.

Ҡуян бирге бураҙнаға килеп кенә еткәйне, инә терпе:

– Мин әллә ҡасан бында инде! – тип ҡысҡырып та ебәрҙе, ти.

Ҡуян был хәлде күреп, бик аптырап ҡала.

– Әйҙә, тағы бер тапҡыр кире йүгерешәбеҙ! – ти ҙә, ҡолағын һыртына һалып, кире сабып китә ҡуян. Артынан саңдар туҙып ҡына ҡала. Ҡуян арғы бураҙнаға барып ҡына еткәйне, ата терпе:

– Мин бында инде, мин бында! – тип ҡысҡырып ебәрҙе, ти.

Ҡуяндың бик асыуы килә быға.

– Эйҙә, ҡабатлап йүгерешәбеҙ! – ти ул.

– Ҡаршылыҡ юҡ, – ти терпе.

Ҡуян сабып китә. Терпе тағы бураҙна эсендә ятып ҡала. Шулай итеп, ике бураҙна араһында етмеш ете тапҡыр йүгерҙе, ти, был ҡуян. Ҡайһы ғына бураҙнаға килһә лә: «Мин әллә ҡасан бында инде!» – тигән һүҙҙе ишетә икән ҡуян. Етмеш һигеҙенсе тапҡыр йүгергәндә, хәле бөтөп тәгәрәне, ти, ҡуян.

Терпе талир тәңкә менән бер шешә һөттө алды ла, бик күңелле булып, инә терпе менән өйөнә ҡайтып китте, ти.

## 96. Шишмә

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай. Уларҙың Айһылыу исемле бик матур ҡыҙҙары булған. Айһылыу тау битенән ағып сыҡҡан шишмәгә көн һайын һыу алырға килгән.

Шулай көндәр үтә торған. Бер көндө Айһылыу килһә, шишмә урынында юҡ, ти. Баш осонда үҫеп ултырған пар ҡайынды ла кемдер киҫеп алып киткән. Айһылыу бер аҙ аптырап баҫып торған да шишмә сыҡҡан урынды таяҡ менән соҡой башлаған, ти. Көнө буйы ҡаҙған ул урынды. Өйгә һыуһыҙ ҡайтырға ярамай бит инде.

Кискә тиклем эшләгәс, Айһылыу ял итергә ултыра һәм, үҙе лә һиҙмәҫтән, йоҡлап китә. Төшөндә ул шишмәне күрә. «Минең яҡын дуҫтарымды, ике ҡайынды, юлаусылар миндеккә киҫеп алып киттеләр, – ти ул. – Улар юғалгас, ҡоштар ҙа килмәй башланы. Яңғыҙыма бик ауыр булды, һәм мин уларҙы эҙләп киттем. Тик береһен дә таба алманым, ҡайта торған юлымды ла оноттом. Һиңә рәхмәт инде: мине табып, яҡты донъяға сығарҙың».

Шишмә тауышына Айһылыу тертләп уянып китә. Ҡараһа, ысынлап та, шишмә яңынан сылтырап ағып ята. Айһылыу күнәктәренә тултырып һыу ала ла ҡайтырға сыға. «Ҡара әле, шишмәләр ҙә кешеләр кеүек икән, – тип уйлай ул. – Дуҫһыҙ йәшәй алмайҙар».

Ошо көндән һуң Айһылыу, атаһы менән килеп, шишмә буйына ағастар ултыртҡан, ти. Шишмә әле булһа, Айһылыуға рәхмәт әйтеп, ағып ята икән. Ә тирә-яғындағы ағастар, үҫеп, ҡарурманға әйләнгән.

## 97. Һыуыҡ менән Һалҡын

Киң яланда ағалы-энеле Һыуыҡ менән Һалҡын йөрөйҙәр, ти. Уларға былай икәүҙән-икәү, эшһеҙ йөрөү күңелһеҙ булып киткән, ти.

– Һыуыҡ ағай, былай юҡты бушҡа ауҙарып йөрөгәнсе, кешеләрҙе өшөтөп алыу яғын ҡарарға кәрәк ине, – ти Һалҡын. Һыуыҡ быға риза булды, ти.

Бөтә яланды ҡар баҫҡан, – тигән ул. – Бында кеше-фәлән килеп сығыр, тип уйларға ла ярамай. Яланда бейеп йөрөгәнсе, киттек урманға, унда ҡыҫыҡ булһа ла, күңеллерәк.

Һалҡын менән Һыуыҡ йүгерә-атлай урманға табан киттеләр, ти. Урманда улар оҙаҡ ҡына шаярып йөрөнөләр, ти. Ҡарт ҡарағайҙарҙы килеп һәрмәп ҡаранылар, йәш уҫаҡтарҙы ыңғыраштырҙылар, йүкәләрҙе ҡыҫҡылап-ҡыҫҡылап алдылар, ағас төптәрендәге йомшаҡ ҡарҙы ҡатырып үттеләр, ти.

Бына яҡында ғына ҡыңғырау тауышы ишетелде, ти, бер бай ҡаланан ҡайтып килә икән. Шунда уҡ тиргәнгән тауыш та ишетелде. Быныһы урманға утынға килеүсе ярлы ғына бер кеше булып сыҡты. Уны йүгерек аттар еккән бай санаһы-ние менән ҡолатҡан. Теге кеше шуға тиргәнеп ҡалган.

Шул ерҙә Һыуыҡ менән Һалҡын эште бүлешә башланылар, ти: кемде кем өшөтөргә тейеш? Кемгә бай ҙа, кемгә – ярлы?

– Мин ярлы кеше менән эш итермен инде, – тине, ти, Һалҡын. – Ни өсөн тиһәң, уның тун тигән нәмәһе иҫке, өҫтәүенә, ямалып бөткән, бүрке лә бик иҫкергән, аяғында ла сабата ғына. Ә һин инде, ағай, минән көслөрәк, бай артынан йүгер.

– Һин йәшерәк шул әле, – тине, ти, Һыуыҡ, – белмәйһең. Ярай, һиненсә булһын: кит әйҙә ярлы янына. Ә мин байҙы өшөтөп ҡарайым. Кис менән яланда осрашырбыҙ.

Һыҙғырышып иҫәнләштеләр ҙә киттеләр, ти, былар.

Ҡояш байыу менән улар яланда осраштылар, ти. Эшләгән эштәре тураһында һөйләшә башланылар, ти.

– Мин байҙың үҙәгенә үттем, тешен тешкә тейҙерҙем, ҡалтыраттым, – тине Һыуыҡ.

– Бер ҙә ышанғым килмәй әле, – тип әйтте, ти, Һалҡын. – Ул бит йылы тун эсендә, ә бүрке, быймаһы ниндәй бит уның!

Һыуыҡ үҙенең эше уңышлы сығыуы тураһында маҡтанырға тотондо, ти.

– Бер ни ҙә түгел ул миңә, – тип әйтте, ти, ул. – Байҙың туны эсенә инеп алдым да, быймаһына тулдым да һелкетә башланым бер заман. Сыҙап ҡына тор! Тынын ҡурып барам тегенең. Танауын семтейем, битен тешләйем. Үрһәләнде байым. Ҡайҙа керер урын тапмай. Ә һин теге ярлы кешене бейеттеңме һуң?

– Юҡ, үҙемә бейергә тура килде. Бейетте тиһең әле, туҡмап мәсхәрә итте үҙемде, – тине, ти, Һалҡын, көрһөнөп.

– Нисек улай?

– Шулай инде. Ул урманга утын ҡырҡырға килә ине. Юлда уны семтей башланым. Иҫе лә китмәй, исмаһам. Етмәһә, тиргәнә бит әле. Ишетмәгән һүҙҙе ҡалдырманы. Ғәрләнерһеңме, юҡмы? Асыуым килде лә тегене нығыраҡ ҡура башланым. Ләкин был рәхәтлек оҙаҡҡа барманы шул: урманға ингәс, бер урынға туҡтаны ла, санаһынан төшөп, балтаһын алды. Бына, мин әйтәм, хәҙер танытайым әле үҙемде. Туҙып бөткән тун эсенә индем дә тегене

өшөтә башланым. Ә ул балтаһы менән киҙәнеп ағасҡа саба башланы. Күтәрелеп тә ҡарамай, тапсыҡтары ғына сырылдап ҡа. Утынсының өҫтөнән йылы быу ҙа күтәрелә башланы. Тун эсенд миңә көн бөттө. Аптырағас тышҡа сыҡтым. «Ни эшләргә инде?» тип уйлап торам. Ә утынсы балтаһы менән саба ла саба ағасҡа. Бар тип тә белмәй. Ҡарап торһам, теге тун тигән нәмәһен бөтөн ләй уҡ һалып ташланы. Шатланып киттем. Күрһәтәйем әле мин һиңә күрмәгәнеңде, тием мин эстән генә. Уның туны тир менән еүешләнеп бөткәйне. Мин шул ҡыптыр тун эсенә инеп алдым да ҡабыҡ кеүек итеп ҡатырҙым үҙен. Бына, мин әйтәм, кейеп ҡара инде хәҙер туныңды.

Утынсы эшен бөтөргәс, туны эргәһенә килде. Тунының шы ҡырлап туңғанын ғына һиҙеп ҡалды ла таяҡ менән туҡмарға то тондо, ағай, бер заман. Таяғы гел миңә төшә. Түҙер хәл ҡалманы. Тун эсенән сығып ҡасырға итәм, булдырып булмай: туҡмала торғас, йөнгә уралып бөткәнмен. Һис сығыр хәл юҡ. Ә утынсы тиргәнә-тиргәнә туҡмай ҙа туҡмай мине. Көскә сығып ҡастым тун эсенән. Әле лә бына бөтә тәнем һыҙлай, – тип зарланды, ти, Һалҡын.

## 98. Ҡуян ҡунаҡта

Борон-борон заманда бер ҡара айыу булған, ти. Берҙән-бер көндө ул үҙенең тыуған көнөн үткәрергә булған. Урмандағы бөтө йәнлектәрҙе ҡунаҡҡа саҡырған, ти. Ҡуян иң алдан сыҡҡан юлға. Үҙенсә айыу эргәһенән урын алырға уйлаған. Бына ул беренсе килеп, айыу янына ултырған. Күп тә үтмәй төлкө килеп ингән дә, ҡуянға күсеп ултырырға ҡушҡан, үҙе айыу янына ултырған. Ҡуян эсенән генә, икенсе булып ултырыу ҙа яҡшы, тип уйлаған.

Бер ваҡыт хыр-хыр хырылдап бүре килеп ингән. Бүре төлкөгә күсеп ултырырға ҡушҡан, ә үҙе айыу янынан урын алған. Ҡуян, өсөнсө булып ултырыу ҙа насар булмаҫ, тип уйлаған. Шулай итеп, кейектәр килә торған, үҙенә оҡшаған урынға ултыра торған, ә ҡуян тора-бара иң ситтә тороп ҡалған, ти. Табындан бер нәмә лә алып ашай алмаған, буйы ла етмәгән, ти.

Шулай итеп, ҡуян ҡунаҡтан ас ҡайтып киткән, ти.

## 99. Сысҡан менән уның балаһы

Бер сысҡан балаһы урамда уйнап ҡайтҡан да әсәһенә өндәшкән:

– Әсәй, ҡоймаҡ ашағым килә.

– Ҡоймаҡ ашағың килһә, таплыҡҡа барып, тап сүплә, – тигән әсәһе.

Әсәһен тыңлап, сыҫкан балаһы тап сүпләргә киткән. Таплыҡта тап сүпләп йөрөһә, ҡайҙандыр бер бесәй килеп сыҡҡан да сыҫкан балаһына:

– Хәҙер мин һине ашайым, – ти, имеш. Сыҫкан балаһы:

– Бер юлға ашамай тор. Өйҙә әсәйем ҡоймаҡ бешерә. Беҙгә килеп ҡоймаҡ ашарһың, – тигән. Бесәй:

– Ярай улай булғас, – тип, үҙ юлына боролған, ти.

Ҡайтҡас, сыҫкан балаһы нимә булғанын әсәһенә һөйләп биргән. Сыҫкан менән балаһы тиҙ генә ҡоймаҡты ашағандар ҙа йәшенергә урын эҙләй башлағандар. Иҙән аҫтына төшөп тә, яҫтыҡ аҫтына инеп тә йәшенеп ҡарағандар, ти, бесәй табыр кеүек булған да торған. Улар йәшеренер урын эҙләп кәртәгә сыҡҡандар. Кәртәләрендә урын тапмағас, ҡыйыҡ башына менгәндәр.

Ҡыйыҡ башында уртаға сатнаған бер көршәк ултырған. Улар тиҙ генә шул көршәктең эсенә инеп ултырғандар. Бер аҙ ултырғас, сыҫкан балаһы әсәһенә:

– Сөскөргөм килә, – тигән, тик әсәһе һәләк булыуҙан ҡурҡып:

– Сөскөрөргә ярамай, – тип, рөхсәт итмәгән. Әҙерәк торғас, сыҫкан балаһы тағы:

– Сөскөргөм килә, – тигән.

– Юҡ, сөскөрөргә ярамай, – тип, әсәһе тағы сөскөрөргә ҡушмаған.

Өсөнсө тапҡырына сыҫкан балаһы һорап өлгөрмәгән, сөскөрөп ебәргән. Сөскөрөүе булған – көршәк уртаға ярылып та киткән. Көршәк ярылған тауыштан сыҫкандарҙы көтөп ятҡан бесәй йоҡоһонан ҡурҡып уянып сығып ҡасҡан.

## 100. Алдаҡсы себеш

Борон-борон заманда бер тауыҡ менән бер себеш йәшәгән, ти. Тауыҡ себешенә:

– Бар һин тапсыҡ алып ин, ә мин бутҡа бешерәйем, – тигән. Себеш тапсыҡ сүпләп йөрөгәндә, уға бер бесәй балаһы осраған.

– Хәҙер мин һине ашайым бит, – тигән бесәй балаһы. Себеш уға:

– Бесәй ағай, һин мине ашама, хәҙер әсәйем бутҡа бешерә. Һин дә килерһең бутҡа ашарға, – тигән. Бесәй балаһы риза булып ҡайтып киткән. Себеш ҡайтҡан да әсәһенә:

– Миңә бер бесәй балаһы осраны, мин уны бутҡа ашарға саҡырҙым, – тигән. Әсәһе ризалашҡан. Тауыҡ менән себеш бутҡаны ашап ҡына бөтөүгә, бесәйҙең килгәнен күреп ҡалалар. Улар икәүләшеп көршәк эсенә йәшеренәләр. Шул ваҡыт себеш әсәһенән:

– Минең сөскөргөм килә, сөскөрәйемме? – тип һорай.

Әсәһе, ярамай, ти. Шулай ҙа себеш түҙеп тора алмай, сөскөрөп ебәрә. Был ваҡытта бесәй балаһы көршәк янында булған була.

Себештең сөскөрөүенә көршәк ватылып китә. Бесәй ҡурҡыуынан, артына ла ҡарамай ҡаса.

## 101. Әтәс менән Һан ағай

Борон заманда, һайыҫҡан команда, ҡарға король, әҙәм аҫҡа булғанда, бер әбейҙең ишек алдын һеперен йөрөгәндә, бер кеше алтын тәңкә табып алды, ти.

Бәй, шул арала быны әтәс күреп ҡалды ла тәңкәне һорай башланы, ти. Аҡса тапҡан кешенең исеме Һан икән. Әтәс:

Һан ағай, Һан ағай,
Алтын тәңкәм бир, ағай,
Бир, ағай, бир, ағай, –

ти икән. Һандың алтын тәңкәне биргеһе килмәй. Әтәс бик теңкәгә тейгәс, Һан уны тотоп алды ла күлгә алып барып бырағтырҙы, ти. Бырағтырғайны, әтәс:

Ауыҙым, эс, артым, эс,
Ауыҙым, эс, артым, эс, –

тип, күлдең һыуын эсте лә бөттө, ти. Үҙе тау шикелле булып ҡабарып ҡайтып китте, ти. Ҡайтты ла тағы һамаҡларға тотондо, ти:

Һан ағай, Һан ағай,
Алтын тәңкәм бир, ағай,
Бир, ағай, бир, ағай!

Һан аптырап ҡалды, әммә тәңкәне һис биргеһе килмәй, ти. Ахырҙа: «Юҡ, быны мейескә ташларға кәрәк», – тип әтәсте тотоп алды ла янған мейескә олаҡтырҙы, ти. Мейескә ташлағайны, әтәс:

Ауыҙым, бөрк, артым, бөрк,
Ауыҙым, бөрк, артым, бөрк, –

тип, утты һүндерҙе лә ҡуйҙы, ти. Утты һүндерҙе лә, Һандың эргәһенә барып, тағы ла һамаҡлап, Һандың теңкәһенә тейә башланы, ти.

Һан ағай, Һан ағай,
Алтын тәңкәм бир, ағай,
Минең тәңкәм бир, ағай!

«Был әтәстең башын өҙә сабып, ҡаҙанға һалып бешереп ашайым, шунһыҙ ҡотолоп булмаҫ» тип, Һан, әтәстең башын өҙә са-

...ып, ҡаҙанга һалды, ти. Әлеге баш ҡаҙан эсенән һаман һамаҡ-...й, ти:

Һан агай, Һан агай,
Алтын тәңкәм бир, агай,
Минең тәңкәм бир, агай!

«Теңкәне ҡоротто ла был, башын ашап ҡына ҡуяйым» тип, Һ... әтәстең башын ашаны, ти. Әтәс башы Һандың эсенән һамаҡ-...рга тотондо, ти:

Һан агай, Һан агай,
Алтын тәңкәм бир, агай,
Минең тәңкәм бир, агай!

Һан агайҙың бөтә ғүмере буйына уның эсендәге әтәс башы ана шулай, «алтын тәңкәм бир, агай», тип һамаҡлаган да һамаҡ-...ган, ти.

## 102. Әтәс менән Ғәлләметдин

Борон-борон заманда бер оло әтәс булган. Сүплектә йөрөй-йөрөй, ти, был, тибенеп йөрөй торгас бер мату-у-ур ҡашмау табып ...ган. Ялтырап тора, ти инде. Сылтыратып тора икән ҡашмауын, юл буйынан ат менгән бер агай килә, ти. Ғәлләметдин исемле агай ...ла был. Эй күҙе ҡыҙа бынын ҡашмауына:

– Әтәс туган, бер аҙнаға ғына миңә биреп тор әле ҡашма-...ыңды. Ҡунаҡҡа барабыҙ. Кәләшемдең ҡашмауы юҡ, – ти. Әтәс:

– Алып тор, тик килтер. Алып килмәһәң, мин һине барыбер ...бам, – ти.

Рәхмәт әйтеп, Ғәлләметдин ҡашмауҙы алып киткән. Бер ай ...ткән, был ҡашмауҙы алып килмәй икән. Хәҙер әтәс юллап кит-...ән ҡашмауҙы. Эҙенән еҫкәп бара икән. Бара, ти, бара, ти. Ҙур-...ур күл аша сыҡҡан, ти, Ғәлләметдин, әтәс сыға алмаҫ, тип ...йлап. Әтәс йөрөгән-йөрөгән дә, күлдең уртаһына ултырып, эскән ...ә бөткән һыуҙы. Шунан ары киткән. Бара, ти, бара, ти, был. Ҡараһа, бер ат еккән әҙәм килә, ти, ҡаршыһына. Арбаһында буш ҡапсыҡтары бар, ти, бынын. Аттағы әҙәм: «Их, бер әтәс килә. Тотоп алып ҡайтып, һуйып ашарга кәрәк быны», – тип уйлап, һөйөнөп килә, ти.

Килеп еткән был әҙәм, туҡтаган әтәс янына. Әтәс яйлап ҡына бынын янына килеп ултырган да: «Ки-ки-ри-ку-үк!» – тип ҡыс-ҡырган да аты-маҙары менән йотҡан да ҡуйган был әҙәмде. Тагы китеп бара был әтәс. Китеп бара, китеп бара, ти. Бер оло бүре килә, ти, ҡаршыһына. Бүре лә һөйөнгән инде: «Тамаҡ туя хәҙер. Миңә ризыҡ килә», – тип көтөп ултыра, ти. Бүре лә туҡтаган,

этәс тә туҡтаған. Этәс тағы: «Ки-ки-ри-ку-үк!» – тип ҡысҡырған да бүрене йотҡан да ебәргән. Ары киткән. Бара-бара Ғәлләметдин ауылына барып етте, өйҙәрен тапты ла ҡапҡа баштарына ҡунып: «Ки-ки-ри-ку-үк! Ғәлләметдин, ҡашмауҙы алырға килдем би-и-ит!» тип ҡысҡырҙы, ти. Бөтә ауылға ишетелгән этәстең тауышы, кешеләр аптырай, ти инде. Ғәлләметдин: «Баҙарҙан алып ҡайттым ҡашмауҙы», – тигән булған.

Улар ҡашмауҙы һандыҡҡа һалып, йоҙаҡлап, йәшереп ҡуйған булғандар.

Былар хәҙер этәсте үлтерергә хәйлә ҡоралар инде.

Таш менән бәргеләп ҡарайҙар – этәс үлмәй. Ҡыҙы-ыу итеп мунса яғалар хәҙер былар, мунсала томалап үлтерәйек, тип. Этәсте мунсаға ябалар ҙа үҙҙәре ятып йоҡлайҙар. Иртә менән торһалар, мунсаларының эҙе-юлы юҡ, ти. Теге этәс ауыҙына юлда эскән һыуын ағыҙған да, мунсалары сығып киткән. Этәс кенә баҫып тора икән. Аптырайҙар былар: «Нимә эшләргә тағы?» Быларҙың һыйыр торған уҫал үгеҙҙәре булған. Шуның янына бикләгәндәр этәсте. Иртә менән тороп, аҙбарҙың ишеген асһалар, этәс тора, ти. Этәс ауыҙынан йотҡан бүрене сығарған да, шул бүре үгеҙҙе ашап, тиҙерәне ватып, сығып ҡасҡан, ти.

Өсөнсө көндө бойҙай келәтенә япҡандар быны. Бер келәтте бойҙайҙары булған. Бойҙай ашап күбенеп үлһен, тигәндәр инде. Келәткә ингәс, этәс ауыҙынан юлда йотҡан арбалы әҙәмде сығара. Был әҙәм ҡапсыҡтарына булған бойҙайҙы тейәй-тейәй ҙә, ҡайтып китә. Иртә менән хужалар келәтте асып ҡараһалар, бойҙай ҙа юҡ, этәс тә үлмәгән, ти. Ахыр сиктә, этәсте һуйып ашарға булғандар. Һуйғандар, таҙартып ҡаҙанға бешерергә һалғандар. Көскә ҡотолдоҡ бит, тип шатланышалар икән үҙҙәре. Шул ваҡыт, ҡаҙанда ҡайнап ятҡан этәс һикереп сығып ҡаҙандың ситенә баҫа ла: «Ки-ки-ри-күк! Ғәлләметдиндең ҡаҙанында ҡайнайым бит», – тип, кире ҡаҙанға сума. Аптырайҙар, ти, былар. «Ну, башын үҙем ашайым», – тип, план ҡора, ти, Ғәлләметдин. Этәс бешкән, ултырып ашағандар былар. Ғәлләметдин этәстең башын ашаған. «Тәки ҡотолдоҡ бит был этәстән», – тип, маҡтанышып, көлөшөп, тынысланып ултыралар икән былар. Бер ваҡыт Ғәлләметдин этәс булып ҡысҡыра башлаған, һис туҡтай алмай, ти. «Кикирикүк! Кикирикүк!» – тип ҡысҡыра ла ҡысҡыра, ти. Ғәлләметдин этәстең башын ашағайны бит инде. Этәс моронон Ғәлләметдиндең тамаҡ төбөнән генә сығара ла, ҡысҡыра ла, ҡысҡыра икән. Бирерәк сығармай, ти. Ғәлләметдин этәстең морононан тотоп тартып сығарыр ине. Аптырағас, Ғәлләметдин бисәһенә бысаҡ тотторған да: «Этәс моронон сығарыу менән, бысаҡ менән төрт», – тигән, үҙе ауыҙын асып тора икән. Этәс ҡысҡырған ыңғайы бисәһе бысаҡ менән Ғәлләметдиндең тамағына төртә, ә этәс ялт итеп килеп тә сыға. Этәс быларҙың һандыҡ ҡапҡастарын тибеп кенә ебәрә лә, ҡашмауҙы алып, ҡапҡаға баҫып ҡысҡырып ебәрә лә: «Ки-ки-ри-ку-у-үк! Ғәлләметдиндән ҡашмауҙы алдым би-и-ит!» – тип, урам буйлап ҡайтып китә. Ғәлләметдин үлеп китә инде, бахыр.

## 103. Төлкө менән ҡор

Төлкө урман буйлап сабып барғанда, ағас башында ултырған ҡорҙо күреп туҡтай ҙа:

– Ҡорҡай, ҡорҡай! Мин ҡалала булдым, – ти.

– Бу-бу-бу! Булһаң булырһың инде.

– Ҡорҡай, ҡорҡай! Ҡорҙарға ағас башында ултырмаҫҡа, йәшел үләндә йөрөргә тигән бойороҡ алдым.

– Бу-бу-бу! Йөрөһәк йөрөрбөҙ инде.

– Ҡорҡай, кем ул юлдан килә?

– Бер кеше.

– Ә арба артынан нимә саба?

– Кескенә ҡолон.

– Ә ҡойроғон нисек күтәргән?

– Юғарыға кәкрәйтеп күтәргән.

– Ярай улайһа, иҫән бул, ҡорҡай! Минең ваҡытым юҡ, өйгә ҡайтырға кәрәк.

## 104. Кәҙә тәкәһе менән талаҡ

Борон-борон заманда, һайыҫҡандар ала саҡта, олатайҙар бала саҡта, йәшәгән, ти, ике хан. Улар бер-береһе менән бик дуҫ булғандар, сыбар-ала ҡуй һуйғандар. Баш-тояғын элек һалғандар, талағын аҙаҡ һалғандар, тик талаҡ ҡаҙандан сығып ҡасҡан.

Эй бара, ти, был талаҡ, эй бара, ти. Бара торғас, осраған, ти, бер сип-сип иткән турғайға. Талаҡ уны шунда уҡ йотоп та ебәргән. Китеп бара талаҡ, китеп бара, китеп бара торғас, ул осраған ҡар-р-рҡ иткән ҡарғаға. Ҡарға унан:

– Ҡайҙа бараһың, талаҡ ағай? – тип һорай икән.

– Мин сип-сип иткән турғайҙы йоттом, инде хәҙер һине лә йотам, – тигән дә, шунда уҡ ҡарғаны йотоп та ебәргән, ти. Китеп бара икән талаҡ, китеп бара торғас, осраған, ти, утынсыға. Утынсы унан:

– Мин сип-сип иткән турғайҙы йоттом, ҡар-р-р иткән ҡарғаны йоттом, инде һине лә йотам, – утынсыны ла йотҡан, ти. Эй бара, ти, талаҡ, бара торғас, уға бер бесәнсе осраны, ти.

– Талаҡ, ҡайҙа бараһың? – тип һораған бесәнсе.

– Мин сип-сип иткән турғайҙы йоттом, ҡар-р-р иткән ҡарғаны йоттом, утынсыны йоттом, инде хәҙер һине лә йотам, – тигән дә, шунда уҡ бесәнсене лә йотоп ебәргән, ти.

Шунан һуң талаҡ үҙенең юлын дауам иттергән. Бара торғас, осраған, ти, ебәксенең ете ҡыҙына. Улар:

– Талаҡ ағай, ҡайҙа бараһың? – тип һорағандар.

– Сип-сип иткән турғайҙы йоттом, ҡар-р-р иткән ҡарғаны йоттом, утынсыны йоттом, бесәнсене йоттом. Инде хәҙер һеҙҙе лә йотам, – тигән дә, ебәксенең ете ҡыҙын да йотҡан да ебәргән, ти.

Эй бара, ти, талаҡ, эй бара, ти. Бара торғас, осраған, ти, думбырасының туғыҙ улына. Улар ҙа:

– Талаҡ ағай, ҡайҙа бараһың? – тип һорағандар.

– Мин сип-сип иткән турғайҙы йоттом, ҡар-р-р иткән ҡарғаны йоттом, утынсыны йоттом, бесәнсене йоттом, ебәксенең ете ҡыҙын йоттом, инде һеҙҙе лә йотам, – тигән дә, шунда уҡ думбырасының да туғыҙ улын йотоп ебәргән.

Эй бара, эй бара, ти, талаҡ, бара торғас, осраған, ти, кәзә тәкәһенә.

– Талаҡ ағай, ҡайҙа бараһың? – тип һораған кәзә тәкәһе.

– Мин сип-сип иткән турғайҙы йоттом, ҡар-р-р иткән ҡарғаны йоттом, утынсыны йоттом, бесәнсене йоттом, ебәксенең ете ҡыҙын йоттом, думбырасының туғыҙ улын йоттом, инде хәҙер һине лә йотам, – тигән талаҡ.

– Юҡ, йотмай тор әле һин мине, талаҡ ағай, – тип әйткән, ти, кәзә тәкәһе. – Һин тау түбәнендә тор, мин үренә менеп торайым. Ауыҙыңды асып тик тор, мин ауыҙыңа үҙем килеп керермен, тигән.

Талаҡ быға риза булған. Тау түбәнендә ҡалған, кәзә тәкәһе тауҙың үренә менеп баҫҡан. Баҫты ла тәкә, йүгереп килеп, талаҡтың ауыҙына кереп китте, ти. Шунда уҡ тегенең эсе ярылды, ти. Талаҡ эсенән тәүҙә турғай осоп сыҡты, уның артынан ҡарға, уның артынса утынсы, унан һуң бесәнсе, шунан ебәксенең ете ҡыҙы, улар артынан думбырасының туғыҙ улы, иң һуңынан тәкә үҙе килеп сыҡты, ти.

Сыҡҡан бере кәзә тәкәһенә рәхмәттәр әйтеп, үҙ юлдарына китеп барҙы, ти. Улар бөтәһе лә әле булһа ла иҫән-һау, ти. Шатланып, рәхәтләнеп йәшәп ята, ти. Кәзә тәкәһен һәр береһе өсәр көн ҡунаҡ иткән, ти.

Экиәтем – ары, үҙем – бире, һике аҫтында һигеҙ бүре.

## 105. Ҡамыр малай

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай. Бабай һунарға йөрөгән, әбей йөн иләгән, ти.

Бер ваҡыт әбей ҡамырҙан бала яһап, мейес алдына һалып ҡуйған, ти. Дүрт көн эсендә ҡамырҙан яһалған балаға йән кергән, ти. Әбей уға бер телем икмәк биргән. Ҡамыр малай тағы икмәк һораған. Әбей уға бар булған икмәген биреп бөтөргән, ти, ә ҡамыр малай тағы ла икмәк һораған, ти. Әбей икмәк бирмәгән. Ҡамырҙан яһалған малай:

– Ул саҡта, әбей, һинең үҙеңде ашайым, – тигән дә, әбейҙе йотоп та ебәргән, ти. Бабай урамдан ҡайтһа, бала бабайҙан икмәк һорай икән. Бабай өйөндә икмәк тапмаған, ҡамыр бала бабайҙы ла йотҡан да өйҙән сығып киткән. Ҡамыр малайға утындан ҡайтып килгән бер кеше осраған, ти. Ҡамыр малай уға:

– Мин бер бөтөн икмәк ашаным, әбей менән бабайҙы йоттом, хәҙер һине лә йотам, – тигән дә, уны ла йотҡан, ти. Шунан Ҡамыр малай ары киткән. Китеп бара торғас, бесәндән ҡайтып килеүсе кешене осратҡан.

– Мин бер икмәк ашаным, әбей менән бабайҙы, утындан ҡайтып килеүсе бер кешене йоттом – туйманым. Хәҙер һине лә йотам, – тигән дә, бесәнсене лә йотҡан да ҡуйған.

Ҡамыр малай ары киткән. Китеп бара торғас, бер бәләкәй генә өй күргән. Ингән. Ул өйҙә яңғыҙ әбей йәшәгән, ти. Ҡамыр малай ингәндә, әбей һөт ҡайнатып ултырған, ти. Ҡамыр малай әбейгә:

– Мин бер бөтөн икмәк ашаным, әбей менән бабайҙы, утынсы менән бесәнсене йоттом, хәҙер һине ашайым, – тигән.

– Әле һин кеше йотоп йөрөйһөң икән! Бына мин һиңә ашатайым әле кеше! – тигән дә, әбей ҡайнар һөттө Ҡамыр малайға һипкән дә ҡуйған, ти.

Шулай итеп, теге Ҡамыр малай һөткә бешеп үлгән, ти. Бының менән әбей, бабай, утынсы менән бесәнсе килеп сыҡҡан, ти.

Улар, был яңғыҙ әбейгә рәхмәт уҡый-уҡый, өйҙәренә ҡайтып киткән, ти.

## 106. Ике үгеҙ менән бер арыҫлан

Ике үгеҙ менән бер арыҫлан
Бер-береһе менән дуҫлыҡ ҡылғандар,
Һис бер ваҡыт айырылмайса
Йыраҡтарҙа йөрөгәндәр.
Бик гәйрәтле бер арыҫландың
Күҙе төшкән быларға.
Йүгереп килеп яндарына
Теләй уларҙы тоторға.
Ләкин улар илтифаҡлы:
Бирмәнеләр арыҫланға ирек,
Улар һөҙмәксе булалар,
Арыҫлан өҫтөнә килеп.
Аптыраған был арыҫлан
Ике үгеҙҙе еңеүҙә,
Ахырҙа хәйлә тапҡан
Илтифаҡты боҙоуҙа.
Арыҫлан әйткән үгеҙгә:
«Ғүмерҙә үҙеңә теймәм,
Иптәшеңде ҡалдырып,
Бер яҡҡа китһәң», – тигән.
Ахмаҡ үгеҙ быға ышанып
Үҙ юлдашын ташлаған.
Ахырҙа үгеҙҙе арыҫлан
Тотоп алып ашаған.

# АҢЛАТМАЛАР

Аңлатмаларҙа текстың тәртип һаны, әкиәттең исеме, һаҡланған урыны, ҡасан, ҡайҙа, кем тарафынан, кемдән яҙып алыныуы тураһында белешмә бирелә һәм халыҡ-ара Аарне-Томпсон (АТ) каталогы буйынса сюжет тибының һаны билдәләнә (әкиәттәр китапта сюжет тибы һандары үҫә килеү тәртибендә урын алды), шулай уҡ әгәр текст АТ буйынса бер нисә сюжеттың берлегенән торһа, шул сюжет типтарының һаны күрһәтелә һәм «+» билдәһе менән уларҙың ҡушылыуына баҫым яһала. Иҫкә алынған каталогта параллелдәре булмаған сюжеттар «АТ» – тип билдәләнә. Элек баҫылған текстарға Шовень тарафынан төҙөлгән Больте менән Поливканың халыҡ-ара йәнә Эбергард менән Боратовтың төрөк күрһәткестәренә һылтанмалар яһала. Быларҙы заманында Л. Г. Бараг эшләгән, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, томға индерелгән яңы текстар бындай мәғлүмәткә эйә була алмай. АТ халыҡ-ара каталогтың нигеҙенә Европа халыҡтарының әкиәттәре алынғанлыҡтан, башҡорт әкиәттәренең каталогта күрһәтелгән сюжет тибына бермә-бер тура килмәүе тәбиғи, шуға күрә ундай осраҡта әкиәттең семантик ядроһы билдәләнә һәм каталогта уның параллеле эҙләп табыла. Әгәр ҙә башҡорт әкиәте тышҡы үҙенсәлектәре менән генә АТ күрһәткесенең берәй сюжетына оҡшаһа, ә мәғәнәүи яҡтан ныҡ ҡына айырылһа, ул «сағыштыр АТ менән», тип билдәләп үтелә.

Артабан, мөмкин булған тиклем, сюжетҡа характеристика бирелә, билдәле булһа, варианттары, бүтән халыҡтарҙағы параллелдәре, шулай уҡ әкиәт элек баҫылған булһа, баҫмалар күрһәтелә.

Аңлатмаларға ҡушымта итеп «Әкиәттәрҙең яҙып алыныу урыны һәм ваҡыты» һәм «Әкиәттәрҙе яҙып алыусылар» күрһәткестәре бирелә.

Аңлатмаларҙың аҙағында, кәрәк булған осраҡта, ҡайһы бер һүҙҙәргә, уларҙың мәғәнәһенә айырым туҡтап үтелә.

## ҠЫҪҠАРТЫП АЛЫНҒАН ҺҮҘҘӘР ИСЕМЛЕГЕ:

АА – А. П. Андреев. Указатель сказочных сюжетов по системе Аарне. Л., 1929.

АП – В. Я. Пропп. Указатель сюжетов в кн.: Народные русские сказки А. Н. Афанасьева в трех томах, т. 3. М., 1957. С. 454–502.

АТ – The Types of the Folktale. A Classification and Bibliography Anti Aarne's Verzeichnis der Marchentypen (FFC № 3.) Translated and enlarged by Stith Thompson. Second Revision. Helsinki, 1961 (FFC 184).

Аф. – Русские народные сказки А. Н. Афанасьева в трех томах. М., 1957–1958.

Бараг – Л. Г. Бараг. Сюжеты и мотивы белорусских волшебных сказок (систематический указатель) – в кн.: Славянский и балканский фольклор. М., 1971. С. 182–235.

БНС – Башкирские народные сказки. М. – Л., 1947, 1949; Уфа, 1969.

BP – J. Bolte. G. Polibka, Anmerkungen zu den Kinder und Hausmärchen der Brüder Grimm, Bd. 1–5, 1913–1931, Leipzig.

Бес. – Башкирские народные сказки. Запись и перевод А. Г. Бессонова, под редакцией проф. Н. К. Дмитриева. Уфа, 1941.

БХИ, 2 – Башҡорт халыҡ ижады. 2-се том. Өфө, 1959.

БХӘ – Башҡорт халыҡ әкиәттәре. Өфө, 1956.

ҒА – Ғилми архив / НА – Научный архив Уфимского научного центра РАН.

EB – W. Eberhard, P. N. Boratov. Typen türkischer Volksmärchen. Wiesbaden, 1953.

КС – Казахские сказки. Т. I–III. Алма-Ата, 1958–1968.

СДПИ – Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты.

ТНС – Татарские народные сказки. Составитель Х. Ярмухаметов, Казань, 1970.

ТХӘ – Татар халык әкиятләре. Казан, 1956, 1958, 1964.

ФФ БГУ – Фольклорный фонд Башкирского государственного университета.

ФФ УМУ – Фольклорный фонд Учалинского музыкального училища.

Шовень – V. Chauvin. Bibliographie des ouvradges arabes, Vol. 1–12. Liege, 1892–1922.

# КОММЕНТАРИИ

В комментариях даются порядковый номер, название сказки, место хранения, где, когда, кем, от кого записан текст, информация о сюжетном типе по международному каталогу по системе Аарне-Томпсона (сюжетный тип дается в порядке увеличения цифр: АТ 1, АТ 2 и т. д.). Если текст состоит из единства нескольких сюжетных типов по указателю АТ, тогда делается ударение на их соединение, напр. АТ 1 + АТ 248. Если в упомянутом каталоге нет параллелей публикуемого текста, это отмечается так: АТ – . К ранее опубликованным текстам даются дополнительные ссылки на указатель Больте и Поливки, составленный Шовенем и турецкий указатель Эбергарда и Боратова. В свое время эта работа была проделана Барагом Л. Г. К сожалению, вошедшие в том новые тексты не будут иметь такую информацию.

Естественно, башкирские сказки полностью не соответствуют сюжетным типам международного указателя, так как основу каталога составляют сказки европейских народов. Поэтому в башкирском тексте определяется семантическое ядро сказки и в каталоге разыскивается его параллель. Если же башкирская сказка только внешне напоминает какой-нибудь сюжет указателя АТ, а по смыслу отличается, то дается пометка «Ср.» (сравни).

Далее, по мере возможности, сюжет характеризуется, указываются известные варианты и близкие параллели сказок других народов. Если сказка ранее опубликована, перечисляются издания.

Как приложение к комментариям даются указатели места и времени записи сказки, а также список тех, кто записал сказки.

В конце комментариев, если это необходимо, объясняется смысл отдельных слов.

# ӘКИӘТТЕҢ ЯҘЫП АЛЫНЫУ УРЫНЫ ҺӘМ ВАҠЫТЫ

| Район исеме | Әкиәт номеры | Яҙып алынған йылы |
|---|---|---|
| 1. Архангель | 60 | 1945; 1945; 1938; |
| 2. Баймаҡ | 90 | — |
| 3. Белорет | 34; 51; 87; 11 | 1958; 1945; 1945; 1977 |
| 4. Бөрйән | 104 | 1982 |
| 5. Ғафури | 37; 95; 4; 8 | 1989; 1937; 1989; |
| 6. Дыуан | 62 | 1989; 1989 |
| 7. Дәүләкән | 32; 36; 65; 71; 102 | 1968; 1939; 1968; |
| | | 1968; 1968;1968; 1974 |
| 8. Ишембай | 42; 49; 67; 74; 76; | 1974 |
| | 101; 105 | 1975; 1996; 1996; |
| 9. Йылайыр | 70; 84; 99 | 1996; 1998 |
| 10. Күгәрсен | 77; 92; 9; 21; 25 | 1945; 1940 |
| | | 1974 |
| 11. Көйөргәҙе | 14; 17 | 1962; 1966 |
| 12. Күмертау | 58 | 1981; 1981; 1996 |
| 13. Ҡырмыҫҡалы | 104; 12 | 1988; 1988 |
| 14. Мәсетле | 41; 59; 7 | 1939 |
| 15. Нуриман | 88; 89 | 1963 |
| 16. Саҡмағош | 54 | 1971; 1916 |
| 17. Салауат | 44 | 1938 |
| 18. Стәрлетамаҡ | 78; 94 | 1958 |
| 19. Туймазы | 80 | 1999; 1978; 2000;1999 |
| 20. Өфө | 91 | 1941 |
| 21. Учалы | 72; 93; 100; 19; 20; | 1966 |
| 22. Федоровка | 53 | 1936; 1949; 1996 |
| 23. Хәйбулла | 98 | 1963 |
| 24. Әбйәлил | 55; 83; 1 | 1929; 1962; 1929; |
| 25. Пермь | 66 | 1962; 1970 |
| 26. Силәбе | 29; 31; 69; 6; 26; | 1966 |

Билдәһеҙҙәре: 28; 30; 33; 35 (1937); 38; 39; 40; 43; 45 (1937); 46; 47; 48; 50; 52; 56; 57; 61; 63; 68; 73; 75; 79; 81; 82; 85; 86; 96; 97; 103; 106; 2; 3; 5; 10; 15; 16; 18; 22; 23; 27.

# ӘКИӘТТЕ ЯҘЫП АЛЫУСЫЛАР ИСЕМЛЕГЕ

| Фамилияһы (Фамилии) | Әкиәт номеры (номера сказок) |
|---|---|
| 1. Альметьев Б. | 29, 69 |
| 2. Аҙнабаев, Әхмәтйәнова | 105 |
| 3. Бессонов А. Г. | 30; 38; 47; 61 |
| 4. Бикбаев Баязит | 14; 17 |
| 5. Бикбов Ф. | 35; 45 |
| 6. Бәширов Н. | 37 |
| 7. Вәлиева Р. | 7 |
| 8. Галин С. | 31 |
| 9. Ғилманова З. | 72 |
| 10. Ғәлимов Р. | 44 |
| 11. Зарипов Н. | 67 |
| 12. Иҙелбаев Н. | 34; 51 |
| 13. Ильясов Р. | 8 |
| 14. Исхаҡов Ғ. | 33 |
| 15. Карнай А. | 87 |
| 16. Ҡәнзәфәров Х. | 54 |
| 17. Ҡотлобаева Н. | 77 |
| 18. Кейекбаев Ж. Ғ. | 95; 2; 4 |
| 19. Кирәй Мәргән | 55 |
| 20. Килмөхәмәтов Т. А. | 12 |
| 21. Мифтахов А. | 91 |
| 22. Муминов З. | 94 |
| 23. Мөхәмәтҡолова Ф. | 104 |
| 24. Мәүлетҡолова Ф. | 100 |
| 25. Мәзитова Л. | 92; 9; 21 |
| 26. Нафиҡова Роза | 58; 76 |
| 27. Сәлихов Әхәт | 25 |
| 28. Сәлихов Р. | 83 |
| 29. Саҙретдинова Н. | 78 |
| 30. Таһирова М. | 70; 99 |
| 31. Туҡаев Ә. | 80 |
| 32. Фәйзуллин Р. | 98 |
| 33. Хәлитов Ғ. | 59 |
| 34. Хәлитов Ғ. | 53 |
| 35. Харисов Ә. И. | 26 |
| 36. Хөсәйенова Г. Р. | 32; 36; 65; 71; 88; 89; 102 |
| 37. Шакиров Р. | 49 |
| 38. Шоңҡаров Н. Д. | 41; 42; 60; 62; 66; 74; 101 |
| 39. Шәмсетдинова Р. | 1 |
| 40. Өмөтбаев М. | 5 |
| 41. Әхмәтйәнов Ким | 6 |

Билдәһеҙ: 28; 39; 40; 43; 46; 48; 50; 52; 56; 57; 63; 68; 73; 75; 79; 81; 82; 85; 86; 90; 93; 96; 97; 103; 106; 3; 11; 13; 15; 18; 19; 20; 22; 23; 24; 27.

## ХАЙУАНДАР ТУРАҺЫНДА ӘКИӘТТӘР

1. **Ҡырағай хайуандарҙың килеп сығышы.** – БДУ фф, 1996 – Шәмсетдинова Рәзилә Әбйәлил р-ны Ҡаҙмаш ауылында Ишбулатова Нәжиәнән (1929) яҙып алған.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

2. **Айыу ни өсөн ҡыш буйы өңөнән сыҡмай?** – Кейекбаев Ж. Ғ. Әкиәттәр, 1960.

АТ – . Этиологик характерҙағы әкиәт-миф.

3. **Өс дуҫ.** – УМУ фф. – Сахауова Айгөлдөң альбомынан алынды.

АТ – . Үҙ-ара татыу булған бурһыҡ, терпе, сысҡандың һәм мәңге үҙ-ара тыныштмаған төлкө, бүре, айыуҙың тормоштары ҡапма-ҡаршы һүрәтләнә. Татыу, берҙәм булмағас һуңғы өсәүһе тәүгеләренең аҙығын тартып алалмай. Шунан һуң, имеш, айыу ҡышты өңөндә үткәрергә гәҙәтләнгән.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

4. **Айыу менән бал ҡорттары.** – Ж. Кейекбаев. Урман әкиәттәре, 1954, 3–6-сы б. – 1945 йылда Ж. Кейекбаев Ғафури р-ны Ҡаран-Йылға ауылында Һ. Фәттәховтан яҙып алған.

АТ – *78*** (Медведь разоряет борть, человек отрубает медвежий хвост). Этиологик легендаларҙы хәтерләткән әҫәр. Айыуҙың ҡойроҡһоҙ ҡалыуы тураһындағы бер төр әкиәттәрҙең АТ 2 сюжет тибына тура килгәндәре бар. Мәҫ., ҡасандыр оҙон йөнтәҫ ҡойроғо булған скандинав айыуы, төлкө өйрәтеүе буйынса, ҡойроғо менән ҡыш көнө балыҡ тотам тип, ҡойроғо боҙға ҡуша туңып өҙөлөп ҡала. Ошондай әкиәт башҡорттарҙа ла бар (ҡара: ҒА, ф. 3., яҙма 26, эш 10, 118–120-се б. 1929 йылда Силәбе өлкәһенең Арғаяш р-да яҙып алынған). Әкиәт өйрәнеүсе ғалимдар К. Крундың, А. Графтың, Ф. Юнгмандың хеҙмәттәрендә «Медведь у проруби» АТ 2 сюжет тибының архаик бер төрө тигән фекер бар.

Баҫылған: БХӘ, 1956, 283–285-се б.; БХИ, 1959, 239-сы б.; БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 16; рус телендә, БНТ, т. 4, № 100.

5. **Айыу менән суртан.** – М.Өмөтбаев. Йәдкәр, 1984, 178–179-сы б.

АТ – . СУС-та параллелдәре юҡ.

6. **Бүре ни өсөн йыртҡыс булып киткән?** – ҒА, ф. 3, яҙма 21/8, 76-сы б. – 1962 йылда Ким Әхмәтйәнов Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районы Ғәмир ауылында Хисмәтуллин Һибәттән (62 йәштә) яҙып алған.

АТ – . Этиологик тамамланышлы әкиәт-миф.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

7. **Бүре ни өсөн айға ҡарап олой?** – БДУ фф, 1996 – Вәлиева Рита Мәсетле р-ны Иҫке Мишәр ауылында йәшәүсе Ғарипова Фәниә Таиф ҡыҙынан (1937) яҙып алған.

АТ – .

Варианты: Бүре ни өсөн айға ҡарап олой? – БДУ фф, 1996 – Күгәрсен р-ны Үрге Һаҙ ауылында Мәзитова Лениза Әбйәлилов Хөснөтдиндән яҙып алған. Ике әкиәттең дә тексы бер төрлө. Студенттарҙың берберeһенән күсереүе ихтимал, йә булмаһа матбуғатта (бәлки район гәзитендә) баҫылғандыр. Беренсе мәртәбә баҫыла.

**8. Бүре менән ҡуяндар.** – СДПИ, ф. 1, яҙма 2, һаҡл. бер. 13, 120-се б. – 1977 йылдың июлендә Ильясов Р. Ф. Ғафури районы Үрге Ташбүкән ауылында йәшәүсе Аллаяров Сәлих Ғибаҙулла улынан (1881) яҙып алған.

АТ – . «Эт этлеген итер» әйтеменең килеп сығыу рәүеше тураһында этиологик характерҙағы сюжет.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**9. Эш табылды.** – БДУ фф, 1996 – Мәзитова Ләниза Күгәрсен р-ны Сәлих ауылында 19 йәшлек Мәзитова Альбинанан (уға Раушана әбейе һөйләгән) яҙып алған.

АТ – .

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**10. Эт үҙенә нисек хужа тапҡан?** – Әкиәттәр, 1940, 189-сы б. 30-сы йылдар аҙағында яҙып алынған.

**АТ 130 С (Собака в поисках хозяина).** Был типтағы әкиәттәр АТ күрһәткесендә фин, фин-швед, латыш, литва фольклор материалында иҫәпкә алынған. Яҡын варианттары: ЧЛС, 28–29-сы б. һәм УПТМН: III, ч. I: Мокшанские сказки, с. 39–41.

**Баҫылған:** БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 29; рус телендә: БНТ, т. 4, № 116.

**11. Ни өсөн бесәйҙәр өйҙә йәшәй?** – УМУ фф. – Белорет районы Шығай ауылы ҡыҙы Нуретдинова Фирүзәнең альбомынан күсереп алынды.

АТ – . Бәләгә юлыҡҡан сәсәнгә эт ярҙам итмәй, ә бесәй ихлас ярҙам ҡулын һуҙа һәм шул изгелеге өсөн ғүмер буйына өйҙә, йылыла йәшәй.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**12. Ҡарға ни өсөн исемен әйтеп бөтөрмәй?** – БДУ фф, һаҡл. бер. 66, 85–86-сы б., – 1966 йылда А. Килмөхәмәтов Ҡырмыҫҡалы р-ны Үтәгән ауылында А. Хәсәнованан (1894) яҙып алған.

АТ 227* (Ворона и воробей). Сюжеттың тарихы «Панчатантра»ға (1-се кит., 7-се хикәйә) һәм беҙҙең көндәргә килеп етмәгән, әммә урта быуат мәҫәл авторҙарына сығанаҡ булып хеҙмәт иткән Эзоптың «Торна менән ҡыҫала» мәҫәленә барып тоташа.

АТ күрһәткесенән тыш ҡара: СУС, 90–91-се б.; Баймурадов, № 143; Киппар, 150–151-се б.; Арайс-Медне, 34-се б., 226. Бүтән төрө: «Төлкө, әтәс, күгәрсен» (Руденко, № 2); «Өкө менән турғай» (ТХИ: Әкиятләр, 1-нче кит., № 43). Татар әкиәтендә, башҡорт әкиәтендәге кеүек үк, турғай йыртҡыс ҡоштан исемен әйтеүен һорай.

Баҫылған: БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 33; рус телендә: БНТ, т. 4, № 119.

**13. Ҡарлуғастың ҡойроғо ни өсөн икe ослө?** – БДУ фф, 1996. Паспорты юҡ.

Туфан һыуы баҫҡан донъяла бер кеше кәмәгә тере ҡалған йән эйәләрен йыйнай. Сыҫҡан тишкән тишектән кәмәгә һыу тула башлағас, йылан уны ҡаплай ҙа, хаҡына үҙе теләгән иң тәмле итте ашап йәшәргә рөхсәт итеүҙәрен һорай. Ҡарлуғас, тәлмәрйен ите иң тәмлеһе тип, йыланды тон башына ултырта. Асыуы ҡабарған йылан ҡарлуғасҡа ташланып, ҡойро

гонон урта тирәһен өҙөп ала. Шунан бирле ҡарлугастың ҡойроғо ике осло булып ҡала.

Үҙенсәлекле әкиәт-миф, күрһәткестә бындай типтағы сюжет юҡ.

Баҫылған: БХИ: Легендалар һәм риүәйәттәр, № 18.

**14. Ҡаҙҙар ниңә ала булған?** – 1945 йылда Баязит Бикбай Көйөргәҙе районы Ҡалтай ауылында яҙып алған.

АТ – . Тексты шартлы рәүештә генә хайуандар тураһындағы әкиәттәргә индерергә мөмкин. Күпмелер дәрәжәлә ул тылсымлы әкиәттең АТ 327 (Ивашка и гуси-лебеди) сюжет тибын һәм этиологик мотивлы әкиәт-мифты хәтерләтә.

Баҫылған: БХӘ, 1956, 288–290-сы б., БХИ, 2, 1959, 245–246-сы б.; БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 36; рус телендә БНС, 1947, с. 73–76; БНС, 1969, с. 109–111.

**15. Күркә.** – Учалы музыка училищеһы хореография бүлеге талибәһе Әминева Айһылыуҙың альбомынан алынды.

АТ – . Күркәнең ҡабарып китә торған холҡон аңлатыуға ҡоролған этиологик мотивлы әкиәт-миф.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**16. Әтәс нимә тип ҡысҡыра?** – Паспорты юҡ.

АТ – . Әтәс ҡойроғон тауыҡҡа биреп торған, ә ул ҡойроҡто кире ҡайтармаған. Әтәс: «Ҡойроғомдо алып ки-ил!» – тип тора ла ҡысҡыра, ти. Шул беҙгә «Ки-ки-рик-ү-үк» булып ишетелә, имеш.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**17. Тауыҡ менән төйләгән.** – БХӘ, 1956, 293–295-се б. 1940 йылда яҙыусы Б. Бикбаев Көйөргәҙе районында яҙып алған.

АТ 235 (Одна птица крадет украшение другой). АТ күрһәткесенә өҫтәлмә рәүештә ҡара: Арайс-Медне, с. 219; (Гнатюк, № 311). Шулай уҡ бөйәнән мөгөҙ менән ҡойроҡ алып торған болан тураһындағы ҡаҙаҡ әкиәте (КНС, с. 25) һәм «Басни Эзопа», 1968, 201-се бит, № 9 менән сағыштыр.

Баҫылған: БХИ, 1959, 231–232-се б., БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 34; рус телендә: БНС, 1969, с. 97–99-сы б.; БНТ. т. 4, № 120.

**18. Ел, ут, һыу, тупраҡ.** – Паспорты юҡ.

АТ – . Хужа елгә, утҡа, һыуға, тупраҡҡа файҙалы эштәр башҡарып, хәбигәткә яраҡлашырға кәңәш иткән һәм улар ризалашҡандар.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**19. Ләйсән ямғыры.** – УМУ фф, 2000 – Учалы районы Түңгатар ауылы ҡыҙы Казбекова Юлиәнең альбомынан алынды.

АТ – . Өлөшләтә «Үгәй ҡыҙ» сюжетын йәки «Айҙағы ҡыҙ» мифын хәтерләтә, артабан ләйсән ямғырының барлыҡҡа килеүен аңлатҡан этиологик мотивлы әҫәргә әйләнә.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**20. Дүрт һылыу.** – УМУ фф. – II курс студенткаһы (сығышы менән Учалы районы Мәсҡәү ауылынан) Р.Хәйбуллинаның 1999 йылда төҙөгән альбомынан алынды.

AT 294 «Месяцы и времена года» сюжет тибының үҙенсәлекле варианты. Ай менән Ҡояштың балалары – миҙгелдәр – бер-береһенең күлдәгенән көнләшәләр, шуға күрә ата-әсәләренә ҡунаҡҡа сиратлап киләләр.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**21. Бүләк кемгә?** – БДУ фф, 1996 – Мәзитова Лениза Күгәрсен р-ны Мораҡ ауылында Яхин Мөхәмәттән яҙып алған.

AT 294 (Месяцы и времена года). Көнсығыш славян әкиәттәрендә айҙар бер-береһен ҡунаҡҡа саҡыралар, бәхәс сығып, март майға асыулана ла сәскәләреңде туңдырам, ти. Башҡорт әкиәтендә иһә ҡояш иң матур, иң уңған миҙгелгә йондоҙ бирәм, ти. Барыһын да тыңлағас, ҡояш бүләген ҡайһы миҙгелгә бирергә белмәй ҙә, усындағы йондоҙҙарҙы «Барығыҙға ла булһын» тип, күккә һибә.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**22. Кесерткән ниңә усал?** – УМУ фф. – М. М. Аҡназаровтың альбомынан алынды.

AT – . Кесерткәндең ни өсөн саға торған үсемлеккә әйләнгәнен хикәйәләүсе сюжет.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**23. Бәпембә балалары.** – УМУ студенты Усманов Мараттың альбомынан алынды, 2001 йылғы яҙма.

AT – . Бәпембә балаларының нисек донъяға таралып китеүен хикәйәләүсе мауыҡтырғыс сюжет.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**24. Йондоҙ сәскә.** – УМУ фф. – Бөрйән районы ҡыҙы Ҡарағолова Мәҙинәнең альбомынан алынды.

AT – . Тәбиғәт күренештәренең, атап әйткәндә томбойоҡ сәскәләренең, килеп сығышын аңлатҡан әкиәт-миф.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**25. Ағастар нисек үҙҙәренә батша һайлаған?** – 1998 йылдың 11 декабрендә Ә. Сәлихов Күгәрсен р-ны Бикес ауылында Мусин Миңлебай Мырҙабай улынан (1914) яҙып алған.

AT – . Әкиәт-миф ерек ағасының үҫеү рәүеше тураһында этиологик мотив менән тамамлана.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**26. Ҡоралай менән алмағас.** – FA, ф. 3, яҙма 63, эш 52, 16–17 б. – 1970 йылда Ә. Харисов Силәбе ҡалаһында Х. Хәбибуллиндан (1883) яҙып алған.

AT *2034 B*. Варианты – Ск. Башҡ. 1969, № 24. – «Тапҡыр кәзә». Был вариант рус телендә М. З. Мөхөтдиновтан яҙып алынған. Унда алмағастың ни өсөн кешеләрҙең баҡсаһында үҫә башлауы, кәзәнең йорт хайуаны булып китеүе тураһындағы этиологик мотивтар юҡ.

Баҫылған: БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 31; рус телендә: БНТ, 4 т. , № 122.

**27. Шыршы менән тумыртҡа.** – УМУ фф. – Тулыбаева Ләйсәндең альбомынан алынды.

AT – . Шыршы менән тумыртҡаның ни өсөн бергә йәшәй башлауҙары тураһында һөйләгән сюжет.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**28. Балыҡсы.** – Паспорты юҡ.

AT 1 (Лиса крадет рыбу с воза).

«Балыҡсы менән төлкө» (№ 29), «Төлкө, бүре, бүҙәнә» (№ 30) әкиәттәренең тәүге өлөшөнөң шиғри варианты.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**29. Балыҡсы менән төлкө.** – FA, ф. 3, яҙма 26, һаҡл. берәмеге 10, 4-се кит., 118–120-се б. Б. Альметьев 1929 йылдың августа Арғаяш кантоны Һаттыҡ ауылында 57 йәшлек Жомасултан Мөхәммәтәмин улы Ҡунаҡкилдиндан яҙып алған.

AT 1 (Лиса крадет рыбу с воза) + 2 (Волк у проруби). Ер йөҙөндәге күп халыҡтарҙың репертуарында урын алған сюжет. Әкиәт тексын беҙ архивта булғанса, үҙгәрешһеҙ бирҙек. Әкиәттәрҙе яҙып ҡалдырыусы Б. Альметьев ерле һөйләш үҙенсәлектәрен һаҡларға тырышҡан.

Тәртәнә – әҙәби телдә тәртнә (рус.: оглобли). Тәртә төбө – сананың тәртәһенең төбөнә бәйләнә торған бау.

Шәнән – әҙәби телдә шунан.

Шить итәм – рус теленән, тегәм тигән мәғәнәлә.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**30. Төлкө, бүре, бүҙәнә.** – Бес., № 78. Башҡорт теленә М. Минһажетдинов тәржемә иткән.

AT 1 + AT 2 + 248 A. BP II, 73, I, 58. EB 5. Донъя фольклоры өсөн «Лиса крадет рыбу с воза» һәм «Волк у проруби» сюжеттарының контаминацияһы ғәҙәти һанала. А. К. Насыров һәм П. А. Полякованың «Сказки казанских татар и сопоставление их со сказками других народов» /Казань, 1900, с. 103/ йыйынтығының иҫкәрмәләрендә төлкөнөң бабайҙың балығын урлауы тураһындағы әкиәттең көнсығыш, көньяҡ тарафтарҙа ла, рустарҙағы кеүек үк, киң таралған булыуы әйтелә. 1–2 тибындағы әкиәттәр урта быуат йыйынтыҡтарында /мәҫ., Берахия, XII б./ күҙгә ташлана. Ә инде «Волк у проруби» сюжеты тағы ла боронғораҡ урта быуат латин эшкәртмәләре буйынса билдәле /«Ромул» йыйынтығы/. 248 A* сюжет тибы тураһында 94-се текст аңлатмаһын ҡара.

Варианты: БДУ фф–59, 108–109-сы б.

Төрлө халыҡтарҙағы варианттары: ТХӘ, 2, 1956, 303–304-се б. ТХӘ, 1964, 270-се б. – татарҙарҙа; КС 1, 173–174-се б. – ҡаҙаҡтарҙа; «Киргизские сказки», 1968, 211–214-се б. – ҡырғыҙҙарҙа; Чечено-ингушский фольклор, 1940, 163–164-се б. «Лисица и перепелка» – чечендарҙа.

Баҫылған: БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 2; рус телендә: Бес., № 78; БНТ, т. 4, № 82.

**31. Төлкө менән бүре.** – FA, ф. 3, яҙма 21, эш 9, 120-се б. – 1962 йылда С. Галин Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ р-ны Һабаҡлы ауылында Ф. Ғафарованан (1947) яҙып алған.

AT – . *8 A* (Лиса учит волка охотиться в камышах и поджигает их.) AT 8 сюжет тибы менән сағыштыр: был типтағы көнбайыш Европа әкиәттәрендә бүре төлкөнән үҙен ҡыҙыл төҫкә буяуын һорай, төлкө бүрегә

бесән кәбәненә йәшенергә ҡуша, үҙе бесәнгә ут төртә. Төлкөнөң бүрене харап итеү мотивы башҡорт әкиәттәрендә лә урын ала (ҡара: № 34, 35).

Баҫылған: БХИ: Әкиәттәр, 1-се китап, № 3; рус телендә: БНТ, т. 4, № 84; Волга родная, с. 98.

**32. Төлкө менән бүре.** – FA, ф. 3, яҙма. 92, һаҡл. бер. 9, 179–180 б. 1989 йылда Г. Хөсәйенова Дәүләкән р-ны Иҫке Хөсәйен ауылында Рәхимова Шәмсиямал Шәйхетдин ҡыҙынан (1916) яҙып алған.

**АТ** – . Өҫтәге тексттың аңлатмаһын ҡара. Тик был вариантта төлкө бүрене малдарҙы тоторға өйрәтмәй, ә үҙен ашайым тип янаған бүрегә һалам аҫтына инеп ятырға ҡуша, мин һиңә ашарға кәзә алып киләм, ти ҙә, үҙе һаламға ут төртә.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**33. Алмасыуар ат.** – ФА, ф. 3, яҙма 47, эш 21, 4–7-се б. – Дүртөйлө район үҙәгендә йәшәүсе Fата Исхаҡов яҙып ебәргән.

**АТ 8** (Медведь хочет покраситься). Был типтағы Конбайыш Европа әкиәттәрендә бүре йәки айыу төлкөнән үҙен ҡыҙыл төҫкә буяуҙы һорай. Төлкө риза була һәм алйот йыртҡысҡа кәбән эсенә инеп ятырға ҡуша, ә үҙе бесәнгә ут төртә.

Башҡорт әкиәтендә иһә айыу төлкөгә түгел, бабайға мөрәжәғәт итә һәм ҡыҙыл төҫкә буярға түгел, сыбар итеүҙе һорай. Башҡорт әкиәтенең тамамланышы ла икенсе төрлө. Унда айыу ҡуян ярҙамы менән бабайҙан үс алмаҡсы була, тик бер нәмә лә килеп сыҡмай.

Баҫылған: БФ, II сыҒ., № 11.

**34. Етем төлкө.** 1945 йылда Н. Иҙелбаев Белорет районы Сәрмән ауылында М. Fафурованан яҙып алған.

**АТ 15** (Лиса-повитуха). Европала киң таралған сюжет, шулай уҡ Африка, Америка халыҡтары фольклорында ла осрай. Рустарҙа киң билдәле: АП, с. 459; допол. сб. Балашова, № 103, 114, сб. Никифорова, № 83. Һирәгерәк украин, белорустарҙа осрай.

Варианты: «Мәзин төлкө» - «Әкиәттәр», 1940, 64–67-се б. БДУ фф. – 63, 41–42-се б. 1963 йылда Р. Fәлимов Салауат районы Әлкә ауылында Х. Зиннәтуллиндан (1888) яҙып алған.

Башҡа бүре йәки айыуҙың төлкө менән дуҫлығы нисек боҙолоуы тураһындағы әкиәттәрҙән айырмалы рәүештә, «Етем төлкө»лә биш персонаж (айыу, бүре, ҡуян, эт һәм уларҙың татыу, гәҙел ғаиләһенә ҡаршы ҡуйылған төлкө) бар, һәм әкиәт тантана менән түгел, ә алдаҡсының тотолоуы менән тамамлана.

Төрлө халыҡтарҙағы варианттары: ТХӘ, 1964, 271–274-се б.; ТНС, с. 238–241 – татарҙарҙа; А. Назаревич. В мире горской сказки, Махачкала, 1962, с. 164–165 – дағстанлыларҙа.

Баҫылған: БХӘ, 1952, 89–96-сы б.; БХӘ, 1956, 299–304-се б. БХИ, 1969, 242–243-сө б.; БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 4; рус телендә: БНС, М. – Л., 1947, с. 62–68; БНС, 1969, с. 100–104; Волга родная, с. 88–102; БНС, 1987, с. 11–14; БНТ, т. 4, № 85.

**35. Сысҡан, айыу, бүре, төлкө.** – 1937 йылда Ф. Бикбов яҙып алған.

**АТ 20 С** (Звери бегут от войны) + **20 А** (Звери в беде пожирают друг друга), 62 (Мир у зверей). Сюжеттарҙың бындай контаминацияһы шулай

ы ҡаҙаҡ фольклорында ла бар: КС I, 181–186-сы б. 2, 181–183-сө б. Томпсон күрһәткесендә тәүге сюжеттың ни бары ике генә рус варианты иҫкә алынған. Әлбиттә, варианттар күберәк, мәҫ., Н.Ончуков, Северные сказки, Спб., 1908, 206; П. Кореной, Заонежские сказки, Петрозаводск, 1918, № 3; Т. Акимова и П. Степанов, Сказки Саратовской обл., Саратов, 1937, № 20; Д. Балашов, Сказки Терского берега Белого моря, Л., 1970, № 70; Материалы и исследования по фольклору Башкирии и Урала, БГУ, Уфа, 1974, № 27; А. Якимович, Белорусские сказки, Минск, 1963, 84–87-се б. AT 20 C сюжет тибының шулай уҡ латыш варианты ла билдәле: Латышские народные сказки. Сказки о животных. Сост. К. Арайс. Рига, 1965, 64–65-се б. Йәнлектәрҙең һуғыштан ҡасыуы тураһындағы сюжеттың баҫылмаған варианттары бар: БДУ фф 66, 39–40-сы б; БДУ фф–59, 105–107-се б. AT 20 A сюжет тибы нығыраҡ таралған, төньяҡ-көнсығыш илдәрендә киң билдәле, рус варианттары ла байтаҡ: AII, 459-сы бит, өҫтәлмә-сб. Балашова, № 70, 99. Әгәр башҡорт вариантында йәнлектәр берерәһен туҡталыш һайын ашаһа, бүтәндәрендә улар бүре соҡорона төшкән урында бер-береһен ашап бөтөрәләр, мәҫ., ҡаҙаҡтарҙа. /ҡара, КС I, стр. 181–186; III, с. 223, 244, 255/. Бөтә донъяға билдәле өсөнсө сюжет Эзоп һәм башҡа мәҫәл (басня) яҙыусылар тарафынан эшкәртелгән һәм төлкө тураһындағы урта быуат поэмаларында сағылыш тапҡан («Лиса и петух» эпизоды). шулай уҡ испан йыйынтыҡтарында күп осрай. «Мир у зверей» тибындағы көнсығыш әкиәттәренән Томпсон тик төрөк текстарын ғына иҫәпкә алған, ә һинд (ҡара: Индийские сказки, перевод с урду, М., 1958, с. 181–183), ҡаҙаҡ, башҡорт әкиәттәре күрһәтелмәгән. Көнсығыш славяндарҙыҡынан айырмалы рәүештә, уларҙа төп персонаждар булып төлкө менән әтәс тора, ә төлкө менән ҡор/тауыҡ/ түгел.

Баҫылған: Әкиәттәр, 1940, 72–74-се б.; БХИ 2, 1959, 224–225-се б.; БХИ: Әкиәттәр, I-се кит., № 9; рус телендә: Волга родная, с. 107–110; БНС, 1987, с. 22–24; БНТ, т. 4, № 86.

**36. Сысҡан менән ҡуян.** – FA, ф. 3, яҙма 92, һаҡл. бер. 9, 180–181-се б. 1989 йылда Г. Хөсәйенова Дәүләкән районы Иҫке Хөсәйен ауылында Рәхимова Шәмсиямал Шәйхетдин ҡыҙынан (1916) яҙып алған.

AT 20 A (Звери в беде пожирают друг друга). Бүтән халыҡтарҙың ошо тип әкиәттәрендә йәнлектәр соҡорға төшһә, башҡорт вариантында улар бергә барып-барып, арып, хәл йыйырға ултыралар һәм, асыҡҡандарын тойоп, араларынан берәүһен ашарға булалар. Сысҡан менән ҡуяндан һуң сират төлкөгә етә, тик ул хәйләһен табып, бүре менән айыуҙы ҡойоға төшөрөп ебәрә, ә үҙе үлемдән ҡотола. Сағыштыр: № 35.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**37. Һандуғас.** – БДУ фф, 58, 147-се б. – 1958 йылда Н. Бәширов Ғафури районы Юлыҡ ауылында F. Рәшитовтан яҙып алған.

AT – *33*** (Птица притворяется мертвой, ее выбрасывают из клетки, она улетает). Сағыштыр: AT 33 (Лиса, журавль и волк в яме).

Әзер. әк., 212 – 213-сө б. һәм көнсығыш сит ил әкиәттәре.

Тылсымлы шишмә. Казан, 1960, 378 – 379-сы б. (татар телендә).

Афг. әкиәттәре, № 56.

Баҫылған: БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 35; рус телендә БНТ, т. 4, № 121.

**38. Төлкө менән ҡыҙ.** – Бессонов, № 72.

АТ 34 А (Лисица или собака с костью либо мясом в зубах, увидев свое отражение в воде, кидается туда отнимать чужое добро).

АТ һәм Марзольф күрһәткесендә сюжеттың варианттары испан, гәрәп, төрөк, һинд, зулус һәм фарсы фольклор материалында урын алыуы тураһында мәғлүмәт бар. Сюжеттың тарихы Эзоп мәҫәле (Басни Эзопа, с. 102, № 133) һәм уның урта быуаттарҙағы эшкәртмәләре менән бәйле.

АТ 34 «Отражение луны в воде принято за сыр» сюжеты менән сағыштыр. Был мотив «Панчатантра»нан билдәле.

Баҫылған: рус телендә: БНТ: Волшебные сказки, т. 4, № 98.

Башҡорт телендә беренсе тапҡыр баҫыла (Тәржемә беҙҙеке – Х. Г.).

**39. Төлкө менән бөркөт.** БХЭ, 1956, 273 – 276-сы б.

Өлөшләтә АТ 37 (Лиса – нянька), 225 (Орел «учит» лису летать). Тәүге сюжет тибына ҡараған әкиәттәр рус йыйынтыҡтарында йыш осрай: АП, с. 458; украиндарҙа һирәгерәк: «Етнографичний збирник», т. 37–38, № 108, 251, ә белорустарҙа бөтөнләй билдәләнмәгән.

Икенсе сюжет тибы Эзоптың боронғо грек мәҫәле «Черепаха и орел»ға барып тоташа. Рустарҙа (ҡара: АА, с. 23), украиндарҙа (ҡара: «Эпические жанры устного народного творчества», Уфа, 1969, с. 200–201) барлығы билдәле. Шулай уҡ Томпсон күрһәткесендә латыш, немец, фин, венгр, испан, поляк, эстон, Дания халыҡтарының ошо типҡа ҡараған әкиәттәре иҫәпкә алынған.

Башҡорт әкиәте ҡаҙаҡтарҙыҡына оҡшаған. Сағыштыр: КС, III, с. 250.

Төрлө халыҡтарҙағы варианттары: КС. III, с. 249–250; КНЛ, Сказки. т. 1, с. 101–102 – ҡаҙаҡ; Марзольф, с. 57 – фарсы; СТФ, I, с. 137–тажик; Бирюзовый ларец, с. 137 – 139 – үзбәк; Чечено-ингушский фольклор, с. 165, «Хамбор и пристав» һ. б.

Баҫылған: БХЭ, 1956, 273–276-сы б., БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит. № 6; рус телендә: Волга родная, с. 104–106; БНС, 1987, с. 18–19; БНТ, т. 4, № 92.

**40. Күк ат.** – Паспорты юҡ.

АТ 47А (Лиса привязывает волка к лошади). Көнсығыш славян әкиәтендә төлкө бүренең муйынына элмәк һала, ә ат бүрене бауынан тотоп, хужаһының йортона алып ҡайта, төлкө бүренән көлә. Башҡорт вариантында иһә ат иптәш эҙләйем тип, хужаһынан рөхсәт алып сығып китә лә, төлкө ярҙамында бүрене ҡойроғонан үҙенең ҡойроғона бәйләп хужаһының йортона алып ҡайта, ә хужаһы бүренең тиреһен һыҙырып алып, уны баҙарға алып барып һатҡан да аҡсаһына тағы бер ат алған.

«Аргентинские сказки» йыйынтығындағы «Старый конь и лиса» әкиәте әлеге сюжеттың иң яҡын параллеле. Айырма тик шунда ғына: башҡорт әкиәтендә ат үҙ ихтыяры менән, хужаһына ярҙам итеү маҡсатында урманға барһа, аргентин әкиәтендә «ҡартайҙың, көсөң бөттө» тип, хужаһы атты ҡыуып ебәрә. Сиселеш башҡорт вариантында күк аттың иптәше булыуы менән тамамланһа, аргентин әкиәтендә ат төлкө кәңәше, ярҙамы менән арыҫлан алып ҡайтып, хужаһына үҙенең көсө бөтмәүен иҫбатлай.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**41. Үс алыу.** – ҒА, ф. 3, яҙма 73, эш 68, 57-се бит. – 1981 йылда Ниғмәт Шоңҡаров Мәсетле районы Яңы Мишәр ауылында А. А. Әхмәтйәновтан (1903 й.) яҙып алған.

**АТ 50** (**Больной лев**). Сюжеттың тамырҙары Эзоптың «Арыҫлан, бүре һәм төлкө» (Басни Эзопа, 1968, с. 142, № 273) исемле басняһына барып тоташа, шулай уҡ урта быуат басня яҙыусыларының әҫәрҙәрен дә хәтерләтә, ҡара: И. Орбели. Басни Средневековой Армении. М., 1968, № 49; Марзольф, с. 41–42, Шовень, III, № 78; И. Паули «Schipf and Ensts» изд. 1924 г., № 494. АТ-ға өҫтәлмә рәүештә ҡара: ТИТ: Сказки, КНЛ. Сказки, т. 1, с. 128; СНД, № 23; Тугов, № 7; СТФ, 1, 281, СУС, с. 58. Бүтән әкиәт һәм басня варианттарында төлкө бүренән, уға иҫкәрмә яһағаны өсөн, үс ала. Ҡаҙаҡ, лак һәм бер татар әкиәтендә, башҡорт әкиәтендәге кеүек, ауырыу арыҫлан, төлкөнөң кәңәше буйынса, дарыу урынына бүренең арт аяғын өҙөп ашай. Ҡайһы бер варианттарҙа иһә арыҫлан, төлкөнөң кәңәше буйынса, бүренең тиреһен һыҙырып ала ла, шуға уранып дауалана.

Баҫылған: БФ, II с., 154-се бит; рус телендә; БНТ, т. 4, № 88.

**42. Ишәк, дөйә, төлкө, бүре.** – FA, ф. 3, яҙма 61/2, 45–46-сы б. – 1968 йылда Н. Шонҡаров Ишембай районы Маҡар ауылында С. Вәлиеванан (1906) яҙып алған.

**АТ 52** («Звери делят растерзанное животное») – «Панчатантра» буйынса (кн. 4, рассказ 2) билдәле һәм Көнсығышта телдән төрлө варианттарҙа ла киң таралған. «Сказки народов Дагестана» (сост. Х. Халилов) М., 1965, № 12 менән сағыштыр: Бүре, айыу һәм төлкө һарыҡ һуялар; айыу менән төлкө эсәк йыуырға баралар ҙа бүре эс майын йотоп ҡуя; бүре эс майын тапмай һәм айыу менән әрләшә; һарыҡ тотошлайы менән төлкөгә була. Афған әкиәтендә иһә төлкө ишәкте юлбарыҫ янына алып килә лә, бытарлағас, йәшереп йөрәген ашап ҡуя һәм юлбарыҫҡа ишәктең йөрәге юҡ ине, тип бара. (Афганские сказки. Сост. К. Лебедев. М., 1972, № 36). Әлеге әкиәт күпмелер дәрәжәлә АТ 56 (Лиса выманивает птенцов) һәм II 35 В* (Лиса завлекает волка в капкан и уносит оттуда мясо) сюжет типтарын хәтерләтә.

Варианттары: БДУ фф – 82, 65-се бит: «Дөйә, бүре, төлкө, бурһыҡ».

Баҫылған: БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 12; рус телендә: Волга родная, с. 114–117; БНС, 1987, с. 29–31; БНТ, т. 4, № 89.

**43. Дөйә, бүре, төлкө, бурһыҡ.** – БДУ фф – 82, 65-се б. Паспорты юҡ.

АТ 52 (Звери делят растерзанное животное).

Өҫтәге, 42-се текстың аңлатмаһын ҡара.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**44. Төлкө менән һайыҫҡан.** – БДУ фф – 63, 44-се бит. – 1963 йылда Р. Ғәлимов Салауат районы Әлкә ауылында Х. Зиннәтуллиндан яҙып алған.

**АТ 56 А** (Лиса вымогает у глупой птицы птенцов). BPI, 58, EB9, Шовень Н., стр. 172; стр. 76. Сюжеттың тарихы «Калила и Димна» һәм башҡа көнсығыш әҙәби ҡомартҡылар менән бәйле. Ошоға оҡшаш ҡаҙаҡ әкиәтендә (КС, III, стр. 217) төлкө аҡыллы һайыҫҡанды хөкөм итергә тырыша. Үзбәк әкиәтендә һайыҫҡан һемәйгән ҡош булып күҙ алдына баҫа, ә уның кәңәшсеһе – бүҙәнә. (Бирюзовый ларец. Сказки. Ташкент, 1967, 137–139-сы б.) Көнсығыш славян әкиәттәрендә төлкө йә тумыртҡа-

ның, йә һандуғастың балаларын һорап ала, ә ҡарға-кәңәшсе уға ҡарыны ҡуйыла.

Баҫылған: БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 7; рус телендә: Волга родная, с. 107, БНС, 1987, с. 20–21; БНТ, т. 4, № 93.

**45. Төлкө менән айыу.** – 1937 йылда Ф. Бикбов яҙып алған.

**АТ 57** (Ворона, или ворон, и лиса). Эзоптың «Ворон и лисица» (Басни Эзопа, 1968, с. 100, № 124), Федраның, Бабрияның, Витриның, Гвиччардиниҙың, Лафонтендың, Тредиаковскийҙың, Сумароковтың, Крыловтың, Красицкийҙың, Заборскийҙың, Старицкийҙың, Мәжит Ғафуриҙың мәҫәлдәренең сюжеты. Шулай уҡ дағстан (У. Б. Далгат. Фольклор и литература народов Дагестана. М., 1962, с. 199), ҡаҙаҡ (КС, III, с. 190) варианттарын да билдәләргә кәрәк. Турғай тотҡан айыу шулай уҡ башҡорт халҡы менән уртаҡ яҡтары күп булған ҡаҙаҡ халыҡ әкиәттәре репертуарында ла урын алған. Баҫылған: БХИ, 1959, 246-сы б.; БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 13; рус телендә: Волга родная, с. 117–118; БНС, 1987, с. 32–33; БНТ, т. 4, № 90.

**46. Торна менән төлкө.** – ҒА, ф. 3., яҙма 32, эш 29, 99-сы бит. 1938 йылда Хәбиров яҙып алған.

**АТ 60** (Лисица и журавль) + өлөшләтә **АТ 33** (Лиса, журавль и волк в яме).

Сюжеттың тарихы Эзоптың «Төлкө менән торна» мәҫәлендә (Басни Эзопа, с. 178, № 385) һәм Плутарх, Федр, Ромул, Жак де Витри, Бераһийҙар тарафынан уның («Төлкө менән торна» мәҫәленең – Г. Х.) эшкәртмәләренә барып тоташа. Шулай уҡ ҡара: СУС, с. 60; ТНТ: Сказки, кн. I, № 10 варианттары тураһында 386-сы биттә (рус. перевод Замалетдинов, с. 21); Баймурадов, № 7–9; Алиева, 1978, № 9; СТФ, I, с. 291; Марзольф, с. 43. Башҡорт әкиәтенең тамамланышы үҙенсәлекле (торна үҙен дә, төлкөнө лә һунарсыларҙан ҡотҡара), параллелдәре табылманы. Ул **АТ 33** сюжет тибын хәтерләтә, шулай уҡ уның сыуаштарҙа «Как лиса обманула охотников» исемле (ЧЛС, с. 37–38) һәм ҡырғыҙҙарҙа «Как журавль обманул охотников» (Эшмамбето-Брудный, 1961, с. 275–276) тигән варианттары булыуы мәғлүм.

Баҫылған: БФ, II с., 155-се б.; рус телендә: БНТ, т. 4, № 94.

**47. Торна менән төлкө.** – Бес., № 77. – Рус теленән башҡортсаға М. Минһажетдинов тәржемә иткән.

**АТ 60** (Лисица и журавль). Өҫтәге 46-сы текстың аңлатмаһын ҡара. Тик был текстың сюжеты бер генә эпизодтан ғибәрәт: төлкө менән торна бер-береһен ҡунаҡҡа саҡырышалар, икеһе лә ҡунаҡтан ҡәнәғәт ҡалмай.

Баҫылған: БХИ: Әкиәттәр, 1-се китап., № 8.

**48. Төлкө менән әтәс.** – БХӘ, 1956, 268 – 270-се б.

**АТ 61В** (Кот, петух и лиса). Был әкиәт бигерәк тә көнсығыш славян йыйынтыҡтарында күп осрай: АП, стр. 460; дополн. – сборники Балашова, № 269, 715 Никифорова, № 2, Владимирский сб. Померанцевой, стр. 211. Шулай уҡ белорустарҙа, украиндарҙа («Казакам про жывел...», Минск, 1971, йыйынтығының аңлатмаларын ҡара, (454–455-се бит)) күҙгә салынып ҡала. Томпсондың халыҡ-ара күрһәткесендә тик рус, литва, саам һәм серб-хорват текстары ғына билдәләнгән, ә баҫмаларҙан билдәле

белорус, украин, поляк, чех, латыш, эстон экиәттәре иҫәпкә алынмаған. Әлеге экиәт АТ 61В сюжет тибының үҙенсәлекле төрө булып тора. Ул рус һәм башҡа беҙгә билдәле варианттарҙан айырыла. Башҡорт тексында төлкөнөң ҡуян тиреһен урлауы һәм шуны ябынып йөрөүе; төлкөнөң тауыҡты түгел, этәсте, тауыҡ кетәгенән түгел, урман йортонан урлауы; төлкөгә этәстең түгел, бесәйҙең ташланыуы һәм төлкөнөң еңелеү мотивтары юҡ. Әгәр бесәй, этәс, төлкө тураһында көнсығыш славян экиәттәрендә йыр юлдары булһа (төлкө алып китеп барған этәс йырлай), башҡорт экиәтендә был юҡ.

Баҫылған: БХӘ, 1956, 268 – 270-се б.; БХИ: Экиәттәр, 1-се кит., № 10; рус телендә: Волга родная, с. 110–112; БНС, 1987, с. 25 – 26; БНТ, т. 4, № 96.

**49. Ҡарт айыу менән төлкө.** – БХӘ, 1952, 103–106-сы б. 1939 йылда Р. Шакиров Маҡар районы Көҙән ауылында С. Мөхәмәтйәновтан (1888) яҙып алған.

АТ – *69А* (Лиса строит медведю курятник, оставляет для себя лазейку). Томпсон латыш варианттарын иҫәпкә ала, әммә бындай экиәттәр украин фольклорында ла бар: «Етнографичний збирник», т. 37–38, Львов, 1916, № 59. Шуныһы иғтибарҙы йәлеп итә: башҡорт экиәттәре төлкөһө, көнбайыш экиәттәре төлкөһөнә оҡшап, йыш ҡына уңышһыҙлыҡҡа осрай, еңелә. Рус экиәттәрендә төлкө күберәк еңеүсе була.

Яҡын татар варианты: ТНТ: Сказки, кн. 1, № 69 (СУС 12 менән сағыштыр).

Баҫылған: БХӘ, 1956, 286 – 287-се б.; БХИ: Экиәттәр, 1-се кит., № 14; рус телендә, БНТ, т. 4, № 91. – «Лиса – строитель».

**50. Иблис төлкө.** Паспорты юҡ.

АТ – *69А* (Лиса строит медведю курятник, оставляет для себя лазейку).

Өҫтәге текстың аңлатмаһын ҡара. Экиәттең икенсе өлөшөндә төлкө арҡаһында хайуандарҙың мөнәсәбәттәре боҙолоп, бер-бер артлы өйҙән сығып китеүҙәре һәм кешегә барып морон төртөүҙәре тураһында һүҙ бара.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**51. Йомарт ҡуян.** – 1945 йылда Н. Иҙелбаев Белорет районы Сәрмән ауылында М. Ғафурованан яҙып алған.

АТ – *73С* (Заяц помогает мальчику, пригласившему всех односельчан в гости, добыть угощение). Бүтән халыҡтарҙа быға оҡшаған варианттар табылманы. Моғайын, ҡуяндың башҡорт экиәт репертуарында күберәк ыңғай персонаж булып сығыш яһауы борон башҡорттарҙа ныҡ таралған ҡуян-тотем культына бәйлелер.

Баҫылған: БХӘ, 1952, 80–84-се б.; БХӘ, 1956, 296–298-се б.; БХИ, 1959, 238-се б.; БХИ: Экиәттәр, 1-се кит., № 19; рус телендә: Волга родная, с. 122–124; БНС, 1987, с. 41–42; БНТ, т. 4, № 104.

**52. Төлкө айыу өңөндә.** – БХӘ, 1956, 270–273-се б.

*80***АТ күрһәткесендә иҫәпкә алынған терпе йәки башҡа йәнлектең үҙенән ҙур, көслө йыртҡыстың йәшәгән урынын баҫып алыуы тураһында сюжет ҡайһы бер төньяҡ һәм көньяҡ Европа халыҡтарының экиәттәрен хәтерләтә. «Лиса зимует в берлоге другого зверя» («Төлкө бүтән йәнлек-

тең өңөндә ҡышлай») мотивы илебеҙҙең көнсығышында йәшәүсе ҡайһы бер халыҡтарҙың әкиәттәрендә осрай. (мәҫ., «Сказки народов Дагестана», сост. Х. Халилов, М., 1965, № 16).

Баҫылған: БХӘ, 1956, 270–273-сө б.; БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 5; рус телендә: Волга родная, с. 102–104; БНС, 1987, с. 15–17; БНТ, т. 4, № 87.

**53. Ҡуян менән арыҫлан.** – 1941 йылда F. Хәлитов Федоровка районы Батыр ауылында С. Ишбулдиндан яҙып алған.

АТ 92 (Лев ныряет за собственным отражением). Шовень, II, № 25. Сюжеттың тарихы һинд йыйынтығы «Панчатантра»га (Бенфей баҫмаһы, том II, № 8) барып тоташа. АТ күрһәткесендә тик һинд, гәрәп, америка, индонезия варианттары ғына иҫәпкә алынған. Өҫтәлмә рәүештә ҡара: Марзольф, 45-се б.; СТФ I, 163, 208, 210-сы б.; СУС, 65-се б.; Арайс Медне, 18, 256-сы б.; Долидзе, № 295; ДНД, № 56; Матвеева, с. 90–91, Эшмамбетов-Брудный, 24–25-се б.; Южимигиров, 77-се б.

Баҫылған: БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 17; БХӘ, 1956, 277–279; БХИ, 1959, 229–230 б.; рус телендә: Волга родная, с. 119–120; БНС, 1987, с. 36–37; БНТ: т. 4, № 102.

**54. Һарыбай.** – 1939 йылда Х. Ҡәнзәфәров Саҡмағош районы Аблай ауылында Әнүәр Вәлитовтан яҙып алған.

АТ 101 (Собака и волк). Сюжеттың тарихы Эзоп мәҫәле, шулай уҡ Мюнхен ҡулъяҙмаһынан урта быуат йыйынтығына («Посторонние басни») барып тоташа (Басни Эзопа, 1968, с. 231–233, № 55), Федр менән Ромулдың һөйләүҙәре буйынса ла билдәле. Сюжеттың таралыуына шулай уҡ төлкө менән бүре тураһындағы урта быуат поэмалары булышлыҡ итә. Был сюжет төрки телле халыҡтарҙың әкиәтселәре репертуарына хас түгел. Берҙән-бер билдәле көнсығыш вариант – Тугов, № 11.

Баҫылған: БХИ: Әкиәттәр, 1940, 68 – 69-сы б.; БХӘ, 1956, 266–267-се б.; БХИ, 2, 1959, 240–241-се б.; БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 21; рус телендә, БНС, М. – Л., 1947, с. 55–75; БНС, 1969, с. 95–96; БНТ, т. 4, № 106.

***55. Һоросай менән Ҡарасай.*** – БХИ, 1959, 233–237. – 1936 йылда Кирәй Мәргән Әбйәлил районында («Ҡыҙыл Башҡортостан» совхозы) М. Аллаяровтан яҙып алған.

АТ 103 (Кот и дикие животные). Айырыуса төньяҡ-көнсығыш Европала телдән таралған «Бесәй менән ҡырағай хайуандар» сюжетының боронғо әҙәби версияһы – төлкө менән бүре тураһындағы «Изергимус» исемле урта быуаттарға ҡараған латин поэмаһының эпизоды. Бүтән 103 тибына ҡараған әкиәттәрҙә һүҙ, ғәҙәттә, ике түгел, бер бесәй тураһында бара. Ҡайһы бер варианттарҙа, көнсығыш славян, Литва әкиәттәрендәге кеүек үк, АТ күрһәткесендә 103 А номеры менән бирелгәнсә, бесәй төлкөгә өйләнеп, үҙен уҫал түрә тип иғлан итә. Төлкө уның яҡлы булып сығыш яһай. Улар бөтә йәнлектәрҙе ҡурҡыталар. АТ күрһәткесенә өҫтәлмә рәүештә ҡара: Дзагуров, № 10, Тугов, № 12; ТНТ: Сказки, к. I, № 16; СТФ, 1, с. 142; Баймурадов, № 60.

Варианттары: БДУ фф, һ. б. 68, 1–4 б.; FA, ф. 3, яҙма 32, эш 28, 2–4 б.

Баҫылған: БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 22; рус телендә: БНТ, т. 4, № 107.

**56. Шаян бесәй.** – Әкиәттәр, 1940, 75–77-се б.

**АТ 103.** 55-се текст аңлатмаһын ҡара.

Баҫылған: БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 23; рус телендә: БНС, 1987, с. 47–49.

**57. Төлкө менән бесәй тураһында әкиәт.** – FA, ф. 3, яҙма 32, эш 28, 2 4-се б.

**АТ –**. Өлөшләтә **АТ 103** (Кот и дикие животные). Көнсығыш славян әкиәттәренән башҡорт варианты башланышы менән айырыла: ҡартайған хужалары бесәйҙең өйҙән сығып китеүен һорайҙар. Бесәй сығып китә лә, бер келәттә ит, май урлап ашап, рәхәтләнеп йәшәй, хатта саҡырып төлкөнө лә ҡунаҡ итеп ебәрә. Шунан улар дуҫлашып, төлкөнөң өйөндә бергәләп йәшәй башлайҙар. Артабан сюжет **АТ 103** тибындағыса үҫеш ала.

Баҫылған: **БФ**, II сыҒ., 161–162-се б.

**58. Бесәй батыр.** – FA, ф. 3, яҙма 62/63 – 1974 йылда Роза Нафиҡова Күмертау районы Ялсыҡай ауылында Хәлитов Саҙретдин Бәҙретдин улынан (1899) яҙып алған.

**АТ 103** (Кот и дикие звери). 57-се тексттың аңлатмаһын ҡара.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**59. Мырау батыр.** – БДУ фф, 1981. – 1981 йылда С. Фәйзуллин Мәсетле районы Яңы Мишәр ауылында Хәкимов Гәрәй Хәким улынан (1916) яҙып алған.

**АТ 103** (Кот и дикие звери).

57, 58-се текстарҙың аңлатмаһын ҡара. Әкиәт шиғри формала булыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә. Был вариантта бесәйҙе батыр итеп әбей иғлан итә, урман хайуандары янына ҡунаҡҡа үҙе эйәреп бара.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**60. Дүрт дуҫ.** – FA, ф. 3, яҙма 61/2, 45–46-сы б. – 1966 й. фольклорсы Н. Шонҡаров Архангель районы Абзан ауылында Ү. Әхмәтдинованан (1886) яҙып алған.

**АТ 103 А** (*Бык строит в лесу дом*). Йорт хайуандарының, имеш, бүреләрҙең тиреһен һыҙырып, бүре ите менән туҡланыуҙары тураһындағы һамаҡтар көнсығыш халыҡтарының ҡурҡҡан бүреләр тураһындағы әкиәттәрендә йыш осрай.

Варианттары: ТНТ: Сказки, кн. I, № 37; Акцорин, с. 281–284; УПТМН, III, ч. 2: Эрзянские сказки, № 4.

Баҫылған: БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 26; рус телендә: БНТ: т. 4, № 113.

**61. Ике бурһыҡ.** – Бессонов, № 78. Башҡорт теленә М. Минһажетдинов тәржемә иткән.

**АТ –**. *109* Сюжеттың иң боронғо әҙәби варианты булып Эзоптың «Арыҫлан менән ҡуян» мәҫәле һанала: арыҫлан йоҡлап ятҡан ҡуяндың өҫтөнә барып сыға ла уны ашарға уйлай, тик шул мәлдә сабып китеп барған боланды күреп ҡалып, шуны баҫтыра башлай. Һөҙөмтәлә, боланды ла тота алмай, әйләнеп килһә, йоҡлап ятҡан ҡуяндан да елдәр иҫкән (Басни Эзопа, 1968, с. 106, № 148). Латыш әкиәттәре репертуарында сюжеттың дүрт варианты билдәләнгән (Арайс – Медне, с. 20).

Башҡорт варианты персонаждарҙың бөтөн булыуы, сюжет төрөнөң ҡатмарлыраҡ булыуы менән Эзоп мәҫәленән һәм латыш әкиәттәренән айырыла.

Баҫылған: БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 20 (М. Минһажетдинов тәржемәһе); рус телендә: БНС, М. – Л., 1947, с. 80–81; БНС, 1969, с. 107–108; БНТ, т. 4, № 105.

**62. Өй сысҡаны менән ялан сысҡаны.** – ҒА, ф. 3; яҙма 73, эш 70, 33 б. 1982 йылда Н. Шоңҡаров Дыуан районы Мәрйәмғол ауылында Я. Шәриповтан (1907) яҙып алған.

**АТ 112** (Полевая и городская мыши). Сюжеттың иң боронғо яҙмалары булып б.э.т. I б. йәшәгән Рим шағиры Гораций менән беҙҙең эраның II быуатында йәшәгән грек шағиры Бабрийҙың яҙмалары һанала. Бабрийҙың мәҫәленең сәсмә формалағы тексы урта быуат йыйынтыҡтарында ла урын алған (Басни Эзопа, 1968, с. 157–158, № 324 и примечания – с. 299–300). **АТ** күрһәткесенә өҫтәлмә рәүештә ҡара: СУС, с. 68; Киппар, с. 93; Ганкина – Котляр, № 15. Эскимосские сказки и мифы, с. 55, «Две мышки».

Баҫылған, БФ, II сығ., № 6.; рус телендә: БНТ, т. 4, № 109.

**63. Ҡурсаҡ ҡатын.** – 1982 й. ТТЭИ экспедицияһы материалдары.

АТ – . «Сысҡанға кейәүгә сыҡҡан ҡыҙ» тураһындағы был сюжет башҡорттарҙа йыш осрай, әммә халыҡ-ара күрһәткестә параллелдәре билдәләнмәгән. Өйҙән сығып киткән ҡурсаҡ үҙенә ир эҙләй. Ҡарға менән һайыҫҡанға, тиҙәк ашайһығыҙ, тип тормошҡа сыҡмай. Бал менән май ашап йәшәгән сысҡанды һайлай.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**64. Ҡурсаҡ ҡатын** (вариант). – Паспорты юҡ.

**АТ –** . Бында инде ҡурсаҡ ҡатын менән сысҡан ирле-ҡатынлы булып йәшәйҙәр һәм, сысҡан аҙыҡ эҙләп киткәс, һаҙлыҡ буйлап йөрөп килергә сыҡҡан ҡурсаҡ ҡатын саҡ батып үлмәй, ире килеп ҡотҡара. Ошоға ныҡ яҡын текст сыуаш халыҡ ижадында бар (ЧЛС, с. 35–37).

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**65. Бетүгеҙ.** – ҒА, ф. 3, яҙма 92, һаҡл. бер. 9., 197–201-се б.

1989 йылда Г. Хөсәйенова Дәүләкән районы Мәкәш ауылында Ғәниева Хәҙисә Саҙиҡ ҡыҙынан (1928) яҙып алған.

АТ –. Башҡорт халыҡ әкиәттәре репертуарында урын алған был сюжеттың параллелдәре күрһәткестә билдәләнмәгән. Әлеге әкиәттең башы үгәй ҡыҙ тураһындағы сюжеттарҙы хәтерләтеп ҡала. Артабан ул «Сысҡанға кейәүгә сыҡҡан ҡыҙ» тураһындағы сюжет менән ҡушылып китә.

Беренсе мәртәбә баҫыла.

**66. Эт менән көсөк.** – ҒА, ф. 3, яҙма 32, эш 1, 91–92-се б. – 1963 йылда Н. Шоңҡаров Пермь өлкәһе Солтанай ауылында Г. Сәфәровтан (1908) яҙып алған.

**АТ 117*=** 47Д, 101*, 119* (Собака подражает волку). Сюжеттың тамырҙары IV быуат грек риторы Афтоний йыйынтығына ингән Эзоптың «Төлкө менән арыҫлан» мәҫәленә, шулай уҡ «Посторонние басни» исемле латин йыйынтығындағы «Төлкө менән бүре» мәҫәленә (Басни Эзопа, 1968, с. 167, № 355, с. 229 – 231, № 55), йәнә XIII быуат әрмән мәҫәлдәр яҙыу-

сыһы Вардандың «Арыҫлан үҙенең ялсыһы төлкө менән һәм төлкө бүре менән» тигән мәҫәлдәренә (Орбели, № 43) барып тоташа. Төрлө телдәрҙәге варианттарҙы сағыштырыу-күҙәтеүҙе ҡара: Л. Г. Бараг «Сюжет «Собака подражает волку» в литературной и фольклорной традиции». – Фольклор народов РСФСР, 1988 с. 90–99. Башҡорт менән шуға оҡшаш татар варианты (ТНТ: Сказки, к. I, № 13) рус һәм бүтән көнсығыш славян әкиәттәренә яҡын тора. Өҫтәп шуны ла әйтергә кәрәк: башҡорт варианты үҙенсәлекле башланғысҡа эйә: йүнһеҙлеге арҡаһында эт хужаһынан ҡыуылып сыға. Уны бүре, тамағын туйҙырам тип, эйәртеп алып китә. Һүҙендә тора. Икенсе ваҡыт эт, үҙе хәлендәге көсөктө күреп, бүре кеүек итеп ашатмаҡсы була. Ат этте тибеп осора. Славян әкиәттәрендә көсөк урынында бесәй.

Баҫылған: БФ, II сыг., № 5; рус телендә: БНТ, т. 4, № 108.

**67. Һемәйгән бүре.** – FA, ф. 3, яҙма 65, эш 3, 114 – 115-се б., 1968 йылда Н. Зарипов Ишембай районы Аҙнай ауылында F. Fәлиәскәровтан (1887) яҙып алған.

АТ 122 А (Волк-дурень) + 227 (Гуси просят волка разрешить им спеть). Тәүге сюжет тибының тарихы Эзоптың «Ишәк менән бүре», «Ишәк, төлкө һәм арыҫлан» һәм «Уҫал бүре» исемле урта быуат латин мәҫәлдәре менән (Басни Эзопа, 1968, с. 118, № 187; с. 223 – 224, № 50), шулай уҡ Бабрий, Ромул, Вардандың мәҫәлдәре һәм төлкө менән бүре тураһындағы урта быуат поэмаларындағы эпизодтар менән, йәнә Эзоп мәҫәленең Ганс Сакс, Штейнгевель, Пергаменус (XVI–XVII) кеүек немец, швед шағирҙары тарафынан шигри формала яҙылған әҫәрҙәре менән бәйле. Был сюжетҡа шулай уҡ яңы осор яҙыусылары В. Даль менән Якуб Колас та мөрәжәғәт иткәндәр. АТ 227 сюжеты ла Эзоп традицияһын хәтерләтә: иң боронғо әҙәби вариант – «Кәзә менән бүре» исемле урта быуат латин мәҫәле (Басни Эзопа, 1968, с. 211- 212, № 31). Башҡорт әкиәтенең параллелдәре: ТНТ: Сказки, кн. I, № 30. Замалетдинов, с. 116–118; Эшмамбетов-Брудный, с. 224–226; Алиева, 1978, № 72; СНД, № 22; Мальсагов, № 153; Дзагуров, № 18, СТФ, I, с. 135 һ. б.

Баҫылған: БХИ: Әкиәттәр, 1-се кит., № 24; рус телендә: БНТ, т. 4, № 110.

**68. Бүре менән кәзә.** – Әкиәттәр, 1940, 78-се б.

АТ 123 (Волк и козлята). Сюжеттың тарихы урта быуаттағы Ромулдың, Мари де Франстың, Штейнгевелдең йыйынтыҡтары, Италияның новелла яҙыусылары менән Лафонтендың «Бүре, кәзә һәм бәрәсе» мәҫәле кеүек автор әҫәрҙәренә барып бәйләнә. АТ күрһәткесенә өҫтәлмә рәүештә ҡара: СТФ, 1, с. 305; Марзольф, с. 49; ТНТ: Сказки, кн. I, № 14; Баймурадов, № 67–68; Сказки Мампурси, М., 1966, с. 51–53.

